УФИМСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ

приоритет2030^
лидерами становятся

# ТЮРКСКИЕ ЯЗЫКИ В ЕВРАЗИЙСКОМ ПОЛИЭТНИЧЕСКОМ ПРОСТРАНСТВЕ: СОВРЕМЕННОЕ СОСТОЯНИЕ, ТЕНДЕНЦИИ И ПЕРСПЕКТИВЫ РАЗВИТИЯ

**Сборник материалов Международной научно-практической конференции, посвященной 90-летию со дня рождения доктора филологических наук, профессора, Заслуженного деятеля науки Республики Башкортостан Эрнста Файзрахмановича Ишбердина (г. Уфа, 7 ноября 2024 г.)**



**МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ РФ**
**УФИМСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ НАУКИ И ТЕХНОЛОГИЙ**

**ФАКУЛЬТЕТ БАШКИРСКОЙ ФИЛОЛОГИИ,**
**ВОСТОКОВЕДЕНИЯ И ЖУРНАЛИСТИКИ**

# ТЮРКСКИЕ ЯЗЫКИ В ЕВРАЗИЙСКОМ ПОЛИЭТНИЧЕСКОМ ПРОСТРАНСТВЕ: СОВРЕМЕННОЕ СОСТОЯНИЕ, ТЕНДЕНЦИИ И ПЕРСПЕКТИВЫ РАЗВИТИЯ

***Сборник материалов***
***Международной научно-практической конференции,***
***посвященной 90-летию со дня рождения***
***доктора филологических наук, профессора,***
***Заслуженного деятеля науки Республики Башкортостан***
***Эрнста Файзрахмановича Ишбердина***
***(г. Уфа, 7 ноября 2024 г.)***

Научное электронное издание сетевого доступа

**Уфа**
**РИЦ УУНиТ**
**2024**

УДК 811.512.1
ББК 81.2
Т98

*Печатается по решению кафедры востоковедения и башкирского языкознания ФБФВиЖ УУНиТ.*
*Протокол № 1 от 19.09.2024 г.*

***Редакционная коллегия:***
**Абдуллина Г.Р.,** доктор филологических наук, профессор *(отв. редактор)*;
**Алимбаева Г.Г.,** кандидат филологических наук *(зам. отв. редактора)*;
**Саньярова Р.Р.,** кандидат филологических наук, доцент;
**Хуснетдинова Р.Я.,** кандидат филологических наук, доцент;
**Салаватова З.К.,** заведующий кабинетом востоковедения

Т98 **Тюркские языки в Евразийском полиэтническом пространстве: современное состояние, тенденции и перспективы развития:** сборник материалов Международной науч.-практич. конференции, посвященной 90-летию со дня рождения д-ра филол. наук, профессора, Заслуженного деятеля науки РБ Эрнста Файзрахмановича Ишбердина (г. Уфа, 7 ноября 2024 г.) / отв. ред. Г.Р. Абдуллина. [Электронный ресурс] / Уфимск. ун-т науки и технологий. – Уфа: РИЦ УУНиТ, 2024. – 370 с. – URL: https://uust.ru/digital-publications/2024/214.pdf – Загл. с титула экрана.

ISBN 978-5-7477-5987-9

В сборник включены материалы, посвященные актуальным проблемам современной тюркской филологии. Также в статьях рассматриваются пути повышения качества преподавания башкирского языка как государственного в системе общего и профессионального образования, актуальные вопросы развития и сохранения родного языка, народной педагогики и этнических традиций в воспитании подрастающего поколения, проблемы литературы, культуры и фольклора народов Российской Федерации в едином культурном пространстве, проблемы сравнительно-исторического и сопоставительно-типологического языкознания в свете традиционных и новейших направлений в лингвистике.

Сборник материалов конференции адресован преподавателям вузов, ссузов, учителям общеобразовательных учреждений и всем тем, кто интересуется актуальными проблемами современной тюркской филологии.

УДК 811.512.1
ББК 81.2

ISBN 978-5-7477-5987-9 © УУНиТ, 2024

**РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ ФӘН ҺӘМ
ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ
ӨФӨ ФӘН ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР УНИВЕРСИТЕТЫ
БАШҠОРТ ФИЛОЛОГИЯҺЫ, ШӘРҠИӘТ ҺӘМ
ЖУРНАЛИСТИКА ФАКУЛЬТЕТЫ**

# КҮП МИЛЛӘТЛЕ ЕВРАЗИЯ АРАУЫҒЫНДА ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕ: ХӘҘЕРГЕ ТОРОШО, ҮҪЕШ ТЕНДЕНЦИЯЛАРЫ ҺӘМ ПЕРСПЕКТИВАЛАРЫ

***Филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан
Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре
Эрнст Фәйзрахман улы Ишбирҙиндың
тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған
халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияның
материалдар йыйынтығы***

***2024 йылдың 7 ноябре***

**ӨФӨ
ӨФӨ УНИВЕРСИТЕТЫ, 2024**

УДК 811.512.1
ББК 81.2
Т98

*Йыйынтыҡ шәрҡиәт һәм башҡорт тел ғилеме кафедраһы ҡарарына ярашлы баҫыла*
*Протокол № 1, 19.09.2024 й.*

***Редакционная коллегия:***
**Абдуллина Г.Р.,** филология фәндәре докторы, профессор, (яуаплы мөхәррир);
**Әлимбаева Г.Ғ.,** филология фәндәре кандидаты (яуаплы мөхәррир урынбаҫары);
**Саньярова Р.Р.,** филология фәндәре кандидаты, доцент;
**Хөснөтдинова Р.Я.,** филология фәндәре кандидаты, доцент;
**Салауатова З.К.,** шәрҡиәт кабинеты мөдире

Т98 **Күп милләтле Евразия арауығында төрки телдәре: хәҙерге торошо, үҫеш тенденциялары һәм перспективалары**: Филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Эрнст Фәйзрахман улы Ишбирҙиндың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияның материалдар йыйынтығы (Өфө, 2024 йылдың 7 ноябре) / яуаплы мөхәррир Г.Р. Абдуллина. – Өфө: Өфө университетының РНУ, 2024. – 370 бит. – URL: https://uust.ru/media/documents/digital-publications/2024/214.pdf. – Экран титулындағы исеме.
ISBN 978-5-7477-5987-9

Йыйынтыҡта хәҙерге төрки филологияһының көнүҙәк мәсьәләләренә арналған материалдар урын алған. Шулай уҡ мәҡәләләрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ дөйөм һәм һөнәри белем биреү өлкәһендә уҡытыу сифатын күтәреү юлдары, туған телдең, халыҡ педагогикаһының һәм этник традицияларҙың үҫеп килеүсе йәш быуынды тәрбиәләүҙәге роле һ.б. сағыла.

Конференция материалдары йыйынтығы юғары уҡыу йорттары, урта һөнәри белем биреү һәм дөйөм белем биреү ойошмалары уҡытыусыларына һәм филологияның көнүҙәк мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

ISBN 978-5-7477-5987-9 УДК 811.512.1
ББК 81.2

© Өфө университеты, 2024

**УДК 811.512.141**

***Солтанбаева Хәҙисә Вәли ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, профессор,*
*Өфө университеты, Өфө к., БР*

## Абруйлы ғалим, күп яҡлы шәхес

Күренекле телсе-ғалим, филология фәндәре докторы, профессор, Халыҡ-ара Төрки академияһының мөхбир ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Эрнст Фәйзрахман улы Ишбирҙиндың тыуыуына 90 йыл. Ул 1934 йылдың 20 декабрендә Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында тыуған. Баймаҡ ҡалаһының 1-се мәктәбен тамамлағас, Темәс педагогия училищеһында уҡый һәм район мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләй. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡыуын 1958 йылда педучилищела ярайһы уҡ төплө белем алған, тормошҡа үҙ ҡарашы булған студенттарҙың береһе булып башлай ул. Уҡыу сағыштырмаса еңел бирелә, һәр сессияны уңышлы тапшыра. Бының нигеҙендә тәбиғәт биргән һәләт, аң-белем алыуға ынтылыш, егәрлелек ятҡандыр. Уҡыуҙан тыш, спорт һәм туризм менән мауыға, республика буйынса сәйәхәттәр яһау һәм гәзиттәргә репортаждар яҙыу; фотография һәм рәссамлыҡ эштәре менән шөғөлләнеү, республика матбуғатында рәссам-иллюстратор вазифаларында сығыш яһау; мөкиббән бирелеп, йәйен-ҡышын тәбиғәт ҡосағында үткәреү һәм, үҙе әйтмешләй, «ҡош тауыштарын тыңлау». Тормош-көнкүрештә кәрәк күп һөнәр эйәһе лә ул: балта оҫтаһы, мейес сығарыусы, баҡсасы, балыҡсы... Былар барыһы ла Эрнст Фәйзрахман улының күп яҡлы талантҡа эйә шәхес булыуы тураһында һөйләй.

Шулай ҙа ғалимлыҡ ҡеүәһе, башҡорт халҡының тел-лөғәтенә, мәҙәниәтенә һәм тарихына ҡарата булған мөнәсәбәт, уларҙы төплө өйрәнергә ынтылыш өҫтөнлөк ала. 1963 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, тыуған районына ҡайтып, Баймаҡ интернат-

мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Әммә унығ иң ҙур теләге – артабан уҡыу, үҙеңде фәнгә бағышлау ниәтен тормошҡа ашырыу ҡаршылыҡҡа осрай. Төплө белемле, киң эрудициялы, һәр яҡлап талантлы уҡытыусы – мәктәп өсөн генә түгел, бөтә район өсөн ҙур табыш, шуға күрә уның аспирантураға китергә ҡарар итеүе район етәкселегенән яҡлау тапмай. Эрнст Фәйзрахман улы юғалып ҡалмай, Мәскәүгә «Учительская газета»ның баш мөхәрриренә туранан-тура шылтыратып, килеп тыуған хәлде аңлатып бирә. Баш мөхәррирҙең мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙә күрһәткән ярҙамы, үҙенең ҙур тырышлығы һәм ныҡышмалылығы һөҙөмтәһендә Эрнст Фәйзрахман улы Рәсәй Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына аспирантураға уҡырға инә.

Э.Ф. Ишбирҙин – йөҙҙән ашыу фәнни эштәрҙең, шул иҫәптән ундан артыҡ монография һәм уҡыу әсбаптары авторы. Уларҙың байтағы башҡорт теленең тарихи лексикологияһы мәсьәләләренә бағышланған. Ғалимдың киң билдәле «Историческое развитие лексики башкирского языка» (М., 1986) монографияһында башҡорт теленең лексикаһы формалашыу юлдары һәм тарихи үҫеше планында тикшерелә, башҡорт лексикаһының сығанаҡтары күрһәтелә; ошо юҫыҡтан сығып, башҡорт теленең дөйөм алтай телдәре менән (тунгус-манжур, монгол, төрки телдәре ғаиләләре) бәйләнештә формалашыуына аныҡ дәлилдәр килтерелә. «Башҡорт әҙәби теленең тарихы» (Өфө, 1993) тигән коллектив монографияла (авторҙаштар Э.Ф. Ишбирҙин, И.Ғ. Ғәләүетдинов, Р.Х. Халиҡова, З.Ғ. Ураҡсин; яуаплы мөхәррире К.Ғ. Ишбаев) башҡорт яҙма әҙәби теленең барлыҡҡа килеү ваҡытын билдәләү һәм уның материаль күрһәткестәрен (алфавит төрҙәрен) асыҡлау мәсьәләләре күтәрелә һәм асыҡлыҡ индерелә. Бығаса йәшәп килгән ҡайһы бер бәхәсле ҡараштарҙы инҡар итеп, ошондай һөҙөмтәгә киләләр: башҡорт әҙәби теленең үҫеү тарихын ике осорға, милләткә тиклемге осор (XIII быуаттан алып XIX быуаттың аҙағынаса) һәм милли осорға (XX быуаттың башынан алып бөгөнгәсә) бүлеп ҡарарға

кәрәк; был ике осор әҙәби телдең һәм әҙәбиәттең үҫеүенә ярашлы рәүештә айырым-айырым этаптарға бүленә.

«Башҡортостан ҡоштары» (Өфө, 1986) һәм «Башҡорт теленең игенселек һәм баҡсасылыҡ терминдары» (Өфө, 2002) тигән хеҙмәттәрендә ғалим башҡорт терминологияһының үҫеш юлдарына байҡау яһай һәм айырым лексик тематикаға ҡараған конкрет терминдарҙың формалашыу үҙенсәлектәрен тасуирлай.

Э.Ф. Ишбирҙин – башҡорт әҙәби телен, уның диалекттарын, үҫеш тарихын, бөгөнгө торошон төплө өйрәнгән, был өлкәләргә ҡараған проблемаларҙы хәл итеүҙә ҙур хеҙмәт күрһәткән телсе; Төркиә Республикаһында оҙайлы ғилми стажировкала булып, төрөк телен бөтә нескәлектәрендә үҙләштергән, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетында көнсығыш телдәре кафедраһының төп төркиәтсеһе.

Ғалим фән кадрҙарын әҙерләүгә ҙур иғтибар бирә. Ул әҙерләгән ғалимдар Рәсәй Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында, республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттарында уңышлы эшләйҙәр. Э.Ф. Ишбирҙин мәктәптәр, урта һәм юғары уҡыу йорттары өсөн укытыу-методик әҙәбиәт төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша, мәктәп уҡытыусылары өсөн «Ҡыҙыҡлы грамматика» уҡыу әсбабы авторҙарының береһе.

Һуңғы йылдарҙа ғалимдың төп хеҙмәттәре лингво-этнографика проблематикаһы менән бәйле. Һәр телдә, бигерәк тә уның лексикаһында, халыҡтың тарихы сағыла: башҡа халыҡтар менән бәйләнеше, хужалыҡ итеү үҙенсәлеге, ғаилә тормошо, ғөрөф-ғәҙәте, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре һәм башҡалар. «Термины земледелия в башкирском языке» (Уфа, 2002 г.) тигән хеҙмәтендә ер эшкәртеүгә ҡараған лексика составын тикшереп, борон башҡорттарҙың төп хужалыҡ тармағы тик малсылыҡ булған тигән фекергә ҡаршы килә. Башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәрендә игенселек һәм баҡсасылыҡ терминдарын тикшереп, был өлкәгә ҡараған һүҙҙәрҙең

нигеҙен төп төрки һүҙҙәре тәшкил итеүен асыҡлай. Ул игенселек һәм баҡсасылыҡтың төрки халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар өсөн дә борон-борондан яҡшы билдәле хужалыҡ тармаҡтары булыуын дәлилләй. Тел үҙенсәлектәрен сағыштырып өйрәнеүгә уларҙың күптәрендә – төрөк, әзербайжан, төрөкмән, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, уйғыр, балҡар телдәрендә – ғалимдың иркен аралашыуы булышлыҡ итә.

Профессор Э.Ф. Ишбирҙин башҡорт тел ғилеме өлкәһендә генә түгел, бөтә төркиәт донъяһында билдәлелек алған абруйлы, киң ҡарашлы ғалим булды. Унып күп яҡлы эшмәкәрлегенең, фән өлкәһендәге ҡаҙаныштарының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Эрнст Фәйзрахман улы – һоҡланғыс кеше, изге күңелле шәхес, яҡындарына, хеҙмәттәштәренә иғтибарлы, үҙ эшенә мөкиббән ғалим ине.

© Солтанбаева Х.В., 2024

**УДК 821.512.141**

***Азаматов Ғайсар Фаяз улы,***
*студент,*
***Салауатова Фәнилә Рәжәп ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Ш. Бабич шиғриәтенең идея-тематикаһы

Күренекле шағир Шәйхзада Бабичтың сатирик шиғырҙары идея-тематик, жанр-стиль һәм художестволы тәбиғәте буйынса төрлөлөгө менән айырылып тора. Уларҙа әхлаки-этик, эстетик, мәҙәни-ағартыу һәм бигерәк тә социаль-сәйәси пландағы мәсьәләләр күтәрелә. Шиғри сатиралар структураһында шағирҙың шәхесе мөһим урын биләй, ул кешегә һәм йәмғиәткә юғары талаптар ҡуя. Шағир төрлө дәрәжәләге йәмәғәт хәүефлелеге персонаждарының портрет-характеристикалары гаммаһын ижад итә, улар аша йәмғиәттә хөкөм һөргән әшәке тәртиптәрҙе һәм боҙоҡ ғәҙәттәрҙе сағыу күрһәтә. Бының

өсөн автор телмәр портреты, сәхнә, диалог, монолог, гипербола, литота кеүек художество алымдарына нескә мөрәжәғәт итә. Ш. Бабич шиғри телмәр мөмкинлектәрен комик эффект булдырыу өсөн оҫта ҡуллана (шаяртыу, асыулы мыҫҡыллау, яуыз ирония һ. б.), ритмика, шиғри юлдарҙың музыкаллеге, рифмалар системаһы, үҙенең сатирик шиғырҙарының строфалары структураһы тураһында етди хәстәрлек күрә. Тап уның ижади эҙләнеүҙәре арҡаһында сатираның шиғри формаһы башҡорт шиғриәте жанрҙары системаһында тулы хоҡуҡлы жанрға әүерелә.

Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы Бабич шиғриәте XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, төрки телле халыҡтар араһында ла киң таралған. Ул һүҙ һәм шиғриәт оҫтаһы булараҡ ҡына билдәлелек яуламай, Рәсәй мосолман халыҡтары араһында ла уның роле ҙур була. XX быуат башында Башҡорт Хөкүмәте ағзаларының береһе булараҡ ул сәйәси эшмәкәрлек индерә. Шуға бәйле уның күпселек әҫәрҙәре пропаганда лозунгыһы аҫтында ижад ителә һәм манифестацион-публицистик һәм нарратив шиғриәттең жанр системаһын үҫтерә. Шуға күрә күптәр шағирҙы мәғрифәтсе-шағир, яугир-шағир, халыҡ азатлығы, һүҙ азатлығы өсөн көрәшсе шағир булараҡ хәтерләй.

Ш. Бабич әҫәрҙәренең яртыһынан күберәге яндырыла һәм юғала, мөхәббәт лирикаһына ҡағылышлы шиғырҙар һәм поэмалар шағирҙың йыйынтығында бик аҙ һаҡланған. Әммә, шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең көндәргә килеп еткән әҫәрҙәрҙә шағирҙың донъяға ҡарашы, төп мотивтары һәм мөхәббәт темаһына мөнәсәбәте сағыла. Шағир ижады яңы яҡтан асыла.

Һәр халыҡтың үҙ менталитеты, донъяға үҙенсәлекле ҡарашы бар. Әгәр славян халыҡтарында алиһә «мәңгелек йәшлек, ғашиҡлыҡ, юғары матурлыҡ, әммә, иң элек, мәңгелек ғаләм тормошо» тип һүрәтләнһә, башҡорт шағиры күҙлегенән ҡарағанда, «Донъяла ике алла бар: ҡыҙ һәм Алла» [3: 121]. Шағирҙың мөхәббәт лирикаһына ҡараған шиғырҙарында үҙгәреүсән кәйеф шәхестең иртә формалашыуы менән бәйле. Шағирҙың мөхәббәт

лирикаһын тикшергәндә, Бабич өсөн мөхәббәт – изге, юғары, «күк» тойғоһо, кешелек өсөн ижадсының мәрхәмәте кеүек, тигән һығымта яһарға мөмкин. Ә икенсе яҡтан, ерҙең ҡараңғы батшалығы, вәсвәсә һәм ауыртыу. Был ике бер-береһенә ҡапма-ҡаршы донъя – күк һәм ер. Ә Бабич был ике донъяның ҡап уртаһында тора. Шуға күрә уның мөхәббәткә арналған һәр шиғырында мәғәнәһе буйынса ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр күрергә мөмкин.

Шулай уҡ шағирҙың мөхәббәт шиғырҙарында Көнсығыш поэзияһы мотивтары билдәле урын алып тора. Уның донъяға ҡарашы тәү сиратта дини донъяны ҡабул итеү аша төҙөлә һәм йыш ҡына дини төшөнсәләр аша тапшырыла. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер шиғырҙарында Урта быуаттар әҙәбиәтенең Көнбайыш мотивтары ла сағылыш таба. Бабич лирикаһында, Урта быуаттар әҙәбиәтендәге кеүек үк, мөхәббәт икеләтә төшөнсә йөрөтә. «Кешене күккә күтәргән ысын, изге мөхәббәт бар, әммә уның антиподы ла бар. Патристика осоронoң иң ҙур христиан аҡыл эйәһе һәм яҙыусыһы Аврелий (Блаженный) Августин) уны хатта атамай, ә «нәфсе» һүҙе менән алмаштыра. «Алла – мөхәббәт» формулаһы «Мөхәббәт – Алла» формулаһы менән алмаштырыла. Был уникаль күренеш Бабичтың юғары тойғоларға арналған бөтә шиғырҙарында ла күҙәтелә. Дини донъяны тойоу аша мөхәббәт тойғолары юғары көстәр, йәғни Алла менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Шуға күрә Бабичтың мөхәббәт концепцияһы шундай: мөхәббәт – ул тәбиғәт, бүләк, шатлыҡ, Алла, мәрхәмәт, ә изгелеккә ҡаршы күренештәр – ғорурлыҡ, сихырсылыҡ, аҡылһыҙлыҡ, ауыртыу, оят һәм башҡалар. Ер һәм күк образы романтик ике донъялыҡтың типик картинаһын тыуҙыра. Ә уларҙа метафора, кәүҙәләндереү һәм сағыштырыу кеүек һуҡмаҡтарҙы күпләп ҡулланыу Көнсығыш мотивтарының торошон күрһәтә, улар һәр куплетта сағыу һүрәтләнә.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып, тәү ҡарашҡа Ш. Бабич романтикаһы «илаһилаштырылған», «юғары», идеаллаштырылған һәм ысынбарлыҡтан алыҫ кеүек тойола.

Бындай юғары хистәр менән яҙылған әҫәрҙәр хат-шиғырҙарға, мөрәжәғәт-шиғырҙарға (мәктүб) ҡарағанда оданы нығыраҡ хәтерләтә. Әммә ҡыҙҙы һүрәтләүҙә шағирҙың күберәк иронциялы мөнәсәбәте сағыла. Бында шағирҙың ниндәйҙер абстракт-романтик геройҙар образдары менән мауығыуҙан баш тартыуын, уның мәктүбтәрендә, ғөмүмән, бөтә ижадында яңы идея-эстетик тенденцияларҙың барлыҡҡа килеүен, артабан романтик һәм реалистик башланғыстарҙы берләштергән төрлө жанрҙағы мөхәббәт лирикаһының иҫ киткес өлгөләрен булдырыуға килтереүен күрергә мөмкин.

**Әҙәбиәт**:


1. Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. III том: XX быуат башы. Беренсе китап. Шиғриәт. Драматургия / Яуаплы мөхәрр. М.Х. Нәҙерғолов. Өфө: Китап, 2022. 472 б.

2. Бикбаев Р. Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады. Әҙәбиәт ғилеме. Өфө: Китап, 1995. 304 б.

3. Бабич Ш. Весенняя песня. Перевод: Г. Шафикова. Уфа: Китап, 1995. 304 с.


© Азаматов Ғ.Ф., Салауатова Ф.Р., 2024

**УДК 811.512.521**

***Акилова Мунира Фатиховна,***
*канд. филол. наук, доцент УУНиТ, РБ*

## Некоторые термины родства в памятниках древнетюркской письменности

Термины родства в разных ее аспектах может быть объектом изучения различных наук. Это может быть биология (генетика), социология, генеалогия, этнография, культурология, лингвистика. В данном случае нас в первую очередь будет интересовать когнитивный аспект, т. е. не столько структура общества и характер родственных связей и отношений у древних тюрков и турок как таковые, сколько их культурное осмысление, их ритуальное оформление, их содержание и оценка, их место в культуре того или иного языка.

Родство обычно делится на два: кровное родство и на свойство. Первое, что приходит на ум, это кровное родство. Э. Шенер считает, что родство делится на: родство по происхождению, т. е. кровное родство, а другое – причинное, т. е. по причине женитьбы/замужества [5: 108]. Когда рассматриваются кровные родственники, прежде всего понимается, что кровные родственники делятся на две части: родственники, связанные между собой кровными узами прямой линии и на кровное непрямое родство (по линиям матери и отца). Примерами уз прямой линии являются родственные узы между матерью и дочкой, дедушкой и внуком и т. д. Примерами непрямого родства являются кровные узы брата и сестры, мальчика/мужчины по отношению к ребёнку дяди и/или тёти и т. д.

Отец – мужчина по отношению к своим детям. В языке древнетюркских памятников встречается данный термин как «qaŋ». Мать – женщина по отношению к своим детям. В древнетюркских памятниках встречаются термины, означающие мать: *ana, ög.*

Отец – *urunu külig toq bögü tarkan-a qaŋım bag ardam üçün birla bardı* (мой отец-бек, который был урунгу, славным, обильным и мудрым правителем области, тоже покинул (этот мир) из-за доблести) *elim oğrïna tözüm qazğantışım qaŋïm öga bagim qazğantïş qïrq ujar...qadaş atmadïm* (все, что я приобретал – [все это] ради моего государства. Я не бросил... сорок благородных сородичей, тех что приобрел [еще] мой отец, огя-бек) [1: 161].

Также термин «отец» используется в древнетюркских памятниках в значении защитника и покровителя своей собственной дружины [1: 276].

Сын – мальчик/мужчина по отношению к своим родителям. Для обозначения сына в языке древнетюркских памятников используются термины *oğlan, oğul, urï.*

Дочь – девочка/женщина по отношению к своим родителям. Для обозначения дочери в языке древнетюркских памятников используется термин *qïz*.

Дед (дедушка) – мужчина по отношению к детям сына или дочери, отец отца или матери, муж бабушки. В

языке древнетюркских памятников данный термин обозначается как *«ata».*˙ По мнению Кормушина, данный термин, кроме значения дедушка, также имел значение старший дядя [1: 276]. Предок – древний предшественник по роду. В языке древнетюркских памятников обозначается как *«eçüm apam»* [2: 27]˙

*Är* (муж/супруг) – мужчина по отношению к лицу, состоящему с ним в браке. Термин «муж» в языке древнетюркских памятников обозначается термином *«är»*. Жена (супруга) – женщина по отношению к лицу, состоящему с ней в браке. Термин «жена» в языке древнетюркских памятников обозначается терминами *«qunçuj», «eş», «qatun».*

В древнетюркских мифах прародителем тюрок является волк – Kurt ata. В честь этого древние тюрки вышивали на стяге золотую голову волка. Самым главным и почитаемым божеством древних тюрков являлся Тенгри, или по-другому Гёк Тенгри. Является олицетворением отца, мужского начала, создателем и покровителем мира.

Мать – *ög. On aj iltdi ögim-a kalürti ilimka ardam üçün man arladim-a* (десять (лунных) месяцев носила (меня) мать, принесла моему государству, для доблести я возмужал) [1: 121]; *[ö]gümka bökmadim buna* – моей матерью я не насладился, печально!

В древнетюркских письменных памятниках дочери упоминаются всегда с эпитетом «*красивые»* либо со словом «*единственная»*. В давние времена дочери правителей были ценной «разменной монетой» в политике у многих народов. Это явление также прослеживается и у древних тюрков. И.В. Кормушин считает, что в эпитете «единственная» подчеркивается ценность дара меморианта и его племени – племени своего будущего тестя [1: 110].

У древних тюрков бытовал обычай: при выдаче дочери замуж жених должен был отдать калым отцу невестки. Калым разнился от богатства и состоятельности жениха. Калым бедных мог составлять от силы нескольких единиц скота, а калым богатых – достигать до нескольких тысяч голов скота. Исходя из этого, можно сделать вывод,

что девушки семьи являлись ценной «разменной монетой», выдача которой богатому жениху могла принести огромное богатство отцу невестки.

Рассмотрев все вышеперечисленные данные, можно прийти к выводу, что в языковой картине мире древних тюрков дочери представляются с одной стороны, как добрые, хорошо воспитанные девушки, а с другой – злые, плохо воспитанные, а главное – ценными членами семьи, которых в перспективе можно удачно выдать замуж.

*Oğul, Oğlan, Urï* (сын) – *asiz ar iki oğlïn birlâ ölti* (жаль, муж-воин погиб вместе со своими двумя сыновьями); *tört oğlanïm bar üçün bankümin* [tikti] (из-за того, что у меня четверо сыновей, мне воздвигли памятник) [5:108]· *eşim urïm azïşdïm* (мои супруги, мои сыновья, – я перестал видеть и слышать вас (т. е.умер)).· При анализе данных строк выясняется, что родственные связи у древних тюрков были сильными, особенно между отцом и сыном. Из этого можно сделать вывод, что в языковой картине древних тюрков сыновья должны были оказывать отцу, старшим родственникам своё глубокое уважение и любовь.

Положение женщин в древнетюркском обществе было равное мужскому. Умай – божество древних тюрков – представляла женское начало. А в эпосе «Урал-батыр» старуха Йанбикэ предстает перед нами как прародительница человеческого рода, об этом говорит ее имя (дословно: Душа-госпожа). В этом отношении мифологическая основа «Урал-батыра» созвучна с содержанием древнетюркских памятников. В женских образах в эпосе и в древнетюркских памятниках встречаются мотивы почитания и уважительного отношения к матери. В этих верованиях проскальзывает то, что в обществе древних тюрков женщины не считались ниже мужчин. Наоборот, в их обществе женщины и мужчины имели равные права. В китайских исторических хрониках есть записи о том, что жены каганов присутствовали даже на приеме высокопоставленных послов из других стран. А на стелле Бильге кагана имеется запись:

«Отца моего кагана Ильтериса,
Мать мою Ильбильге хатун
Небо подняло вверх,
Посадил их на высокий престол». Из этого отрывка можно сделать вывод, что у древних тюрков женщины также могли принимать участие в правлении государством наравне с мужчинами. В данном случае Ильтерес каган и его жена Ильбильге хатун сели на престол вместе.

В «Китаб-и Дэдэм Коркут» стереотип идеальной жены для кочевника рисуется в образе заботливой домохозяйки: «опора своего дома, это та, которая, когда из степи в дом приходит гость, когда муж ее на охоте, она того гостя накормит, напоит, уважит и отпустит». Если судить по данному косвенному признаку, то и у древних тюрков идеальная жена представлялась хорошей хозяйкой.

Как мы видим, язык – не только единица общения, но и ключ к познанию культуры, мышления и сознания какой-либо нации. Язык отражает действительность и бытие на основе языковой картины мира.

**Литература**:

1. Кормушин И.В. Тюркские енисейские эпитафии. Грамматика. Текстология. М.: Наука, 2008. 269 с.

2. Малов С.Е. Памятники древнетюркской письменности. Тексты и исследования. М.-Л.: Издательство Академии наук СССР, 1951. 354 с.

3. Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык-основа. Картина мира пратюркского этноса по данным языка / Ред. Э.Р. Тенишев, А.В. Дыбо. М.: Наука, 2006. 550 с.

5. Şener E. Türk Medeni Kanunu. Ankara: Seçkin yayınevi, 2000. 108 s.

© Акилова М.Ф., 2024

**УДК 811.512.141**

***Аҡманова Римма Һөйөндөк ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., Өфө фән һәм технологиялар университеты, БР*

## Хәҙерге башҡорт теле һәм уның диалект, һөйләштәрендә орнитонимдар

Ҡош атамалары лексикологияның боронғо ҡатламын алып тора. Башҡорт тел ғилемендә орнитонимдарҙы өйрәнеү күп телсе-ғалимдарҙы ҡыҙыҡһындыра. Р.Һ. Аҡманова башҡорт телендә һәм диалекттарында ҡоштарҙың дөйөм төрки сығанаҡлы төр атамаларын өйрәнә [1]. Э.Ф. Ишбирҙин Башҡортостанда йәшәгән һәм осраған ҡоштарҙың атамаларын өйрәнгән, уларҙың йәшәү рәүеше, әҙәби телдә һәм һөйләштәрҙә осраған атамалары хаҡында бай мәғлүмәт биргән [7]. Ф.Ғ. Хисамитдинова «Словарь башкирской мифологии» хеҙмәтендә орнитомдарҙы мифология өлкәһендә тикшерә [9].

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һәм уның диалекттарында осраған ҡош атамаларын, уларҙың мәғәнә үҙгәрештәрен өйрәнеү актуаль булып тора, был өлкәлә ентекле тикшеренеү талап итә. Диалект һәм һөйләштәрҙә байтаҡ орнитонимдар осрай. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һәм уның диалекттарында булған ҡош атамаларының күп өлөшө дөйөм төрки сығанаҡлы булыуы менән айырылып тора.

«Башҡорт теленең академик һүҙлеге»ндә *бүҙәнә* ‘перепел’ лексемаһы түбәндәге мәғәнәләрҙә бирелгән: 1. Һорғолт сыбар төҫлө, оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, күгәрсен ҙурлығындағы ялан ҡошо; бытбылдыҡ. 2. Ҡатын-ҡыҙ түллелеген һынландырыусы ҡош. Шулай уҡ был термин менән юрматы ҡәбиләһе аймағын да атап йөрөтәләр [3: 420]. Был лексема *бүҙәнә* ‘перепел’ мәғәнәһендә башҡа төрки телдәрҙә лә бирелгән: *бүҙәнә / büdänä* – башҡорт, *бүдәнә / büdänä* – татар, *путене / pudene* – сыуаш; һәм диалекттарҙа: *бедәнә / bedänä* – үзбәк, *бөдене / bödene* – төрөк; *бидене / bidene* – төркмән [8: 101]. Э.Ф. Ишбирҙин

«Башҡортостан ҡоштары (белешмә китап)» хеҙмәтендә *бытбылдыҡ, бүтбелдек* атамаларын күрһәтә. Шулай уҡ был ҡоштоң төҫө, ҙурлығы, йәшәү рәүеше, тауышы һәм башҡа күп яҡтары тураһында бай мәғлүмәт бирә [7: 55]. Тәбиғәттә был ҡошто күреп белеү өсөн ярҙамға һүрәтен дә эшләгән [7: 146]. *Бытбылдыҡ* термины көнсығыш диалекттың мейәс һөйләшендә теркәлгән [6: 67], *бүтбелдек* атамаһы төньяҡ-көнбайыш диалекттың әй һөйләшендә осрай [6: 64]. Ф.Ғ. Хисамитдинова билдәләүенсә, *бүҙәнә* термины башҡорт мифологияһында ҙур урын алып тора. Туй фольклорында, шулай уҡ төрлө йолаларға бәйле сағылыш таба. Башҡорт теле һәм уның диалекттарында *бытбылдыҡ* атамаһы барлығын да күрһәтә [9: 118–119].

Башҡорт телендәге *кәкүк* ‘кукушка’ терминының төрлө мәғәнәләре бар: 1. Оҙон ҡанатлы, ҡойроҡло, күкһел һыртлы, сыбар бауырлы урман ҡошо (йомортҡаһын үҙе баҫмай, сит ояға һала). 2. Тотем ҡош [4: 891]. Э.Ф. Ишбирҙин был ҡош тураһында байтаҡ мәғлүмәт бирә. Башҡорт теленең диалект һәм һөйләштәрендә *какук, күке* атамалары булыуын күрһәтә. Шулай уҡ *һаҡау кәкүк* хаҡында ла әйтеп үтә. Халыҡ телендә *дыуылдаҡ кәкүк, дүдәрдән* атамалары булыуын билдәләй [7: 23]. *Күке* лексемаһы төньяҡ-көнбайыш диалектта теркәлгән [6: 161]. Башҡорт мифологияһында *кәкүк* лексемаһына бәйле бик күп йола байрамдары, уйын, ырым-ышаныуҙар күрһәтелгән [9: 229–236].

*Ҡарағош* ‘большой подорлик’ терминының түбәндәге мәғәнәләре бар: 1. Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, бөркөттән бәләкәйерәк ҡара йыртҡыс ҡош (ағас башына оялай). 2. Табын ырыуы башҡорттарының тотем ҡошо. 3. Батырға ер өҫтөнә сығырға ярҙам итеүсе ер аҫты доньяһы ҡошо.

Шулай уҡ был лексема «салғыны һапҡа нығытыу өсөн арҡыры ҡуйылған тимер ҡулса»ны ла белдерә. *Ҡарағош* атамаһы тиләү, янһары ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исемен дә аңлата [5: 242–243]. Э.Ф. Ишбирҙин был ҡош тураһында ла күп мәғлүмәт бирә [7: 16]. Был термин мифологияла ҙур урын алып тора.

Ф.Ғ. Хисамитдинова хеҙмәтендә *ҡарағош* атамаһының әкиәттәрҙә киң ҡулланылыуын, башҡа төрки халыҡтары мифологияһында ла булыуын, боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларҙа теркәлеүен күрәбеҙ [9: 247–248].

*Аҡҡош* ‘лебедь’ лексемаһы ошондай мәғәнәләрҙә ҡулланыла: 1. Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған аҡ төҫлө, һомғол оҙон муйынлы иң эре һыу ҡошо. 2. Башҡорт мифологияһындағы изге, тотем ҡоштарҙың береһе һанала. 3. Әйле, ҡырғыҙ ырыуҙарының аймаҡтары [2: 205–206]. Э.Ф. Ишбирҙин хеҙмәтендә *каңғылдак аҡҡош, бөҙрә аҡҡош, ышылдаҡ аҡҡош* атамаларын күрһәтә. Шулай уҡ был ҡош тураһында бай мәғлүмәт бирә [7: 56–57]. Ф.Ғ. Хисамитдинова билдәләүенсә, *аҡҡош* һүҙенең килеп сығышы дөйөм төрки *aq* ‘белый’ һәм *quš* ‘птица’ лексемаларына барып тоташа. Шулай уҡ был термин төрки халыҡтары мифологияһында ҙур әһәмиәткә эйә [9: 50–52].

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һәм уның диалект, һөйләштәрендә осраған ҡош атамаларының лексиканың ҙур ҡатламын тәшкил итеүен күрәбеҙ. Шулай уҡ орнитонимдарҙың байтағының башҡа төрки телдәрҙә лә осрауын һәм боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларҙа теркәлеүен билдәләп үтергә кәрәк. Ҡош атамаларының дөйөм төрки уртаҡлығы лексемаларҙың боронғо һәм төп нөсхәһендә булыуына күрһәткес.

Киләсәктә был терминологияны төптән өйрәнеү, киң күҙлектән ҡарау, һөйләштәрҙә осраған яңы орнитонимдарҙы фәнни әйләнешкә сығарыу, төрлө кимәлдәге һүҙлектәрҙе яңы атамалар менән тулыландырыу кәрәк.

**Әҙәбиәт:**

1. Акманова Р.С. Видовые названия птиц общетюркского характера в башкирском языке и его диалектах // Проблемы гуманитарных наук и образования в современном мире. Сборник научных статей по материалам VII Всероссийской научно-практической конференции. Отв. редактор Н.А. Ласынова. Сибай, 2021. С. 26–27.

2. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. I: (А хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова ред. Өфө: Китап, 2011. 432 б.
3. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. II: (Б хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова ред. Өфө: Китап, 2011. 568 б.
4. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. IV: (Й–К хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. Өфө: Китап, 2012. 944 б.
5. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. V: (Ҡ хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова ред. Өфө: Китап, 2013. 888 б.
6. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге / Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. Өфө: Китап, 2002. 432 б.
7. Ишбирҙин, Э.Ф. Башҡортостан ҡоштары (белешмә китап) / Э.Ф. Ишбирҙин. Өфө, Китап, 1986. 168 б.
8. Севортян Э.В. Этимологический словарь тюркских языков. Общетюркские и межтюркские основы на букву Б. М., 1978. 349 с.
9. Хисамитдинова Ф.Г. Словарь башкирской мифологии. Уфа: Китап, 2019. 432 с.

© Акманова Р.С., 2024

**УДК 821.512.141**

***Алдырханова –Кәримова Әлниса Рәхимйән ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*3-сө «Сибай» полилингваль күп профилле*
*гимназия-интернаты, Сибай ҡ., БР*

## Башланғыс кластарҙа фольклор жанрҙарын өйрәнеү

Халыҡ ижады сығанаҡтарына мөрәжәғәт итмәйенсә, милли мәҙәниәт ҡиммәттәрен аңламайынса һәм ҡабул итмәйенсә мөмкин түгел. Мәктәп практикаһында фольклор менән танышыу ғәҙәттә эпизодик рәүештә бара һәм башлыса йырҙарҙы өйрәнеү аша башҡарыла. Фольклорҙың ижади фекерләүҙе әүҙемләштереү сараһы булараҡ

әһәмиәтен асыу төп бурысы булып тора. Уның нигеҙендә уҡыусыларҙа ысын матурлыҡты аңлау үҫешә, халыҡ музыкаһы ҡиммәттәренә, тыуған яҡ тарихына, үҙ халҡының йолаларына һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә, ата-бабаларҙың йыр мираҫына ҡушылыу ихтыяжы барлыҡҡа килә.

Фольклор һүҙе, йыш ҡына ауыҙ-тел ижады төшөнсәһен аңлата, ике инглиз һүҙенең ҡушылыуынан килеп сыҡҡан: ***folk*** *– халыҡ* һәм ***lore*** *– аҡыл*. Фольклор тарихы бик боронғо замандарға барып тоташа. Уның башы кешеләрҙең тирә-яҡ тәбиғәт донъяһын һәм унда үҙ урынын аңлау ихтыяжы менән бәйле. Был аңлау һүҙҙә, бейеүҙә һәм музыкала, шулай уҡ һынлы сәнғәт әҫәрҙәрендә, тәү сиратта ҡулланма сәнғәттә, биҙәүестәрҙә, дини культ предметтарында сағыла.

М.Х. Иҙелбаев фекеренсә, фольклор ярҙамында бала тирә-яҡ донъяға еңел инә, тыуған тәбиғәттең матурлығын тулыраҡ тоя, халыҡтың матурлыҡ, әхлаҡ тураһындағы күҙаллауҙарын үҙләштерә, йолалар менән таныша. Фольклорҙа халыҡтың ҡараштары, идеалдары һәм ынтылыштары, уның шиғри фантазияһы, уй-тойғолар, кисерештәрҙең бай донъяһы, ғәҙеллек һәм бәхет тураһында хыялдар кәүҙәләндерелә [3: 7].

Фольклор жанрҙарына күләме буйынса ҙур булмаған әҫәрҙәр ҡарай: Оҙон көйҙәр, йырҙар, таҡмаҡтар, бәйеттәр, мөнәжәттәр, ҡобайырҙар, эпостар, легенда-риүәйәттәр, хикәйәттәр, мәҡәл-әйтемдәр, әкиәттәр һ. б. жанрҙар инә.

Фольклорҙа һәр йәшкә үҙ жанрҙары тура килә. Үткәндәрҙе, бөгөнгөһөн һәм киләсәген дөрөҫ аңларға теләгән һәр кем фольклорҙы белергә тейеш. Уның әһәмиәте шунда: бөтә әҫәрҙәре лә изгелеккә, тыныслыҡҡа ынтылыш менән һуғарылған, юғары прогрессив идеялар менән рухландырылған. Ата-әсәнән-балаларға, быуындан-быуынға улар ғүмер буйына мәңге тере халыҡ менән йәшәй һәм үҙендә ижадсы образын йөрөтә.

Халыҡтың фольклор байлығы – ул уның рухи байлығы. Фольклорҙа халыҡтың художестволы зауығы сағыла. Халыҡ ижады әҫәрҙәрен быуаттар буйына бик яҡшы оҫталар һәм фольклор белгестәре һайлап ала һәм

шымарта. Уларҙы эстетик тәрбиә сараһы итеп матурлыҡ тойғоһо, форма, ритм, тел тойғоһо тип ҡарарға була. Халыҡ ижады үҙендә халыҡ эстетикаһы принциптарын кәүҙәләндерә, быуаттар буйына барлыҡҡа килгән халыҡтың художестволы зауығын сағылдыра. Ә тәбиғәттең объектив закондары сағылдырылыуы менән ҡиммәтле. Иң мөһиме – балаларға фольклорҙы, халыҡ йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү кәрәклеген аңлатыу. Горький әйткәнсә, фольклор халыҡ тарихы менән тығыҙ бәйләнгән.

«Кешегә үҙ тамырҙарын белергә кәрәк», – тип яҙа В. Песков. Эйе, тамырһыҙ ағас үҫмәй. Тарихи тамырҙарҙы белеү, үҙ халҡының художестволы үткәнен тәрән аңлау хәҙерге заман сәнғәтен булдырырға ярҙам итә. Фольклор балаларға бик яҡын, донъяны тойоу буйынса улар менән яраша [2].

Бәләкәйҙән балаларҙа фольклор менән аралашыуҙан шатлыҡ тойғоһо тәрбиәләргә кәрәк, шул саҡта улар уға ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү һаҡлай. Ә был бик мөһим, сөнки Д.И. Шостаковичтың һүҙҙәренсә, халыҡ музыкаһы рухты таҙарта.

Йырлау, һамаҡлау, иҫәпләү, тиҙ һөйләү, башҡорт көнкүрешенең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора.

Мәктәп уҡыусыларын ауыҙ-тел ижады аша тәрбиәләүҙә фольклорҙың роле бала туған телен үҙләштереүҙән тыш, уның матурлығын, ҡыҫҡалығын үҙләштереп, үҙ халҡының мәҙәниәте менән таныша, уның тураһында тәүге күҙаллауҙар ала. Фольклор балаларҙы әхлаҡи тәрбиәләүҙең мәрхәмәтле һәм бер нәмә менән дә алмаштырғыһыҙ сығанағы булып тора, сөнки унда яуызлыҡ һәм изгелек, бәхет һәм ҡайғы менән бөтә реаль тормош сағылдырыла. Ул балаға йәмғиәт һәм тәбиғәт тормошон, кеше тойғолары һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәр донъяһын аса һәм аңлата.

Баланың фекерләү һәм фантазияһын үҫтереүгә булышлыҡ итә, уның эмоцияларын байыта, әҙәби телдең матур өлгөләрен бирә. Халыҡтың ауыҙ-тел ижады ярҙамында тәрбиәүи эффектты мөмкин тиклем арттырыу өсөн, уның төрлө жанрҙарҙа күрһәтелеүе генә түгел, ә

баланың бөтә тормош процестарына мөмкин тиклем күберәк индерелеүе лә мөһим. Баланың бала саҡтан әхлаҡи төшөнсәләрҙең һәм кешелек ҡиммәттәренең асылын үҙләштереүе бик мөһим. Үҫеш барышында бала шәхес булараҡ формалаша, үҙенә хас характер һыҙаттарына, кешенең тормош тәртибенә йоғонто яһаусы үҙенсәлектәргә эйә була, баланың үҙ донъяға ҡарашы барлыҡҡа килә. Үҙенең художество үҙенсәлектәре арҡаһында халыҡ сәнғәте балаларға яҡын, уларҙы үҙ аллы эшмәкәрлектә аңларға, ҡабатларға мөмкин. Ә был ҡәнәғәтлек, шатлыҡ тойғоһо тыуҙырыуға булышлыҡ итә, был балалар үҫешенә эмоциональ яҡтан уңайлы мөхит булдыра.

Хәҙерге ваҡытта йәмғиәтебеҙ алдында торған иң мөһим бурыс – уның рухи, әхлаҡи яңырыуы, уны быуаттар буйына күп быуындар тарафынан булдырылған һәм халыҡ сәнғәте әҫәрҙәрендә нығытылған халыҡтың мәҙәни-тарихи тәжрибәһен үҙләштермәйенсә тормошҡа ашырыу мөмкин түгел.

К.Д. Ушинский, халыҡсанлыҡ принцибын алға ҡуйып, тел-халыҡтың йәшәгән һәм киләсәк быуындарын бер бөйөк, тарихи тере бөтөнлөккә берләштергән иң тере, иң мул һәм ныҡлы бәйләнеш», тип әйтә.

Бәләкәй сағында баланың тәүге аңлы һүҙҙәренең «тыуыуын» тиҙләтеү бик мөһим. Һүҙ запасын арттырырға фольклорҙың бәләкәй жанрҙары ярҙам итәсәк, уларҙа уның иғтибары предметтарға, хайуандарға, кешеләргә йүнәлтелә. Бәләкәй фольклор ярҙамында телмәрҙе үҫтереү методикаһының бөтә мәсьәләләрен тиерлек хәл итергә мөмкин һәм башланғыс мәктәп уҡыусыларының телмәр үҫешенең төп ысулдары һәм алымдары менән бер рәттән был материалды ҡулланырға мөмкин һәм кәрәк. Адаптация осоронда халыҡ фольклорының әһәмиәте бик ҙур. Яҡшы һайланған, сағыу итеп һөйләнелгән шаяртыу бәйләнеш булдырырға ярҙам итә.

Фольклорҙың төрлө төрҙәрен өйрәнеү аша балаларҙың аң даирәһе киңәйә. Шулай уҡ балаларҙы ял иткәндә, дәрестәрҙә, конкурстарҙа, театрлаштырыуҙа, йола байрамдарында үҙ аллы эшмәкәрлеккә өйрәтеүҙә халыҡ

фольклоры формаларын һөҙөмтәле файҙаланыу мөһим. Был халыҡтың ауыҙ-тел ижадына ҡыҙыҡһыныуҙы арттыра [3: 6].

Бишек йырҙары – халыҡ ауыҙ-тел ижадының иң боронғо жанры. Бәләкәй музыкаль лирик әҫәр. Бишек йырын тәрән аңлау өйрәнелгән телдең матурлығын һәм сағыулығын яҡшыраҡ аңларға мөмкинлек бирә, баланың беренсе һүҙлек запасын формалаштыра, һүҙҙә сағылған донъя картинаһын барлыҡҡа килтерә. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йырлы бишек ярҙамында баланың телдең фонематик картаһы яйлап формалаша, ул эмоциональ төҫтәге һүҙҙәрҙе һәм фразаларҙы яҡшыраҡ ҡабул итә һәм хәтерләй, тимәк, иртәрәк һөйләшә башлай.

Бишек йырҙары менән танышыу балаларға тотороҡло һәм изге күңелле кешеләр булып үҫергә ярҙам итәсәк.

Йомаҡтар баланы уйын формаһында эш итергә этәрә, ҡул һәм бармаҡ ҡатнашлығында баланың яҡшыраҡ хәтерләүенә, уның фантазияһын үҫтереүенә һәм фекерләү эшмәкәрлеген әүҙемләштереүенә килтерә. Тән хәрәкәте, ҡул һәм телмәр ағзаларының ваҡ моторикаһы йыйылмаһы көсөргәнешлекте кәметеүгә булышлыҡ итә, телмәр паузаларын үтәргә өйрәтә, телмәр темпын нормалләштерә һәм дөрөҫ әйтелеште формалаштыра.

Тиҙәйткес – ул бәләкәй генә әҫәр, йәки айырым һүҙбәйләнеш, йышыраҡ рифмалы. Ул һәр ваҡыт динамик, персонаждарҙың энергиялы ҡылыҡтары менән тулы. Йыш ҡына өҫтәмә һорауҙар һәм яуаптар формаһында диалог рәүешендә төҙөлә. Шулай итеп, сабыйға бер күренештән икенсеһенә хәрәкәттәрҙе күсереүҙе, персонаждарҙың мөнәсәбәттәрендәге тиҙ үҙгәрештәрҙе күҙәтеүҙе ҡабул итеү еңелерәк. Бөгөнгө көндә билдәле булған күп кенә өҫтәмәләр быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргә килеп еткән башҡорт халыҡ ижады емеше булып тора. Был һүҙ формаларын ата-бабаларыбыҙ балаларына тапшырған.

Йола шиғриәте. Йоланы оҙатып барған һүҙ-художество жанрҙары даирәһен йола шиғриәте тип атайҙар. Был жанрға йомаҡтар, әйтемдәр, мәҡәлдәр инә. Шулай уҡ бик күп уйын

йырҙары күңел асыу характерында, ғәҙәттә, анык бейеү ритмы менән бирелә [4].

Йомаҡ – ул ҡыҫҡаса һүрәтләнгән предмет йәки күренеш, йыш ҡына шиғри формала, үҙ эсенә асыҡ йәки йәшерен һорау рәүешендәге мәсьәләне ала. Йомаҡтарҙың йөкмәткеһе кешенең тормошон, уны уратып алған ысынбарлыҡты сағылдыра: үҫемлек һәм хайуандар донъяһы, тәбиғәт күренештәре, хеҙмәт һәм көнкүреш әйберҙәре. Һәр сер асыҡ йәки йәшерен формала ҡуйылған һорауҙы үҙ эсенә ала. Йомаҡты сисеү – ул мәсьәләне хәл итеү, һорауға яуап биреү, ҡатмарлы фекерләү операцияһы башҡарыу.

Ҡайһы берҙә бер нисә хикәйәләү һөйләмдәренән торған йомаҡтарға һорау һөйләм өҫтәлә. Йомаҡтар танып белеү мәғәнәһе менән тулы. Балаларға һәләттәрен күрһәтеү һәм аҡылын иҫбатлау ғына түгел, ә башҡаларҙың ярҙамынан тыш нимәгә һәләтле булыуын аңлау ҙа ҡыҙыҡлы. Халыҡ ижадының ауыҙ-тел ижады жанры булараҡ, балалар алдында күп мөмкинлектәр аса. Ул логик фекерләүҙе, хәтерҙе, фантазияны, йомаҡтың йөкмәткеһен тыңлау ғына түгел, ишетеү һәләтен дә үҫтерә. Балалар әкренләп образлы телмәрҙе, метафораларҙы, афоризмдарҙы аңлай башлай. Йомаҡтарҙы сисеү процесы үҙе лә күңелһеҙ шөғөл түгел. Балаға йомаҡҡа дөрөҫ яуап табырға тырышыу күңелле. Төрлө темаларға яңғыраған ҡыҫҡа һорауҙар балала мотлаҡ ҡыҙыҡһыныу уята. Был йомаҡтарҙы күҙәтеүсәнлекте үҫтереү, предметтарҙың билдәләре тураһында белемде нығытыу, дәрестәрҙә материалды нығытыу өсөн ҡулланырға мөмкинлек бирә.

Әҙәби уҡыу дәрестәрендә йыш ҡына башҡорт фольклорының тәрбиәүи, үҫеш әһәмиәтенә эйә булған жанр текстары ҡулланыла: экиәттәр, эпостар һ. б. Мәктәп программалары нигеҙендә әҙәбиәтте сәнғәт булараҡ өйрәнеүҙең берҙәм монологик принцибы ята. Программа бурыстарының береһе – уҡыусыларҙың һүҙ һәм художестволы образды үҙләштереү өсөн шарттар булдырыу. Эш системаһында төрлө пландағы күнегеүҙәр күп: әҙәбиәт жанры булараҡ фольклор әҫәрҙәренең

үҙенсәлектәрен өйрәнеүгә, төркөмдәргә бүлеүгә (темалар, структура, художестволы образ төҙөү, килеп сығышы буйынса), рифма функцияһын аңлауға, ижади һәләттәрҙе үҫтереүгә, логик фекерләүҙе үҫтереүгә күнегеүҙәр.

Әммә программала фольклор әҫәрҙәрен әҙәбиәт жанры буларак өйрәнеүҙең бөтөн системаһы юк, художестволы образды булдырыуҙың бөтә алымдары ла асылмай, әҙәби үҫеш, телмәр оҫталығын һәм уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү өсөн күнегеүҙәр етерлек ҡулланылмай.

Балалар телдең һүрәтләү-күрһәтеү мөмкинлектәренә (метафора, сағыштырыу, шиғри телмәрҙең ритмик булыуы тураһында) тәүге белемдәр ала. Беренсе класта балалар түбәндәге фольклор жанрҙарын өйрәнә: бишек йырҙары; көләмәстәр; мәҡәлдәр һәм әйтемдәр; йомаҡтар; мәҫәлдәр.

Икенсе класта: йомаҡтар; мәҡәлдәр; көләмәстәр; йомаҡтар; хайуандар тураһында әкиәттәр; көнкүреш һәм тылсымлы әкиәттәр.

Өсөнсө класс өсөн программа художестволы фольклорҙы үҙ эсенә ала.

Дүртенсе класта уҡыусылар көнкүреш һәм әкиәттәр, халыҡ шиғриәте менән таныша.

Беренсе кластан уҡыусыларҙың өс эшмәкәрлеге эҙмә-эҙлекле камиллаштырыла: уҡыу, телмәр, уҡыусылар эшмәкәрлеге.

Халҡыбыҙҙың бай ауыҙ-тел ижады аша беҙ уҡыусыларыбыҙҙың рухын байытырға, әхлағын төҙәтергә, туған телен камиллаштырырға тейешбеҙ. Уҡыусыларҙың аҡыл-фиғелдәре тап бына бала саҡтан тәрбиәләнә. Баланы тәрбиәләү уҡытыусының, оло кешенең үҙ-үҙен тотошо, унын мөһим һөйләменән башланыуын да беҙгә ныҡ иҫтә тоторға кәрәк. Һәр ғаиләнең педагогик культураһы шул халыҡтың педагогик традицияларынан сығып урынлаша. Өләсәйҙәр мәктәбен дә иҫтән сығарырға ярамай. Улар менән дәрес-осрашыуҙар үткәреү – үҙе үк халыҡ ижадының тәрбиәүи әһәмиәтен балалар күңеленә һалыуҙа ҙур йоғонто яһай.

Ятларға, иҫтә ҡалдырырға, ҡабатларға, мәжбүри танып-беленергә тейешле мәғлүмәттәр күләме программа

һәм дәреслектәрҙә етерлек дәрәжәлә асыҡ билдәләнгән. Шулай итеп, фольклор нигеҙендә бала күңеленә әхлаҡ тәрбиәһе биреү, уны илен, телен, милләтен яратҡан шәхес итеп тәрбиәләү беҙҙең төп бурысыбыҙ булып ҡала.

**Әҙәбиәт:**


1. Аҙнағолов Р.Ғ. Уҡыусы шәхесен үҫтереүҙең лингводидактик нигеҙҙәре. Өфө: Китап, 2011. 192 б.
2. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 1-се киҫәк. Өфө: Китап, 2010. 120 бит.
3. Иҙелбаев М. Хәҙерге заман технологиялары һәм яңылыҡлы дәрестәр // Башҡортостан уҡытыусыһы. 2012. №3. 6 –10-сы б-р.
4. Кәримова Ә.Р. Тексты комплекслы анализлау / Башҡортостан уҡытыусыһы. 2011. № 5. 21–22-се б-р.


© Алдырханова–Кәримова Ә.Р., 2024

**УДК 81-2**

***Амиров Ансар Ринатович,***
*магистрант, ФБФВиЖ,*
***Абдуллина Гульфира Рифовна,***
*д-р филол. наук, профессор,*
*УУНиТ, г. Уфа, РБ*

## Религиозные термины в арабском языке

Актуальность исследования религиозных терминов в арабском языке определяется несколькими ключевыми факторами. Арабский язык является важнейшим элементом культурного и духовного наследия множества народов и стран, говорящих на нем. Являясь одним из шести официальных языков ООН, арабский язык также имеет огромное значение в международной политике и бизнесе. Арабский язык занимает центральное место в религиозной практике исламского мира. Молитвы, коранические тексты и богословские труды все написаны на арабском, что делает его знание важным для всех, кто имеет дело с исламом в его религиозном или культурном контексте.

Понимание религиозных терминов помогает не только в правильной интерпретации текстов, но и в углублении понимания самой религии, её ценностей и культурных особенностей. Изучение религиозных терминов может способствовать межкультурному диалогу и пониманию. В условиях глобализации взаимодействие между странами и культурами становится все более интенсивным, и знание религиозных терминов может снизить напряженность, вызванную культурными и религиозными различиями. Это особенно актуально в условиях, когда религиозные конфликты появляются на фоне недопонимания и предвзятостей. Помимо этого, анализ религиозных терминов позволяет отслеживать изменения, понимать развитие и адаптацию языка к новым социальным и культурным условиям. Итак, исследование религиозных терминов на современном этапе имеет как культурное, так и социально-политическое значение.

Понятие «религиозные термины» охватывает множество слов и выражений, активно используемых в различных религиях для обозначения концепций, объектов, ритуалов и верований. Эта лексическая группа является важной частью религиозной культуры, служит средством передачи знаний и духовного опыта от поколения к поколению. Общая характеристика религиозных терминов включает в себя их древность и устойчивость, поскольку многие из них сохраняют свое значение на протяжении веков. Эти термины обладают высокой степенью символичности, часто имеют различные уровни толкования, формируют ядро теологических текстов и литургических практик. Значение религиозных терминов невозможно переоценить: через них осуществляется передача моральных и этических норм, формируется мировоззрение верующего человека, укрепляется его связь с духовным началом [5: 60].

Итак, религиозные термины – это не просто слова, а сложный и многогранный инструмент, играющий ключевую роль в становлении и развитии религиозной идентичности, поддержании целостности и

преемственности той или иной веры. Они отражают богатство и разнообразие духовной жизни, служат базой для изучения и понимания как древних, так и современных религиозных традиций.

Классификация религиозных терминов в арабском языке представляет собой сложную и многообразную систему категорий, каждая из которых имеет свои уникальные особенности и примеры. Рассмотрим основные виды религиозных терминов на арабском языке:

1. Теологические термины («اصطلاحات لاهوتية»): эти термины связаны с описанием природы Бога, вероучений и концепций божественного откровения в исламской теологии. Приведем примеры: «توحيد» (таухид) – единобожие; «قدر» (кадар) – предопределение.

2. Ритуальные термины («اصطلاحات شعائرية»): описывают различные религиозные обряды, практики и предписания, связанные с исполнением ритуалов. К примеру, «صلاة» (салат) – молитва; «زكاة» (закят) – милостыня.

3. Этические и моральные термины («اصطلاحات أخلاقية»): описывают морально-этические принципы и правила поведения, которые рекомендуется соблюдать согласно религиозным нормам. Наример: «صدق» (сдк) – честность; «أمانة» (аманах) – доверие.

4. Исторические термины («اصطلاحات تاريخية»): обозначают значимые события, личности или периоды в истории ислама, играющие важную роль в формировании религиозной идентичности. К примеру, «هجرة» (хиджра) – переселение Пророка Мухаммада из Мекки в Медину; «معركة بدر» (Маъракет Бадр) – битва при Бадре.

5. Суфийские термины («اصطلاحات صوفية»): особая категория, связанная с духовными практиками и понятиями суфизма, мистической ветви ислама. Например: «طريقة» (тарѝка) – путь, суфийское братство; «عشق» (ишк) – божественная любовь.

6. Коранические термины (اصطلاحات قرآنية): термины, непосредственно связанные с текстами Корана, включая понятия, имена и символические фигуры. К

примеру, «سورة» (сура) – глава Корана; «آية» (ая) – стих Корана [3: 95].

Представленная систематизация позволяет глубже понять разнообразие и особенности религиозной лексики в арабском языке, ее значения и применения в разных контекстах.

Арабский язык, будучи языком Корана, обладает уникальной способностью передавать массивные культурные смыслы, определившие формирование исламской терминологии. Влияние арабского языка на формирование исламской терминологии проявляется, в первую очередь, через его корневую структуру. Система трёхбуквенных корней позволяет создавать широкий спектр значений из одного и того же базового набора звуков. Это дало возможность создавать такие важные термины, как «ислам» («إسلام»), где корень «син-лам-мим» («س-ل-م») связан с миром и покорностью. Аналогично, термин «салят» («صلاة»), обозначающий молитву, происходит от корня «сод-лам-вав» («ص-ل-و»), связанного с зависимостью и поддержкой [6: 41].

Исламская терминология испытала значительное влияние заимствований из других языков и культур. Особое место в этом процессе занимают персидский, греческий, латинский и франкский языки, каждый из которых внес свой вклад в обогащение арабского языка. К примеру, слова «философия» («فلسفة») и «логика» («منطق») восходят к греческим корням, отражая важность, которую исламская цивилизация придавала интеллектуальному наследию античного мира через работы переводчиков и учёных Золотого века ислама. Персидский язык также оказал большое влияние, особенно в областях поэзии и литературы, а многие административные и бытовые термины были заимствованы после ислама в Иране. Так, слово «диван» (ديوان), обозначающее собрание или совет, стало использоваться в контексте государственного управления, прочно войдя в арабскую лексику. Поддержание баланса между чистотой арабской лексики и обогащением её за счёт заимствований оказалось

успешной стратегией, позволившей исламской культуре сохранить свою идентичность и в то же время оставаться открытой новаторским влияниям извне. Так, через века взаимодействий, арабский язык и исламская терминология смогли объединить в себе как наследие предшественников, так и инновации эпохи возрождения, продолжая жить и развиваться в современности [4: 8].

Арабский язык, на протяжении веков служивший основой для общения в исламском мире, имеет уникальные особенности, которые пронизывают его на религиозном уровне. Для мусульман религиозные термины не только формируют основу их вероисповедания, но и влияют на обыденные аспекты жизни. В повседневной жизни мусульман религиозные термины играют значительную роль, являясь неотъемлемой частью как официальных ритуалов, так и обыденного общения. Например, такие выражения, как «иншалла» («إن شاء الله » – «если Бог пожелает»), часто употребляются для выражения надежды или неопределённости в будущем. Они проникли в любой аспект жизни, от деловых переговоров до личных взаимоотношений [2: 22].

Слово «харам» («حرام»), означающее то, что запретно по законам ислама, вышло далеко за пределы религиозных обсуждений и стало повседневным понятием, обозначающим что-то недозволенное или морально неприемлемое в обществе. С другой стороны, термин «халал» («حلال») определяет то, что позволительно или приемлемо, и применяется не только в контексте питания, но и в более широком смысле, касаясь любых аспектов жизни, от финансов до отношений [2: 31].

Арабский язык, как основной язык ислама, несет в себе уникальную ответственность за сохранение и передачу религиозных понятий и учений. Однако в современной мировой практике использования арабского языка возникает ряд проблем, связанных с интерпретацией, переводом и адекватным применением религиозных терминов. Рассмотрим основные проблемы:

1. Многозначность и полисемия: многие религиозные термины в арабском языке содержат множество значений, что может привести к их разночтению и неоднозначной интерпретации. Например, термин «джихад» часто воспринимается вне его широкого духовного контекста, акцентируясь исключительно на военном аспекте.

2. Трудности перевода: большинство языков испытывают сложности при переводе арабских религиозных терминов. Точные аналоги просто отсутствуют в других языках, что затрудняет передачу оригинального смысла и культурного контекста.

3. Эволюция языка: как и любой другой язык, арабский язык продолжает эволюционировать. В этом процессе некоторые старые религиозные термины могут утрачивать значение или приобретать новые, что может создать конфликт между традицией и современной интерпретацией.

4. Культурный контекст: религиозные термины зачастую глубоко укоренены в культурный контекст, влияющий на смысл и применение. Без учета этих нюансов существует риск искажения исходной идеи [7: 34].

В рамках исследования предложены рекомендации по решению обозначенных проблем:

1. Углубленное исследование: необходимо проведение углубленных исследований, направленных на изучение изменений в значениях религиозных терминов с течением времени и их современном использовании.

2. Обучение и образование: продвижение программ по обучению специалистов, способных эффективно интерпретировать и переводить религиозные термины с учетом культурного контекста.

3. Создание компетентных комиссий: разработка комиссий и рабочих групп, состоящих из экспертов в области лингвистики, религии и культуры, для предоставления рекомендаций и руководств по правильному использованию религиозных терминов.

4. Технологии и ресурсы: использование цифровых технологий для создания онлайн-ресурсов и баз данных,

которые помогут пользователям лучше понимать и использовать религиозные термины.

Будущие исследования по рассматриваемой теме могут сосредоточиться на анализе конкретных примеров успешной практики интерпретации и применения религиозных терминов в различных контекстах. Изучение влияния глобализации на арабский язык и его религиозную лексику также представляется актуальным направлением. Это позволит не только сохранить культурную и религиозную идентичность, но и обеспечить взаимопонимание в международных отношениях. Эффективное использование религиозных терминов в арабском языке требует глубокого понимания их значений и контекста. Решение обозначенных проблем позволит укрепить культурные связи и содействовать более глубокому пониманию между различными языковыми и культурными группами.

Таким образом, религиозные термины в арабском языке имеют глубокое культурное значение, играя ключевую роль в передаче теологических концепций и традиций ислама. Они не только описывают религиозные практики, но и являются частью повседневной жизни мусульман, влияя на социальные обычаи и культурную идентичность. Эти термины часто содержат в себе сверхъестественные и символические значения, которые оказывают воздействие на мировоззрение и поведение верующих. Изучение таких терминов требует понимания семантики и контекста, в котором они используются, открывая многообразие интерпретаций и влияний, формировавших их на протяжении веков.

**Литература**:

1. Аҡмырҙин С.З. Ислам дини терминдарын өйрәнеү ысулдары. Өфө: Китап, 2002. 320 б.

2. Аҙнағолов Р.М. Мәҙәниәт теорияһы. Өфө: Китап, 2018. 178 б.

3. Ахметзянов И.М. Исламские термины на арабском языке // Вестник востоковедения. 2021. № 3. С. 95-102.

4. Борисов П.Д. Арабская религиозная лексика. М.: Наука, 2019. 320 с.

5. Ермаков К.В. Ислам и язык: термины и понятия // Религиоведение. 2022. № 7. С. 60-67.

6. Козлов А.А. Словарь исламских терминов. СПб.: Питер, 2017. 256 с.

7. Николаев В.Н. Лексика ислама в арабском языке // Журнал языковых исследований. 2020. № 5. С. 34-40.

© Амиров А.Р., Абдуллина Г.Р., 2024

**УДК 811.512.142**

***Ахматова Мариям Ахматовна,***
*д-р филол. наук, профессор, Кабардино-Балкарский государственный университет им. Х.М. Бербекова, г. Нальчик, Кабардино-Балкарская Республика, РФ*

## Структурно-семантические типы фитонимов с компонентом *от* в карачаево-балкарском языке

В соответствии с антропоцентрической парадигмой особое внимание уделяется изучению языковых процессов во взаимосвязи с человеком, его мировосприятием, мировоззрением. С этой точки зрения, безусловно, огромный интерес вызывает фитонимический пласт лексики, поскольку в названиях объектов окружающей природы, объективной действительности зафиксирован полученный жизненный опыт, который является продукт мыслительной деятельности человека.

Наименования фитонимов широко представлены во многих языках мира, так как человечество с давних времен использовало растения как в качестве пищи, так и для лечения различных заболеваний. В настоящее время интерес к данному пласту лексики продолжает расти. Лексика, обозначающая наименования растений, представляет интерес не только для лингвистов, но и для специалистов в других областях науки, иначе говоря, исследования подобного рода носят междисциплинарный характер. Многие растения являются носителями в своем

составе реликтов архетипичной культуры того или иного народа. В фитонимической лексике отражается не только своеобразие мировосприятия, но и ментальные особенности этноса, а также фитонимы представляют собой богатейший материал «для изучения исторических, географических, бытовых условий жизни конкретного народа, обусловленных особенностями его мировидения» [14: 117].

В лингвистическом аспекте карачаево-балкарские фитонимы еще недостаточно полно изучены. Более обстоятельное исследование этого пласта лексики даст ценнейший материал по данному языку. Следует также отметить, что в карачаево-балкарском языке имеется ряд исследований, которые напрямую [7] или косвенно связаны с данной проблематикой [1; 5; 6]. Вместе с тем, в последнее время возник интерес к изучению наименований растений как неотъемлемой части лексики данного языка [2; 8; 9].

В «Древнетюркском словаре» слово ***от*** представлено в значении ‘трава, зелень’; ‘лекарство’ [4: 373]. Этому же слову в карачаево-балкарском языке характерно смысловое значение ‘трава’, ‘яд’ [11: 1080]. Цель данной статьи – рассмотреть структурно-семантические типы фитонимов с компонентом ***от*** в карачаево-балкарском языке. Материалом для анализа послужили фитонимы с компонентом ***от***, представленные в следующих словарях: «Толковый словарь карачаево-балкарского языка» в 3-томах [10; 11; 12], «Карачаево-балкарско-русский терминологический словарь объектов природы» [3], «Этимологический словарь названий лекарственных растений (с карачаево-балкарскими фитонимами)» [13].

Фитонимы с компонентом ***от*** в карачаево-балкарском языке по своей структуре в подавляющем большинстве представлены двух- и трехкомпонентными единицами. В результате исследования нами выявлены следующие структурные разновидности фитонимов с компонентом ***от***:

1. Двукомпонентные, образованные по модели:

а) *существительное + существительное* ***от***: *жулдуз от* ‘звездчатка ланцетолистная’, *букъу от* ‘дымянка

аптечная’, *гелеу от* ‘первоцвет лекарственный’, *темиреу от* ‘горец перечный’, *къашыкъ от* ‘ложечница лекарственная’, *дарман от* ‘шалфей лекарственный’, *булакъ от* ‘жеруха’, *генезир оту* ‘амброзия полыннолистная’, *жалман оту* ‘овсец степной’, *жаргам оту* ‘грыжник гладкий’, *желим оту* ‘эремус’, *ёмюр оту* ‘столетник, алоэ’, *зейтун оту* ‘судзу’, *къылыч оту* ‘зверобой’, *самакъ оту* ‘желтник ядовитый’, *сепкил оту* ‘кукушкины слезы’, *семиш оту* ‘портулак’, *сибиритки от* ‘сорго’, *сылты от* ‘мыльнянка лекарственная’, *тарчын оту* ‘коричник’, *тасман оту* ‘буквица’, *фил оту* ‘горец, водяной перец’, *чабыр оту* ‘багульник’, *чайыр оту* ‘ладан’, *чыян оту* ‘дороникум’, *шатыр от* ‘буквица’, *шаудан оту* ‘жеруха’, *ушкок от* ‘горох’, *яс оту* ‘сирень дикая’;

б) *причастие + существительное* ***от***: *къалгъан от* ‘лапчатка прямостоячая’, *термилген от* ‘лапчатка прямостоячая’, *къурлагъан от* ‘вороний глаз обыкновенный’, *къутургъан оту* ‘бурачок’, *ташлатхан от* ‘аюга’;

в) *причастие настоящего времени + существительное* ***от***: *къусдуруучу от* ‘ястребиночка румянковидная’;

г) *имя действия + существительное* ***от***: *сызлау от* ‘линнея северная’;

д) *сложное прилагательное + существительное* ***от***: *жангызкёз оту* ‘вороний глаз’, *жегенбаш оту* ‘полочник’, *кёкбаш от* ‘синюха голубая’, *кьарабаш оту* ‘гречка дикая’;

е) *относительное прилагательное + существительное* ***от***: *ийисли от* ‘рута душистая’, *сютлю от* ‘инококуан’, *ингиллик оту* ‘купена-лупена’, *уулу от* ‘амброзия’, *шатык от* ‘железная трава’;

ж) *качественное прилагательное + существительное* ***от***: *къызыл от* ‘марена’, *ачы от* ‘очиток едкий’, *акъ от* ‘ковыль’;

з) *глагол + существительное* ***от***: *кириш оту* ‘камнемолка’.

В карачаево-балкарском языке встречаются и трехкомпонентные фитонимы со словом ***от***, которые представляют собой довольно малочисленную группу:

а) *существительное + существительное + существительное* ***от****:* *мырды сирке от* ‘мытник болотный’, *къоян ауруу оту* ‘пиретрум щитковидный’, *мырды жара от* ‘чистец болотный’, *бешчапыракъ безгек от* ‘лапчатка ползучая’, *байрым чайыр оту* ‘цикламен’;

б) *прилагательное + существительное + существительное* ***от****:* *акъсыман бауур от* ‘белозер болотный’, *ачы жауур от* ‘горечавка горьковатая’, *жулдузлу бауур от* ‘подмаренник душистый’, *къара къыл от* ‘черноголовник, клевер средний’, *къара мыйыкь оту* ‘вид паслена’, *къара кёз оту* ‘сафлор красильный’, *къызыл къыл от* ‘красноголовник’, *сары къыл от* ‘золотая розга’;

в) *существительное + причастие прошедшего времени + существительное* ***от***: *обур жалагъан оту* ‘псоралея лещинолистная’, *къан жюрютген от* ‘арника горная’.

В семантическом аспекте в языке широко представлены фитонимы, включающие зоонимы (названия животных, птиц, насекомых). Двухкомпонентные наименования растений, один из компонентов которых является зоонимом, образованы по модели: *зооним + существительное* ***от***. Приведем примеры фитонимов, образованных по данной модели: *агъаз от* ‘лотос’, *герге от* ‘безвременник великолепный’, *турна от* ‘аистник цикутовый’, *жилян от* ‘очиток едкий; материнка’, *илячин от* ‘ястребинка волосистая’, *къыртчыгъа от* ‘ястребинка волосистая’, *бёрю от* ‘дафна’, *борсукь от* ‘мятник’, *гылыу от* ‘дикая люцерна’, *тонгуз от* ‘рута душистая’, *айракъ оту* ‘голубиный горох’, *кёгюрчюн оту* ‘вербена’, *макъа от* ‘водоросли’, *тауукъ от* ‘куркум болотный’, *чычхан от* ‘ясменник розоватый’, *эчки от* ‘козлятник лекарственный, оспенная трава’, *бюрче от* ‘ромашка аптечная’, *кюе от* ‘вид ятрышника’, *сирке от* ‘мытник хохлатый’ и др.

Среди двухкомпонентных встречаются и такие названия растений, в которых один из компонентов является сомакомпонентом. Они образованы по модели: *соматизм + существительное* ***от***: *тамакъ от* ‘колокольчик крапиволистный’, *бауур от* ‘маршанция многообразная’, *жюрек от* ‘девясил иволистный’, *ёпке от*

‘лёгочная трава; горная гвоздика; гвоздика двуцветная’, *жара от* ‘тысячелистник обыкновенный’, *тиш оту* ‘шалфей лекарственный’, *къотурбаш от* ‘вербена лекарственная, бабишник плавневой’, *къууукь от* ‘овсюг’ и др.

Следующую группу составляют фитонимы, образованные по модели: *лексемы, являющиеся наименованиями болезней + существительное* ***от***: *сапыран от* ‘льнянка обыкновенная’, *безгек от* ‘валериана лекарственная’, *келепен от* ‘псоралея лещинолистная’, *къанталау оту* ‘блошница дизентерийная’, *геуюз от* ‘скабиоза бледно-жёлтая’ и др.

*Фитоним + существительное* ***от***: *зыка от* ‘кресс салат’, *зынтхы от* ‘овсюг’, *кендир от* ‘канатник’, *тукъузгю оту* ‘хрозофора’.

Таким образом, фитонимы с компонентом ***от*** в карачаево-балкарском языке представлены двух- и трехкомпонентными единицами, среди которых превалируют двухкомпонентные. В тематическом плане данные фитонимы представлены следующими моделями: *зооним + существительное* ***от***, *соматизм + существительное* ***от***, *лексемы, являющиеся наименованиями болезней + существительное* ***от,*** *фитоним + существительное* ***от.*** В целом изучение фитонимического пласта лексики позволяет воссоздать картину мира носителей языка.

**Литература:**

1. Аппоев А.К., Кетенчиев М.Б. Основные семасиологические характеристики арабских и персидских заимствований в карачаево-балкарском языке // Балтийский гуманитарный журнал. 2021. Т. 10. № 1 (34). С. 316–320.

2. Ахматова М.А., Текуев М.М., Хуболов С.М. Топонимы карачаево-балкарского языка, образованные от апеллятива цвета акъ «белый», и их лексико-семантическая характеристика // Научная мысль Кавказа. 2021. № 4 (108). С. 118–124.

3. Боташев М.О. Карачаево-балкарско-русский терминологический словарь объектов природы. Кисловодск, 1998. 33 с.

4. Древнетюркский словарь / ред. В.М. Наделяев и др.; АН СССР. Ин-т языкознания. Ленинград: Наука. Ленингр. отд-ние, 1969. 676 с.

5. Кетенчиев М.Б. Карачаево-балкарская ономастика. Нальчик: Изд-во КБГУ, 2017. 90 с.

6. Кетенчиев М.Б., Ахматова М.А., Додуева А.Т. Архаическая лексика в карачаево-балкарских паремиях // Полилингвиальность и транскультурные практики. 2022. Т. 19. № 2. С. 297–307.

7. Семенова А.Б. Фитонимия карачаево-балкарского языка: автореф. дисс. … канд. филол. наук. Махачкала, 2011. 23 с.

8. Текуев М.М., Ахматова М.А., Хуболов С.М. Характеристика некоторых топонимов карачаево-балкарского языка с компонентами агъач «лес», терек «дерево» // Язык: история и современность. 2019. № 2. С. 111–122.

9. Текуев М.М., Хуболов С.М., Мизиев А.М. Карачаево-балкарские микротопонимы, образованные от названий дикорастущих деревьев // Научная мысль Кавказа. 2020. № 4 (104). С. 108–112.

10. Толковый словарь карачаево-балкарского языка / Ред. А.А. Жаппуев, Л.Ж. Жабелова, И.М. Отаров: в 3-х т. Т. 1. А-Ж. Нальчик: Издательский центр «Эль-Фа», 1996. 1016 с.

11. Толковый словарь карачаево-балкарского языка / Ред. А.А. Жаппуев, Л.Ж. Жабелова, И.М. Отаров: в 3-х т. Т. 2. З–Р. Нальчик: Издательский центр «Эль-Фа», 2002. 1168 с.

12. Толковый словарь карачаево-балкарского языка / Ред. А.А. Жаппуев, Л.Ж. Жабелова, И.М. Отаров: в 3-х т. Т. 3. С–Я. Нальчик: Издательский центр «Эль-Фа», 2005. 1157 с.

13. Этимологический словарь названий лекарственных растений (с карачаево-балкарскими фитонимами) / сост.

Б.А. Хапаев, А.Б. Хапаева. Черкесск: БИЦ СевКавГГТА, 2015. 319 с.
14. Ягафарова Г.Н. Фитонимы с компонентами-зоонимами в башкирском языке // Вестник ЧитГУ, 2010. № 1 (58). С. 117–121.
© Ахматова М.А., 2024

**УДК 37.035.6**

***Байбулатова Земфира Наил ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*5-се дөйөм белем биреү мәктәбе МБДББУ,*
*Күмертау ҡалаһы, БР*

## Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә халыҡ педагогикаһы аша йәш быуынды тәрбиәләү

Үткән быуаттың күренекле педагогтары халыҡтың педагогик ҡараштарын, уның тәрбиә тәжрибәһен өйрәнеүгә ҙур әһәмиәт биргән. Улар фекеренсә, халыҡ педагогикаһы тәрбиә тураһындағы фәнде байыта, ул педагогика фәне менән ҡатлаулы мөнәсәбәткә инә һәм бер-береһенең үҫешенә ыңғай йоғонто яһай.

Минең уйымса, хәҙерге уҡыусыларҙы һөйөү, әхлаҡ, тәртип ҡағиҙәләренә боронғо атай-бабайҙар мираҫы ярҙамында ғына өйрәтеп була. Был сифаттарҙы тәрбиәләүҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре ҙур роль уйнай. Халыҡ традициялары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре башҡорт халыҡ ижадының нигеҙен тәшкил итә. Дәрестә бер генә тапҡыр булһа ла халҡыбыҙҙың зирәклеген һынар йомаҡтар әйтелмәһә, уның бай тормош тәжрибәһе тупланған, фекер мәргәнлеген күрһәткән мәҡәлдәр ҡулланылмаһа, күңелгә ҡыуаныс биргән, һағышлы, моңло йырҙары йырланмаһа, балаларҙың күҙҙәрендә осҡондар сәсрәтеп, уларҙы ял иттереүсе халыҡ уйындары булмаһа, ул дәрестән балаларыбыҙҙың ҡәнәғәт булыуы икеле.

Шуның өсөн дә халыҡ ижады үрнәктәрен өйрәнеү ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. Уҡыусының ижади һәләте күп

осораҡта дәрестә асыла. Быныӊ өсөн мин төрлө алымдар ҡулланам, алдынғы тәжрибәнән файҙаланам.

5-се кластарҙа халыҡ ижадыныӊ афористик жанрҙары өйрәнелә. Беҙҙеӊ бурысыбыҙ – уҡыусыларға ошо жанрҙарҙыӊ барлығын ғына белдереү түгел, ә уларҙыӊ тәрбиә биреү мөмкинлектәрен файҙаланыу. Мәҫәлән, йомаҡтарҙы алайыҡ. Йомаҡтарҙыӊ төп тәғәйенләнеше – балаларға аҡыл тәрбиәһе биреү. Һәр йомаҡ яуапһыҙ ҡалмай, ә яуап табыр өсөн уйланырға кәрәк. Йомаҡ ҡойошҡанда уҡыусылар ҡыҙыҡһынып китә һәм уйланырға мәжбүр булалар. Йомаҡтарҙы әҙәбиәт дәрестәрендә ҡулланыу бик отошло.

Йыл миҙгелдәре тураһындағы шиғырҙарҙы үткәндә лә йомаҡтар әйтеү бик уӊайлы. Н. Нәжмиҙеӊ «Ҡыш», А. Игебаевтыӊ «Яҙ башында» шиғырҙарын өйрәнгәндән һуӊ теманы йомаҡтар менән дөйөмләштереү бигерәк тә файҙалы була. Мәҫәлән, мин үҙем ошондай йомаҡтарҙы алам:

*Өс йөҙ алтмыш биш сыйырсыҡ,*
*Ҡырк һигеҙ тубырсыҡ,*
*Ун ике аҡҡош, бер торна,*
*Шуны белмәй ултырма.*

Балаларҙыӊ да белгән йомаҡтары күп:

*Дымлы елдәр иҫеп килә,*
*Елдән сәскә еҫе килә,*
*Донъя тулы наҙ,*
*Етте якты…*

Зирәклек тәрбиәләү башҡорт халҡында иӊ хөрмәтле эштәрҙеӊ береһе һаналған, шуға ла йомаҡ ҡойоу элек-электән килгән йолаға әйләнгән.

Мәҡәлдәр халыҡ телендә быуаттан-быуатҡа күсеп килгән гүзәл хазиналарҙыӊ береһе булып торалар. Тулы бер фекерҙе йыйнаҡ, тапҡыр итеп әйтеп биргән мәҡәлдәрҙә халыҡ үҙенеӊ быуаттар буйына һуҙылған тормош тәжрибәһен, яҡшы идеалға булған ынтылышын сағылдыра. Мәҡәлдәр халыҡтыӊ зирәклеген, тапҡырлығын күрһәтә, ә уларҙа ятҡан мәғәнә тәрән тәрбиәүи сараға эйә.

Мәҡәлдәрҙең төп темаларының береһе – Тыуған ил темаһы. «Ат – туйған ерендә, ир – тыуған ерендә», «Ил намыҫы – ир күңелендә», «Биле ныҡтың – иле ныҡ, иле ныҡтың – биле ныҡ», «Ил терәге – ир, ир терәге – ил», тигән боронғолар. Халыҡтың Тыуған илгә булған мөхәббәтен сағылдырған тәрән патриотик мәҡәлдәр күп: «Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ер яҡшы», «Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул». Бындай тематикалы мәҡәлдәр уҡыусыларҙа Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләй.

Тыуған ил, тыуған яҡ тураһында уҡыусылар бик күп иншалар яҙа һәм үҙҙәренең яҙма эштәрендә тыуған ергә һөйөү менән һуғарылған мәҡәлдәрҙе файҙаланалар.

Әҙәбиәт дәрестәрендә Тыуған ил темаһына яҙылған әҫәрҙәр үтелә. Мәҫәлән, 8-се класта Нур Ғәлимовтың «Яуҙан ҡайтҡан ҡурай» хикәйәһен өйрәнгәндән һуң «Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡатнашҡан ҡыйыу 112-се башҡорт атлы дивизияһы» темаһына үткәрелгән әңгәмәлә уҡыусылар килтергән мәҡәл һәм әйтемдәр бик бай йөкмәткеле булыусан. Мәҫәлән: «Данлы егет ил өсөн үлер», «Ерҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән», «Ил барҙа, ир хур булмаҫ, ир барҙа, ил хур булмаҫ».

Башҡорт теле дәрестәрендә лә мәҡәлдәр файҙаланыу ҙур тәрбиәүи көскә эйә. Мәҫәлән, 5-се класта «Антонимдар» темаһын үткәндә, мин ошондай мәҡәлдәрҙе өлгө итеп алам: «Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ», «Һөнәрле үлмәҫ, һөнәрһеҙ көн күрмәҫ», «Эшлеклене иген баҫыр, эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр».

Әкиәттәрҙе балалар яратып уҡыйҙар, уларҙың ыңғай геройҙарына оҡшарға тырышалар, ә кире образдарға нәфрәт тойғоһо менән ҡарайҙар.

Башҡорт халыҡ йырҙарын үткәндә лә башта йырҙың легендаһы менән танышабыҙ. Бындай эш йырҙың йөкмәткеһен аңларға, уның әһәмиәтен билдәләргә ярҙам итә. Йырҙарҙы өйрәнеү, уларҙың тарихы менән танышыу, шул уҡ ваҡытта көйөн тыңлау, башҡарыусылары тураһында мәғлүмәттәр алыу менән бергә барырға тейеш.

Йырҙар аша мин уҡыусыларҙа гүзәллек тойғоһо, мәҙәниәткә, сәнғәткә һөйөү тәрбиәләргә тырышам.

Тыуған яҡты, уның тарихын, әҙәбиәтен, тәбиғәтен өйрәнгәндә легенда һәм риүәйәттәргә мөрәжәғәт итеү бик әһәмиәтле. Беҙҙе уратып алған ер-һыу атамаларының легендаларын белеү, ҡала, район, ырыу-ҡәбиләләрҙең килеп сығышын өйрәнеү уҡыусыларҙа тыуған яҡҡа һөйөү тәрбиәләргә ярҙам итә.

Шәхес тәрбиәләүҙә шәжәрәнең дә йоғонтоһо бик ҙур. Шәжәрә – ул ил, ырыу тарихы. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә шәжәрә менән эш итеү башҡорт тарихын өйрәнеү өсөн ҙур материал булып тора.

Беҙ тарихи шәхестәрҙең, ырыуҙарҙың ғына шәжәрәһе менән сикләнмәйбеҙ, һәр кем үҙенең атай-олатайҙарының тарихын өйрәнә, ете быуынға тиклем шәжәрә ағасын төҙөй. Быңдай эш уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята, һәр уҡыусы үҙенең тамырын белергә ынтыла. Күмертау ҡалаһында йәшәгән Солтангәрәевтарҙың, Исҡужиндарҙың, Бикбаевтарҙың, Буранғоловтарҙың шәжәрәләре бик күп тармаҡлы. Ошолар хаҡында уҡыусылар үҙҙәре мәғлүмәттәр йыйып алып килделәр. Тупланған бөтә материалдарҙы ла беҙ һәр ваҡыт файҙаланабыҙ, улар менән түбән кластар уҡыусылары алдында сығыш яһайбыҙ, төрлө конкурстарҙа, фәнни-эҙләнеү конференцияларында ҡатнашабыҙ.

Халыҡ ижады үрнәктәрен өйрәнеү башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә шәхес тәрбиәләүҙең мөһим бер тармағы булып тора. Мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар, йырҙар, әкиәттәр, легендалар, риүәйәттәр, йолалар – былар барыһы ла шәхес үҫешенә ыңғай йоғонто яһаусылар. «Башҡорт фольклорының баланың үҫешенә йоғонтоһо» темаһы өҫтөндә беҙҙең бөтә мәктәп планлы рәүештә эшләй.

Халҡыбыҙҙың үткәнен, тарихын белә алыуыбыҙ, тормош-көнкүрешен, телен, донъяға ҡараштарын өйрәнеүебеҙ менән халыҡ ижадына бурыслыбыҙ. Шуға күрә киләсәгебеҙ яҡты, матур булһын тиһәк, үткәнебеҙҙе һәм хәҙергене өйрәнәйек, хөрмәт итәйек.

**Әҙәбиәт**:

1. Ахияров К.Ш. Народная педагогика и современная школа. Уфа: БашГПУ, 2000. 328 с.
2. Баймырҙина В. Башҡорт халыҡ педагогикаһының асылы // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1993. № 8. 38-40 б-р.

© Байбулатова З.Н., 2024

**УДК 37.035.6**

***Байымова Гөлдәр Абдулла ҡыҙы,***
*педагог-психолог, баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## Балалар баҡсаһында туған телде өйрәнеү

Башҡорт әҙәби теле – илебеҙгә туғандаш телдәр менән хоҡуҡлы милли тел. Башҡорт теле – башҡорт милли мәҙәниәтенең нигеҙе. Башҡорт теле хәҙерге көндә ҙур ҡаҙаныштарға эйә булған, үҫешкән, көндән-көн алға китеүсе мәҙәниәт тармаҡтары һанала. Балаларға белем биреүҙә туған телдең әһәмиәте ҙур, мөмкинселектәре киң. Бала үҙ туған телендә һөйләшә, фекер йөрөтә. Ошо тел аша кешеләр араһындағы мөнәсәбәттең иң ҡатмарлы донъяһына үтеп инә, тәбиғәт, йәмғиәт күренештәрен күреп, танып белә, улар хаҡында тәүге төшөнсәләрҙе үҙләштерә.

Туған тел баланың психикаһына туранан-тура йоғонто яһай, унда кире һәм ыңғай эмоциялар тыуҙыра, туған телдә әйтелгән һүҙ уны шатландыра, көйөндөрә һәм төрлө бәхәстәргә тарта. Туған телде өйрәнеү баланың үҙ аллы фекер йөрөтөү, һөйләү телмәрен үҫтереү, байытыу һәм формалаштырыуҙа берҙән-бер ҡорал булып тора.

Үҙ халҡының тарихы, йыр-моң күңеленә һеңеп, шул нигеҙҙә тәрбиәләнгән, тыуған ерен ғәзиз әсәһе кеүек һөйгән, йөрәге халҡы менән бергә типкән, халҡы рухы менән, уның маҡсаты, үҙ хыялы, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәгән, туған теленең байлығына эйә булып, уның нескәлектәрен аңлаған, үҙенең бөтә булмышын халҡына бағышлаған кеше генә тәрбиәле һәм белемле шәхес була ала.

Ғалимдар фекеренсә, бала туған телендә алған белемде бер ҡасан да онотмай. Тәүҙә балалар баҡсаһында, унан мәктәптә киңәйтә, тәрәнәйтә, нығыта бара. Шулай итеп балаларҙа үҙ туған еренә, халҡына, уның үткәненә, ғөрөф-ғәҙәтенә, ижадына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, ихтирам уятыу, милли рухҡа нигеҙ һалыу, милли йыр, уйын, бейеү, мәҡәлде туған телдә өйрәтеү мәктәпкәсә йәштән үк балаға, йәш үҙенсәлектәренә ҡарап, улар ҡабул итә алған тиклем кимәлдә өйрәтелһә, киләсәктә үҙенең кем икәнлеген белгән, ныҡлы рухлы булған быуын үҫәсәк, сөнки бала саҡтағы ишетелгәндәр онотолмай, бала үҙенең саф, таҙа күңеленә һеңдерә, тәүге бураҙналар һалына. Башҡорт балаһына үҙ телендә белем биреү, телгә һөйөү уятыу беҙҙең төп бурысыбыҙ булып тора.

Балалар баҡсаһында бала өсөн уйын – төп эшмәкәрлек, уйын – ысынбарлыҡ. Бала уйында йәшәй, сынығa, үҙаллылыҡҡа өйрәнә. Тәрбиә, уҡытыу эшен уйынһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Шуның өсөн белемгә өйрәтеү ҙә уйынһыҙ мөмкин түгел. Баланың әүҙемлеген арттырыу өсөн уйын алымын индереү, ҡулланыу киң таралған.

Бала тик уйында ғына туған телдең нескәлектәренә өйрәнә, «телдең рухын» үҙләштерә.

Туған телгә өйрәтеүҙең тағы бер мөһим бурысы булып балаларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү тора. «Баланың мейеһе бармаҡтарының осонда урынлашҡан», – тигән әйтем бар. Ысынлап та, бармаҡтар ни тиклем күберәк күнегеү башҡарһа, улар шул тиклем аҡыллыраҡ була. Шулай уҡ бармаҡ хәрәкәте менән телмәр үҫеше араһында бәйләнештәр бар. Шуның өсөн «бармаҡ уйындарын» ҡулланып телмәрҙе лә бармаҡ эшмәкәрлеген дә үҫтереп була, балала ҡыҙыҡһыныу ҙа көсөйә.

Бала нимә күрә, ишетә, күҙәтә – барыһы ла уның телмәрендә сағыла. Уның өсөн һөйләгән һүҙе – асыш, образ, бәләкәй генә әкиәт, тормош тәжрибәһе. Телмәр үҫтереүҙә шиғыр юлдарын хор менән һөйләү мөһим роль уйнай. Ысынлап та, әгәр кескәйҙәр төрлө сараларҙа башҡалар менән бер тиң ҡатнашмаһа, үҙ-үҙенә ышаныс юғалыуы, кәмһенеү тойғоһо уяныуы ихтимал.

Балаға туған телде өйрәткәндә бик күп алымдар ҡулланырға була. Беҙ, уҡытыусылар иһә, эш барышында тел ҡәҙерен аңлай белергә, туған телгә, унының матурлығына һөйөү уятырға бурыслыбыҙ.

Әгәр баланы бала саҡтан уҡ телгә ихтирамлы итеп тәрбиәләһәң, ул белемгә ынтылыусан, телгә зирәк, кеше менән аралашыусан булып үҫә, телмәре лә үҫешкән була. Туған телендә яҡшы һөйләшә белгәндә генә бала үҙенең фекерен асыҡ, аныҡ һәм дөрөҫ итеп әйтеп бирә ала.

Дәрестәр балаларҙы ялҡытмайынса, мауыҡтырғыс уйын формаһында, ҡулланма материалдар ҡулланып үткәрелһә, күпкә файҙалыраҡ. Мәҫәлән, математик төшөнсәләрҙе өйрәтеү дәресендә балалар төрлө эштәр үтәп, «бәләгә тарыған әкиәт батырҙарын ҡотҡаралар», «урманға барып», унда осраған геройҙың һорауҙарына яуап биреп, ундағы ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе һанап, сағыштырып, урындарын билдәләп, һанарға өйрәнәләр.

Ә инде «экологик һуҡмаҡ» буйлап йөрөп, бөжәктәр, сәскәләр, үҫемлектәр донъяһы менән танышалар, уларҙы һындырмаҫҡа, тапамаҫҡа, дөйөм алғанда, тәбиғәттә үҙ-үҙен тоторға, тәбиғәтте һаҡларға өйрәнәләр, әкиәт батырына өйрәтәләр.

Туған телде өйрәнеүҙә төрлө мәҙәни саралар, иртәлектәрҙең дә роле ҙур. Мәҫәлән, «Ҡаҙ өмәһе», «Нардуған» һ. б. Балалар туған телдә шиғыр, бейеү, уйын өйрәнә.

Ғөмүмән, үҙ телендә һөйләшкән бала киләсәктә лә милләтенә тоғро булып үҫәсәк!

**Әҙәбиәт**:

1. Бураҡаев И.Д., Бураҡаева М.С., Юлмохәмәтов М.Б. Башҡорт мәҙәниәте (Тормош һабактары): 7-се синыф өсөн дәреслек. Китап, 2007.

2. Живые родники (ИКБ). Уфа: Китап, 2009.

3. Культура Башкортостана: справочное пособие для учащихся. Уфа, ГУП «Уфимский полиграфкомбинат», 2002.

© Байымова Г.А., 2024

УДК 372.881.1

***Батталова Таңһылыу Зиннәт ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Мәләүез күп профилле һөнәри колледжы, БР*

## Телмәр үҫтереүҙә дискуссиялы (дискуссионный) күнегеүҙәрҙең әһәмиәте

Башҡорт теле дәрестәрендә дискуссиялы (дискуссионный) күнегеүҙәр һөҙөмтәле эш төрҙәренең береһе булып тора. Ул уҡыусы өсөн дә, уҡытыусы өсөн дә ижади эш. Бындай күнегеүҙәргә В.Л. Скалкин уҡыу дискуссияһын һәм комментарий биреүҙе индерә.

Дискуссия үткәреү, фекер алышыу дәрестәрен ойоштороу ябай дәрестәрҙән айырыла, уны үткәреү, беренсенән, әҙерлек талап итә. Икенсенән, уҡыусыларҙың һүҙлек запасы булырға тейеш. Өсөнсөнән, тема аңлайышлы һәм уҡыусыларға таныш булыуы шарт.

Дискуссия түбәндәге өлөштәрҙән тора:

– тема;
– экспозиция;
– һөйләүгә этәргес (стимул);
– йүнәлеш биреүсе һорауҙар;
– терәк һүҙҙәр;
– уҡыусыларҙың реакцияһы.

Темаларҙы тормоштан алып була. «Спорт яңылыҡтары», «Ил яңылыҡтары», «Салауат Юлаев» исемендәге хоккей клубының сығыштары», «Сәләмәт тормош алып барыу», «Минең буласаҡ һөнәрем», «Компьютерҙың файҙаһы һәм зыяны», «Яратҡан фильмым», «Яратҡан артисым», «Йәштәр ниндәй музыка ярата?», «Миңә оҡшаған телетапшырыу», «Исемең матур – кемдәр ҡуйған?» һ. б. темалар буйынса иркен һөйләшеү алып барып була. Уҡытыусы дискуссия темаһының тәрбиәүи әһәмиәте булырға тейешлеген дә күҙ уңынан ысҡындырырға тейеш түгел.

Мәҫәлән, «Мәҙәниәт яңылыҡтары» темаһы буйынса республикалағы билдәле артистарҙың ижады тураһында

һөйләшергә мөмкин. Уҡыусылар бигерәк тә йәш йырсыларҙы яраталар, ҡалала булған сараға күмәкләп барып ҡайтҡас, һөйләшһәң, бигерәк тә ҡыҙыҡлы. Йыш ҡына темаларҙы уҡыусылар үҙҙәре тәкдим итә. Ҡалалағы, илдәге ваҡиғалар уларҙы урап үтмәй, был осраҡта алдан әҙерләнмәгән фекер алышыу килеп сыға.

Дәрестең экспозиция өлөшөндә уҡыусыларға берәй ваҡиға тураһында ҡыҫҡа ғына хәбәр тәкдим ителә, яҙма күрһәтелә һ. б. Уҡыусыларға таныш булған, алдан әҙерләнмәгән дискуссиялар ҙа ойошторол була. Уҡыусыларҙың тормош тәжрибәһенә таянырға кәрәк, сөнки улар үҙҙәренең фекерен дәлилдәр ярҙамында иҫбатларға тейеш. Мәҫәлән, «Миңә фильм оҡшаманы» икән, мотлаҡ рәүештә «Ни өсөн оҡшаманы? (оҡшаны)» һорауы килеп тыуа. Яуапты, әлбиттә, дәлилләү мотлаҡ.

Стимул телмәр реакцияһын тыуҙыра. Стимул бик көслө йәки күтәрелгән проблеманың ҡыҙыҡһыҙ булыуы бәхәс, фекер алышыуға ҡыҙыҡһыныуҙы кәметергә мөмкин. Стимул булып башҡорт телендә дөрөҫ итеп һөйләшергә өйрәнеү беренсе урында тора. Уҡыусының үҙен шәхес, коллективтың бер өлөшө итеп тойоу хисе лә бик әһәмиәтле.

Уҡытыусы һорауҙар ярҙамында йүнәлеш бирә, уларҙы алдан әҙерләй. Ҡыҙыҡ булмаған проблемаларҙы ла уҡытыусы һорауҙар ярҙамында йәнләндерә ала. Йыш ҡына фекер алышыу барышында көтөлмәгән йүнәлештә китеп барыуы, һорау килеп сығыуы мөмкин. Бынан ҡурҡырға ярамай, уҡыусыларҙы тыйыу ҙа файҙа бирмәй, сөнки үҙ-үҙенә һәм уҡытыусыға ҡарата ышаныс юғала. Уларға һорауҙар ярамында йүнәлеш биреп була.

Терәк һүҙҙәр һүҙ байлығы етмәгән осраҡта ярҙам итә, уҡыусыларҙың фекерен формалаштырырға йәки тейешле йүнәлешкә ебәрергә мөмкин.

Телмәр реакцияһы төрлө булырға мөмкин:

1) ҡыҫҡа репликалар;

2) диалогик телмәр;

3) монологик телмәр.

Уҡыусыларға кемгә булһа ла һорау менән мөрәжәғәт итергә рөхсәт ителә. Тематик дискуссия үткәреү

барышында дәрескә ҡунаҡтар саҡырырға ла мөмкин. Тарих уҡытыусыһы, яҙыусылар, мәктәп администрацияһы вәкиле һ. б. уҡыусылар менән фекер алышыуҙа ҡатнаша ала.

Иң өндәшмәҫ уҡыусы ла бер тапҡыр уңышлы сығыш яһаһа, икенсе тапҡыр мотлаҡ рәүештә фекер алышыуҙа ҡатнашасаҡ.

Сер түгел, бөгөн дәрестәрҙең күбеһе уҡытыусы менән уҡыусының диалогына ҡоролған. Дискуссион эш иһә уҡыусыларға киләсәк тормош өсөн бик әһәмиәтле, сөнки улар дөрөҫ аралашырға, үҙ фекерҙәрен яҡлай белергә, иптәштәрен иғтибар менән тыңларға өйрәнәләр, улар шәхес булараҡ та үҫеш алалар. Һәр уҡыусы низер һөйләй, нимәнелер иҫбат итә, ә нимәнелер, киреһенсә, инҡар итә, нимәгәлер үҙ мөнәсәбәтен, баһаһын белдерергә тырыша.

Ҡайһы осракта яуаптарҙың уҡытыусының йәки иптәштәренең һорауҙарына тап килмәүе лә мөмкин, ләкин ул һөйләй, теле асыла. Был ваҡытта уны туҡтатмай, иғтибар менән тыңлау мөһим. Уҡыусының күңеленә юл уны һөйләтеү һәм иғтибар менән тыңлау аша һалына. Телмәр хаталарын да бик һаҡ һәм йомшаҡ ҡына төҙәтергә кәрәк.

Уҡыусылар ошо рәүешле эшләргә өйрәнһә, дебаттар үткәреүгә күсергә мөмкин.

© Батталова Т.З., 2024

**УДК 81-2**

***Бахтиярова Альфира Нурисламовна,***
*канд. филол. наук, доцент,*
*УУНиТ, г. Уфа, РБ*

## Особенности перевода религиозных текстов с арабского на башкирский язык

История развития всех языков, как известно, связана с такими объективными явлениями, как заимствование иноязычной лексики. Это относится и к истории башкирского языка.

Из громадного пласта иноязычных заимствований в башкирском языке ключевое место занимают слова и словосочетания, из арабского языка. Процесс заимствований имеет многовековую историю и берет свое начало с конца X века, когда народы Поволжья и Урала приняли ислам и арабскую графику письма. Последнее просуществовало вплоть до 30-х годов XX столетия как основной алфавит во всех учебных заведениях для обучения населения больших территорий Российской империи. На арабском алфавите велось делопроизводство, на нем писали ученые, писатели, он служил средством общения с мусульманскими странами Востока. В национальной библиотеке им. З. Валиди имеется огромное количество печатных изданий того времени, многие из которых еще предстоит изучить и осмыслить, ведь в них заключена история наших предков, нашей страны. Практическое же использование арабских букв в письме продолжалось вплоть до половины 50-х годов нашего столетия. Об этом красноречиво говорят солдатские письма – треугольники наших земляков – башкир с фронтов Великой Отечественной войны, написанные арабскими буквами.

Арабские заимствования в башкирском языке используются как в разговорной речи, так и в литературных произведениях, особенно в старинных. Заимствованные слова можно разделить на следующие группы:

1. Слова, отражающие религиозную тематику: *Алла, дин, хадж, тәсбих и т.д.*

2. Учебно-методические, просветительного содержания: *кыйраәт, инша (сочинение, изложение), имлә (орфография), мәғәллим, мәктәп, мәҙрәсә, дәрес, имтихан, тәғлим, тәдрис и т. д.*

3. Слова, относящиеся к области науки: *тәбиғәт, һәндәсә (геометрия, инженерное дело), сарыф, нәхү (синтаксис), хисап, матбуғат, мөхәррир и т.д.*

4. Общественно-политические термины: *ижтимағи, иктисади, сәйәсәт, дәүләт, идара, хөкөм, казый и т.д.*

5. Обиходно-бытовые слова: *ғаилә, халык, бина, кәлимә, хат, мәктүб, мөхәббәт, ҡабилә и т.д.*

6. Военная и медицинская терминология: *хәрби, ғәскәр, табиб, дауа, шифа и т.д.*

7. Слова абстрактного значения: *ихтыяр, иғтибар, мәғлүм, мөнәсәбәт, мөстәкил и т.д.*

8. Имена собственные: *Абдулла, Абдрахман, Әхмәт, Мәхмүт, Кәрим, Зариф, Хәсән, Зәки, Гәзизә, Әминә, Сабира и т.д.*

Наибольшее число заимствований составляют арабские слова и словосочетания, в меньшей степени – персидские. Если графически при письме использовались все 28 арабских согласных, то в лексическом плане этого сказать нельзя. Дело в том, что арабский и башкирский языки из разных групп языков. Если первый – это типичный представитель семитской группы, то второй – из тюркской группы языков, отличающихся как по фонетическим, так и лексическим особенностям. Семитские языки, куда входят вавилонский, арамейский, языки Эфиопии, иврит, мальтийский и некоторые другие языки, представителям тюркской группы, в частности, башкирам, непонятны несмотря на то, что в башкирском языке активно используется значительное число арабских слов.

Лексический состав любых сочинений нашего недавнего прошлого (делопроизводство, научная и художественная литература, поэзия и даже обычные бытовые письма, написанные на арабской графике) неизменно представлял собой сочетание арабских, персидских и родных слов в различных пропорциях. Причем частота использования арабо-персидских слов в лексиконе напрямую зависела не только от эрудиции пишущего и назначения письма, но и от эпохи, в которой жил автор.

Отсутствие единых и стандартных грамматических правил письменности на протяжении многих веков не только у арабов, но и жителей, заимствовавших часть арабской лексики, приводило к разнообразию письма

одних и тех же слов и словосочетаний. Язык старотюрки на арабской графике, под которым некоторые ошибочно понимают арабский язык, абсолютно непонятен также арабам. Вплоть до начала XX в. арабские заимствования употреблялись не только из-за недостатка собственно башкирских слов, но и вместо них, затрудняя тем самым его понимание. Несмотря на то, что большое число таких заимствований за последние полвека вытеснено собственно башкирскими словами, остается еще множество арабских слов в лексике башкирского языка. А для иллюстрации приведем несколько примеров старотюркского языка из различных областей публикации на арабской графике: «Мөкәлләфтәрҙән садыр булған ғәмәлдәрҙең мөғтәбәр булыуҙары, дәрәжә үә мәртәбәләре әкәмдәрҙең ниәттәренә күрәлер»? – (Ризаитдин бин Фәхретдин, 1916 г. Из книги: «Жәүәмигул-кәлим« шәрхе).

Как видим, данное предложение состоит, включая частицу үә «и», из 12 слов, из которых 8 слов – арабские заимствования:

1. Мөкәлләф – «өлкән, оло; етлеккән, төплө« – взрослый, зрелый, ответственный, дорогой;

2. Саадир – «сьгккан; сыға торған, ебәрелә торған» – выходящий, исходящий;

3. Ғәмәл – «эш, хеҙмәт, хәрәкәт, ғәмәл» – работа, труд, действие, занятие, поступок, акт;

4. Мөғтәбәр – «хөрмәтләнә торған, хөрмәтле, арҙаклы» – уважаемый;

5. Дәраджә – «дәрәжә, күләм, ранг» – степень, звание, квалификация, ступень и т. д [1: 25–40].

При анализе особенностей перевода религиозных текстов с арабского на башкирский язык на основе перевода Корана, основное внимание было уделено изучению арабских заимствований. Коранический текст имеет особенности, которые отличают его от всех / остальных литературных текстов. Арабское предложение в тексте Корана может вызвать на ум различное восприятие, и это существует по сей день.

Очень важным фактором при переводе Корана является общее знание исламской культуры и исламского религиозного законодательства.

Специфической особенностью башкирского перевода является также возможность транскрибирования коранической лексики на базе башкирского алфавита, ведь последний по фонетическим особенностям является самым близким к арабскому (среди других языков) алфавитом.

Таким образом, традиционно общепринятым считается, что структура аятов (т.е. стихов) Корана и их смысловая значимость настолько совершенна, своеобразна и многолика, что дословному переводу не подлежит, и возможным представляется лишь его смысловое толкование.

**Литература**

1. Суяргулов Н.А. Особенности языка и стиля башкирского перевода Корана: дисс. ... канд. филол. наук. Уфа, 2004. С. 20-45.

2. Бахтиярова А.Н. Арабские заимствования в лексической системе русского языка / А.Н. Бахтиярова, Ф.Г. Фаткуллина // Фундаментальные исследования. 2015. № 2-27. С. 24–28.

© Бахтиярова А.Н., 2024

**УДК 821.512.141**

***Буранбаева Әминә Рафик ҡыҙы***

*тәрбиәсе, Баланы үҫтереү үҙәге –*

*«Айыуҡай»балалар баҡсаһы, Баймаҡ к., БР*

## Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә башҡорт халыҡ әкиәттәренең әһәмиәте

Балаларҙың телмәрен үҫтереү балалар баҡсаһында дөйөм уҡытыу-тәрбиәләү эшенең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора. Шуның өсөн дөрөҫ телмәр үҫтереү, баланың туған теленә ҡыҙыҡһыныу уятыу – тәрбиәселәрҙең төп бурысы.

Телмәр - төп аралашыу сараһы һәм фекерләү формаһы. Дөрөç телмәр төҙөй белеү – мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың төрлө яҡлы үçеше өсөн мөһим шарт. Ошо осорҙа баланың аң кимәле үçешә, тәүге күҙаллауы барлыҡҡа килә, тирә-йүндәге ябай бәйләнештәр тураһында белеме формалаша. Баланы тирә-йүн менән таныштырыу телмәр үçтереү менән бергә алып барыла.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үçтереүҙә, һүҙлек запасын байытыуҙа, һүҙбәйләнештәр төҙөүҙә, фекерләү ҡеүәһен, логик фекерләүен үçтереүҙә әкиәттәр ярҙамға килә.

Хәҙерге ваҡытта кескәйҙәрҙе башҡорт халыҡ әкиәттәре менән таныштырыу,халыҡ ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн заман талаптарына тап килгән технологиялар бик күп. Шундай технологияларҙың береһе булып әкиәт терапияһы тора.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре – башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады әçәрҙәре, фольклор проза төрө. Үҙенең әкиәттәрендә башҡорт халҡы ысынбарлыҡты милли сифатта тойоуын, тирә-йүнгә мөнәсәбәтен әйтеп бирергә, үҙ балаларына тормош аҡыллылығын өгөт-нәсихәт аша бирергә теләгән, әхлаҡ, ғаилә, көнкүреш һорауҙарын күтәргән.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре түбәндәге төрҙәргә бүленә:

**1.Хайуандар тураһында әкиәттәр**

Был әкиәттәрҙең персонаждары – бүре, төлкө, айыу, ҡырмыçҡалар һ. б. Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең ҡайһы бер сюжеттары («Алдаҡсы төлкө», «Арыçлан.бүре һәм төлкө», «Төлкө, өйрәк һәм тәлмәрйен тураһында») үҙендә ата-бабаларыбыҙҙың боронғо ышаныстарын һәм йолаларын һаҡлаған боронғо дәүерҙә башҡорттар айыуҙы тотем (табыныу) хайуаны тип хөрмәтләүгә нигеҙләнгән. Ҡуяндың боронғо тотемик һыҙаттары «Йомарт ҡуян», «Ҡуян һәм арыçлан» әкиәттәрендә күренә. Бында ҡуяндың йомартлыҡ, изгелек һәм мутлыҡ яғынан кәүҙәләнеше уның ауыр минуттарҙа кешеләрҙең һәм хайуандарҙың ярҙамсыһы икәне күренә.

Хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре түбәндәге жанрҙарға бүленә: этимологик аңлатмалы («Урал батыр»), классик, туҙға яҙмаған (алдауыс) әкиәттәр. Тау, күл, йылғаларҙың килеп сығышы тураһындағы этимологик элементлы әкиәттәр бар. Мәҫәлән, «Меңйәшәр» әкиәтендә алдашҡаны өсөн әбейҙе ҡыҫыр бейәнең ҡойроғона бәйләгәндәр. Әбейҙең башы тейгән ерҙә – тауҙар, арҡаһы тейгән ерҙә күлдәр барлыҡҡа килгән.

**2.Батырҙар тураһында әкиәттәр.**

«Алпамыша һәм Барсынһылыу», «Ете ағай-эне һәм апай Айыуғолаҡ», «Аҡъял батыр» һ. б. әкиәттәр. Бындай башҡорт әкиәттәренең үҙенсәлеге булып геройҙар батырлығының кәм кимәлдә сағылышы, уларҙың эш-хәрәкәттәре ваҡыт ағымына буйһонмауы тора. Батырҙарҙың дошманы – мифик йәндәр, аждаһа, бәрей.

**3.Тылсымлы әкиәттәр**.

Был төркөмгә «Йомғаҡ», «Йәш һунарсы һәм мәскәй», «Юлдыбай батыр» кеүек әкиәттәр инә. Тылсымлы әкиәттәрҙә башҡорттарҙың ҡайһы бер хайуандар һәм ҡоштар менән ҡан туған булыуҙарына, теләгән саҡта хайуанға әйләнергә мөмкин булыуына ышаныу кеүек тотемистик ҡараштары сағылған.

**4.Көнкүреш әкиәттәре**.

«Уҫал атай», «Ҡарт һәм улы», «Ике алдаҡсы», «Әбйәлил» кеүек әкиәттәр. Көнкүреш әкиәттәре персонаждары – ҡатын, ир, үгәй әсәй, үгәй ҡыҙ, бур һ. б. Был әкиәттәрҙә милли колорит, халыҡ көнкүреше һыҙаттары күренә. Ҡатнашыусылар һунарсылыҡ, көрәш ,һыбай йөрөү менән шөғөлләнә.

Әкиәт бөтә халыҡтарға хас. Элек-электән килгән халыҡ ижадының бер төрө.Уны ололар ҙа, балалар ҙа яратып уҡый. Әкиәт һәр ваҡыт баланы тик яҡшылыҡҡа ғына әйҙәй, дуҫ булырға өйрәтә. Психологтар ныҡышмалы рәүештә ошо терапия төрөн ҡулланырға кәңәш итә. Әкиәттәр, беренсенән, баланың фантазияһын һәм фекерләү сослоғон үҫтерә.

Икенсенән, бала яҡшы менән яманды сиген билдәләп, үҙ булмышында нимәнең һәйбәт һәм насар икәнлегенә

асыҡлыҡ индерә. Бик йыш әкиәт тыңлап үҫкән бала ҡыҙыҡһыныусан, кеше менән еңел аралашыусан һәм дөрөҫлөктө ихтирам итеүсе булып үҫә. Ҡағиҙә булараҡ, бала төрлө хәл-ваҡиғаларҙың дөрөҫлөктөң еңеүе менән тамамланырына ышаныс менән үҫә.

Өсөнсөнән, хәтер яҡшыртыу өсөн әкиәттәр иң уңайлы юл икән. Баланың ятҡан әкиәт геройҙары менән уйынсыҡ исемдәрен атауы, улар менән төрлө уйындар уйнап сығарыуы шуға дәлил.

Баланың телмәрен үҫтереүҙә әкиәт терапияһын ҡулланыу бик отошло ысул булып тора. Был йүнәлеште кескәйҙәр төркөмө балалары менән башлау бик отошло. Иң тәүҙә үҫтереүсе мөхитте төрлө битлектәр, башлыҡтар, кейем элементтары, бармаҡ театры, өҫтәл театры, сағыу һүрәттәр һәм башҡалар менән тулыландырыу мотлаҡ. Әкиәттәрҙе, эшмәкәрлек темаларын тәрбиәләнеүселәрҙең үҫеш кимәлдәренә, ҡыҙыҡһыныуҙарына, йәш үҙенсәлектәренә ярашлы һайлап алына. Мәҫәлән, белем биреү эшмәкәрлеге барышында бала үҙен әкиәт донъяһына эләккәндәй хис итһен өсөн тылсымлы таяҡ, балаҫ, әкиәт геройҙарын, ҡоштар, тәбиғәт тауышы фонограммаһын ҡулланыу отошло. Шулай уҡ төрлө режим ваҡытындағы эшмәкәрлектә театр атрибуттарын ҡулланып балаға таныш булған әкиәтте сәхнәләштереү, ҡыҙыҡлы уйындар уйнау, шиғыр, йырҙар өйрәнеү, күрһәтмә материалдар ҡулланыу телде үҙләштереүгә булышлыҡ итә, баланың һөйләү һәләтен үҫтерә. Әкиәт терапияһын ҡулланыу балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә бик ҙур һөҙөмтәләр бирә. Балалар бер-береһен тыңларға, эҙмә-эҙлекле итеп тасуирлап һөйләргә өйрәнә, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтергә һәм телмәрҙе нығытырға өлгәшә. Башта балалар йүнәлешле һорауҙар, төрлө схемалар ярҙамында әкиәт ижад итһә, аҙаҡ улар күп осраҡта бер ниндәй ярҙамһыҙ бәләкәй әҫәр ижад итергә лә дәртләнә. Әкиәт терапияһы алымдары баланың телмәрен, ижад итеү һәләтен үҫтерә, тасуири саралар аша (мимика, интонация, ым-ишара) образға инеү һәләтен формалаштыра, геройҙың эмоциональ торошон аңларға һәм

тойорға, башҡа персонаждар менән ролле ғәмәлгә инергә өйрәнә.

Балаларҙың телмәрен үҫтереү өсөн экиәттәрҙе төрлө ысул менән һөйләп була:

– -Әҙер экиәт менән эшләү.

– Балалар йәки өлкәндәр тарафынан уйлап сығарылған экиәт менән эшләү.

Бала өсөн экиәт – ул фантазия, уйҙырма ғына түгел, ул уның өсөн ысынбарлыҡ. Әкиәт аша тормош һәм үлем, яратыу, мөхәббәт һәм асыу, күрә алмау, ҡайғыртыусанлыҡ хистәре менән таныштыра алабыҙ. Был хистәр балалар өсөн экиәти, уларҙың аңдары өсөн аңлайышлы, әммә ләкин әхлаҡ тәрбиәһе ысынбарлыҡ булып ҡала.

Әкиәт терапияһын балалар ҙа, өлкәндәр ҙә ҡуллана ала, сөнки уның йәш сиге юҡ: һәр бер йәшкә ҡарата ҡулланыла алған экиәттәр, миф, легенда (риүәйәттәр), мәҫәл,йырҙар бар.

Беҙ биш төрлө экиәт менән эш итә алабыҙ:

1. Әҙәби экиәттәр (борон замандан тупланған экиәттәр).

2. Дидактик экиәттәр (педагогтар ижад итә, унда абстракт символдар ҡулланыла: һандар хәрефтәр һ. б., унда улар ысынбарлыҡҡа әйләнәләр, экиәт тормошонда йәшәйҙәр).

3. Психокоррекцион әҫәрҙәр (баланың үҙ-үҙенең тотошона йомшаҡ йоғонто булдырыла).

4. Психотерапевтик экиәттәр (бында кешеләрҙең проблемаһы тураһында һөйләнелә һәм бындай экиәттәрҙә бала үҙен таный ала. Был экиәттәрҙе беҙ үҙебеҙ яҙа алабыҙ).

5. Медиатив экиәттәр (был экиәттәрҙә ыңғай образдар ғына ҡулланыла, башҡа экиәттәрҙән айырмалы рәүештә бында тиҫкәре образдар, геройҙар, конфликттар юҡ).

Һәр бер шарттар, ситуациялар өсөн кәрәкле экиәттәр һайланыла йәки махсус экиәт яҙыла. Төрлө экиттәр төрлөсә балаға еткерелә: ул экиәтте анализлау, һөйләү, ҡурсаҡ театры, драматизациялау, рәсем яһау һәм башҡаларҙы ҡуллана алабыҙ.

Әкиәттәрҙе төрлө ваҡиғаларға,ситуацияларға ҡаратып һөйләп була. Мәҫәлән: мәктәпкә адаптация, урлашыу, ашарға теләмәү, һүҙ тыңламау һ. б.

Әкиәт уҡығанда, балаға иғтибар итергә кәрәк, тыңлаймы ул, әкиәт оҡшаймы, уҡып бөтөргәндән һуң әкиәт тураһында һөйләшергә кәрәк. Һорауҙар бирәбеҙ, үҙебеҙҙең мөнәсәбәтебеҙҙе белдерә алабыҙ. Шулай уҡ бала ла үҙенең фекерен әйтергә тейеш, бала күберәк үҙе һөйләргә теләһә, беҙ уға ундай мөмкинлек бирергә тейешбеҙ. Әгәр ҙә бала һөйләргә теләмәһә, беҙ ҡаршы килергә тейеш түгел. Һуңыраҡ ул үҙ һәләтенә ҡайта, үҙе һөйләй, беҙ кәрәкле моментты эләктереп алырға тейешбеҙ. Шунан һуң әкиәткә ҡарата рәсем эшләргә тәкдим итәбеҙ, үҙебеҙ ҙә эшләй алабыҙ. Был сара баланы тынысландыра. Унан һуң беҙ рәсем тураһында фекер алышабыҙ. Был рәсемдә беҙ, әкиәттең эстәлегенә ҡарап, баланың үҙенә яҡын, актуаль булған проблеманы күтәрә алабыҙ, шуға ҡарата һорауҙар бирәбеҙ. Һуңғы этап – ул әкиәтте драматизациялау. Балаларға роль бирәбеҙ, ул теге йәки был ролде үҙе һайлаһа, бигерәк яҡшы була. Һуңынан һығымталар сығарып, әкиәтте анализлайбыҙ.

Шулай итеп, балалар телмәрен үҫтереүҙә башҡорт халыҡ әкиәттәренең әһәмиәте бик ҙур. Әкиәт терапияһы беҙгә бик күп мөмкинлектәр асырға ярҙам итә, быны беҙ үҙ эшебеҙҙә дөрөҫ итеп файҙаланырға тейешбеҙ, балаға әкиәттәр аша ысынбарлыҡ донъяны танып белергә өйрәтеү – беҙҙең бурысыбыҙ.

**Әҙәбиәт**:

1.Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 1-се китап. Хайуандар тураһында әкиәттәр. Тылсымлы әкиәттәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. 374 б.

2.Аслаев Т.Х. Әкиәттәр. Өфө: Китап, 1996. 320 б.

3.Аслаева Ғ.Ғ. Телмәр һәм зиһен. Өфө, 2005. 96 бит.

© Буранбаева Ә.Р., 2024

**УДК 392.7**

***Валиева Назгуль Рустамовна,***
***Гатина Альбина Галинуровна,***
*учителя английского языка,*
*МАОУ «ПМШ № 23» г. Стерлитамак, РБ*

# Межкультурная коммуникация: Влияние менталитета на культурное взаимодействие народов

Как все мы знаем, важнейшей основой функционирования языка является социум (в нашем случае нация), основой которого выступает менталитет. С усвоением языка человек начинает усваивать и значительную часть глубинно-психических установок социального менталитета, т.е. когда ребенок начинает учить язык, со временем он начинает усваивать порядки своего народа. Общество с устойчивым набором ментальных установок способно отражать их на своих членах [1: 187].

В то же время реализация ключевых функций менталитета, а также передача информации от поколения к поколению осуществляется главным образом через один из основных средств человеческой коммуникации – язык. Язык является не только средством взаимодействия, но и мощным инструментом, формирующим культурные идентичности и даже структурирующим наши мыслительные процессы. Он тесно переплетён с культурой и активно участвует в формировании как индивидуальности, так и общества в целом.

В данной статье применяется ряд методов исследования, включая анализ современных публикаций и учебных материалов в областях психологии, философии, лингвистики и художественной литературы. Авторами также использован опыт обобщения предшествующих исследований, а также методы психолого-педагогической диагностики, такие как наблюдение и беседа.

В условиях глобализации современные люди всё чаще вступают в контакт с культурами других стран. Это

приводит к взаимному обогащению и изучению культурного разнообразия. В то же время усиливается взаимосвязь и взаимозависимость различных стран, которые различаются не только языком, но и традициями, географическим контекстом, менталитетом и другими аспектами. Однако это межкультурное взаимодействие также выявляет множество проблем, связанных с общением между людьми из разных культур. Часто возникают трудности, вызываемые нюансами перевода, недостатком знаний о культурных традициях и этикете, а также различиями в языковых привычках.

Эти коммуникационные барьеры становятся особенно заметными как в вербальной, так и в невербальной коммуникации. Например, многие люди не осознают, что невербальные средства общения, такие как жесты, интонация, мимика и дистанция между собеседниками, могут существенно повлиять на восприятие и понимание сообщения. Каждая культура имеет свои особенности в невербальном общении, и их игнорирование может привести к недопониманию и конфликтам.

Т. Килмөхәмәтов – күҙәтеүсән яҙыусы. Ул, прозаик булараҡ, кешене, уның уй-кисерештәрен ситтән тороборaҡ, битарафыраҡ позицияла һүрәтләй һымаҡ. Йәки нейтраль хикәйәләү алымын ҡуллана, күберәк өсөнсө заттан тасуирлай. Яҙыусы геройҙарының күңел торошон, психологик кисерештәрен уларҙың хәрәкәте аша еткерергә тырыша. Был ижадсының яратҡан алымы һәм ул традицион проза вәкиле булып ҡала, былдай прозаның киң мөмкинлектәрен, бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡтарын рәхәтләнеп файҙалана.

Т. Килмөхәмәтовтың геройҙары тормошсан, күп ҡырлы. Араларында төрлө социаль төркөм, төрлө быуын вәкилдәре бар. Уларҙы яҙыусы төрлө-төрлө ситуацияларҙа: йә трагик, йә драматик, йә еңелсә шаярып, юмористик пафос менән һүрәтләй. Шул уҡ ваҡытта уларҙың бөтәһе лә тормош йөгөн төпкә егелеп тартҡан, үҙ яҙмышынан зарланырға яратмаған, ҡатмарлы тормоштан йәм, көс табып йәшәгән, уның күркәмлеген күрә белгән, дөрөҫлөк

һәм матурлыҡ тантанаһы өсөн ҡыйыу көрәшкән, кәрәк икән, һуңғы сиккә барырға әҙер тороусы ябай кешеләр.

«Т. Килмөхәмәтовтың стиленә эске күңел йылылығы, юмор, һөйләү теленең мөләйем моң-интонацияһы хас. Ғөмүмән, лирик яҙыусы булараҡ, Т. Килмөхәмәтов һүҙҙең хәҙерен белеп, мәғәнә нескәлектәрен, ритмик-интонацион аһәңен тойоп, ишетеп эш итеүе менән айырылып тора. Шулай ҙа тел һәм стилендәге был ыңғай һыҙаттарға Тимерғәле Килмөхәмәтов, бөтәһенән элек, халыҡтың һөйләү телен яҡшы тойоуы, уның мөмкинлектәрен киң файҙаланыуы аша ирешә тиһәк, хата булмаç кеүек», – тип билдәләй Г. Әхмәтйәнова [9].

Автор хикәйәләүе, фразеологизмдар, төрлө хикмәтле көләмәстәр һәм ҡарһүҙҙәр менән һуғарылған персонаждар телмәре бер-береһенә үтеп инеп, әçәрҙәрҙең ҡабатланмаç йөҙөн, моңон барлыҡҡа килтерә.

Фразеологизм – лексик һүрәтләү сараһы булараҡ, шаҡтай ҡатмарлы һәм күп төрлө күренеш. Улар бер нисә һүҙҙән торған, лексик яҡтан өлөштәргә бүленмәгән һәм семантик яҡтан бер бөтөн булған, бер генә мәғәнә аңлатҡан һүҙ ҡушылмаларын тәшкил итәләр. Бөтә төр фразеологизмдар ҙа күсмә мәғәнәгә эйә һәм һүрәтле образ хасил итеүҙә мөһим роль уйнай.

Хәҙерге башҡорт телендә фразеологик берәмектәр килеп сығышы, структураһы һәм стилистик биҙәктәре яғынан күп төрлө. Ғалимдар уларҙы төрлөсә төркөмләйҙәр. Мәçәлән, профессор Ж.Ғ. Кейекбаев фразеологик берәмектәрҙе түбәндәге төркөмдәргә бүлә:

а) ябай фразеологик ҡушылмалар (*донъя көтөү, сабыр итеү, һөрән һалыу, ҡолаҡ һалыу, ағас ауыҙ, ағылыйға тағылый, баҙары юғары, балауыҙ һығыу, ер күреү, елдәр иçкән, күҙ һалыу, бот сабыу, рәт китеү, фатиха ҡылыу, яу ҡайтарыу*);

б) идиоматик әйтемдәр (*кәкре ҡайынға терәтеү, табан ялтыратыу, теш ҡайрау, ағас атҡа атландырыу; ағай оло, мин ҙур; арҡыры ағасты буйға бороп һалмаç; баçҡан ерҙә ут сығарыу; егет тиһәң дә ярай; күҙ менән ҡаш араһында; ҡойроҡто һыртҡа һалыу; майлап*

*ташлаһаң да, эт еймәç; оло башты кесе итеп; танауға еç инеү*);

в) мәҡәлдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр (*Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ. Иҙел күрмәй итек сисмә. Көйҙөң оҙоно яҡшы, һүҙҙең ҡыçҡаһы яҡшы*) [4: 208–229].

З.Ғ. Ураҡсин фекеренсә, фразеологик берәмектәргә тик күсмә мәғәнәгә эйә булған нығынған һүҙбәйләнештәр генә инә: *биш былтыр, мал мөгөҙөнә элерлек, серек аҡыл һатыу* һ. б. Тимәк, мәҡәлдәр, әйтемдәр, ябай фразеологик ҡушылмалар һәм тапҡыр һүҙҙәр фразеологик берәмектәр рәтенә инмәй [7: 3-11].

Ғ.Ғ. Сәйетбатталов «Башҡорт теле. Стилистика» исемле хеҙмәтендә идиоматик берәмектәр һәм фразеологик әйтемдәр тигән ике төшөнсәне айырып күрһәтә: «Бик йыш ҡына ике һүҙ йәнәшә килеп бер төшөнсә, мәғәнә аңлата. Был һүҙҙәрҙең береһен дә бүтән һүҙҙәр менән алмаштырып булмай, йәғни улар даими була. Бындай һүҙ теҙмәләре билдәле бер телдең тарихына, шул телдә һөйләшкән халыҡтың көнкүрешенә, тормошона, ғөрөф-ғәҙәтенә, традицияларына тығыҙ бәйләнгән. Был һүҙ теҙмәләре идиома йәки идиоматик берәмектәр тип йөрөтөлә. Идиомаларҙың мөһим үҙенсәлектәре шунда: уларҙың компоненттары бер-береһенә мәғәнә яғынан тығыҙ бәйләнә, айырым киçәктәргә тарҡалмай, икенсе бер телгә һүҙмә-һүҙ тәржемә ителмәй. Мәçәлән, *күңел төшөү, күҙ төшөрөү, аяҡҡа баçыу, эс бошоу, баш әйләнеү, туҙға яҙмағанды һөйләү*. Икенсе төрлө әйткәндә, нығынған һүҙбәйләнештәр. Фразеологик әйтемдәр идиоматик берәмектәргә ҡарағанда тарҡауыраҡ була, бер-береһенә ирекләрәк бәйләнә. Уларға әйтемдәр, төҙөлөштәре артыҡ ҡатмарлы булмаған мәҡәлдәр инә» [8: 17-18].

Фразеологик берәмектәр художестволы әҙәбиәттә киң ҡулланыла. Әҙәби әçәрҙәрҙә персонаждарҙы индивидуалләштереүҙә, уларҙың тормошҡа ҡарашын, аҡылын сағылдырыуҙа фразеологик берәмектәр төп роль үтәйҙәр. Миçалдар: *Ислам Әбделғәниевичтың шул рәүешле ҡапыл үлеп ҡалыуы колхоздың бөтә биш ауылын* ***аяҡҡа баçтырҙы*** («Ғүмер бирәү, донъя мәңгелек»). *Оҙаҡ йылдар*

*лесник булып эшләп, яуызлығы, **каты бәғерлелеге** менән халыкты кан илаткан, «Рәхмәй кулак» тигән даны киткән әҙәм* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Шул сак машина тәҙрәһенән, **күҙ асып йомғансы**, Исламдың йөҙө салынып калғандай булды* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Сәйерерәк килеп сыккан әлеге мәлдең сәбәптәрен **тел төбө** аша аңлатып бирә алыу-алмауын төшөнөргә теләгәндәй, беренсе секретарь каршыла ултырыусыларға күҙ йөрөтөп сыкты* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Бында бөтәһе лә **ал да гөл** түгел икәнлеген бөтәбеҙ ҙә күрәбеҙ* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Быға ғына акылы етерлек – **ел уйнап торған эт араны**_түгел башы* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Ана Ислам колхоз үҙәген кайҙа төҙөргә тип **баш вата*** («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). ***Баш вата торғас,** бер әмәл таптылар* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Карауыл карт менән Томан карттың **тел сарлағанын** тыңлап, күреп ултырыуы рәхәт тә, күңелле лә* («Берәҙәк»). *Ни өсөн тиһәң – **кыл өҙөрлөк тә хәлем** юк* («Кар яткан көн»). ***Эттән алып эткә һалып һүгәләр,** баш өҫтөндә корос пластинкалар шыжлай* («Кар яткан көн»). *Алғарак һонолдок та **телһеҙ калдык*** («Кар яткан көн»). *Руссаны **һыу һымак эсә*** («Турайғыр»). ***Күҙ асып йомғансы** коляскаға һикерҙем – **бөткән баш бөткән*** («Турайғыр»). *Ә ул **тел биҫтәһе** үҙенең әйткән һүҙен берәй сәғәттән бөтөнләй онотҡандыр ҙа* («Йәнкиҫәк»). *Тик уңарсы Санъярҙың **ете кат тире** аға* («Йәнкиҫәк»). ***Тай менгәндәй** була беҙҙең ауыл малайҙары* («Өҙөлгән моң»). ***Утка баҫкан бесәй төҫлө** өйөрөлөп тора торғайны кинйә улы Мортаза* («Өҙөлгән моң»). ***Ауыҙым менән кош** тотор сактарым уҙа, шикелле* («Ғүмерлек яра»). ***Фәрештәләрҙең амин тигән сағына** тура килеп торам әле* («Ғүмерлек яра»). *Һарай һымак йорт бөтөрөп керәләр, хужаның **түбәһе күккә тейер** инде тип тораһың* («Ғүмерлек яра»). ***Туйып һикереү** шул булалыр, ахырыһы* («Ғүмерлек яра»). ***Ай күрҙе, кояш_алды,** тигәндәй* («Ғүмерлек яра»). *Береһе – **ауыҙы менән кош тота*** («Ғүмерлек яра»).

Миҫалдарҙан күренеүенсә, фразеологизмдар үҙ алдына торғанда ла уй-тойғоға тәьҫир итерлек күсмә мәғәнә

айыштарына эйәләр. Йәнле һөйләү телендә һәм әҙәби текстарҙа уларҙың эмоциональ сифаттары бермә-бер артып китә.

Т. Килмөхәмәтов халҡыбыҙҙың образлы, тәрән мәғәнәле мәҡәл-әйтемдәрен урынлы файҙалана. Мәҫәлән: *Бөтәһе лә* ***ал да гөл түгелдер – ағы ла, ҡараһы ла барҙыр*** («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Уларҙың ҡайһы берҙәре,* ***ашарын – ашап, эсерен – эсеп*** *тигәндәй, ниәтләгән эштәрен теүәлләп донъя ҡуйғандыр* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *– Ни булһа, шул булыр! – Ислам киҫкен ҡул һелтәне. –* ***Күрәсәкте күрмәй, бәндә гүргә кермәй*** («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). *Уйын ҡатыш шаярыу шикеллерәк башланған эше ысынға әйләнде.* ***Уйындан уймаҡ сыға*** *тигәндәй* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). ***Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтә,*** *тиһәләр, ҡәберҙә лә ҡәҙимге көйөнсә ҡалаһың* («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). ***Ҡайғы ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй*** *шул* («Айсыуаҡ»). *Тора-бара беҙ өсәү булып киттек.* ***Берәүҙән икәү яҡшы, икәүҙән өсәү яҡшы*** («Турайғыр»). ***Иләмәгән-һуҡмаған, ҡайным һиңә бер күлдәк,*** *тигәндәй, ерле юҡты һөйләп торор икән кеше* («Ғүмерлек яра»). ***Бәхетленең ҡунағы бер юлы,*** *тигәндәй* («Ғүмерлек яра»). *Һәр кемдең –* ***өлөшөнә төшкән көмөшө*** («Ғүмерлек яра»). ***Эт һимерһә, эйәһен тешләй,*** *тигән мәҡәлде онотоп ебәрмәйек* («Ҡыҙылғы – Хоҙай бүләге»). *Ни тиһәң дә, үҙ башҡортоң.* ***Күршеңдең аты уҙғансы, үҙеңдең тайың уҙһасы,*** *тигәндәй* («Ҡыҙылғы – Хоҙай бүләге»). *Мартимъян Ивановичтың көтмәгәндә пәйҙә булыуы Ишмөхәмәткә,* ***бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына,*** *тигән кеүегерәк ҡабул ителде* («Ҡыҙылғы – Хоҙай бүләге»). ***Башлаған эш – бөткән эш,*** *тип юҡҡа әйтмәгәндәр* («Йәнкиҫәк»).

Үрҙә килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, Т. Килмөхәмәтов әҫәрҙәрендә мәҡәл-әйтемдәрҙең күбеһе бер һөйләм эсендә бирелә, мәҡәл-әйтемдәге фекер яҙыусы телмәрендә ижади үҫтерелә, шул рәүешле халыҡ теленең яҙыусы телмәре менән үрелешен күҙәтергә була. Был оҫталыҡтың үҙенсә бер балҡышы.

Шулай итеп, яҙыусы тыуҙырған образ һәм персонаждарҙың телмәре – халыҡсан, йәнле телмәр. Улар повесть йәки хикәйәне йәнлерәк итеп ебәрә, уҡыусының ҡыҙыҡһыныуын бермә-бер арттыра. Яҙыусы ваҡиғалар барған төбәккә хас һөйләш үҙенсәлектәрен дә, мәҡәл-әйтем кеүек тапҡыр һүҙбәйләнештәрҙе лә бик урынлы ҡуллана. Шул арҡала теге йәки был әҫәрҙең ышандырыу ҡеүәһе көсәйә.

Йомғаҡлап әйткәндә, Тимерғәле Килмөхәмәтов һүҙ менән бик оҫта эш итә. Йорт һалғанда оҫта кирбескә кирбесте ни тиклем белеп һалһа, яҙыусы ла һүҙ материалы менән шулай мөғәмәлә итә. Нәҡ шуға ла әҫәрҙәре үҙенә ылыҡтырып тора.

**Әҙәбиәт**:

1. Аҙнағолов Р.Ғ. Әҙиптәр ижады – рухи көс сығанағы (Т. Килмөхәмәтовтың «Әҙәбиәттең сағыу биҙәктәре» китабы тураһында) / Йәйғор төҫтәре. Ижади портреттар. Өфө: Китап, 2011. 190-195-се б-р.

2. Гәрәева Г. Бәҫле ижад (Т. Килмөхәмәтов прозаһы тураһында) // Ватандаш, 2011, № 12. 116-119-сы б-р.

3. Ҡунафин Ғ. Ижад сәменә тоғролоҡ (Т. Килмөхәмәтов ижадына күҙәтеү) / Замандарҙың рухи балҡышы. Өфө: Китап, 2006. 464–471-се б-р.

4. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө: БДУ, 2002. 208–229-сы б-р.

5. Килмөхәмәтов Т. Һайланма әҫәрҙәр. I том. Повестар, хикәйәләр, драма. Өфө: Китап, 2011. 648 бит.

6. Килмөхәмәтов Т. Һайланма әҫәрҙәр. II том. Әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, ижади портреттар. Публицистика. Әҙәби мираҫ. Өфө: Китап, 2012. 448 бит.

7. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1996. 3-11-се б-р.

8. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теле. III том. Стилистика. Өфө: Китап, 2007. 17-18-се б-р.

9. Әхмәтйәнова Г. Хикәйәләрендә шиғри моң бар (Т. Килмөхәмәтов әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәре тураһында) // Йәшлек. 2011. 24 май.

© Иҫәнғолова Г.А., 2024

**УДК 811.512.142**

***Кетенчиев Мусса Бахаутдинович,***
*профессор, заведующий кафедрой*
*карачаево-балкарской филологии*
***Жазаева Фатима Тахировна***
*магистрант, ФГБОУ ВО «Кабардино-Балкарский*
*государственный университет им. Х.М. Бербекова»,*
*г. Нальчик, Кабардино-Балкарская Республика, РФ*

## О структурно-семантических характеристиках карачаево-балкарских примет

Приметы относятся к одному из малых жанров устного народного творчества карачаевцев и балкарцев. Фольклористами они размещены в хрестоматийном издании «Карачаево-балкарский фольклор» под рубрикой «Ырысла, белгиле, илишанла, жоралаула» («Приметы, символы, признаки, предположения») [2: 410-428]. В литературоведческих работах данные высказывания выступают как маркеры этнокультурной идентичности [5]. Языковеды же прибегают к ним, обращаясь к архаической лексике [4], исследуя различного типа паремии [3] и концепты [1], а также фразеологические единицы [6; 7]. Несмотря на это, природа рассматриваемого феномена все еще не раскрыта до конца. По этой причине в данной работе предпринимается попытка осветить некоторые характеристики паремий, имеющих структуру простого предложения.

Карачаево-балкарских примет, структурированных по образцам простого предложения, насчитывается 60 единиц. Из них 24 имеют двухкомпонентную, т.е. подлежащно-сказуемостную структуру: *Атны башына ургъан ырысды* ‘Бить лошадь по голове – плохая примета’; *Отну суу къуюп*

*ёчюлтген ырысды* ‘Гасить огонь водой – плохая примета’; *Кечегиде чайыр чайнагъан ырысды* ‘Ночью жевать смолу – плохая примета’ и т.п. В такого рода конструкциях подлежащее выражается оборотами, ядерные конституенты которых представляют собой причастия прошедшего времени на *-гъан*, а сказуемое – именем существительным *ырыс* со значением ‘плохая примета; предрассудок, суеверие’. Причастия в подобных приметах-высказываниях могут свободно замещаться инфинитивами, ср.: *Ёлгенлени санагъан ырысды – Ёлгенлени санаргъа ырысды* ‘Считать умерших – плохая примета’. Однако они фольклористами обычно не включаются в состав примет. Имеет место также и тот факт, что вместо сказуемое *ырыс* в предложениях с инфинитивными оборотами употребляется глагол *жара-* ‘годиться» в отрицательной форме: *Къабырланы бармагъынг бла кёргюзтген ырысды – Къабырланы бармагъынг бла кёргюзтюрге ырысды – Къабырланы бармагъынг бла кёргюзтюрге жарамайды* ‘Нельзя указывать на могилы пальцами’. Как видим, для рассматриваемых примет-высказываний присуща трехчленная синтаксическая парадигма.

*Ырыс* в предложении, как правило, выступает в качестве простого именного сказуемого, но оно может и усложняться, чему способствует его употребление в сочетании со вспомогательным глаголом *бол-* ‘быть’: *Эм алгъа сол къолундан, сол аягъындан кийиннген ырыс болады* ‘Одеваться, используя в первую очередь левую руку или левую ногу, считается плохой приметой’.

Роль сложного сказуемого выполняет и глагол *ырысла-* ‘верить в дурные приметы’ в форме причастия прошедшего времени в сочетании со вспомогательным глаголом *эт-* ‘делать’: *Къол бармакъланы чалишдирирге ырыслагъан этгендиле* ‘Скрещивать пальцы рук принимали за дурную примету’.

Многообразие форм и функций слова *ырыс* обнаруживается и в других типах конструкций, ориентированных на репрезентацию примет: *Бараз кюн къош кёчюрюу ырысха саналгъанды* ‘Перекочевывать

кошарой в среду считалось за плохую примету’; *Къозуну алты айы толгъунчу кесерге ырыслагъандыла* ‘Резать ягненка, пока ему не исполнится полгода, считали за плохой знак’; *Къой къыркъгъанда, ишчилеге хычинлени саламгъа салып ырыслагъан этгендиле* ‘Когда стригли овец, работникам пироги выставляли на солому, по-другому признавали за плохую примету’; *Рече сабийни бешик быстырларын эшикде, ырыслап, къоймагъандыла* ‘Ночью колыбельную одежду ребенка не оставляли на улице, считая за плохой знак’.

Все рассмотренные выше приметы объединяет единая регулятивная, т.е. запретительная функция, во многом репрезентируемая благодаря архетипическому слову *ырыс* в его разных формах. Однако данная лексема позже стала замещаться восточным словом *гюнях* ‘грех’, причиной чего стало изменение религиозной парадигмы, т. е. принятие карачаевцами и балкарцами мировой религии ислам. Об этом свидетельствуют следующего рода приметы: *Сибиртгини юсю бла атлагъан гюняхды* ‘Перешагивать через веник – грех’; *Жатып ашаргъа гюняхды* ‘Есть лежа – грех’; *Къумгъанны суусуз къояргъа жарамайды* ‘Нельзя оставлять кумган без воды’ и др.

Означенная функция выражается и в предложениях с глагольными сказуемыми, выраженными словами во множественном числе и третьем лице: *Байрым кюн ишлемегендиле* ‘В пятницу не работали’; *Тёлюню башын экинчи тёлю болгъунчу кесмегендиле* ‘Представителя первого окота не резали до следующего окота’; *Геуюрге кюн терек салыргъа эм жангы юйню ишлеп башларгъа эркин этмегендиле къартла* ‘Старики не разрешали во вторник сажать деревья и начинать строительство нового дома’.

Для целого ряда примет характерно выражение собственно констатирующей функции, предопределяемой социальным опытом этноса, его наблюдениями: *Тунгучну тилеги къабыл болады* ‘Просьба первенца сбывается’; *Ёксюзню къаргъышы къабыл болады* ‘Проклятие сироты сбывается’; *Ёлюрге жууукъ адамны къылыгъы тюрленеди*

‘Перед смертью поведение человека меняется’; *Желине кёре жауууну* ‘По ветру и дождь’; *Чукук этгенни ким эсе да сагъынады* ‘Икающего кто-то вспоминает’.

При обращении к приметам обнаруживается их сопряженность с пословицами и поговорками, т. е. порой разграничивать паремии и приметы достаточно сложная задача, в пользу чего свидетельствуют следующие высказывания, которые размещены как в сборниках пословиц и поговорок, так и в реестре примет: *Кёп ёкюрген ийнек сютсюз болады* ‘Много мычащая корова без молока бывает’; *Эгизле экиси бирге хазна жашап къалмайдыла* ‘Близнецы не остаются жить вместе’; *Таякъ жауун кёпге бармаз* ‘Ливневый дождь долго не идет’; *Къара (къарсыз) къыш ауруулу болур* ‘Зима без снега полна болезней’.

Как приметы зачастую интерпретируются и сны, содержание которых передается следующими типами предложений: *Мешхут, адам кирле, битле ырысхыгъа кёрюнедиле* ‘Навоз, человеческие фекалии, вши снятся к богатству’; *Кирсиз суу, чыракъ жанннган, кюн тийген, ариу азыкъ ашагъан къууанчхады* ‘Чистая вода, горение лампы, сияние солнца, потреблять красивую еду – к радости’; *Къочхар жангы къуллукъгъа кёрюнеди* ‘Баран-производитель снится к новой должности’; *Тюшюнгде айран, сют эм башха акъны кёрген игиди* ‘Видеть во сне айран, молоко и другие молочные продукты – это хорошо’; *Кесинги бийик жерде кёрген къууанчхады* ‘Видеть себя на возвышенности – к радости’.

Релевантным следует признать и тематическую рубрикацию примет. Имеющийся в нашем распоряжении фактический материал позволяет говорить о следующих их основных группах:

1) приметы, связанные с прогнозом погоды: *Ууакъ шулпу узакъ барыр* ‘Мелкая морось надолго затянется’; *Кюкюреген булутну – жауууну аз* ‘У громыхающего облака дождя мало бывает’; *Илкер батмай, кюн атмаз* ‘Пока Плеяды не зайдут, не просветлеет’ и др.;

2) приметы, связанные с животными: *Агъазны ёлтюрген ырысды* ‘Убивать ласку – запрет’; *Байрым*

*эркекни ёлтюрген бек ырысды* ‘Убивать удода – очень большой запрет’; *Макъаны ёлтюргеннге жарлылыкъ келеди* ‘К убивающему лягушку бедность приходит»; *Къойну ургъан ырысды* ‘Бить овцу – запрет’; *Кюз чыкъгъан жюжек къозлаучу болур* ‘Осенний цыпленок впоследствии дает много яиц’ и др.

3) приметы, связанные с охотой: *Жаз башында уугъа баргъан ырысды* ‘Идти на охоту весной – запрет’; *Алгъын уучула окъну юйде салып, тилек этип, уугъа алай чыкъгъандыла* ‘Раньше охотники выходили на промысел, положив стрелу дома, помолившись’ и др.

4) приметы, связанные с пищей: *Еретинлей ашагъан ырысды* ‘Стоя есть нельзя’; *Суусапны ёре туруп ичген ырысды* ‘Стоя пить нельзя’; *Ётмекни, мирзеуню аякъ бла басхан ырысды* ‘Нельзя наступать на хлеб, зерно ногой’; *Жайлыкъдан айран бла келген гыбытха гыржын салмай ийген ырысды* ‘Не положить в бурдюк с айраном, который спустили с джайляу, хлеб – плохая примета’ и др.;

5) приметы, связанные с родами: *Сабий туугъанда, анга биринчи кере адетли, огъурлу, ауузу татлы болгъан тиширыуну жуккасын тартхандыла* ‘Когда рождался ребенок, ему давали грудь доброй, сладкоречивой женщины’; *Къозларгъа къыйналгъан тиширыуну ожагъындан энишге жумуртханы атхандыла* ‘Когда у женщины были трудные роды, в ее дымоход опускали яйцо’ и др.;

6) приметы, связанные с определенным видом деятельности: *Жангы ишни баш кюн, орта кюн неда ыйых кюн башлагъандыла* ‘К новому делу приступали в понедельник, четверг и воскресенье’; *Баш кюн, орта кюн кийим бичмеклик игиди* ‘Понедельник и четверг хороши для кройки’; *Геуюрге кюн эм бараз кюн жолгъа чыкъгъанны артыкъ сайламагъандыла* ‘Выходить в дорогу во вторник и среду особо не приветствовали’; *Жаз башында кырдык чыгъа туруп эм ашхамда урчукъ ийирген ырысды* ‘Прясть весной во времы появления первой травы или в сумерках – плохая примета’ и др.;

7) приметы, связанные с хозяйственной деятельностью: *Малны сатханда, жибин, тыягъын биргесине берген ырысды* ‘Когда продаешь скот, отдавать вместе с ним веревку для привязи, палку-погонялку – плохая примета’; *Тёлю алгъан заманда, кеслери хайырланнгынчы, башха адамгъа къой берген ырысды* ‘Во время окота, пока сам не воспользуешься, другому отдавать овцу нельзя’ и др.

Как видно из вышеизложенного, приметы есть продукт коллективного разума. Они появляются в результате длительных наблюдений народа над явлениями окружающего мира. При этом, базируясь на различных поверьях, случайных совпадениях, восприятии природы, они сопряжены с так называемой наивной национальной картиной мира, отмечены полифункциональностью и структурно-семантическим разнообразием.

**Литература:**

1. Ахматова М.А., Додуева А.Т., Кетенчиев М.Б. Вербализация концепта «къыш» (зима) в карачаево-балкарской языковой картине мира // Полилингвиальность и транскультурные практики. 2021. Т. 18. № 2. С. 153-164.

2. Карачаево-балкарский фольклор. Хрестоматия / сост. Т.М. Хаджиева. Нальчик: Эль-Фа, 1996. 592 с.

3. Кетенчиев М.Б., Аппоев А.К., Мизиев А.М. Структурно-семантические и этнокультурные особенности карачаево-балкарских паремических высказываний с зоокомпонентом ит ‘собака’ // Электронный журнал «Кавказология». 2024. № 1. С. 294-306.

4. Кетенчиев М.Б., Ахматова М.А., Додуева А.Т. Архаическая лексика в карачаево-балкарских паремиях // Полилингвиальность и транскультурные практики. 2022. Т. 19. № 2. С. 297-307.

5. Узденова Ф.Т. Образ и его знаковая природа (к проблеме этнокультурной идентичности) // Современные исследования социальных проблем. 2018. Т 10. № 3-1. С. 12-23.

6. Улаков М.З., Хуболов С.М. Семантически двукомпонентные предложения с предикатами,

выраженными именными фразеологизмами, в карачаево-балкарском языке // Вестник Дагестанского научного центра РАН. 2014. № 52. С. 113-116.

7. Хуболов С.М. Структурно-семантические особенности трехместных фразеологизированных предложений в карачаево-балкарском языке // Современные проблемы науки и образования. 2015. № 2-3. С. 64.

© Кетенчиев М.Б., Жазаева Ф.Т., 2024

**УДК 811.512.141'**

***Килдебаев Фидан Ғәлимйән улы,***
*магистрант, Өфө университеты*
***Саньярова Рәмилә Рәмил ҡыҙы***
*филол. фәнд. канд., доцент*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Башҡорт телендә «яҙмыш» концепты

Лингвокультурология – лингвистика һәм культурология фәндәре сиктәрендә үҫеп сыҡҡан айырым бер ғилми йүнәлеш, унын нигеҙендә үҙ телендә һөйләшеүсе һәм халҡы мәҙәниәтен сағылдырыусы лингвистик шәхес тора. Был фән – лингвистиканың яңы формалашып килгән тармағы. Ул милли тел менән мәҙәниәтте өйрәнеүсе фәндәрҙең синтезын тәшкил итә, телдең мәҙәниәт менән үҙ-ара бәйләнешкә инеүен дә, бер-береһенә мөнәсәбәтле булыуын да өйрәнә.

Хәҙерге тел ғилемендә милли донъя картинаһын өйрәнеү йүнәлешендә бай тәжрибә тупланған. Донъя картинаһын өйрәнгәндә, ғалимдар «концепт» төшөнсәһенә таяналар. Бөтә билдәләмәләрҙе лә иҫәпкә алғанда, лингвистикала концепт тип культурологик мәғәнәгә эйә һәм телдә төрлө лексемалар, саралар ярҙамында белдерелгән һүҙҙәргә әйтәләр.

Концепт – (латин теленән *conceptus* – ‘күҙ алдына килтереү, төшөнсә’) – халыҡтың йәшәү рәүешен, мәҙәниәтен сағылдырыусы һүҙ, төшөнсә. Ябай ғына итеп әйткәндә, һүҙ менән бәйле бөтә нәмә концепт була.

Кеше үҙ яҙмышын үҙе яҙырға һәләтле, тик тәҡдирҙе генә үҙгәртеп булмай. Кеше предметтар һәм әйберҙәр донъяһында түгел, ә интеллектуаль, рухи, ижтимағи талаптар аша «тыуҙырылған» концепттар донъяһында йәшәй. Улар тел менән мәҙәниәтте бәйләп кешенең рухи донъяһының торошон, аң кимәлен һәм тормошҡа ҡарашын сағылдырыусы саралар. Башҡорт телендә концепттарҙы тикшереп яҙылған хеҙмәттәр һаны бермә-бер арта.

Яҙмыш асылын аңлау һәм аңларға тырышыу кешенең аң-кимәле үҫешенән, донъяға ҡараштарынан сығып билдәләнә. Һәр кемдең яҙмышҡа үҙ ҡарашы, өмөттәре... «Хәҙерге башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә» (2004 йыл ) ***яҙмыш*** һүҙе түбәндәгесә аңлатыла:

1. Юғары көс тарафынан алдан уҡ билдәләнгән күрәсәк, тәҡдир. Яҙмышҡа буйһоноу. Яҙмышҡа күнеү. Өлөшкә төшкән яҙмыш. Кеше үҙенең яҙмышын алдан яҙылып ҡуйылыуына ышана һәм ниндәйҙер юғары көстәр менән бәйләй. Маңлайыңа яҙылған хаҡ яҙмышты һыҙып ташлап булмай ҡул менән (Халыҡ йырынан).

2. Кешенең йәки нимәнеңдер йәшәү рәүешен, үҫеү тарихын, булмышын күрһәткән хәл. Ауыр яҙмыш. Ил яҙмышы.

3. Бер нимәнең барлыҡҡа килеү тарихы. Халыҡ ижадының яҙмышы.

*Яҙмыш* һүҙенең лексик мәғәнәһенән күренеүенсә, *Яҙмыш* концепты халыҡ аңында йәшәү асылын юғары көскә бәйләп аңлатыла.

Башҡорт телендә *яҙмыш* концепты *бәхет* төшөнсәһе менән дә аңлатыла. Мәҫәлән, *бәхетле яҙмыш юлын үтә*, тип әйтелә тормошто матур көткән кешеләр тураһында. *Өлөшлө яҙмыш – бәхетле яҙмыш*, тип әйтеп һөйләй ололар. *«Үҙ яҙмышыңдың хужаһы булырға кәрәк»* (М. Бураҡаева). *«Күрәсәкте күрмәй, гүргә инеп булмай», «Күрәсәктән ҡасып ҡотолоп булмай»* тип йыуата һәр кем һынауҙар алдына килеп баҫҡанда. *«Аҡыллы кеше үҙтәрбиә менән шөғөлләнә, төшөнкөлөккә бирелмәй, кешегә һылтанмай, яҙмышҡа зарланмай»* (М. Бураҡаева). *Башҡа төшкән яҙмыш. Тәҡдиргә яҙылыу, тәҡдиргә буйһоноу* тигән һүҙбәйләнештәрен дә ҡуллана халҡым *яҙмыш* концептын

аңлатҡанда. *«Ир йыуаш булһа ла, тәҡдирҙән ҡотолмай»*. Башҡорт телендә *яҙмыш* концепты *киләсәк, күрәсәк* ҡылымдары менән бирелә. *Киләсәк яҙмыш, күрәсәк яҙмыш* тип киләсәк тормошто яҡшыға юрайҙар.

Яҙмыш концепты фразеологизмдарҙа асыҡ күренә. *«Маңлайына яҙылған яҙмыш», «Хаҡ яҙмыш» − Маңлайыңа яҙылған хаҡ яҙмышты һыпырып ташлап булмай ҡул менән* (Халыҡ йырынан). *«Яҙмыштан уҙмыш юҡ»*. Фразеологизмдарҙан күренеүенсә, халыҡ яҙмышы менән күнергә тейеш тип иҫәпләнгән.

Башҡорт телендә *яҙмыш* концептын күҙәткәндән һуң, кешенең яҙмышҡа ышанырға, күнергә тейеш тип иҫәпләүе асыҡ күренә. Ул яҙмышына ышана, хатта табына.

Күҙәтеүҙәрҙән һуң шундай һығымтаға киләбеҙ: *яҙмыш* – ул: 1) һәр кемдең күктә алдан яҙылған тормошо, 2) йәшәйеш сылбырың, 3) өлөшөң, 4) киләсәгең, 5) тормошоң менән күнеүең, 6) тормошоңдо үҙгәртергә тырышыуың, 7) киләсәгеңде билдәләргә тырышыуың. Тимәк, яҙмышың үҙеңдең ҡулыңда. *Яҙмыш* концептын аңлауың һинең тормошоңдо яҡшы яҡҡа үҙгәртергә ярҙам итәсәк. Яҙмышың үҙ ҡулыңда, тип бушҡа әйтмәй халҡым. Тимәк, матур киләсәк үҙебеҙҙең ҡулда.

**Әҙәбиәт**:

1. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Өфө: Китап, 1994. 472 бит.

2. Бураҡаева М. Арғымаҡ: әҙәби-публицистик әҫәр. Өфө: Китап, 2005. 342 бит.

3. Зайнуллин М.В. Общие проблемы лингвокультурологии. Уфа: Китап, 2008. 204 с.

4. Маслова В.А. Лингвокультурология. М., 2007. 357 с.

5. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Өфө: Китап, 2006. 344 бит.

6. Хәҙерге башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. Өфө, 2004. 527 бит.

© Килдебаев Ф.Ғ., Саньярова Р.Р., 2024.

УДК 811.512.141

***Килдейәрова Әлфинә Рафаэль ҡыҙы,***
*студент, Өфө университеты.*
***Әлимбаева Гөлшаян Ғәбсәләм ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., өлкән уҡытыусы,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Парлы рәүештәрҙең семантик төркөмсәләре

Парлы рәүештәрҙең башҡорт телендә шундай семантик төркөмсәләре осрай:

1) синонимик мөнәсәбәттәрҙә тороусы нигеҙҙәрҙең ишләшеүе һөҙөмтәһендә яһалған парлы рәүештәр, улар араһында күп осракта хәл рәүештәре күҙәтелә: ***ҡабалан-ҡарһалан, уйламағанда-көтмәгәндә, белмәҫтән-көтмәҫтән, ҡабаттан-ҡайтанан, оҙон-оҙаҡ:*** 1. *»Аллаға шөкөр, бөгөн тағы ла* ***иҫән-һау*** *көйө яңы көндө башлайбыҙ»,– тигән уй килә башҡа* (Н. Мусин). 2. *Ул* ***оҙон-оҙаҡ*** *нотоҡ уҡыманы, әҫәрҙе ҡа миллаштыра төшөү өсөн таһыллы кәңәштәрен бирҙе* (Н. Мусин). 3. *Ошо мәлде Миҙхәт, апаһы һәм еҙнәһе ҡала күс тәнәстәре менән* ***тәмләп-баллап*** *сәй эсергә йыйына ине* (Р. Әхмәтов). 4. *Ул арала көнсығыштағы* ***өҙөк-һурыҡ*** *йолҡолған болоттар ситенән, офоҡ артынан сыҡҡан тоноҡ ҡына яҡтылыҡ та күренә башланы* (С. Ильясов). 5. *»Һуңғы ваҡыт тамам йыртҡысланды, йә ҡәйнәм яҡлашмай,* ***белмәмеш-күрмәмеш*** *булып тик йөрөй, – ти* (Т. Байрамова). 6. *Айбикә тиҙ генә бейәләрен ағытты ла, һуңға ҡалыуҙан ҡурҡып,* ***ҡабалан-ҡарһалан*** *түбәнге осҡа һыйыр көтөүенә ҡаршы китте* (Һ. Дәүләтшина);

2) антонимик мөнәсәбәттәрҙә тороусы нигеҙҙәрҙең ишләшеүе һөҙөмтәһендә яһалған парлы рәүештәр, был төркөмдә хәл, ваҡыт һәм урын рәүештәр өҫтөнлөк ала: ***баштан-ахыр, баштан-аяҡ, арҡыры-буй, ары-бире, арлы-бирле, кисәле-бөгөнлө, бөгөн-иртәгә, бөгөн-иртән, көнө-төнө, йәйен-ҡышын, былтырлы-быйыллы, иртәле-кисле:*** 1. *Шулай итеп, ул был этәргесте тегеләй ҙә былай, алға-артҡа бер нисә тапҡыр йөрөттө* (Р. Әхмәтов).

2. *Унан һуң,* ***арлы-бирле*** *йөрөштөрөп, уйнар иш таба алмағас, инәһе янына йомшаҡ үлән өҫтөнә ятып, тәрән йоҡоға тала* (С. Ильясов). 3. *Ҡапыл ер аҫтынан пәйҙә булғандай, ташлыҡтың ике яғынан* ***аллы-артлы*** *биш бүре килеп сыҡты ла, Һарыҡайҙы күреп, уға ташланды* (С. Ильясов). 4. *– Һеҙ бөгөн дә мине тәҙрәнән күргәс килеп сыҡтығыҙмы? – тине Әклимә* ***уйынлы-ысынлы*** (Л. Шакирова). 5. *Мал ҡараған мәлдә килерһең:* ***иртәле-кисле*** (Т. Ғәйнуллина). 6. *Ә Закир был ваҡытта, оҙаҡ* ***аслы-туҡлы*** *йөрөү арҡаһында ҡыҫылып бөткән ҡарындың ҡапыл күп ашауҙы күтәрә алмай сәнсешеүен кинәнеп тыңлай-тынлай, фатирына табан яй ғына китеп бара ине* (З. Биишева). 7. ***Бөгөн-иртән*** *бында ла килеп етерҙәр...* (З. Биишева). 8. *Нухтың ҡыҙҙары бер-береһенә һүҙ ҡушҡанда* ***ишетелер-ишетелмәҫ*** *шым ғына өндәштеләр* (Ж. Кейекбаев). 9. *Киң маңлайын* ***арҡыры-буйға*** *тәрән йыйырсыҡтар йырмалаған* (Ғ. Хөсәйенов). 10. *Ә теге, Сәғитте тамам сихырлаған һылыу ҡара күк ат,* ***үрле-ҡырлы*** *һикереп кешнәй-сыйылдай, берсә артҡа, берсә алға боролоп, бер алдын, бер артын һикертеп ҡотороноп сапты ла сапты* (Ж. Кейекбаев). 11. ***Яҙлы-көҙлө*** *һарыҡ, ҡуй, дөйә йөндәре ҡырҡышырға, кәзә тарашырға байҙарға йөрөй* (Һ. Дәүләтшина). 12. *Ҡарт, көндөң-көнө буйы ҡайғыға күмелеп,* ***өнһөҙ-тынһыҙ*** *әбейҙең һөйләгәндәрен тыңлай ҙа тәрән көрһөнөп ҡуя ине* (Һ. Дәүләтшина).

13. ***Көнө-төнө*** *ҡурҡыталар*
*Сир менән, аслыҡ менән* (Р. Йәнбәк).

14. *Ил байлығын* ***уңға-һулға*** *һатып,*
*Нисек йәшәп була йылмайып?* (Р. Йәнбәк).

Башҡорт телендә шулай уҡ күрһәтеү алмаштарының антонимик мөнәсәбәттә торған нигеҙҙәренән парлы рәүештәр яһала: ***тегеләй-былай, улай-былай, былай-алай, тегендә-бында, унан-бынан, унда-бында, ана-бына***: 1. ***Тегенән-бынан*** *яусы килһә, Бәҙәмшаның уны кеше рәүешле итеп тәрбиәләп, кәрәк-ярағын биреп оҙатырлыҡ та хәле юҡ* (Н. Мусин). 2. *Төнө буйы йөрөп, йонсоуҙан хәлһеҙләнгән ҡарт,* ***унан-бынан*** *сисенгәс,... мендәр өҫтөнә ауҙы* (Н. Мусин). 3. *Ике ярҙы тоташтырып торған арҡан*

***ана-бына*** *өҙөлөп китер кеүек* («Аманат» журналынан). 4. *Ә кистәрен атаһы, шаяртып, иң-баштарын* ***тегеләй-былай*** *һелкетә-һелкетә, карттар йә әбейҙәр булып бейей ине* (А. Абдуллин). 5. *Иҫке фронт яралары атаһын аяктан йыҡҡан Килдебәккә* ***тегеләй-былай*** *йөрөү бөттө* (А. Абдуллин);

3) бер нигеҙе иҫкергән йәки үҙ аллы ҡулланылыштан сыҡҡан һүҙҙән булған парлы рәүештәр: ***әбдән-мәңге, аушан-боршан, аңкы-тиңке:*** 1. *Бына күпме ваҡыт инде көндәр шулай* ***аңкы-тиңке*** *үтә* (Н. Мусин). 2. *Күп тә үтмәй, тағы* ***тырым-тырағай*** *һибелеп бөтәләр* (Х. Дауытов). 3. *Бик алыҫта, тауҙар араһында ҡыңғырау сыңы ишетеп,* ***йән-фарман*** *шул яҡҡа сапты* (С. Ильясов). 4. *Шунан башлана* ***зар-интизар*** *булып йәшәүҙәр...* (Л. Шакирова). 5. *Улар, шулай итеп* ***әлән-борхан*** *булып, йүгерешеп сығырға ҡаталарын кейеп өлгөрмәнеләр – Юлдыбай менән Ирмәт ҡарт килеп тә инделәр* (Һ. Дәүләтшина). 6. *Ул, килеп ингәс үк, көлөп ебәрҙе, эсендә бер котелоктан башҡа бер нәмә лә булмаған тоҡсайҙы урындыҡ ситенә ырғытты ла* ***ашыҡ-бошоҡ*** *барыһы менән дә күрешергә тотондо* (Һ. Дәүләтшина). 7. *Тырт та мырт килеп, һауҙырмай, аяҡтарын* ***алмаш-тилмәш*** *күтәреп, башын улай-былай борғоландырып, бер артҡа, бер алға сигеп, сәбәләнергә тотондо* (И. Исламов). 8. *Нурия, һүҙгә әллә ни әүәҫ булмаһа ла,* ***һирәк-һаяҡ*** *ҡатын-ҡыҙҙар ҡорон урап үтмәй* (И. Исламов).

Башҡорт телендә шулай уҡ ***үҙ*** билдәләү алмашы һәм ***ара*** исеме ишләшеп барлыҡҡа килгән үҙ-ара рәүеше бик әүҙем ҡулланыла: 1. *Башта Роза беҙҙең вагондан бушатылған алмаларға иҫәп-хисап алып барған кладовщица менән нимәлер тураһында* ***үҙ-ара*** *һөйләште* («Ағиҙел» журналы). 2. *Салауат Юлаев һәм Пугачев яуы баҫтырылғас та, түрәләр [ерҙәрҙе]* ***үҙ-ара*** *бүлешеп алып бөттөләр* (Я. Хамматов). 3. *Ләкин уларҙа ла «модаға эйәреү» тигән нәмә өҫтөнлөк итмәйме икән, тип ҡуям ҡай саҡ, сөнки яулыҡлы ҡыҙҙарҙың да* ***үҙ-ара*** *русса һөйләшеүен ишетеп аптырағаным бар* («Киске Өфө» гәзитенән)

Эйәлек заты ялғауы ҡабул иткән *кайһы, кем* һорау алмаштары менән *кайҙа* һорау алмашы ишләшеп, парлы урын рәүештәре барлыҡҡа килтерә: ***ҡайһыһы-ҡайҙа, ҡайһыбыҙ-ҡайҙа, ҡайһығыҙ-ҡайҙа, кемебеҙ-ҡайҙа:*** 1. *Шулай итеп,* ***ҡайһыбыҙ-ҡайҙа*** *төн үткәрҙек* («Ағиҙел» журналынан). 2. *Мәктәпте тамамлаусылар* ***ҡайһыһы-ҡайҙа*** *таралышып бөттөләр* («Аманат» журналынан). 3. ***»Ҡайһығыҙ-ҡайҙа*** *икәнлекте белдереп хат яҙырға онотмағыҙ», – тип оҙатты беҙҙе тәрбиәсе* (Һөйләү телмәренән). 4. ***Кемебеҙ-ҡайҙа*** *йәшенеп тороп ҡалдыҡ* (Һөйләү телмәренән).

© Килдейәрова Ә.Р., Әлимбаева Г.Ғ., 2024

**УДК 81-2**

***Кужина Лейсан Ахметовна,***
***Валишина Лена Галимхановна,***
*преподаватели, ГАПОУ Ишимбайский нефтяной колледж, г. Ишимбай, РБ*

## Башкирский и английский языки: традиционные и современные направления в лингвистике

Говоря о традиционных и новейших направлениях в лингвистике, пополняющих языки новыми словами, обращаем внимание на современные средства информации, которые являются ярким показателем тесных связей разных языков общения. Именно в них проявляются слова, способствующие вещанию нового в мире. При этом каждый национальный язык для своего народа эту новизну несет по-своему, находя или образовывая новые слова, чтобы она стала понятной для всех. Значит, данное лексическое понятие, пока переходит от одного языка в другой, переносит различные фонетические, флексические, аффиксальные изменения. Приобретая лесическое понятие, обновляясь, при словообразовании соответственно адаптируясь законам данного языка, слово пополняет словарь заимствований для широкого или узкого пользования. По мере необходимости использования, они

сохраняются в языке как неологизмы. Таким образом еще до появления письменности в общение попадали новые слова через торговые, военные и другие отношения, и они закреплялись в языке как собственные слова того или иного языка. Только при внимательном изучении мы можем увидеть заимствованную корень лексической единицы, поскольку этимологические корни слова давно приспособлены закономерностям данного языка.

А в современном мире, когда очень развиты средства массовой информации, заимствованные слова в наш язык попадают очень часто. Это – неологизмы, профессионализмы, интернационализмы, варваризмы. Конечно, наблюдается тенденция выбора слова из собственного словаря, и в языке они закрепляются по мере приемлемости и удобства слова для передачи данного понятия. Но названия новых открытий, понятий, достижения научно-технического прогресса закрепляются в языках через слова ведущих языков мира, как английский, и они начинают полнокровную жизнь, как каждодневная необходимость самого предмета или понятия. Встречаясь с такими словами в языке, которые пережили эпохальные события, испытание времени, возникает вопрос: при каких условиях они попадали в наш язык, или они были и есть показателем родства данных языков? Конечно, при этом мы не забываем теорию карты всех языков мира, которая доказывает, что все языки мира имеют родственные корни. Об этом существует множество научных трудов, которые изучают разветвления языковых семей, исследуют сходство, родство языков. Особенно интересно наблюдать и сравнивать слова, которые закрепились в этих языках давно, хотя они живут в разных разветвлениях и в совершенно разных языковых семьях.

Особенно остро проявляется данный процесс в сравнении языков, стоящих в различных уровнях сохранения и использования их в мире языковой культуры. Так исконно башкирский язык, находясь в огромной тюркской группе, относится к семье Урало-Алтайских языков, и, к сожалению, находится в критических

положениях по сохранению его в живой речи. А английский язык – самый распространенный и востребуемый язык в современном мире. Но мы не должны забывать, что наш язык имеет родственные корни с индоевропейскими, тем более с англо-саксонскими языками. И тысячелетия не смогли уничтожить этот язык. Ученые, которые работают над историей языков, их лингвистическими корнями, находят схожие корни слов, флексем, даже родственные звуки, указывающие на родство языков. В этом плане нельзя не отметить труды видных ученых В.В. Радлова, Н.К. Дмитриева, А.Н. Кононова, Дж.Г. Киекбаева, С. Галлямова, А.А. Юлдашева, Г.Г. Саитбатталова и других, которые изучали лингвистические корни башкирского языка, его лексико-семантические группы и определили общность языковых корней. Значит, башкирский язык дал жизнь этим молодым языкам и тем самым заслуживает сохранения и развития как язык-реликвия. В этом плане еще в XIX веке работали и английские ученые Роулинсон, Г. Свит, Г. Андерсон, которые проводили сравнительный анализ английского и урало-алтайских, индо-германских языков и отмечали «достаточное количество лексических соответствий и грамматических параллелей в угрофинских и индоевропейских языках, что доказывает родство уральских и индогерманских языков» [4: 95].

А в дальнейшем, когда был найден ключ к руническим, Орхоно-енисейским письменам, определилось их родство, к данным проблемам обращаются датские, шведские ученые Б. Коллиндер, Х. Скельд и на конгрессе ученых-лингвистов они защищают идею сходства и родства финно-угорских и урало-алтайских, индо-германских языков. Эту схожесть Б. Коллиндер показывает в строении системы местоимений, словообразования с использованием суффиксов и даже в некоторых значениях падежных окончаний.

Обращаясь к новым словам, которые попадают в наш язык через СМИ, а также наблюдая за исконно

башкирскими и английскими словами, мы видим, что эта общность начинается на уровне одинаковых по звучанию звуков, как Ҫ, Ҙ, Һ, Ң, Ғ, Ә, Ө, Ү. Эти звуки встречаются еще в некоторых европейских языках, но, как отмечает ученый С. Галлямов, «...примечателен тот факт, что они не встречаются в германских языках» [4: 96]. Ученый отмечает, что только на английском языке, как в башкирском, отсутствует понятие рода, а принцип присоединения окончаний множественного числа также одинаков. Как отмечает ученый, эта общность укоренилась еще в IV веке до нашей эры: «Если сравнить фонетику и лексику башкирского и английского языков, то можно увидеть, что они произошли от единого ареального языка» [4: 108]. Анализируя доводы различных ученых, приходишь к вопросу: как же сохранился язык такого малого народа? Нам кажется, прежде всего, это сохранение чистоты родов (аҫабалыҡ), глубокое знание шэжэрэ рода, очень развитое устное народное творчество. Наши мнения подтверждаются трудами известных ученых-востоковедов, как А.З. Валиди, Б.А. Серебренников, А.М. Щербак, Н.Х. Максютовой, Дж.Г. Киекбаева. Б.А. Серебренников приводит многочисленные примеры, показывающие силу башкирского языка среди других урало-алтайских языков. Вышеназванные ученые опираются в своих поисках на язык десятки сохранившихся до наших дней язык эпосов, кубаиров и легенд. Неповторимый язык бесценных памятников является показателем не только богатства родной речи, но и исторической правды, что еще до принятия ислама они существовали в речи народа, в его сознании, как основной показатель древних корней. Он и сегодня не перестает удивлять своим богатством, красотой и гармонией.

Ученый С. Галлямов, также опираясь на слова эпоса, как *Һәүбән (Хау-бен), торна (журавль), һауа (небо),* доказывает родство языка Шумера со многими другими языками, в том числе и с английским языком. Его слова находят подтверждение в словах английского ученого Роулинсона: «...аналогия между тремя табличками из

шумерского сказания о Гольгамеше и башкордским сказанием об Урале подтверждает, что язык шумеров был как раз урало-туранским» [4: 39]. Взгляды этих ученых подтверждаются многими примерами из языка, их единым орфографическим произношением: Например, и в башкирском, и в английском языке встречаются слова со зуками **ә, ө,ү һ, ç, ҙ:**

*әсәй, әйтем, әрләү – that, map, fat, sad, glad;*

*өй, өкө, өмөт, өләсәй, өлкән – bird, third, turkey, disturb, first;*

*моң, таң, яңы, яңғырау – thing, evening, morning, king;*

*беҙ, һеҙ, ҙур, баҙык – they, that, this, though;*

*һауа, һыу, һаулык, һынау – heart, hook, happy, he, help;*

*вакыт, вак, валсык, вакиға – winter, window, water, way, warm.*

В данных примерах мы встречаем очень схожие артикуляционные произношения. Кроме этого в данных языках часто встречаются слова: ***buje – буйлап, bu the land – ялан буйлап, tell – тел, be – бул, hii – һеҙ, hon – һин, animal – мал.*** При этом сохраняется принцип изменения заимствованных слов: к твердому корню слов, перешедших в наш язык из русского, добавляются твердые окончания: ***-тар / -тәр, -дар / -дәр, -лар / -ләр, -ҙар / -ҙәр.*** Они прибавляются к новым словам перед окончаниями рода и падежа**: *кейс+тар+ға, смартфон+дар+ҙы*** и т. д. Как языковые особенности, окончания множественных чисел в обоих языках существуют с давних времен: *аттар, күлдәр, каҙҙар, әсәләр.* А на английском языке ***-s*** или ***-es*:** например, ***a day – days, a book – books, a boy – boys, a city – cities***.

Также почти одинаковы принципы образования слов при помощи суффиксов. К примеру, можно взять суффикс ***-сы***, который по своему значению похож на флексему ***-er,*** который образует новые слова**: *яҙыу-сы, эш-се,*** а в английском языке: ***writer (write), baker (bake)***.

Такие слова, имея схожие стороны при словообразовании и древние корни родства, появляясь в нашем общении через СМИ, становятся частичкой

нашего языка, входят в обиход и образуют пласт современных неологизмов:

1. *Был хакта* ***вице-премьер*** *– торлак-****коммуналь*** *хужалыҡ* ***министры*** *Борис Беляев хәбәр иткән* («Башҡортостан» гәзите, № 9, 2021). *'Об этом сообщил вице-премьер – министр коммунально-жилищного хозяйства Борис Беляев'.*

2. *Хөкүмәттә үткән сираттағы* ***оператив*** *кәңәшмәне Башҡортостан башлығы* ***статистика*** *мәсьәләләре менән таныштырыуҙан башланы* («Башҡортостан» гәзите, № 9, 2021). *'Очередное оперативное совещание при Государственной Думе Глава Республики Башкортостан открыл с ознакомления со статистическими задачами.*

3. *2023/24 йылдарҙа Адреслы республика* ***инвестиция программалары*** *индерелергә тейешле* («Башҡортостан» гәзите, № 9, 2021). *'В 2023/2024 годы вносятся Адресные инвестиционные программы'.*

4. *Һеҙҙең* ***фитнес-клуб*** *менән дуҫ булыуығыҙҙы теләйбеҙ!* («Башҡортостан» гәзите, № 9, 2021). *'Мы желаем, чтобы вы дружили с фитнес-клубом!'*

5. **Аудио** һәм **видеотехника** хәстәрләү, **аудиториялар** әҙерләү, **бланктар**, **сертификаттар** сығарыу эше башлана («Башҡортостан» гәзите, № 9, 2021). *'Началась работа по приготовлению аудио и видеотехники, подготовки аудиторий, бланков, сертификатов'.*

7. *Баш ҡаланың 52-се* ***поликлиникаһында ультратауыш диагностикаһы*** *табибы булып эшләгән Инесса Әхмәҙуллина иһә* ***вакцинациялауҙы*** *бер аҙ тулҡынланыу менән ҡабул итә* («Башҡортостан» гәзите, № 9, 2021). *'Врач ультразвуковой диагностики 52–ой поликлиники столицы Инесса Ахмадуллина встретила событие вакцинации с некоторым волнением'.*

Эти примеры были взяты только из одного номера газеты «Башкортостан». А если подумать, что столько же слов попадает в наш язык каждый день через СМИ, то сколько слов мы получаем за счет современных неологизмов? А выдержит ли наш язык такой напор? Можно ли сохранить родной язык при таких условиях? Вот

сколько вопросов рождает этот процесс в языке. И потому тему нашего поиска считаем актуальной, а наша статья сыграет свою роль в сохранении и бережном отношении к родному языку.

**Литература:**

1. Ахтямов М.Х. Современный башкирский язык. Уфа: Китап, 1986. 250 с.

2. Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. Уфа: Башкнигоиздат, 1957.

3. Серебренников Б.А. Сравнительная фонетика тюркских языков. Л., 1970. 33 с.

4. Галлямов С. Великий Хау-Бен. Уфа: Китап, 1997. 318 с.

5. Киекбаев Дж.Г. Введение в Урало-алтайское языкознание. Уфа: Башкнигоиздат, 1972. 264 с.

6. Саитбатталов Г.Г. Вопросы башкордского языкознания. Уфа: Башкнингоиздат, 1975. 44 с.

© Кужина Л.А., Валишина Л.Г., 2024

**УДК 811.512.145**

***Кәримова Зәбирә Сәгит кызы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Уфа университеты, Уфа ш., БР*

## Шигърияттә иярченле кушма җөмләләрне куллану үзенчәлекләре (Разил Вәлиев шигырьләре материалында)

Үзара ияртүче бәйләнештә торган җөмләдә баш җөмлә (ияртүче) һәм иярчен җөмлә (иярүче) була. Иярчен җөмлә баш җөмләгә буйсынып, ияреп килә. Бу җөмләнең икенчесенә ияреп килүе белән оешкан җөмлә иярченле кушма җөмлә дип атала [1: 364].

Иярченле кушма җөмләләрне, бәйләүче чараларның төренә карап, аналитик һәм синтетик төрләргә бүлеп йөртәләр; җөмләдәге мәгънәләренә һәм функцияләренә карап, иярчен ия, хәбәр, аергыч, тәмамлык, хәл (алар 8), аныклагыч җөмләләргә бүләләр. Катлаулы кушма

җөмләләр дә була. Катлаулы кушма җөмләләр, составындагы җөмләләрнең бер-берсенә нинди чаралар белән бәйләнүләренә карап, күп тезмәле, күп иярченле һәм катнаш кушма җөмләләргә бүлеп йөртеләләр.

Һәрбер шигырь билгеле бер хәбәр, эчтәлек алып килә. Аерым җөмләләр шигырь эчендә генә яшиләр, шигырь эчендә генә сөйләмгә кереп китәләр. Аларның мәгънәләре шигырь эчендә ачыла. Шигырьдә мөстәкыйль җөмләләр арасында бәйләнеш гаять тыгыз була. Фикернең логик эзлеклелеген белдерергә кирәк булганда, күбесенчә кушма җөмлә кулланыла. Кушма җөмләләрне куллану ягыннан конкрет Разил Вәлиев иҗатына килгәндә, аның шигырьләрен дә, гомумән, кушма җөмләләргә караганда күбрәк гади җөмләләрнең төрле формалары кулланыла. Ләкин бу шагыйрь кушма җөмләләрне бөтенләй кулланмый дигән сүз түгел. Разил Вәлиев, әлбәттә, кушма җөмләләр белән дә яза. Алар чагыштырмача күп түгел. Шагыйрьдә тезмә кушма җөмләләр өстенлек итә. Иярчен кушма җөмләләрдән күбесенчә синтетик иярчен җөмләләр. Синтетик юл белән иярчен җөмләләр төрле кушымчалар ярдәмендә бәйләнәләр, бигрәк тә шагыйрь шарт фигыль кушымчасын кулланырга ярата. Хәзер бу шагыйрь иҗатыннан иярчен кушма җөмләләргә мисаллар китереп үтәрбез:

*Мин яшьтәше атом бомбасының...*
*Мин мәңгелек уйда утырам,*
***Галимнәр, сез бомба ясаганда,***
***Әниләр бит безне тудырган.***
***Җәй җиттисә, шомлы күк күкрәде,***
***Без яшенгә кушылып яшьнәдек.***
*Мин яшьтәше атом бомбасының –*
*Икәү бергә чакта яшәү юк!* («Мин яшьтәше атом бомбасының»).

Бу шигырьдә ике иярченле кушма җөмлә. Икесе дә мәгънә ягыннан иярчен вакыт җөмләләр, баш җөмләгә беренчесе – да (килеш кушымчасы), икенчесе – са (шарт фигыль) кушымчасы ярдәмендә бәйләнеп киләләр, төзелешләре буенча икесе дә синтетик иярчен җөмләләр,

икенче җөмләдә 2 баш җөмлә бер-берсенә тезү юлы белән бәйләнгәннәр, ул катнаш кушма җөмлә. Икенче, өченче җөмләләрнең үзара тезү юлы белән бәйләнеп килүләре авторның әйтергә теләгән фикерен көчәйтә.

Разил Вәлиев иярчен хәл җөмләләрне күпләп кулланырга ярата:

*1)* ***Ракеталар очмаса да ул чак,***
***Ай турында җырлар җырлаган.***
*Ачмаса да серен йолдызларның,*
*Күккә карап язмыш юраган* («Игенчеләр нәселе»).
*2) Май җилләре бар кыйтгаллар буйлап,*
*Бәйрәмнәргә дәшеп узганда*
*Халыкларның күңел түрендәге*
*Өмет тулы хисләр кузгала* («Иске көймә зары»).
*3) Оныттылар мине, оныттылар...*
*Урны, диләр, синң музейда.*
*Бу якларны ташлап китә алмам...*
***Тән тузса да, йөрәк тузмый ла.***
*4) Оста барда телең тый, ди...*
*Телем тыйдым тургай барда* («Мәҗүси»).
*5) Яхшыларны, матурларны гына*
*Җыеп куям җанга сүзләрнең.*
***Әгәр иртәне зәңгәр күккә баккач***
*Зәңгәрләнә тагын күзләрем* («Бер көнем»).
*6) Шатлыкларым тулы килеш,*
*Кайгымны да түкмәдем.*
*Йортым тәбәнәк булса да,*
*Биек әле күкләрем* («Вәгъдә»).
*7) Ләйсән яңгырлар яуганда*
*Бар кешеләр көлешә*
*Җирдә бөтен кешегә дә*
*Көлү шундый килешә* («Ләйсән»).

Без китергән мисаллардагы хәл җөмләләрне конкретлаштырсак, түбәндәге нәтиҗәгә киләбез: Разил Вәлиев шигырьләрендә иярчен вакыт (2, 4, 5, 7), иярчен кире хәл (1, 3, 6) җөмләләр күпләп кулланыла. Бәйләүче чаралары булып *-кач, -са да, -да* кушымчалары тора.

Иярчен шарт җөмләләр шагыйрь иҗатында аерым урынны алып торалар:

*Бәхет керсә төшләремә,*
*Куркып яттым уяныргa* («Мәҗүси»).
***Кичләр җитсә, кулга-кул тотышып,***
***Әйлән-бәйлән уйный дәүләтләр...***
*Бар кешеләр шундый киң күңелле,*
*Бар кешеләр шундый әйбәтлә* («Бәхет»).
***Афәт килсә, аны каргадылар,***
***Һәм башланды имеш-мимеше***
*Югыйсә бит бозлар – кыш бүләге,*
*Ә дулкыннар – давыл, җил эше* («Кичке Идел»).
***Күңелемә кайгы-сагыш төшсә,***
***Ак чәчәкләр җирдә эзләдем.***
*Офыкларга карап көтә торгач,*
*Офыкларга мандым күзләрем* («Вәгъдә»).
*Өмет кебек ап-ак көймәләрне*
*Гөрләвектә бергә агыздык.*
***Язлар килсә, чыгам урамнарга,***
*Гөрләвектә ага ялгызлык* («Кайт син миңа»).
*Уңда юллар, сулда юллар...*
*Юлларга кемнәр чыгар?*
*Таңда егет җырлап узса,*
*Кыз күңеле ничек чыдар?* («Таң җыры»).

Әдип шигырь иҗат итү барышында монда гади җөмлә, монда кушма җөмлә кулланыйм әле дип уйлап утырмый, әлбәттә, ул шигырьнең мәгънәсеннән, шагыйрьнең әйтергә теләвеннән үзеннән-үзе килеп чыга торган нәрсә. Разил Вәлиев шигырьләрендә бер шигырь юлында очратырга мөмкин. Без моны алда китергән мисаллар нигезендә ачык күрдек. Кайвакыт аның шигырьләрендә гел бер төрле синтаксик конструкцияләргә корылган булып чыга. Бу бигрәк тә шагыйрьнең җырларына хас. Мәсәлән:

*Күршедә сөенеч*
*Сыймаса өйләргә,*
*Сагышны онытып,*
*Без тиеш көләргә.*
*Юл ярып барганда*

*Бәхетле көннәргә,*
*Кайгыны таратып,*
*Без тиеш көләргә.*
*Табигать шатлыгы*
*Әйләнсә гөлләргә,*
*Гөлләргә кушылып*
*Без тиеш көләргә.*
*Җырласа кешеләр*
*Шатлыклы көйләргә,*
*Җир-ана үзе дә*
*Әзер күк көйләргә.*
*Без барда, бу дөнья*
*Әйләнмәс көлләргә!*
*Ил өчен без әзер*
*Елмаеп үләргә.*

Баш җөмләнең хәбәре составыннан читтә торган чаралар ярдәмендә ияргән җөмлә аналитик иярчен җөмлә дип атала. [1: 365].

Хәбәре составында бәйләүче чара килмәгәнлектән, аналитик иярчен җөмләнең хәбәре баш җөмләнеке кебек үк тулы, затланышлы формада була. Разил Вәлиев шигъриятендә аналитик иярченле кушма җөмләләр дә бар, алар күп түгел. Мәсәлән:

*Күңелләрдә һаман олы өмет:*
*Кеше барыбер җирне ярата* («Аппассионата»).
*Тышта буран, яз бураны –*
*Тузгый йолдыз тузаны.*
*Сизәм: язгы буран кебек*
*Дулап гомер узганын* («Язгы буран»).

Шагыйрь иҗатында аналитик иярченле кушма җөмләләр баш җөмләгә күбесенчә көттерү паузасы һәм теркәгечләр ярдәмендә бәйләнеп киләләр. урыны-урыны белән шигырьдә синтетик иярчен җөмлә белән аналитик иярченле кушма җөмлә янәшә киләләр. Мондый җөмләләрдә мәгънә тирәнлеге ачык күренә:

В рамках научного исследования с целью приобщения дошкольников к родному языку на базе Алтайской региональной общественной организации «Объединение кумандинцев Алтая» в г. Бийске нами была организована театрализованная деятельность с детьми дошкольного и школьного возраста по сказке «Чок-чок» («Колобок») с использованием кукольного театра. Для составления сценария были использованы материалы кумандинского фольклора – народные игры, загадки и сказка [1]. С целью заинтересовать детей кумандинским языком была проведена малоподвижная игра «Веселый счет», загаданы загадки на кумандинском языке. В системе

двуязычия был показан кукольный театр на кумандинском языке с переводом на русский. Дети с большим интересом смотрели сказку, а затем и сами стали активными участниками кукольного представления.

А также мы приняли участие в кумандинском народном празднике плодородия «Коча Кан», на котором провели для детей «Объединения кумандинцев Алтая» в г. Бийске мастер-класс по кукловождению. Ребята учились элементам кукловождения и пробовали себя в роли актеров-кукловодов. Затем был показан совместный кукольный спектакль по сказке «Колобок» на кумандинском языке.

Проведенная работа доказывает эффективность использования сказок в театрализованной деятельности как средство приобщения дошкольников к родному языку.

**Литература:**


1. Амирова А.Д. Сказка «Колобок». Бийск: Издательский дом «Бия», 2022. 8 с.
2. Антипина Е.А. Театрализованная деятельность в детском саду: игры, упражнения, сценарии. М.: ТЦ Сфера, 2009. 128 с.
3. Найденова Е.А. Дидактическая система и модель «Север-стрим»: развивающая речевая среда. Школьный лагерь этнокультурной и профориентационной направленности на языках малочисленных народов Севера: методическое пособие. М.: РУСАЙНС, 2022. 522 с.
4. Сатлаев Ф.А. Кумандинцы. Историко-этнографический очерк XIX – первой четверти XX века. Горно-Алтайск, 1974. 198 с.
5. Сысоев Е.В., Науменко Н.С. Кумандинцы – дети гор. Методическое пособие. Барнаул: АКЦНТиД, 2005. 104 с.
6. Тукмачев-Соболеков Л.М. У истоков древнего Алтая. Пособие для высших учебных заведений и школ. Бийск: типография Бийского педагогического Государственного университета, 2001. 182 с.
7. Яшина В.И., Алексеева М.М. Теория и методика развития речи детей: учебник для студ. учреждений высш.

образования / под общ. ред. В.И. Яшиной. М.: Академия, 2016. 448 с.

© Мишустина Н.В., 2024

**УДК 811.512.141**

***Муллағолова Айгүзәл Рөстәм ҡыҙы.,***
*магистрант, Өфө университеты,*
***Абдуллина Гөлфирә Риф ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, профессор,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ.*

## SMS – заманса эпистоляр жанр

Хаттар – элек-электән башҡорт халҡының һөйләшеү, аралашыу сараһы булып торған, киң танылыу яулаған, боронғонан килә торған айырым ҡалыплашҡан традициялары булған жанр [1: 416; 2: 169]. Тел ғилемендә улар үҙҙәренең уникаль яҙыу ҡалыптары, ҡағиҙәләре, үҙенсәлектәре менән айырым бер стиль барлыҡҡа килтергәндәр. Боронғо замандарҙан уҡ айырым кешеләрҙең, дәүләт эшмәкәрҙәренең бер-береһе менән үҙ-ара мөнәсәбәттәре махсус яҙышыу аша барған. Ундай юл менән аралашыу тормошта ҙур урын алып торған. Аҡ табаҡ биттәренә кешеләр бар уйҙарын, хистәрен, ҡыуаныслы, аяныслы хәбәрҙәрен теркәп, ошо ҡағыҙ битенә бар күңелен һалып оҙон-оҙон хаттар яҙғандар. Унан аҙналар, айҙар, хатта йылдар буйы яуап хат көткәндәр. Яҡын кешеһенән алған хатты кемдер йылы бер иҫтәлек итеп ғүмер буйы ҡәҙерләп һаҡлаған. Бер ябай ғына ҡағыҙ бите кешеләрҙе шулай берләштергән, ҙур ҡиммәткә эйә булған.

Ләкин ваҡыт бер урында тормай, ул бара, йүгерә һәм хатта оса... Ваҡыт менән бергә беҙҙең көндәлек тормошҡа яңынан-яңы әйберҙәр, технологиялар килә. Кеҫә телефоны, Интернет, компьютер, айпад... Бөгөнгө көндә тормошто һәм йәшәйеште интернетһыҙ, телефонһыҙ, социаль селтәрҙәрһеҙ күҙ алдына ла килтереүе ауыр. Мәғлүмәт-коммуникация технологияларының өҙлөкһөҙ камиллашыуы менән бәйле элекке традицион хат алышыу урынына

кешеләр хәҙер социаль селтәрҙәрҙә SMS менән генә аралаша. Йылы хәтирәләр һаҡлаған элекке хаттар хәҙер инде үҙҙәре иҫтәлек булып тороп ҡалдылар.

Хәҙерге онлайн-аралашыу коммуникацияның яңы формаларын тыуҙыра: үҙенсәлекле тел саралары йыйылмалары, айырым грамматик һәм синтаксик биҙәлештәр, стилистик үҙенсәлектәр, мәғлүмәтте визуаль күрһәтеү саралары (стикерҙар, эмодзи, смайликтар һ. б.).

Көндәлек онлайн-аралашыуҙа барыһы ла, нигеҙҙә, смайликтар һәм стикерҙар менән эш итә. Смайликтарҙы 1963 йылда Америка рәссамы Харви Болл уйлап сығара: йылмайыуҙы түңәрәктәге ике нөктә һәм дуға формаһында күрһәтә [3: 10]. Смайликтарҙың кин таралыуы үткән быуаттың етмешенсе йылдарына уҡ тура килә. Быға «йылмайыу» формаһының рекламала киң ҡулланылыуы сәбәпсе була. Улар менән бер рәттән стикерҙар ҙа килеп сыға башлай. Стикерҙарҙы 2011 йылда Японияла уйлап сығаралар. Хәҙерге йәштәр SMS-та күпселек осраҡта киләһе смайликтарҙы ҡулланалар:

:-) (көләс),

:-\ (күңелһеҙ).

;-) (күҙ ҡыҫыу).

:-* (үбеү) һ. б.

SMS-хәбәрҙәрҙә смайликтар элегерәк телмәрҙә ҡулланылған үҙенсәлекле ныҡынған һүҙбәйләнештәрҙе, образлы әйтемдәрҙе алыштыра бара. Улар бигерәк тә эмоцияларҙы белдергәндә күҙәтелә. Йәнле телмәрҙәге үҙенсәлекте, телебеҙ байлығын күрһәтеп тороусы фразеологизмдар һәм әйтемдәр урынына уҡыусыларҙың SMS-хәбәрҙәрендә смайликтар ҡуйыла:

Элек:

*Көлә-көлә хәлем бөттө!*

*Бик ҡыҙыҡ!*

*Туйғансы көлдөм!*

Хәҙер оҙон һүҙ яҙып торғансы уҡыусылар смайликтар ҡуя: ))), хах, XD



Бынан тыш, хәҙерге заманда балалар сәләмләү, күңел торошон, кәйефтәрен белдергән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр урынына заманса стикерҙар ҡулланалар. Мәсәлән:















Электрон хәбәрҙәр тормошобоҙҙан «конвертлы хат» кеүек матур төшөнсәне беҙҙең йәшәйештән ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Ә бит был хаттарҙа кешеләр үҙ фекерҙәрен, тойғоларын, кисерештәрен, эмоцияларын белдерә, шулай уҡ үҙендә телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләй. Хаттарҙы ҡат-ҡат уҡырға, ус менән түшкә терәп ҡәҙерләргә һәм ҡумталарҙа

оҙаҡ йылдар һаҡларға мөмкин. Ә телефондарҙа яҙылған хаттар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, былдай ҡиммәткә эйә түгелдәр.

Әйтеп китеүебеҙсә, SMS-тарҙа һөйләмдәр, хатта һүҙҙәр ҡыҫҡартылып, стикерҙар менән алмаштырылып яҙыла. Беренсе ҡарамаҡҡа, ул ҡыҫҡартыуҙың бер формаһы һәм йыйнаҡлыҡ тип ҡаралыуы мөмкин. Ләкин, һөҙөмтәлә, үҙенсәлекле нығынған берәмектәр ҡулланылыштан сыға, телмәрҙең образлылығы кәмей, туған телебеҙ ярлылана, хәбәрҙәрҙәге ҡыҫҡартылған һүҙҙәр телдең боҙолоуына, грамотаһыҙлыҡҡа, грамматика, орфография, пунктуация ҡағиҙәләрен һанға һуҡмауға килтерә. Шуға ла хәҙерге балаларҙың, уҡыусыларҙың яҙма һәм һөйләү телмәре өҫтөндә эш алып барыу, һүҙлек запасын арттырыу, әйтергә теләгән фекерҙе тулы һәм матур итеп еткерергә өйрәтеү – бик көнүҙәк мәсьәлә.

Тормоштоң хәҙерге ысынбарлығынан сығып, SMS-хәбәрҙәрҙең ыңғай яҡтарын да инҡар итергә ярамай: ваҡытты аҙ сарыф итеү, мәғлүмәт алыуҙың уңайлы ысулы, мәғлүмәтте тиҙ ҡабул итеү һәм тапшырыу.

Нисек кенә булмаһын, замананан артта ҡалып булмай. Ваҡыт алға бара, замана үҙгәрә... Йылдан-йыл беҙҙең тормошобоҙ яңы технологиялар ярҙамында еңелләшә бара, кешелек тормошон уңайлаштырыу өсөн элекке әйберҙәр урынына яңыртылғандары килә. Мессенджер, интернет һәм телефондар беҙҙең көндәлек тормошто күпкә еңеләштерә. Шулай ҙа йылы иҫтәлектәр һаҡлаған, ҙур ҡиммәткә эйә булған, оҙаҡ ваҡыт арауығында түҙемһеҙләнеп көтөп алынған ҡағыҙ хаттар тураһында онотorға ярамай!

**Әҙәбиәт**:


1. Муллагулова А.Р., Абдуллина Г.Р. Особенности эпистолярного стиля в романе Рината Камала «Таня-Танхылу» // Мир науки, культуры, образования. 2024. № 3 (106). С. 416-418.

2. Муллағолова А.Р., Абдуллина Г.Р. Хаттар стилен өйрәнеү // Заман контексында Бөйөк Ватан һуғышы: лингвомәҙәниәт һәм әҙәбиәт ғилеме аспекттары (Фронтовик яҙыусылар С. Поварисов, Ш. Биҡҡол, Р. Өмөтбаевтарҙың тыуыуына 100 йыл тулыуға ҡарата):

халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция материалдары йыйынтығы. 2024. С. 168-170.

3. Трамбл Э. Краткая история улыбки. М.: АСТ, 2007. 285 с.

© Муллағолова А.Р., Абдуллина Г.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Нарынбаева Азалия Азамат ҡыҙы,***
*студент, Өфө университеты,*
***Абдуллина Гөлфирә Риф ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, профессор,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Мәҡәл-әйтемдәрҙә күк есемдәре атамалары

Башҡорт халҡы – тәбиғәт балаһы, мәжүси халыҡ булараҡ, тауҙарға, юлдарға, йылғаларға, шишмәләргә, күктәргә ышанған. Шуға ла халыҡты уратып алған донъя – географик атамалар менән тыуған мәҡәл-әйтемдәр барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткән. Ҡош юлы, Ҡәнифә юлы, Ағиҙел, Етегән йондоҙ, Тамерҡаҙыҡ һәм башҡа географик атамалар – башҡорт халҡының быуындан-быуынға күсеп килгән тарихи урындары.

Күк есемдәрен өйрәнеү, иң тәү сиратта, башҡорт халҡының ышаныуҙарына ҡайтып ҡала. Боронғо башҡорттар күк есемдәренә ҡарап көндө, төндө, айҙы, йылды билдәләгән, уңыш йыйған, юлға сыҡҡан, ваҡиғаларҙы барлап барған. Был күренештә башҡорттарҙың тирә-йүнгә, тәбиғәткә, күк йөҙөнә иғтибарлы булыуы һәм шул мөхиткә ышанып үҫеүе күренә. Халыҡтың шуға бәйле башҡорт халыҡ ижады ынйылары бик күп. Шул рәүешле, күк есемдәрен тикшереү ошо ижадҡа нигеҙләнә.

Ай менән һанау, ҡыш, йәй, көҙ, яҙ айҙары, ҡояш, ай менән иҫәпләшеү ҙә борондан килгән. Элек сәғәттәр булмаған, ҡояш байышына, айҙың торошона ныҡ иғтибар иткәндәр. Һынамыштар ҙа шул географик атамалар менән бәйле.

Борон ата-бабалар һәр бер күк есеменең атамаһын, легендаһын белер булған. Был атамаларға ҡарата күп йомаҡтар, мәҡәлдәр сығарғандар. Әлбиттә, был бик яҡшы күренеш, сөнки беҙҙең киләсәгебеҙ үҫеп килә, уларға ошо йәшәгән Ер шарыбыҙҙың, планеталар атамаларын, уларҙың ҡайҙан килеп сығыуҙарын, йондоҙҙарҙың легендаларын белеү мотлаҡ. Шулай уҡ, донъялағы һәр милләттең үҙенә генә хас йолалары, тормош ҡанундары, уны милләт итеп күрһәтеүсе теле бар. Тел ярҙамында халыҡтың ҡарашы, тарихы, ижтимағи һәм иҡтисади ҡаҙаныштары, ҡанундары йүнәлеш ала. Ә мәҡәл һәм әйтемдәрҙә халыҡ үҙенең быуаттан-быуатҡа һуҙылған тормош тәжрибәһен, тапҡыр аҡылын, яҡшылыҡҡа булған ынтылышын сағылдырған. Әйтелгәндәрҙе иҫбат итеү өсөн шул да етә: «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һүҙлеге»нә күк есемдәренә бәйле 105 һүҙ индерелгән. Шуларҙың бер нисәүһен миҫал итеп килтереп китәйек:

*Сыҡмаған ҡояшҡа ҡыҙынма. Ай бирҙе – ҡояш алды. Ай яҡтыһы ҡауыштырмаҫ, ҡояш нуры ҡыуандырмаҫ. Бер бите ай, бер бите ҡояш. Етмеш йондоҙ тыуһа ла, яҡтылығы айҙай юҡ. Ай байыһа, йондоҙ бар, ҡатын үлһә – балдыҙ бар. Ялҡауға ҡояш та ваҡытында сыҡмай. Ай менән көн уртаҡ, йыр менән көй уртаҡ. Өҫтөңә ҡояш сығарма. Тыуған ай – тураған ит.*

Нығынған һүҙбәйләнештәр менән дә күп миҫалдар килтерергә мөмкин. Бына улар: *Ай ҙа ҡояш* – ихлас күңелле, асыҡ йөҙлө. *Ай битен йыуа* – яңы ай тыуғандан һуң яуған ямғырға ҡарата әйтелә. *Йондоҙ һанау* – эшһеҙ йөрөү. *Йондоҙ һанарлыҡ* – түбәһе тишек-тошоҡло йорт-ҡаралты хаҡында әйтелә. *Ҡояш йөҙөн күрмәйем* – нимәгәлер ышандырырға тырышып ант иткәндә әйтелә. *Ҡояшы байыу* – даны һүнеү.

Тормош йыһан менән тығыҙ бәйле. Йыһан һәр саҡ кешелекте үҙенә тартып тора. Ваҡыт үтеү менән, кешелек планетаны йәшәйештең бер өлөшө тип ҡарай башлаған. Күк йөҙөнөң бөйөк, мәңгелек, хыялый тормошон, йәшәйешен күргән. Күк есемдәренә табына башлағандар, ә

иң яҡтыларын һәм эре төркөмдәрен бергә ойошторол атама ла биргәндәр.

Ай һәм ҡояш, йондоҙ менән бәйле мәҡәл-әйтемдәр:

*Ай байыһа – йондоҙ бар, ҡатын үлһә – балдыҙ бар. Ай бирҙе – ҡояш алды. Айға үрелгән – нурға күмелгән. Ай менән ай бер түгел. Ай битендә ҡөмөш йылтырай. Ай ҡолаҡланһа – аяғыңды нығыт, көн ҡолаҡланһа – ҡолаҡсыныңды нығыт. Ай менән ҡояш берәр генә була. Ай яҡтыһы ҡауыштырмаҫ, ҡояш нуры ҡыуандырмаҫ. Ай яҡтыртҡанда йондоҙ күренмәй. Айлы төн аҙашмаҫҡа яҡшы. Айым тура баҡҡанда, йондоҙҙарға йоҙроҡ. Айға ҡарап аҡырма, илгә бәлә саҡырма. Бер бите ай, бер бите ҡояш. Етмеш йондоҙ тыуһа ла, яҡтылығы айҙай юҡ. Ҡояш юҡ – көн юҡ. Бер күктә ике ҡояш булмай. Йондоҙ һанап, аттан ҡалған. Ялҡауға ҡояш та ваҡытында сыҡмай. Айҙың да йондоҙо бар. Өҫтөңә ҡояш сығарма. Ҡайҙа барһаң – бер ҡояш, эш эшләүҙә тиң һайлаш. Ҡояш таңһыҙ, ил дауһыҙ булмаҫ. Өмөтлөнөң ҡояшы ике. Гөлөң сәскә атмаһа, ҡояшҡа үпкәләмә, үҙеңә үпкәлә. Күктә сулпан булыуҙан һыуҙа суртан булыу артыҡ* [1].

Күк есемдәренә ҡараған номинатив берәмектәрҙең лексик мәғәнәләрен, уларҙың фразеологик берәмектәр составында бирелешен, халыҡ ижады үрнәктәрендә, йәғни мәҡәлдәрҙә, әйтемдәрҙә һәм йомаҡтарҙа сағылышын тикшереү башҡорт тел картинаһының объектив донъяны нисек сағылдырыуын асыҡларға мөмкинлек бирә. Ж.Ғ. Кейекбаев фекеренсә, дөйөм башҡорт халыҡ телендә ижад ителгән гүзәл әҫәрҙәрҙең телен, һис шикһеҙ, башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһы тип ҡарарға кәрәк, сөнки уларҙың теле дөйөм халыҡ һөйләү теленә нигеҙләнгәнлектән, бөтә башҡорттарға ла аңлайышлы [2: 207].

Быуаттар дауамында халыҡ хазинаһы булараҡ тупланған лирик йырҙарҙа, мәҡәлдәрҙә һәм фразеологик берәмектәрҙә башкорт халҡының тарихы менән берлектә кисерештәре лә асыҡ сағылыш таба.

**Әҙәбиәт:**

1. Башҡорт халыҡ ижады. X том. I китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙ. Ф.А. Нәҙершина. Өфө: Китап, 2006. 544 бит.

2. Башҡорт халыҡ ижады. Йола фольклоры. I том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1995. 560 бит.

3. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Өфө, 1980. 467 бит.

4. Каранаева С.Р., Абдуллина Г.Р. Отражение наименований небесных тел в художественных произведениях // Наука и образование в современном мире: Материалы Международной научнопрактической конференции. Караганда: Болашак-Баспа, 2015. С. 160-162.

5. Кейекбаев Ж.Ғ. Ғилми хеҙмәттәр һәм һайланма йыйынтығы. II том. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө: Китап, 2014. 207 бит.

© Нарынбаева А.А., Абдуллина Г.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Нарынбаева Азалия Азамат ҡыҙы,***
*студент, Өфө университеты, Өфө ҡ.,*
***Сәғитова Айгөл Ғәни ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәрендә «дуҫлыҡ» концептының сағылышы

Тәрән мәғәнәле, тапҡыр һәм бик йыйнаҡ итеп төҙөлгән мәҡәл-әйтемдәр халҡыбыҙҙың изге һүҙе, ҡиммәтле аманаты булып, быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Бүтән жанрҙар үҫешендәге кеүек, мәҡәл һәм әйтемдәрҙең үҫешендә лә башҡорт халҡының донъяға ҡарашы, төрлө шарттарҙа эҙмә-эҙлекле камиллаша барған художестволы фекер һәм аң үҫеше сағыла. Шуға ла халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүҙә был жанрҙың ҡиммәте ифрат ҙур.

Мәҡәл – фекергә иң бай булған ижад төрө. Халыҡ теленең образлы мөмкинлектәре лә мәҡәлдә ныҡ сағыла. Элек-электән халыҡ дуҫлыҡ тураһында мәҡәл-әйтемдәр ижад иткән. Мәҫәлән, *«Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма», «Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә йән бирер», «Дуҫ – дуҫтың көҙгөһө», «Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер», «Дуҫ килгән көн – байрам көн», «Дуҫ көлгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә», «Дуҫ һөйөнһөн, дошман көйөнһөн», «Дуҫ хаҡы өсөн йән фиҙа», «Дуҫ әйтһә – ҡалма, дошман әйтһә – барма», «Дуҫты тапҡансы эҙлә, тапһаң – һаҡла», «Дуҫы күпте яу алмай», «Дуҫһыҙ кеше – ҡанатһыҙ ҡош», «Дуҫың күп булһа, дошманың үҙе үлер», «Дуҫың ниндәй – ҡәҙерең шундай», «Дуҫың яныңда булмаһа, донъяның йәме юҡ», «Ике яҡшы дуҫ булһа, ике аранан ҡыл үтмәҫ», «Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын», «Кейемдең яңыһын маҡта, дуҫтың иҫкеһен маҡта», «Дуҫыңды дуҫ итә бел, эшеңде эш итә бел», «Дуҫың һуҡмағына үлән үҫтермә», «Дуҫтар менән татыу йәшәү яҡшы», «Ысын дуҫ бәхетһеҙлек килгәндә һанала»* һ.б.

*«Дуҫ – дуҫтың көҙгөһө»*. Ысынлап та, әгәр дуҫың ышаныслы икән, ул, һис шикһеҙ, көҙгө кеүек һинең кәйефеңде сағылдыра. Һиңә һөйөнөс килгән икән, уға ла күңелле, ҡайғыға юлыҡһаң, уның да йөрәге әрней. Улай ғына ла түгел, дуҫ – был йәһәттән уртаҡ фекерҙәш тә. Ошондай осраҡта дуҫлыҡ ныҡлы, бер-береһенә таяныс кешеләр берҙәм була. *«Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма», «Дуҫы ныкты яу алмай», «Дуҫтың дуҫ икәне бәлә килгәндә беленер»* кеүек мәҡәлдәр ҙә тап юғарыла әйтелгәндәрҙе нығыта [3: 23].

Тик халыҡ дуҫлыҡ бар ерҙә дошман барлығын да иҫкәртмәй ҡалмай. Ә инде ысын дуҫ тип йөрөгән кешең аҫтыртын дошман булып сыҡһа, был – иң хәтәре! Шуға ла *«Боҙолошкан дуҫ дошмандан да яман»* тигән аҡыл әйәләре. *«Дошмандан илең һаҡла, дуҫыңдан серең һаҡла», «Дошманыңды танырға тырыш – дуҫ кейемендә булмаһын», «Дуҫың тип серең һөйләмә, дуҫыңдың да ысын дуҫы булыр, ул да һөйләр дуҫына», «Ысын дуҫ артыңда*

*мактар», «Ялған дуҫ ялағай булыр»* кеүек мәкәлдәр ҙә ысын дуҫты ялған дуҫтан айырырға өйрәтә.

Эс серҙәрен бушатырҙай ысын дуҫ күп булмай. Ундай дуҫты табыу һынауҙар аша үтә. Дуҫтың иң яманы – ике йөҙлө булыуы. *«Ике йөҙлө дуҫтан дошман яҡшы»,* тип киҫәтә был турала халыҡ мәкәле. Аҡһаҡалдар, дуҫыңа баш булма, иш бул, ти. Утты-һыуҙы кискән, күпте күргән оло быуын кешеләренең һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк, сөнки уларҙа халыҡ аҡылы ята. Дуҫ булғас, уның ҡәҙерен дә белеү мөһим, әммә халыҡ әйткәнсә: *«Ысын дуҫ көлгәндә түгел, ә бөлгәндә беленә».*

Заман башҡа – заң башҡа, тиҙәр. Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренә дуҫлыҡҡа аҡсалы кешеләрҙе генә «һайлай». Тимәк, аҡсаң күп булһа, имеш, дуҫтарың да күп булыр. Был хаҡта халыҡ бик үткер итеп: *«Кеҫәң ҡалын булһа, дуҫтар табыла»,* – тигән. Ләкин аҡсаға ғына ҡоролған дуҫлыҡты ысын дуҫлыҡ тип әйтергә тел әйләнмәй. Был осраҡта аҡса бөтһә, «дуҫлыҡ» та селпәрәмә киләсәге көн кеүек асыҡ. Донъяла үҙенең ысын дуҫын ғүмере буйы таба алмаған яңғыҙ кешеләрҙең булыуы ла ғәжәп түгел. Уларҙың тормош рәүеше, моғайын, *«Кешенең иң ышаныслы һәм тоғро дуҫы – ул үҙе»* тигән әйтемгә ҡайтып ҡалалыр.

Дуҫ – ул һинең шатлығыңды уртаҡлашыусы, ҡайғыңды таратыусы, йыуатыусы, күңелеңә иң яҡын кешең. Дуҫтарҙың ҡараштары тап килеүе – оло ҡыуаныс. Береһе – бер, икенсеһе икенсе төрлө һүҙ һөйләгәндәр тиҙ хушлаша. Дуҫлыҡҡа тап төшмәһен өсөн һәр саҡ үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттәрҙе һаҡлай белергә кәрәк. *«Дуҫҡа баш булмайҙар, тиң булалар»,* тип өйрәтә халыҡ аҡылы. Дуҫыңа вәғәҙә биргәнһең икән – мотлаҡ үтәргә тейешһең. *«Алдаҡсы дуҫың булғансы, гәҙел дошманың булһын»,* ти ошо хаҡта халыҡ мәкәле.

Иң насары – көнләшеү. Дуҫыңдың уңышына, байлығына көнләшеү йүнһеҙлек, күңел боҙоҡлоғо хаҡында һөйләй, киреһенсә, уның һөйөнөстәренә һөйөнөп, бер ғаилә кеүек йәшәргә кәрәк. Ошо хаҡта халҡымдың мәңге йәшәр мәкәлдәренең береһе шулай ти: *«Дуҫҡа дуҫ бул, йөк булма».*

Дуҫлыҡ – иң изге, йылы мөнәсәбәтте аңлатыусы төшөнсә. Мәҫәлән, *«Кеше – дуҫы менән, ҡар бөртөктәре менән көслө»,* тиҙәр. Донъяла кеше бер үҙе генә бөтә ауырлыҡты еңә алмай, уға һәр саҡ дуҫтар кәрәк. Дуҫлыҡ һынауы ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға, бергә булырға, күҙгә ҡарап бер-береңә дөрөҫлөктө әйтергә өйрәтә.

*«Дуҫ күҙеңә ҡарап әйтер, дошман артыңдан ғәйбәт һатыр»,* ти халҡыбыҙ. «*Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер»,* тип тә әйтәләр. Кем һине саманан тыш маҡтай – ундай дуҫтың булмауы хәйерлерәк, быны боронғоларҙың *«Дуҫ битлеген кейгән дошман хәтәр»* тигән мәҡәле дәлилләй.

Ысын дуҫлыҡты ауыр саҡта беләһең. Иң ҡәҙерле дуҫ тип һанаған кешең һине ҡайғылы мәлдә ташлап китһә, был дуҫлыҡ түгел инде. Ҡыйын саҡта ысын дуҫлыҡтың һыналыуы хаҡында «*Өйөңдөң өй икәнен – ҡыш төшкәндән, дуҫыңдың дуҫ икәнлеген эш төшкәндән һуң белерһең»* тигән мәҡәл бар. Дуҫ тип йөрөгәнең юлыңа соҡор ҡаҙып ҡуйһа, дуҫлыҡ тураһында һүҙ ҙә йөрөтөү мөмкин түгел. *«Йылан менән дуҫ булһаң, ағыуланырһың»,* тигән был турала халыҡ [1:447].

Яңы дуҫтарың күп булһа ла, иҫке дуҫтар ҡәҙерлерәк, яҡыныраҡ, сөнки улар менән һин һыуҙы ла, утты ла кискәнһең. Тимәк, *«Кейемеңдең яңыһын маҡта, дуҫтың иҫкеһен маҡта»*, йә иһә *«Бер иҫке дуҫ ике яңы дуҫтан яҡшы»*. Дуҫһыҙ йәшәү – йәшәү түгелдер. Дуҫлыҡ юлы өҙөлмәһен өсөн кеше бер-береһенә ышанырға, иғтибарлы булырға, ярҙамлашырға тейеш. Гел бергәләшеп йәшәү кәрәк, сөнки берлектә – көс.

Башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәрендә «дуҫлыҡ» концептының төп йөкмәткеһен түбәндәге төшөнсәләр тәшкил итә: беҙҙе уратып алған мөхит; кешелек йәмғиәте; кешенең күңел торошо. Кешенең донъяға ҡарата үҙ ҡарашы булырға тейеш, әммә ул үҙ талаптарын ғына ҡәнәғәтләндермәйенсә, матурлыҡҡа табынып, изгелек ҡылып йәшәргә тейеш.

Дуҫ – башҡорт тел картинаһында иң төп рухи концепттарҙың береһе. Ул шатлыҡта ла, ҡайғыла ла, бәлә

килгәндә лә – һәр ерҙә һине яҡлаусы, ҡурсалаусы, кәңәшсе, ярҙам ҡулы һуҙыусы яҡын кеше. Ата-олатайҙарыбыҙ элек-электән дуҫ һайлауға бик талапсан булған. Юғары әхлаҡи һәм интеллектуаль талаптарға яуап биргән, ауырлыҡтарҙа һыналған кеше генә дуҫ була ала. Дуҫҡа ҡарап кешенең йөҙөн билдәләйҙәр.

Башҡорттарҙа *«дуҫ»* концептының ҡатын-ҡыҙ аналогы – *«әхирәт»* бар, әммә *«дуҫ»* концептының йөкмәткеһе «әхирәт» концептына ҡарағанда күпкә киңерәк.

Башҡорт тел картинаһында *«дуҫ»* концепты *«дуҫлыҡ»*, *«яҡтылыҡ»*, *«яҡшылыҡ»*, *«матурлыҡ»* концепттары менән бәйле.

*«Дуҫ»* һүҙе фарсы һүҙенән алынған. *«Дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйле, изге теләкле кеше, яҡын иптәш»* мәғәнәһен бирә, киреһе – *дошман*. Миҫалдар: йәшлек дуҫы. Йән дуҫ – үтә ҡәҙерле, иң яҡын кеше. *Йән дуҫтай күреү*. Икенсе мәғәнәһе – бик яҡын, йылы мөнәсәбәтле, дуҫлыҡ хисе һаҡлаған. Миҫал: *дуҫ егет*. *Дуҫ* һүҙенең синонимдары: *әхирәт, әшнә, иптәш, ҡушаға*. Антонимдары: *дошман, дошманлыҡ, кенә, хаслыҡ, нәфрәт*.

*«Дуҫ»* һүҙе башҡорт халыҡ ижадының мәҡәл-әйтемдәрендә бик йыш осрай. Мәҫәлән: *«Дуҫын яҡламаған яуға ҡалыр». «Йылан менән дуҫ булһаң, ағыуланырһың». «Аҙығың булһа – арымаҫһың, дуҫың булһа бәләгә тарымаҫһың». «Айырылыр дуҫ эйәрҙең арт ҡашын һорай». «Аҡсаң булһа – аш күп, ашың булһа – дуҫ күп». «Аҡсаң күп булғансы, дуҫың күп булһын». «Ас менән дуҫ булма». «Атаң барҙа дуҫ эҙлә, атың барҙа юл эҙлә». «Атайың үлһә лә, атайыңдың дуҫын ташлама». «Атаһы дуҫтың балаһы дуҫ». «Ашағанда дуҫ күп, башҡа бәлә төшһә, береһе юҡ». «Бала – бауыр, дуҫ тамыр». «Бер күргән – белеш, ике күргән – таныш, өс күргән дуҫ». «Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә, йән бирер». «Дуҫ менән дуҫ булғанға шатлан, дошман менән дуҫ булыуҙан һаҡлан». «Кейемдең яңыһын, дуҫтың иҫкеһен маҡта»* һ.б [2:76].

*«Дуҫлыҡ»* концепты башҡорт халҡының мәҡәл-әйтемдәрендә һәм рухи мәҙәниәтендә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр формаһы булараҡ юғары әхлаҡи ҡиммәтте

сағылдыра. Дуçлыҡ – бер-береңә ярҙам итеү генә түгел, ә күңел яҡынлығы һәм кешеләр араһындағы асыҡлыҡты, эскерһеҙлекте сағылдырыусы мөнәсәбәт. Ул кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе генә түгел, ә улар араһындағы тойғоно ла сағылдыра, сөнки дуçлыҡ – тойғо яҡынлығы һөҙөмтәһендә тыуған үҙенсәлекле диалог.

*«Дуçлыҡ»* концепты мәғәнәһенең нигеҙе булып *«рухи туғанлыҡ»* төшөнсәһе тора, йәки дуçлыҡ берҙәм эшмәкәрлек процесында үҙ-ара күңел ятыу шарттарында тыуа. Дуçлыҡ – кешеләрҙе берләштереүсе мөһим социаль-әхлаҡи ҡиммәт, шунлыҡтан был концепттың киң мәғәнәлә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе генә түгел, ә социаль мөнәсәбәттәрҙе сағылдырыуы осраҡлы түгел.

Башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәрендә һәм тел картинаһында *«дуçлыҡ»* концепты тоғролоҡ, намыçлылыҡ, ғәҙеллек, ихтирамлылыҡ, иғтибарлылыҡ, эскерһеҙлек, киң күңеллелек кеүек төшөнсәләрҙе үҙ эсенә ала. Мәçәлән: *«Халыҡ дуçлығы – күңел хушлығы». «Бурыс алып, дуçлығың юғалтма, бурыс биреп, дошман күбәйтмә». «Дуçлыҡ беләктә түгел, йөрәктә». «Дуçтың дуçлығы ҡара көндә беленер». «Дуçтың дуçлығы яуҙа беленә». «Ҡош ҡанат менән, кеше дуçлыҡ менән көслө»* һ.б.

Шулай итеп, *«Дуçлыҡ»* концепты башҡорт халҡының мәҡәл-әйтемдәрендә һәм рухи мәҙәниәтендә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр формаһы булараҡ юғары әхлаҡи ҡиммәттәрҙе сағылдыра.

**Әҙәбиәт**:

1. Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда. I том / Рәсәй Фәндәр Академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге. Татар, тел һәм әҙ институты. М.: Рус.яз., 1993. 862 бит.

2. Башҡорт халыҡ ижады: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Яуаплы ред. К. Мәргән. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. 472 бит.

3. Галин С.Ә. Заман һәм фольклор. Өфө: Башҡортостан китап нәштиәте, 1972. 111 бит.

4. Карасик В.И. Языковой круг: личность, концепты, дискурс. Волгоград: Перемена, 2002. 477 с.

© Нарынбаева А.А., Сәғитова А.Ғ., 2024

**УДК 821.512.141**

***Нафиков Арыҫлан Руслан улы,***
*студент, Өфө университеты*
***Солтанбаева Хәҙисә Вәли ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, профессор,*
*Өфө университеты, Өфө к., БР*

# Рәшит Назаров поэзияһында синонимия, антонимия һәм омонимия күренештәре

Рәшит Назаров – илленсе йылдар аҙағында – алтмышынсы йылдар башында үҙенең берсә моңһоу ҙа, берсә һағышлы ла, берсә уйсан, берсә тормошсан шиғырҙары менән әҙәбиәткә аяҡ баҫҡан шағир. Уның поэзияһына берсә романтик, публицистик пафос, берсә лирик нескәлек, берсә драматик үткенлек менән көр тауыш һәм сағыу буяуҙарҙа сағылдырыу хас. Р. Назаров ижады – күркәм һүҙ сәнғәтенең сағыу өлгөһө, әҫәрҙәренең теле халыҡсан, бай, һығылмалы, образлы. Уның шиғриәте эске моңға бай.

Нәфис һүҙҙәрҙең ҡөҙрәте киң. Шуға айырым һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр лексик саралар нәфислектең, поэтиканың мөһим сифатына әйләнәләр. Мәғәнә оҡшашлығы йәки айырмалығы йәһәтенән уларҙы синоним, антоним, омоним, фразеологизм, актив һәм пассив ҡулланылыш күҙлегенән архаизм, неологизм, варваризм һ. б. төркөмдәргә бүлергә мөмкин. Р. Назаров әҫәрҙәрендә уларҙың ҡулланылыш үҙенсәлектәрен ҡарап китәйек.

Синонимик һүҙҙәрҙе бер шиғыр юлында, бер строфала ҡулланыу ысынбарлыҡ картиналарын, шағир әйтергә теләгән фекерҙе конкретлаштырып, һынландырып һәм шул образды ҡабартып, көсәйтеп биреүгә килтерә. Бының асыҡ миҫалын Р. Назаровтың түбәндәге әҫәрҙәрендә күрергә була:

… Шулай килә был *әүәлдән,*
*Әлмисактан, донъя яратылған мәлдән,* -
Һәр бер ҡулда биш бармаҡ бар… («Алйотбай»).

Был шиғыр юлдарында *әүәл, әлмисаҡ, донъя яратылған мәл* – синоним һүҙҙәр.

*Оло, ҙур* кәүҙәле. Һөйләнә ул
*Эре* генә, үҙен ҙур тотоп… («Сүпкә тиң…»).

Был юлдарҙа *оло, ҙур* һәм *эре* синонимдары аша автор шиғыр фекерен көслө итеп еткереүгә өлгәшкән. Уларҙы ҡулланып, автор хәл-ваҡиғаның ни тиклем көслө тәьҫир итеүен күрһәтеүгә өлгәшкән.

… Һуң был нимә? Мөғжизәме?
Ниндәй ғәжәп серле эш? («Күршем»).

… Ә Бөркөт! Был *кеүәт, көс* менән
Турғайҙар ҡанаты булһа ла иңендә
Йәшәр, шат, ирҙәрсә, мин беләм! («Бөркөт һәм Турғай»).

Р. Назаров поэтик әҫәрҙәрендә синонимдарҙы бик уңышлы ҡуллана. Синонимдар шиғырҙарҙа бер үк һүҙҙе ҡабатлауҙан ҡотҡарып, авторҙың һүҙҙәр менән оҫта эш итә белеүен күрһәтеп килә. Улар һүрәтләнгән күренештәрҙе төрлө яҡлап күрһәтергә мөмкинлек бирә, шулай уҡ әҫәрҙең телен һығылмалы, күркәм яһарға ла булышлыҡ итә.

Күңел тулы дәрттәр ҡайҙа киткән,
Ҡайҙа, дуҫтар*, ғазап, һағышым*?.. («Ямғыр алдынан»).

… *Шатлана* бабай, *кинәнә…* («Ҡойо ҡаҙыусы бабай»).

*Етди, олпат, бик эшлекле* төҫ сығарып,
Йәйен тотор төҫлө *эре сырай* менән… («Балыҡсы»).

*Я*ҙғы нурҙарға мансылды
*Ҡыр, туғай* ере («Бөрө»).

Шулай итеп, автор синонимдарҙы бер шиғыр, куплет, ҡайһы саҡта юл эсендә ҡулланып, кешенең хис-тойғоларын тулыраҡ, тәбиғәт күренештәрен гүзәлерәк, матурыраҡ биреү маҡсатына ирешкән.

Миҫалдарҙан күренеүенсә, автор шиғриәт донъяһында синонимдарҙы бик оҫта ҡуллана:

… Һәм бөгөндөң *ҡеүәт, ҡөҙрәте…* («Октябрь ғүмере»).

Көн *йылмайҙы*, ҡояш *көлдө…*
«Тормош гүзәл!» – тинем («Аҡ күбеккә төштө атым»).
Йәшәүеңдең хаҡы – *бурыстарың*

Бирелмәгән *бирәсәгең* бар… («Йәшәүеңдең хаҡы – бурыстарың …»).

Рәшит Назаров – ҙур талант эйәһе, тәбиғәттең бар матурлығын сағыу һүҙҙәр менән һүрәтләүҙә тавтологиянан да бик оҫта ҡотола:

Шишмә итеп *моң* урғылта, –
Дәртле *йыр көйләр* шишмә («Йырлайым ялан йырын»).

Синонимдарҙы йәнәшә йә һәр юл һайын ҡулланыу – бер үк нәмәнең йәки ваҡыттың мәғәнә нескәлектәрен тотоп алыу – һүрәтләнгән даирәнең бай йөкмәткеле булыуына ла өлгәшә:

…Йәлләмәне *дәүер* көмөштө!
Йәлләмәне *заман* алтынды («Аҡһаҡалдар табыны»).

…Дүрт офоҡҡа *караным* мин
Йөрәк ҡағып ғәйрәт менән,
*Байкайым* мин
Ҡалдырмайса өҫтө-аҫты («Уралымдың баҫтым да ҡап уртаһына…»).

Был шиғырға ингән синонимдарҙың мәғәнә төҫмөрҙәрен асыу шиғырҙың тел үҙенсәлеген тағы ла нығыраҡ тойорға ярҙам итә. Автор әҫәрҙең тәүге строфаһын «ҡараным мин» тип башлай, ә һуңынан «байҡаным мин» тип тамамлай, ә «байҡау» һүҙенең мәғәнәһе күпкә киңерәк, һәм ул «офоҡ» һүҙенә туранан-тура бәйләнгән.

Р. Назаровтың шиғырҙарынан омонимдарға миҫалдар уйлап та, эҙләп тә тормаҫтан «Йәшен» шиғырын атарға була. Был шиғыр башҡорт теленән омонимдарҙы үткән саҡта миҫал итеп дәреслектәргә лә индерелгән. *Йәшен* һүҙе был шиғырҙа ике генә мәғәнәне түгел, хатта биш мәғәнәне аңлата!

1. Йәшен – күк күкрәп ямғыр яуған мәлдә күк йөҙө менән ер араһында көслө электрик разряд арҡаһында барлыҡҡа килгән атмосфера күренеше (автор мөхәббәтте ошо разряд менән сағыштыра); 2. Йәш-*ен*, кешенең йылдар уҙған һайын иҫәпләнә килгән биологик йәше; 3. Йәш-*ен,* шулай уҡ биологик йәшкә арналған термин, ләкин был осраҡта йәш кешене әйтеү, мәҫәлән оло, ҡарт кеше

һүҙҙәренең антонимы; 4. Йәшен – ҡылымдың II зат формаһы, *кас* һүҙенең синонимы; 5. Йәш-*ен* күҙ йәштәре, кешенең физиологик (ауыртыныу, һыҙланыу) йәки психологик (кемделер юғалтыу, насар һүҙҙәр ишетеү, йә иһә киреһенсә шатланыу) хәлендәге күҙ тирәһендәге күҙәнәктәрҙән сыҡҡан әскелт тәмле, үтә күренмәле шыйыҡса.

Р. Назаров «Йәшен» шиғырында *йәшен* һүҙенең биш мәғәнәһен йөкмәткегә тура килтереп таба алған. Был шиғыр бик уңышлы килеп сыҡҡан, хатта классик өлгөгә әйләнгән, тиһәк тә хаталанмабыҙ.

«Хөрмәт» шиғырында омонимдар кеше исеменең мәғәнәһен асырға ярҙам итә. Автор исеме есеменә тура килгән кеше тураһында бәйән итә:

Хеҙмәтле кеше булғанға
*Хөрмәт*ле беҙҙең *Хөрмәт,*

Ким Әхмәтйәнов: «Омонимдар күбеһенсә ҡыҙыҡлы рифмалар, каламбурҙар һәм һүҙ аймылыштырыуҙар барлыҡҡа килтереү өсөн ҡулланылалар» – тип яҙа. Р. Назаровтың омонимдар ҡулланылған шиғырҙары ошо һүҙҙәргә тулыһынса тура килә:

Ҡайын йәп-йәш япраҡ *яра*
Ышығында көтә Сара –
«Мине түгел!» Ана*, кара:*
*Ҡара* төндө *яра-яра,*
Унда бүтән егет бара.
Төнө ҡара … һыҙлай *яра* («Сара»).

Был шиғырҙа хатта ике һүҙҙең омонимдары бирелгән: *яра* – һүҙенең өс мәғәнәһе һәм *кара* һүҙенең ике мәғәнәһе.

Ян-яғынан ялҡын аға,
*Уңдан-һулдан* тулҡын ҡаға, -
Алышалар көрәшселәр! («Ғорур көймә»).

Телдәге бөтә һүҙҙәрҙең дә антонимдары булмай. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһендә ҡапма-ҡаршылыҡҡа барып етерлек сифат билдәһе булғанда ғына уларға ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр табырға мөмкин. Шуға күрә лә төп сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең антонимдары күп була. Р. Назаров уларҙы бик оҫта ҡуллана: *йомарт – һаран, кыйыу – куркак* һ. б.

Куба *алыҫ*, ул – *йыракта*,

Куба яҡын, ул – йөрәктә («Ғорур көймә»).

Күктә ай ҙа ҡояш ҡына миңә таныш.

Һин дә миңә ниндәй *якын*, ниндәй *алыҫ*! («Күктә ай ҙа ҡояш ҡына»).

…Йөрәк аша аҡкан ҡан бит әйләндерә

Күсәрендә тыуған ерҙе *көнөн-төнөн*… («Ерем минең, ғорур, гүзәл Ерем минең…»).

Тирә-яҡ – *караңғы, якты* юҡ,

Ҡыҫыла һулышым, ҡыҫыла,

Ай, һалҡын йәйе лә, ҡышы ла! («Тирә-яҡ – ҡараңғы, яҡты юҡ…»).

Был миҫалдарҙа *йәй – ҡыш* антонимдары исем һүҙ төркөмөнә ҡарай.

Күктә *ай* ҙа *ҡояш* ҡына миңә таныш.

Һин дә миңә ниндәй яҡын, ниндәй алыҫ! («Күктә ай ҙа ҡояш ҡына»).

*Бәхет – сикһеҙ. Ҡайғы – ҡара нөктә.*

Бәхет миңә *таңы, кисе* лә.

*Үлмәҫ* бәхет! *Балҡыр*! Сикһеҙлек һуң

Һыямы ни нөктә эсенә! («Ҡайғы менән күптән күрешкән юҡ»).

Ләкин ғүмер *илап* йәшәгәндәр

Көнгә ҡарап *көлһә*, –

Мин илайым, йәште тигеҙ бүлеп

Йөрәк менән бергә («Илайым»).

*Бәхет* йыры – иң бөйөк йыр,

Ул йөрәктән урғып таша, –

*Ҡайғы* йыры – күңелһеҙ йыр,

Ул йөрәктең һутһыҙ йәше («Бәхет йыры…»).

Үткән *ҡайғыларым, шатлыктарым*,

Ниңә киттегеҙ мине ташлап?.. («Иҫкә төшөрөү»)

*Көндөҙөн* – төбөнән – *ҡояш,*

*Кисен – ай* бағып тора («Күңелем минең…»).

Лирик шиғырҙарында Р. Назаров тәбиғәт күренештәрен кешенең уй-кисерештәре менән йәнәш ҡуйып һүрәтләргә ярата, шул ваҡытта ул тәбиғәт

күренештәрен белдергән антонимлы иштәр менән эш итә лә инде.

*Ҡышҡы* күкрәү Ерҙе байҡап уҙҙы…

…Елдәр тынды. Ҡарлы баҫыуҙарға

*Яҙғы* гөлдәр еҫе аңҡыны… («Ҡышҡы күкрәү»).

Был шиғырҙа Р. Назаров донъялыҡта бер нәмәнең дә мәңгелек түгеллеге тураһында уйлана.

*Күк* күкрәтер көсөм бар, тиһең һин,

*Ер* тетрәтер көсөм бар, тиһең («Күк күкрәтер көсөм…»).

Был шиғырында шағир ошондай антонимдар ҡулланып, үткән ғүмерендәге үкенесле эштәрҙе барлай.

*Кескәй* шатлыҡ ҡына һөмһөҙ була,

*Оло* бәхет күп саҡ өнһөҙ була («Ултырайыҡ әле тып-тын ғына»).

Шулай итеп, антонимдар, күркәм телмәр сараһы булараҡ, Р. Назаров ижадында әүҙем ҡулланыла. Улар, башлыса, тормоштағы күренештәрҙең ҡатмарлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыу, бер үк образдың ике сифатын ҡапма-ҡаршы ҡуйыу, кешеләрҙең ике йөҙлөлөгөн сағылдырыу өсөн хеҙмәт итәләр.

*Тәүге* һөйөүме был,

Бәлки, *һуңғыһы*лыр?

Мин ҡайһыһын көттөм,

Бәлки, ул ошолор («Тәүге һөйөүме был…»).

Мин үҙем Рәшит Назаров поэзияһын күңелемә яҡын күрәм. Ул үҙендәге уй-фекерҙәрен, хис-моңдарын тәбиғи итеп, үҙенеке генә итеп бирә белгән. Уның бер шиғырҙарын уҡығанда, күңел йырлап торһа, икенсе шиғырҙары менән танышҡанда, йән илай. Рәшит Назаров шиғырҙары халыҡ күңеленә үтеп инерлек, рухи көслөлөгө менән әсир итә. Әҫәрҙәрендә ул үҙ заманының мәсьәләләрен ҡыйыу күтәрә, тормоштағы хәүефле хәлдәр тураһында алдан иҫкәртә. Шағирҙың әҫәрҙәре һүҙ сәнғәтен яңы эстетик юғарылыҡҡа күтәреүҙә оло күренешкә әйләнде.

**Әҙәбиәт**:

1. Бикәнәсова Р. Ҡулъяҙмалар шағир һүҙен һаҡлай (Рәшит Назаровтың тыуыуына – 70 йыл) // Ағиҙел. 2014.

№ 11.
2. Назаров Р. Йәшен. Өфө: Китап, 1994. 328 б.
3. Назаров Р. Әҫәрҙәр. Ике томда. I том: Шиғырҙар, мәҫәлдәр. Өфө: Китап, 2002. 416 б.
4. Назаров Р. Әҫәрҙәр. Ике томда. II том. Өфө: Китап, 2002. 416 б.
5. Назаров Р. Ер һәм йыһан йыры. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө: Китап, 2014. 320 б.
© Нафиков А.Р., Солтанбаева Х.В., 2024

**УДК 821.512.141**

***Нәжметдинова Нәркәс Миннәт ҡыҙы,***
*студент, Өфө университеты,*
***Хөснөтдинова Рәмилә Янсаф ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө к., БР*

## Ҡушма һөйләмдәрҙе грамматик яҡтан билдәләү мәсьәләһе

Һөйләмдең айырым өлөштәрен өйрәнеүгә һәм ниндәй алым ҡулланылыуға ҡарап, грамматик синтаксистың түбәндәге өлөштәре һәм йүнәлештәре осрай:

1. Һүҙбәйләнеш синтаксисы.
2. Ябай һөйләм синтаксисы.
3. Ҡушма һөйләм синтаксисы.
4. Коммуникатив синтаксис. Тыңлаусы өсөн алдан билдәле булған һәм яңы төшөнсәне (актуаль киҫәктәрҙе) айырыу һәм аралашыу (коммуникация) процесында һөйләмдең ролен, әһәмиәтен билдәләү менән шөғөлләнә.
5. Функциональ синтаксис. Һөйләмдең аралашыу барышындағы функцияларын асыҡлай: һөйләм ниндәйҙер фекер тураһында хәбәр итәме, тыңлаусыла төрлө тойғолар уятырға тырышамы, уны ниндәйҙер эш башҡарырға саҡырамы, тыңлаусынан нимәлер белергә теләйме һ. б.
6. Прагматик синтаксис. Уның бурысы: һөйләм фекерҙе тыңлаусыға бөтә тулылығында еткерә аламы, юҡмы икәнен тикшереү.

7. Стилистик синтаксис. Фекерҙең ниндәй саралар ярҙамында тыңлаусыға еткерелеүен тикшерә.

8. Структур синтаксис. Һөйләмдең төҙөлөшөн, һөйләм структураһының эске закондарын асыҡлай. Һөйләм төҙөлөшөн үҙгәртеп ҡороу юлдарын да асыҡлағанға күрә уны икенсе төрлө трансформацион синтаксис тип тә атайҙар.

9. Вариатив синтаксис йәки варианттар синтаксисы. Синтаксик берәмектәрҙ варианттарын өйрәнә. әҙәби тел нормаларына инмәгән, диалекттарҙа ғына, айырым ҡатлам кешеләренең телмәрендә генә ҡулланыла торған варианттарҙы тикшерә.

10. Экспрессив синтаксис һөйләмдә хис-тойғоларҙы белдереү юлдарын өйрәнә.

11. Диалекталь синтаксис теге йәки был диалекттағы көндәлек телмәрҙе, һөйләмде өйрәнә.

12. Семиотик синтаксис һөйләмде, уның берәмектәрен өс яҡлап өйрәнә: синтактикаһын (формаһын), семантикаһын (йөкмәткеһен, мәғәнәһен) һәм прагматикаһын (йәшәү маҡсатын).

Дөйөм грамматик синтаксис та, уның айырым йүнәлештәре лә һөйләмде түбәндәге аспекттарҙа тикшерә (түбәндәге методтар менән эш итә):

1) тарихи (диахроник) аспект, метод;

2) тасуири (синхроник) аспект (метод);

3) сағыштырма (сағыштырма-тарихи, ҡәрҙәш телдәрҙе сағыштырыу) аспект (метод);

4) контрастив (сопоставительный) аспект (метод).

Бөтә йүнәлештәр ҙә үҙ урынында кәрәкле, һәм грамматик синтаксис уларҙың барыһынан да файҙаланырға тейеш.

Хәҙерге синтаксиста һуңғы йылдарҙа һөйләмдең мәғәнә йөкмәткеһен, йәғни семантикаһын һәм функциональ типтарын өйрәнеүгә ҙур иғтибар ителә, сөнки кешеләр һөйләм ярҙамында фекер йөрөтәләр, бер-береһе менән фекер алышалар һәм һөйләмдәрҙең фекер йөрөтөү һәм хис-тойғолар (эмоциялар) йәһәтенән төрлө төрҙәрен ҡулланалар. Шуға күрә хәҙерге лингвистикала «семантик

синтаксис», «коммуникатив синтаксис», «экспрессив синтаксис» һәм «функциональ синтаксис» төшөнсәләре киң ҡулланыла.

Ҡайһы бер ғалимдар ябай һөйләм ябай фекерҙе, ҡушма һөйләм ҡатмарлы фекерҙе, уйҙы белдерә тип иҫбатлай. Әммә был ысынбарлыҡҡа тап килмәй, сөнки тарҡау ябай һөйләмдәге фекер ҡушма һөйләмдәге фекергә ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ булырға мөмкин. Ябай һөйләм менән ҡушма һөйләм бер-береһенән төҙөлөштәре менән генә, йәғни структур яҡтан ғына айырылалар.

Ҡушма һөйләм, ябай һөйләм кеүек үк, бер бөтөн синтаксик берәмекте тәшкил итергә тейеш. Юғиһә, ул үҙ аллы һөйләмгә тарҡалыр ине. Был бөтөнлөк унда мәғәнәнең эске бер бөтөнлөгө, айырым өлөштәренең (һөйләмдәренең) структур яҡтан ойошҡанлығы һәм бер-береһенә грамматик яҡтан бәйләнгән булыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

Профессор Ғ.Ғ. Сәйетбатталов ҡушма һөйләмгә шундай билдәләмә бирә: «Тел закондарына ярашлы рәүештә грамматик яҡтан формалашҡан, уйҙар комплексын аңлатҡан, ике йәки бер нисә һөйләмдән төҙөлгән синтаксик конструкция ҡушма һөйләм тип атала» [2: 12].

Л.Л. Сәмиғуллинаның билдәләмәһе түбәндәгесә: «Ҡушма һөйләм тип, ғәҙәттә, составында ике йәки унан да күберәк айырым һөйләмдәрҙең үҙ-ара мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнештә килеп (ҡайһы бер осраҡта грамматик бәйләнеш булмаҫҡа ла мөмкин), йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө буйынса бер бөтөндө тәшкил иткән һөйләм атала» [3: 7].

Ҡушма һөйләм эсендәге айырым һөйләм төҙөлөштәре яғынан үҙ аллы ябай һөйләмгә оҡшайҙар, әлбиттә, әммә улар ҡушма һөйләм эсендә үҙ аллы булмайҙар, улар мәғәнә һәм интонация яғынан теүәл түгелдәр. Тимәк, ҡушма һөйләмде барлыҡҡа килтергән һөйләмдәр, бер-береһенән айырылып, айырым үҙ аллы һөйләм төҙөй алмайҙар.

Үрҙә атап кителгән йүнәлештәрҙән семиотик синтаксисҡа туҡталып китәйек. Был йүнәлештең ҡушма

һөйләмде семиотик яҡтан билдәләү мәсьәләһе бик ҡыҙыҡлы.

Семиология (семиотика) – ул тамғаларҙы һәм тамғалар системаһын өйрәнә торған фән. Тамға (билдә, знак; тел ғилемендә: һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм) ике өлөштөң (синтактиканың һәм семантиканың) айырылғыһыҙ берлеге итеп прагматик планда өйрәнелә. Синтактика – тамғаның формаһы, семантика – тамғаның мәғәнәһе, йөкмәткеһе, ә прагматика – тамғаның уҡыусыға, тыңлаусыға, ғөмүмән, был тамғаны ҡулланыусыға аңлашылыу-аңлашылмауы ул.

Семиотиктар һөйләмдең (тамғаның) семантикаһы тип мәғәнә төҙөү өсөн алынған ысынбарлыҡты алалар һәм уны синтаксис фәнендә ситуация тип атайҙар. Башҡорт телендә уны, ғәҙәттә, эш-хәл (хәрәкәт) тип йөрөтәләр. Шул ситуация ике йәки икенән ашыу булһа, һөйләмде ҡушма тип таныйҙар.

*Ҡояш күтәрелде, көн йылынды* – ике ситуация бар, был ҡушма һөйләм.

*Өләсәйем минән хат яҙҙыртты* – ябай һөйләм, бер ситуация (*өләсәйем хат яҙырға ҡушты*). Әммә семиотиктар бында икенсе ситуация булыуын да таныйҙар: *мин хат яҙҙым*. Был ситуация иһә һөйләм формаһында, айырым һөйләм моделе менән бирелмәгән, шулай ҙа, семиотиктар фекеренсә, был – ҡушма һөйләм, икенсе ситуация йәшерен рәүештә бирелгән. Түбәндәге һөйләмдәрҙе лә семиотиктар ҡушма һөйләм тип таный:

*Өшөгәндән һуң һеңлем бик оҙаҡ ауырыны (Һеңлем өшөнө. Һеңлем ауырыны).*

*Атайым менән ағайым утын быса (Атайым утын быса. Ағайым утын быса).*

*Кәрим өйөнә хат яҙып һалды (Кәрим хат яҙҙы. Кәрим хатты һалды).*

*Марат китап уҡып ултыра (Марат ултыра. Марат китап уҡый)* һ. б.

Шулай итеп, семиотиктар грамматик ҡушма һөйләмдәрҙең һәр береһен һәм грамматик яҡтан ҡушма булмаған күп кенә һөйләмдәрҙе (тиң киҫәкле, хәбәре йөкмәтеү, уртаҡлыҡ йүнәлешендәге ҡылымдан килгән, икенсе ситуация өҫтәргә мөмкин булған ябай һөйләмдәрҙе)

ҡушма һөйләм тип атайҙар. Грамматик яҡтан ябай һөйләм булған һөйләмдәрҙе ҡушма тип танығанда, семиотиктар уларҙы *йәшерен (имплицит) ҡушма һөйләм* тип атайҙар.

Әйтергә кәрәк, был рәүешле һөйләмдең ҡушмалығын билдәләү ҡыйынлыҡ, буталсыҡ тыуҙыра. Мәҫәлән, *Әсәйем мәктәпкә барып директор менән һөйләшеп ҡайтты* тигән һөйләмдә дүрт ситуация бар булып сыға: *Әсәйем мәктәпкә барҙы. Әсәйем директор менән һөйләште. Директор әсәйем менән һөйләште. Әсәйем ҡайтты.*

Хәҙерге синтаксиста ҡушма һөйләмдәрҙе грамматик яҡтан билдәләү ҡабул ителгән. Грамматика, семиотика кеүек үк, мәғәнәгә (семантикаға), формаға (синтактикаға) һәм уларҙың берҙәмлегенә таянып эш итә. Бында ла һөйләмдең тыңлаусыға аңлашылыу-аңлашылмау дәрәжәһенә (прагматикаға) иғтибар бирелә. Әммә, семиотиктарҙан айырмалы рәүештә, ҡушма һөйләмде билдәләгәндә грамматика формаға айырым талап ҡуя. Ҡушма булһын өсөн ике-өс ситуация булыу, уның асыҡтан-асыҡ йәиһә йәшерен бирелеүе етмәй. Ҡушма һөйләмде төҙөгән ситуацияларҙың һәр береһе үҙ-ара хәбәрлекле мөнәсәбәттәге һүҙҙәр (һөйләмдең грамматик нигеҙен тәшкил иткән эйә – хәбәр бәйләнеше) менән бирелергә тейеш.

Ҡушма һөйләм составындағы һөйләмдәр үҙ аллы ябай һөйләмгә яҡын торалар, ләкин уларҙы барыбер тулы кимәлдә үҙ аллы һөйләм тип әйтеп булмай, сөнки улар бер-береһе менән тығыҙ мәғәнә мөнәсәбәтендә торалар: *Көндәр матур торғанға иген бик яҡшы уңды.*

Һөйләмдең *Көндәр матур торғанға* тигән өлөшөндә үҙаллылыҡ кәмей, хәбәре лә ябай һөйләмдең хәбәре кеүек түгел.

*Иген бик яҡшы уңды* һөйләменең үҙаллылығы ҙурыраҡ, ләкин ул да барыбер тәүге һөйләмһеҙ фекерҙе тулы хәбәр итә алмай.

*Олатайҙар яулаған азатлыҡты беҙ күҙ ҡараһылай һаҡларбыҙ.*

*Олатайҙар яулаған* тигән өлөшөнөң үҙаллылығы бөтөнләй һиҙелмәй, икенсе һөйләмдән пауза менән дә

айырылмай, әммә ул – һөйләм, сөнки эйә – хәбәр бәйләнеше менән бирелгән.

*Беҙ күҙ караһылай һакларбыҙ* өлөшөнөң үҙаллылығы ҙур, әммә үҙаллылығын юғалткан *Олатайҙар яулаған* һөйләменән башка мәғәнә тулылығы булмай.

Тимәк, грамматик яктан һөйләмдең кушмалығын билдәләгәндә, ундағы һөйләмдәрҙең үҙаллылык дәрәжәһе бер ниндәй ҙә роль уйнамай, кушма булһа, уның эсендә хәбәрлекле мөнәсәбәттәге һүҙҙәр төркөмөнөң (эйә – хәбәр бәйләнешенең, һөйләм нигеҙенең) бер нисә булыуы ғына роль уйнай.

**Әҙәбиәт:**


1. Биканова Г.Ф., Хөснөтдинова Р.Я. Ә.Х. Фәтихов кушма һөйләмдәрҙе структур-семантик аспект буйынса классификациялау тураһында // Актуальные проблемы современной филологии: Сборник материалов региональной (с международным участием) научно-практической конференции, посвященной 130-летию известного башкирского педагога, ученого, общественного деятеля Г. Давлетшина. Уфа, 2022. С. 70-74.

2. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башкорт теле. 2-се том. Ябай һөйләм синтаксисы. Өфө, 2002. 432 б.

3. Сәмиғуллина Л.Л. Башкорт теленең кушма һөйләм синтаксисы. Стәрлетамак, 2009. 117 бит.

4. Хуснетдинова Р.Я. Г.Г. Саитбатталов об односоставных предложениях современного башкирского языка (к 90-летию со дня рождения профессора Г.Г. Саитбатталова) // Вестник БашГУ, 2018. Т. 23. № 4. С. 1253–1256.

5. Әхтәмова Р. Башкорт теле дәрестәрендә һөйләмдең функциональ-коммуникатив төрҙәрен өйрәнеү // Актуальные проблемы современной филологии, востоковедения и журналистики: Материалы региональной научно-практической конференции студентов, магистрантов, аспирантов и молодых ученых. Уфа, 2023. С. 250–251.


© Нәжметдинова Н.М., Хөснөтдинова Р.Я., 2024

**УДК 37.035.6**

***Райманова Гөлсиә Риф ҡыҙы,***
*физик культура инструкторы,*
*МАМББУ Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡ., БР*

## Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләүҙә һәм үҫтереүҙә халыҡ уйындарының роле

Халыҡ уйындары мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың рухи һәм физик тәрбиәһенең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора, сөнки хәрәкәт итеү менән бергә балаларҙың рухи донъяһы байытыла. Сөнки быуаттар буйына халыҡ уйындарында кешеләрҙең йәшәү рәүеше, уларҙың көнкүреше, хеҙмәте, намыҫ, ҡыйыулыҡ, батырлыҡ тураһында күҙаллауҙар, көс, оҫталыҡ, сыҙамлыҡ, тиҙлек һәм хәрәкәт матурлығына эйә булыу, аҡыллылыҡ, сыҙамлыҡ, ижади уйҙырма, тапҡырлыҡ, ихтыяр һәм еңеүгә ынтылыш сағылдырыла. Ә был кешелек сифаттары һәр ваҡыт актуаль. Хәрәкәтле уйындарҙың физик тәьҫире лә көслө, улар балаларҙың дөйөм үҫешенә һәм формалашыуына ҙур йоғонто яһай. Уйындарҙы артыҡ арттырыуһыҙ күңел именлеге витаминдары тип атарға мөмкин. Уларҙың сағыу, күңелле, мауыҡтырғыс формаһы аҫтында педагогик мөмкинлектәр йәшеренгән. Был мөмкинлектәрҙе уйын функциялары аша ҡарарға мөмкин:

Социомәҙәни функция. Уйында бала үҙен бер үк ваҡытта шәхес итеп тә, коллектив ағзаһы итеп тә тоя. Шулай итеп, уйын баланы социализациялау сараһы булып тора. Уйын барышында баланың үҙ-үҙен белдереү, үҙ-үҙен контролдә тотоу, үҙ-үҙен билдәләү, үҙ-үҙен реабилитациялау комплексы формалаша.

Коммуникатив функция. Уйын аралашыуһыҙ мөмкин түгел. Уйын ҙур һәм бәләкәйҙәрҙе берләштереүгә булышлыҡ итә, уларға уртаҡ тел табырға ярҙам итә. Ул коллектив эшмәкәрлектең прообразы булып тора, сөнки бер-береһе менән килешеп эш итергә, иптәшен ишетергә, уның эшмәкәрлеген дауам итергә йәки ярҙам итергә, үҙ

теләктәрен ғәмәлдәге ҡағиҙәләргә буйһондорорға өйрәтә. Бала башҡаларҙы аңларға һәм хөрмәт итергә, ҡағиҙәләрҙе үтәргә өйрәнә.

Диагностик функция. Уйын баланың тәртибендәге тайпылыштарҙы билдәләүгә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, уйнағанда бала ҡағиҙәләрҙе боҙа йәки яуаплы мәлдә уйындан сыға. Был уҡытыусыны хәүефләндерергә, иғтибарлыраҡ булырға, барлыҡҡа килгән тайпылыштарҙың сәбәбен табырға мәжбүр итергә тейеш. Уйында бала үҙенең көсөн, мөмкинлектәрен, шәхси сифаттарын үҙе диагностикалай ала, йәғни уйын баланы үҙ-үҙен танырға этәрә: мин булдыра аламмы?

Уйын терапияһы һәм коррекция функцияһы. Күпселек осраҡта уйындар балаларҙың психик үҫешен гармонияға килтерергә һәм тайпылыштарҙың барлыҡҡа килеүен булдырмаҫҡа, бала күңеленең конфликттарын хәл итергә ярҙам итә. Ҡотҡарыусы таяҡ кеүек уйнау балаларҙың көсһөҙ психикаһын көндәлек кисерештәрҙән һаҡлай. Балалар ҡурҡыуҙарҙы, стресс хәлдәрен, эмоциональ һәм интеллектуаль көсөргәнешлекте бөтөрөү өсөн психотерапия сараһы булараҡ уйынға интуитив мөрәжәғәт итә. Бала уйнап ҡына ҡалмай, ул тирә-яҡтағыларға ниндәй тәьҫораттар йәки проблемалар тиҙ арала хәл итеүҙе талап итеүе тураһында һөйләй.

Күңел асыу функцияһы. Күп кенә уйындарҙа сюжет үҫеше барышында уйынсылар ғәҙәти тормошта ижтимағи нормалар күҙлегенән ҡабул ителмәгән реаль һәм символик ғәмәлдәр башҡара. Уйындар барышында көслө ҡысҡырыуҙар, көлөү, тапаныу, этәреү, киҫкен хәрәкәттәр, тиҙ йүгереү тыйылмай, шуның өсөн дә бала бер ҡасан да унан арымай. Уйындан балалар ыңғай эмоциялар ала, уларҙы алған һайын, донъя улар алдында гармониялыраҡ һәм күңеллерәк булып күренә, ә балалар иһә үҙҙәрен тормошта шул тиклем уңайлыраҡ һәм ышаныслыраҡ тоя.

Халыҡ уйындарын үткәреүҙе баланың ауыҙ-тел, ишетеү һәм хәтерен үҫтергән, уның рухи үҫешенә һәм фантазияһына әүҙем йоғонто яһаған саҡырыуҙар, иҫәпләүҙәр, тиҙәйткестәр, йырҙар, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр

ҡулланмайынса күҙ алдына ла килтереп булмай. Мәҡәлдәр, әйтемдәр балаларҙы быуаттар буйына кисергән һәм беҙҙең көндәрҙә үҙенең актуаллеген юғалтмаған халыҡ аҡылына өйрәтә. Шулай итеп, хәрәкәтле уйындар баланың һәр яҡлап үҫешенең мөһим сараһы һәм физик һәм аҡыл һәләттәрен, тәртип ҡағиҙәләрен, йәмғиәттең этик ҡиммәттәрен үҫтереүгә булышлыҡ иткән мөһим тәрбиә институты булып тора.

**Әҙәбиәт**:

1. Аҙнабаева Ф.Ғ., Әлбәкова Г.Ш., Буранбаева Ә.Р., Мортаева К.Ф. Башҡортостан – тыуған илем: Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы. Өфө: Китап, 2017. 132 бит.
2. Ғәләүетдинов И.Ғ. Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1987. 128 бит.
3. Хөсәйенова Г.Р. Башҡорт халыҡ уйындары. Өфө: Ғилем, 2006. 72 бит.

© Райманова Г.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Султанбаева Хадиса Валиевна,***
*д-р филол. наук, профессор,УУНиТ, г. Уфа,*
***Гимашева Гульдания Минигалиевна,***
*канд. филол. наук, УУНиТ, г. Уфа*

## Концепт «кәйнә» (‘свекровь’) в творчестве Мустая Карима

Концепт ***«ҡәйнә»*** *‘свекровь’* в творчестве Мустая Карима представляет собой многослойное и глубокое исследование семейных отношений, традиций и культурных стереотипов. В произведениях поэта образ свекрови обретает особую значимость, символизируя не только материнскую фигуру, но и хранительницу семейных ценностей.

Мустай Карим мастерски передает сложные эмоции, связанные с взаимодействием невестки и свекрови, их противоречивые чувства и ожидания. Свекровь в его

произведениях – это не просто персонаж, а символ испытания для молодой женщины, испытывающей давление традиций и личных амбиций. В «Словаре башкирского языка» термин ***«ҡәйнә»*** *‘свекровь’* определяется как: во-первых, свекровь по отношению к невестке (мать супруга), во-вторых, теща по отношению к зятю (мать супруги) [5: 751].

В трагедии «Ай тотолған төндә» («В ночь лунного затмения») ярко представлены взаимоотношения ***«ҡәйнә»*** *‘свекрови’* и ***«килен»*** *‘невестки’*. Ценностные компоненты концепта ***«ҡәйнә»*** *‘свекровь’* – ***«ҡәйнә менән килен араһында яҡшы мөнәсәбәт»*** *‘хорошие отношения между свекровью и невесткой’,* ***«аралашыу»*** *‘общение’, уважительное обращение невестки* ***«ҡәйнәм»*** *‘свекровь моя’* и др.

Ценностный компонент ***«бисә»*** *‘баба’* с бинарной оппозицией ***«йәш»*** *‘молодая’* и ***«оло»*** *‘старая’* определяет возраст и авторитет женщины в обществе. Пример:

***Тәңкәбикә: Бисә бисә инде. Дәрәжәһе уның үҙе менән. Минең дә йәш сағым бар ине.***

***Шәфәҡ: Һин әле лә, ҡәйнәм, оло түгелһең***

*‘Танкабика: Баба есть баба. Статус ее всегда рядом блуждает. И я была молодой.*

*Шафак: Ты и сейчас не стара, свекровь моя’* («Ай тотолған төндө»).

Разговор между свекровью и невесткой полон тайн, секретов, переживаний, молитв. Фразеологизмы, образные афоризмы выражают ценностный компонент ***«үткер телле»*** *‘острая речь’*. Пример:

***Шәфәҡ: Көйөнмәсе, ҡәйнәм. Бер мин генә гәйепле.***

***Тәңкәбикә: Ул йыбытҡының ауыҙынан һүҙе сыҡҡансы, ҡош бала сығарып өлгөрөр. Шуны ебәргән мин…*** *‘Шафак: Свекровь, не переживай. Я сама виновата. Танкабика: Пока он рот будет открывать, уже птенчики вылупятся. Как я могла его отправить… ’* («Ай тотолған төндө») [3: 25].

***Шәфәҡ: Ашығып ҡайҙа барһын да, атлығып ҡайҙа ҡайтһын. Мөңрәр малы, илар балаһы бармы уның! Алда рәхәтлек көткән кеше генә ашыға бит ул, ҡәйнәм.***

*'Шафак: Незачем ему торопиться, ведь нет у него ни скота, ни детей! Спешит только тот, кого впереди ждет счастье, свекровь моя'* («Ай тотолған төндө»).

Религиозная лексика с примерами ***«сәхәр»*** *'время утреннего приема пищи'*, ***«теләк»*** *'молитва'*, ***«фәрештә»*** *'ангел'*, ***«амин»*** *'пусть так и будет'*, ***«иншалла»*** *'дай Бог'* выражает ценностный компонент ***«динле»*** *'религиозная'*. Например:

***Шәфәҡ: Юлмырҙамды һаҡлай күр, тип сәхәр ваҡыттарында, ҡанлы йәштәр ҡойоп, аҡ теләктәр теләйем дә бит.***

***Тәңкәбикә: Түккән йәштәр тупраҡҡа һеңһә лә, теләгән теләктәр ерҙә ятып ҡалмаç. Фәрештәләрҙең амин тигән саҡтарына тура килеп, ҡабул булыр әле, иншалла.***

***Шәфәҡ: Шулай ғына була күрһен инде.***

*'Шафак: На утренней заре молю о спасении моего Юлмурзы.*

*Танкабика: Слезы твои впитаются в землю, но не пропадут твои мольбы. Иншалла, исполнятся они.*

*Шафак: Да будет так'* («Ай тотолған төндө»).

Выражения ***«күңелем урынында түгел»*** *'душа не спокойна'*, ***«ысын күңелдән теләү»*** *'искренне молиться'*, ***«изге фармандар көтөү»*** *'ждать добрых вестей'* характеризуют тревожность, переживание, терпимость женщины. Архаизмы ***«яу»*** *'сражение'*, ***«фарман»*** *'указ'*, ***«аҡ батша»*** *'белый царь'* определяют эпоху и быт древних башкир. Например:

***Тәңкәбикә: Ҡуйсылар эргәһенә барып ҡайтайым тигәйнем. Күңелем бер ҙә генә урынында түгел.*** *'Танкабика: Хотела съездить к нашим чабанам. Душа что-то не на месте у меня'* («Ай тотолған төндө»).

***Тәңкәбикә: Теләккәйҙәребеҙ ҡабул булып, аҡ батшаның изге фармандары сығып, яу баçылһа, бына ҡайтып та етерҙәр. Дан менән ҡайтырҙар, бойорған***

***булһа.*** *'Танкабика: Вот сбудутся наши мольбы, закончится война по приказу царя и вернутся наши близкие в родные края со славой'* («Ай тотолған төндә»).

Ценностный компоненты ***«фатиха»*** *'благословение'* и ***«фекер йөрөтөү»*** *'иметь свое мнение'* показывают твердость, силу духа женщин. Например:

***«Хөрриәт беҙҙеке ул – бисәләрҙеке!» – тине. Изге күңелле ҡәйнәһенә лә ыңғайына торҙо. «Әйҙә кеше менән аралашһын», – тип фатиха бирҙе.*** *'Теперь все в наших руках – в руках баб!» – сказала она. Встала на сторону своей доброй свекрови. «Пусть общается с людьми», – согласилась она'* («Ауыл адвокаттары»).

Таким образом, концепт ***«ҡәйнә»*** *'свекровь'*, как правило, ассоциируется с концептом ***«килен»*** *'невестка'*. В приведенных выше примерах ценностные компоненты ***«ҡәйнә менән килен араһында яҡшы мөнәсәбәт»*** *'хорошие отношения между свекровью и невесткой'*, ***«аралашыу»*** *'беседа'*, ***«бисә»*** *'баба'*, ***«үткер телле»*** *'острая речь'*, ***«динле»*** *'религиозная'*, ***«фатиха»*** *'благословение'*, ***«фекер йөрөтөү»*** *'иметь свое мнение'* составляют следующую структуру: 1) отношения свекрови и невестки; 2) духовное и физическое состояние женщины, матери, представительницы рода; 3) быт той эпохи; 4) социальное положение.

**Литература**:

1. Гимашева Г.М., Султанбаева Х.В. Лингвокультурология в когнитивной лингвистике // **«Modern Humanities Success»**. 2021. № 2. С. 196-200.

2. Гимашева Г.М. Языковая личность в когнитивной лингвистике (на примере произведения Мустая Карима «Долгое-долгое детство» («Оҙон-оҙаҡ бала саҡ»)) // Вестник Башкирского университета. 2021. Т. 26. № 4. С. 1006-1011.

3. Карим М. Сочинения в 5-и томах. Том III: пьесы, повести, рассказы. Уфа: Башкирское издательство «Китап», 1997. 480 с. (на баш. яз.).

4. Султанбаева Х.В., Гимашева Г.М. Концептосфера «Ғаилә» («Семья») в башкирской лингвокультуре (на

материале творчества Мустая Карима): Монография. Уфа: РИЦ БашГУ, 2022. 220 с.
5. Словарь башкирского языка. В 2-х томах. Том I. М.: Русский язык, 1993. 863 с. (на баш. яз.).
© Султанбаева Х.В., Гимашева Г.М., 2024

**УДК 811.512.145**

***Сәгыйдуллина Лилиә Рәшит кызы,***
*филол. фәнн. канд., доцент,*
*Уфа университеты, Уфа ш., БР*

## Татар телендә «күк» концептын репрезентацияләү юллары

Җир шарында кешелекнең кешелеклелек, цивилизация принциплары нигезендә оешуын, яшәвен, үсешен күп кенә галимнәр тарихи процесста «телле зат»ның барлыкка килүеннән, сөйләшү-аралашу сәләтенең туу үзенчәлегеннән чыгып аңлаталар. «Телле зат» аңында тел һәм мәдәният үзара шартлылыкта яшиләр, аерылгысыз кушылма хасил итәләр. Бүгенге фәнни парадигмада телне мәдәният белән, тел һәм мәдәният адресаты һәм адресанты – кеше белән бәйләнештә өйрәнү өстенлек итә һәм егерменче гасырның соңгы чирегендә киң үсеш алган лингвокультурология фәненең предметы булып үзара бәйләнештә яшәүче тел һәм мәдәният диалогы карала. Тел – рухыбыз чынбарлыгы, культура йөзе. Ул халыкның ментальлеген чагылдыра. Н.И. Жинкин сүзләре буенча, «тел – кеше алдында аң өлкәсен ачучы механизм» [4: 62].

Тел һәм мәдәният бәйләнешен, дөнья тел күренешен өйрәнүнең фәнни яссылыкка чыгуы XX–XXI гасыр чикләрендә «тел шәхесе һәм мәдәният» (Караулов), «мәдәни аспектта тел», «тел һәм мәдәният парадигмаларында шәхес» (Воробьев) кебек аерым теоретик мәсьәләләрне яктырткан махсус монографияләр дөнья күрүендә чагыла.

Татар лингвокультурологиясенә нигез дә шушы чорда салына, бу юнәлештә Р.Р. Җамалетдиновның фәнни

мәктәбе оеша (Ф.Х. Тарасова, Л.Р. Гарипова, Р.Р. Закирова һ. б.). Төп лингвомәдәни тикшеренүләр татар теленең дөнья күренешен, милли концептларны өйрәнүгә юнәлдерелгән.

Билгеле булуынча, дөнья картинасын «уку» өчен аның төп берәмлеге – концепт белән эш итү сорала. Ю.С. Степанов буенча, концепт – кешенең менталь дөньясына мәдәниятнең керүе һәм гади кешенең мәдәнияткә керүе, аңа йогынты ясавы да. Концептлар аң аша гына түгел, хис-кичереш аша да үтәләр. Галим концепт структурасында өч катламны аерып чыгара: 1) һәр мәдәният вәкиленә билгеле һәм мөһим булган төп актуаль билге; 2) мәдәният вәкилләренең аерым группалары өчен актуаль икенчел пассив билгеләр; 3) концептның көндәлек тормышта аңлашылып бетмәгән, белгечләргә генә билгеле эчке формасы [6: 47].

Татар теле концептларының бер өлеше тикшеренү объектлары буларак төрле дәрәҗәдә өйрәнелгән. Бу юнәлештә төзелгән сүзлекләр дә лингвомәдәни эзләнүләрнең берни кадәр лексикографик гомумиләштерү этабына чыгуын дәлилли булса кирәк [1], [5]. Шул ук вакытта телдәге аерым концептларны тикшерү, аларның телдә һәм сөйләмдә репрезентацияләнү мөмкинлекләрен ачыклау эше дәвам итә.

«Күк» концепты татар милли дөнья картинасында мөһим урын алып тора. Аны, В.И. Убийко классификациясенә нигезләнеп [8: 52], макроконцепт рәвешендә өйрәнү үзен аклый. «Күк» макроконцепты тирәсендә тупланган төп һәм микроконцетларның күплеге һәм ешлыгы, аларны тел, сөйләм берәмлекләре ярдәмендә чагылдыру мөмкинлекләренең киңлеге дә бу позицияне дәлилли. «Күк» *кояш, ай, йолдыз, болыт, яшен* һ. б. телдә төрле дәрәҗәдә концептуальләшкән төшенчәләрне үз эченә ала.

Тикшерү өчен теге яки бу концептны сайлау аның телдә куллану тышлыгы – сүзнең актив җитештерүче нигезле булуы һәм аның тотрыклы идиоматик конструкцияләр составына керүенә дә бәйле [5: 5]. «Күк»

макроконцепты бу критерийгә тулысынча җавап бирә, дип әйтә алабыз: *күк, кояш, ай, йолдыз, болыт, яшен, күкрәү* һ. б. сүзләре киң деривативмөмкинлеккә ия (*кояшлап, кояшлы, кояштыр; айбагар, айбалта, айлы, айларча* һ. б.).

«Күк» концепт семантик йөкләнешенә үзәк, периферия дә керә. Концептның үзәген аңлатмалы сүзлек һәм этимологик сүзлек мәкаләсе аша ачыклап була. Мәсәлән, *Күк* – җирдән өстә гөмбәзсыман булып күренә торган һава мәйданы; җир йөзен чолгап алган галәм пространствосы; Алла, фәрештәләр һ. б. шундый рухлар яши торган урын, югарылык һ. б. Татар телендә күкне билгеле бер мәдәни һәм социаль-тарихи шартлардан гыйбарәт җәмгыять итеп күрү дә бар [6: 328].

Периферияга килгәндә, семантик йөкләнешнең бу өлеше өстәмә мәдәни, тарихи мәгълүматлар, халык авыз иҗаты үрнәкләре, әдәби текстларда чагылыш таба һәм аларны анализлау аша чыгарыла ала. Концептуаль анализ өчен лексик берәмлекләрдә мифологик коннотацияләр күзәтелүе, килеп чыгышы ягыннан аларның төрки-татар катламыннан булуы да мөһим фактор. Мәсәлән, «*Кояш* борынгы татар халык иҗаты әсәрләрендә үк Галәмнең мәңгелек, беркайчан да юкка чыкмас атрибуты рәвешендә гәүдәләндерелә. Күк патшалыгында *Ай, Кояш, Йолдызлар* табигатьнең җанлы көчләре буларак, Җир мәнфәгатьләре белән генә яшиләр. Җирдәге барлык хәл-вакыйгалар турыдан-туры Ай, Кояш, Йолдызлар белән бәйләнгәннәр. Кешеләр аларга табынганнар, корбан да китергәннәр. *Кояш* җир өстенә яктылык, муллык, җылылык китерә торган илаһи затларның берсе булган. Аны кешеләр Көн иясе дип йөрткәннәр» [5: 109].

Билгеле булуынча, теге яки бу концептның эчтәлеген ачыклау максатында тотрыклы сүзтезмәләр, паремияләрне туплау, анализлау актив кулланыла. *«Күк», «кояш», «ай», «йолдыз», «болыт», «яшен», «күкрәү»* һ. б. компонентлы фразеологик берәмлекләргә татар теле бик бай. Мәсәлән, Н. Исәнбәтнең ике томлык сүзлегендә «күк» макроконцепты берләштергән сүзләр кергән 1780 тотрыклы сүзтезмә теркәлгән: *күк китабы, күк итәге; күк*

*кабагы ачылган көн; күк кебек күкрәп, яшен кебек ату, бер күктә ике кояш булмый, көле күккә очу, кояшның кадере баегач сизелә һ. б.* [2]. Иң зур төркемнәр «күк» – 57, «кояш» – 58, «ай» – 67 берәмек. Рус теле белән чагыштырганда, татар телендә «күк» макроконцептының ФБ-ләрдә чагылган мондый активлыгын борынгы төрки халыкларының яшәү рәвеше, дини ышанулары, гореф-гадәтләре белән дә аңлатып була: *тәңречелек, ислам, ай календаре* һ. б.

Тупланган берәмлекләргә семантик-идеографик классификация ясау аларның «кеше», «кеше һәм табигать», «кеше һәм җәмгыять» төркемнәре эчендә күпкырлы реальләшүен күрсәтте: *бәхет / бәхетселек, мәхәббәт / югалту, ераклык / якынлык, ялгызлык / парлылык, матурлык, биеклек* һ. б. Мәсәлән, алар арасында кешене төрле яктан характерлаучы берәмлекләр дә шактый: а) тәкәбберлек: *борынны күккә чөю*; ә) чарасызлык: *айга шыңшыган эт кебек;* б) саранлык: *кояшны уч белән каплау;* в) тырышлык: *кояшны айга ялгау;* г) ялкаулык: *күктән төшкәнне көтеп яту;* д) матурлык: *кояшны көнләштерерлек* һ. б. «Күк» компонентлы фразеологик берәмлекләрне тикшерү концептның мәгънәви катламнарын ачыкларга мөмкинлек бирде. «Күк» – бөеклек, зур бәхет, кешенең югары хыяллары белән ассоцияцияләнә. Шул ук вакытта, «күк» – үлем, югалту, фәкыйрьлек, куркыныч янау символы да. «Күк» – хакыйкать үзәге, рухи кичерешләр мәйданы, таяныч, терәк – Аллаһның яшәү йорты.

«Концептларның эчтәлеген, ул эчтәлекнең диахроник һәм синхроник планда киңәюен һәм тирәнәюен ачыклаучы методларның берсе – теге яки бу автор тудырган әдәби әсәрне һәм шул әсәрдә аерым концептның яшәешен күзәтү, ягъни әсәргә концептуаль анализ ясау» [5: 6].

Текстка концептуаль анализ ясауга игътибарның аз бүленүен билгеләп, мондый тикшеренүләрдә ихтыяж булуын әйтергә кирәк. Бер яктан, теге яки бу автор мисаллары концептка вакыт һәм автор таланты өстәгән яңа мәгънә төсмерләре белән үзенә җәлеп итә. Икенче яктан,

текстны концептуаль планда тикшерү автор тудырган образлы дөнья картинасының ни дәрәҗәдә үзенчәлекле булуын ачыклау, аның индивидуаль стилен тулырак күзаллау өчен уңышлы инструмент.

«Күк» макроконцепты поэтик текстларда шактый еш кулланыла. Бу текстларда концептның үзәк мәгънәсеннән тыш, периферия аеруча кызыклы, чөнки автор коннотациясе нәкъ шул өлкәдә чагыла. Мәсәлән, Ф. Габдерәхим иҗатыннан бер мисал: *«Аһ, күк юклык! Аһ, күк юклык! / Мескенлекне җиңәр идек, / Офыкларны иңләр идек. / Очар идек бөркет булып, /Аһ, күк юклык! Аһ, күк юклык!»* [5: 117]. Бу өзектә «күк»кә омтылып та күксез яшәү – җәмгыятьтә югары идеаллар, ышаныч, бөеклеккә кытлык булуына, шуңа гаҗизләнү, бу чарасызлыктан чыгу юлын тапмау кебек мәгънә төсмерләре чагыла. Рефрен рәвешендә кабатланган *«Аһ, күк юклык!»* шәхси һәм иҗтимагый фаҗига образын тудыра.

И. Фазлетдиновның шигырендәге «кояш» концепты да, традицион аңламнардан тыш, төрки дөнья картинасы белән бәйләнештә бирелә, халыкның борынгы ышануларын чагылдыра: *«...Кояш көлә – / Төрки арбасыннан / Төшеп калган утлы тәгәрмәч!»* [5: 111]. Тикшерелгән шигырьләрдә *күк, кояш, ай* окказиональ метафоралар тудыруда актив катнаша (*күк – мәңгелек, бакыйлык; кояш – яшәү, энергия; ай – сер, тынлык* һ. б.), димәк, концептларның перифериясен киңәйтә.

Күренә ки, шигъриятнең, О. Мандельштам әйткәнчә, «төшеп калган буыннар белән эшләү» үзенчәлеге концептның йөкләнешен күпкә киңәйтү һәм тирәнәйтү мөмкинлеген арттыра.

Гомумән алганда, татар теле һәм сөйләме «күк» концептын репрезентаияләү өчен күпкырлы мөмкинлекләр бирә, концептны үстерү мәйданына әйләнә. Шул нигездә «күк» концепты шәхеснең кабатланмас тормыш тәҗрибәсен дә «үзләштерә», аларның социаль яңгырашлысын гомумиләштерә, кулланышка да кертә. «Күк» макроконцептына салынган аңламнарда милләтнең тормышка карашлар системасы чагыла.

**Әдәбият**:

1. Җамалетдинов Р.Р. Тел һәм мәдәният: Татар лингвокультурологиясе нигезләре. Казан: Мәгариф, 2006. 351 б.
2. Исәнбәт Н. Татар теленең фразеологик сүзлеге. Ике томда. I том. Казан: Тат. кит. нәшр., 1989. 495 б.
3. Исәнбәт Н. Татар теленең фразеологик сүзлеге. Ике томда. II том. Казан: Тат. кит. нәшр., 1990. 365 б.
4. Маслова В.А. Лингвокультурология: Учебное пособие для студентов высших учебных заведений. М.: Академия, 2001. 208 с.
5. Сәгыйдуллина Л.Р. Татар лингвомәдәни концептлар сүзлеге. Уфа: РИЦ БашГУ, 2013. 224 б.
6. Степанов Ю.С. Константы. Словарь русской культуры. М.: Языки русской культуры, 2000. 824 с.
7. Татар теленең аңлатмалы сүзлеге. Казан: «Матбугат йорты» нәшрияты, 2005. 848 б.
8. Убийко В.И. Концептосфера внутреннего мира человека в аспекте когнитивной лингвистики // Виноградовские чтения. Когнитивные и культурологические подходы к языковой семантике: Тезисы докладов научной конференции. М.: ГИРЯ им. А.С. Пушкина, 1999. С. 52–54.

© Сәгыйдуллина Л.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Сәғитова Айгөл Ғәни ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Ғәйнә һөйләшенең үҙенсәлектәре

(Пермь крайының Барҙы округы миҫалында)

Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты Башҡортостандың көнбайышында, башлыса Асҡын, Ҡариҙел, Балтас, Тәтешле, Борай, Яңауыл, Краснокама, Мишкә, Илеш, Дүртөйлө, Бөрө, Кушнаренко, Благовещен, Саҡмағош, Туймазы, Баҡалы, Шаран, Бүздәк, Благовар,

Бәләбәй, Йәрмәкәй һ. б. райондарҙа йәшәгән башҡорттарҙың һөйләшен үҙ эсенә ала. Ғәйнә башҡорттары республиканан ситтә Пермь өлкәһенең Барҙы, Көйәҙе, Уҫы, Пермь, Чернушка райондарында йәшәһә, ә Түбәнге Ағиҙел-Ыҡ башҡорттары Татарстан Республикаһының Аҙнаҡай, Аҡтаныш, Әгерже, Миңзәлә, Мөслим, Сарман, Октябрь, Туҡай (элекке Саллы), Алабуға, Лениногорск (элекке Песмән), Әлмәт, Бөгөлмә, Баулы, Йотаҙы һ. б. райондарында йәшәй.

Ғәйнә һөйләше Пермь өлкәһенең Барҙы, Көйәҙе, Чернушка, Уҫы, Пермь һәм уның башҡа район территорияларында таралған. Һөйләштең атамаһы боронғо этник ғәйнә исемле башҡорт ырыуҙарының береһенән алынған.

Ғәйнә һөйләшенең төп үҙенсәлектәренең береһе булып баҫымлы ябыҡ ижек позицияларында киң һуҙынҡыларҙы тарайтып әйтеү тора, йәғни **а, ә** өндәре урынына **ы, е, и** өндәренең килеүе: *алый, бармый, былый, мындый, йоморолый, икенчелей, чөчелий, чүрәлей, черекей, шулый, былмый* һ.б. *Ҡоймаҡны ҡоролый күп ашап былмый ҡый; Кещкә таба черекейләр щыгып жыйа; У сүзне бүтәнчәлей әйтсәң былмыймы сийә дә?*

Бындай диалект үҙенсәлектәре даими рәүештә түбәндәгесә сағыла: һүҙ һуңындағы дифтонг бәйләнештәрендә, ***[ай] – [әй]*** урынына ***[ый], [ей]*** ҡулланыла: *йазлый, жылылый, бушлый, бүтәнчәлей, былгылый, барый, бармый, касылый, кайсылый, кайсындый, королый, күренгелий, ашалый* һ. б.; һүҙ һуңындағы дифтонг бәйләнештәрендә, ***[ау]–[әү]*** урынына ***[ыу]–[еү], [оу]–[өү]*** ҡулланыу: *бозоу, жейеү, ҡырыу, көйөү* һ. б.: *Безнең көйөү бигрәк матур: кемгә ушаган, кем төслө; Сүз бозоу имезә;* һүҙ башында ***[й]*** урынына йомшаҡ ***[ж]*** тартынҡыһын ҡулланыу: *жүрей, жөн, жиңгә, жөк, жәйем, жән, жил, жимтек* һ. б.

Ғәйнә һөйләше фонетикаһының икенсе үҙенсәлеге булып, һүҙ һуңында киң баҫымлы ***ә*** һуҙынҡыһы урынына тар ***и*** һуҙынҡыһының ҡулланылыуы: *сепрәк – чеперик, билсән – билчин, сәкмән – чекмин, сөсөләй – чөчелий,*

*тирмән – тегермин, миләш – мелиш, күгәрсен – күгерчин, кесерткән – кечерткин* һ. б.

Һыҙынҡылар өлкәһендә шулай уҡ ***и<а*** *(чумир, чумер – сумар: Чумирле аш тәмле была*), ***и<ы*** *(минча – мынча – мунса: Мынчасының ташы жук, маңлайында ҡашы жук),* ***и<е*** *(бәлиш – бәлеш)* һ. б. өн сиратлашыуҙарын күҙәтергә була.

Ғәйнә һөйләшендә тартынҡы хәрефтәрҙең үҙенсәлектәренә лә туҡталып китәйек: һүҙ һәм ижек башында ***м – б*** өндәренең тап килеүенә миҫалдар: *муйын – буйын: Бозаунығы буйынына бау такмага кәрәк; моңан ары, моңан суң – бынан ары, бынан һуң: Моңан ары төннә үзең генә жөремә* һ. б.

Һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында әҙәби телдәге ***п*** өнөнә ***ф*** өнө тап килеү осраҡтары: *фәрҙә – пәрҙә, фамидур – помидор: Быйыл быраз фамидур утырттыҡ әле;* һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында ***б*** өнөнөң ***п*** өнө менән тап килеүенә миҫалдар: *пәрде – бәрҙе, пәкәл – бәкәл, палан – балан, порос – борос, печин – бесән, пешеү – бешеү* һ. б: *Паланны табаннап катнарга элеп куйдык; Толда пәрделәр тоталарый элек; Жәйгедә печин беле азаплана ауыл халкы; Карагат та пешкән икә* һ. б.

Һөйләштә ***һ, ҫ*** өндәре урынында ***с*** өнө ҡулланыла: *сайысҡан, соу, сыйыр, сике, сагыз, сорат, сөт соу* һ. б. *Миҫалдар: Сайланган сазга баткан. Сайыскан шакылдап кунак щакыра. Тәгъәз беле өстәл сөртмәгә жарамый.*

Һөйләштең төп байлығы булған диалект һүҙҙәр араһында тәбиғәт күренештәре, үҫемлектәр донъяһы, хужалыҡ-көнкүреш, кәсеп һәм һөнәрҙәр, йорт кәрәк-яраҡтары, кешенең анатомияһы һәм физиологияһы, буй-һыны, холоҡ-фиғеле, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйле һүҙҙәр ҡатламы ҙур урын алып тора [1: 186]: ***зерә*** *(бик, бик тә): Безнеке күршеләр зерә әйбәтләр инде;* ***иләсә*** *(бейәләй): Кышына ике пар иләсә туздыра кый у;* ***сөгөзлин*** *(селәү:) Жомшаҡ бакщада сөгөзлин күп была;* ***мәшкә*** *(бәшмәк): Авылда мәшкәне артык жыйыущы жук кый;* ***шартлама*** *(еләк): Без жыл сайын Тугазакта шартлама жыйабыз;* ***мөгеш*** *(мөйөш): Мине мөгешкә бастырып куйаларый;* ***тың***

***тыңнау** (ҡасып тыңлап тороу): Элек апрель айда төннә тың тыңнамага щыгабызый; **сүс (сос) басыу** (серем итеү, йоҡлап алыу): Мин бер биш минут кына сүс басып алыйым әле; **улан** (бала): Йарлы кешенеке уланнары күп была; **сыр** (буяу):Тәрзә буйамага тип ак сыр апкайттык; **көү** (көй): Бердә көүем жук боу араларда; **абышкалы-бещәле** (ирле-ҡатынлы): Абышкалы-бещәле былып бетәләр инде уланнар; **ыспайы** (матур): Кейемнәре ыспайы былгас, үзләре дә ыспайы.*

Шулай итеп, тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғәйнәләрҙең һөйләү теле лексикаһы башҡорт әҙәби теленә яҡынырак тора, тип ышаныслы әйтә алабыҙ. Түбәндә һеҙҙең иғтибарға ғәйнә һөйләше өлгөләрен тәкдим итәбеҙ.

*Мин Мукаева Фирза Махмут кызы булам. Миңа алтмыш биш йәш. Утыз биш йыл гомеремне медицинага багышладым. Фельдшер булып эшләдем. Хәзер мин ветеран инде. Пермь крайының ветераны. Инде эшләмәй өйдә ултырам, мал-тыуардар ҡарап, донъя алып барабыз, ә инде шул буш ваҡытларда атнада өщ тапкыр мәдәният йортона йыйылабыз. Бында без төрлө уйыннар ойошторабыз, жырлыйбыз, бейийбез. Фольклор группабыз бар үзебезнең. Бик шат, бик күңелле йәшибез. Үзебезнең оста куллар түгәрәге бар. Шушы түгәрәктә без бер-беребезгә кем нинди аш-су пешерергә өйрәнгән, шуның белән уртаклашабыз. Безнең күп пешергән азыкларыбыздан пилмән, манты, кабартмалар, өмөжө пироглары, эректән шәңгәләр, бәрәңгенән шәңгәләр. Малныкы эщәгесенән пироглар пешерәбез, тәмле өщпощмаклар пешереп ашыйбыз. Ҡазы ауыз итәбез. Ауылыбыз бик матур инде, үсә бара, йәмләнә, күрәсез. Ауылыбызның уртасынан Төнгүк йылгасы ага, ә инде Төнгүк йылгасы Тол йылгасына коя. Ә Тол йылгасы Камага коя инде. Тол йылгасы Толбаш тигән ауылдан башлана. Дарыу үләндәр дә күп инде. Хәммәсе бар. Баксала картуп, карлыган ултыртабыз.*

*Барҙа округының Төнгүк ауылында Мукаева Фирзә Мәхмүт ҡыҙынан (1958 йылғы) яҙып алынды.*

*Исемем Мәүлижан Мөхәмәтйән улы. Армияла дүрт йыл хезмәт иттем. Анан соң шоферга укыным да колхозда эшләнем, ун сигез йыл комбайнда эшләдем. Мал асырыйбыз әле, азлап-азлап. Көн күреп ятабыз инде шулай. Сугыштан соң бабайлар кайтты, кайсысы кулсыз, кайсысы аяксыз. Улар колхозды восстановить иттеләр дә иде. Азмы-күпме йөрөп, ат менән сука сөрөп. Щерек картупны бирмиләр. Колхоз бөттө инде, без эшләгән щактагы кеүек түгел. Иген бигерәк әйбәт була иде. Әтей-әнейләр нык булдылар, тәрбиәсе әйбәт булды. Абыйлар йәштән үлделәр. Сугышта өщ абый катнашты, икесе кайтып үлделәр. Мин әле үзем генә калдым.*

*Барҙа округының Түбән ауылында Усаев Мәүлийән Мөхәмәтйән улы (1940 йылғы) яҙып алынды.*

*Ҡайын ауылынан булам. Охранник, ГБ булып эшләдим. Әле водитель, эшлим әле, хәлдән килгәнщә. Ауыл үсә, ызбалар күбәйә бара, халкы аз, эш булмагащ. Миниң өщ малай инде, ики малай өйләнгән, берсе өйләнмәгән әле. Утыз бер йәш была. Бездә Чириз, Тол йылгасы бар. Бер мектеп, ун бер класс. Укымаға кирдим ийе, өс йыл хозакадемияла. Мәшкәгә быйыл жөрөмәдем инде, эшкә киттем. Без мешокты мишик тийбиз, бәрәңгене картуп тийбиз, сөгөлдөрҙө – щөгөндөр, селәүсен – сөгөзлин тийбиз.*

*Барҙа округының Ҡайын ауылында Дускаев Рәйес Таһир улынан яҙып алынды.*

*Барҙа районыныҡы. Мынсы миңке малайның ҡатыны була, килен (һатыусы). Балалар аны ҡый малайныҡы, ҡыз мында тора – Миләүшә. Мин Березник тигән, Ҡайынлы ауылдан, мында уланнарға ғына килдим. Бизде тупасырак сөйлешелер, әзәбищә түгел. Самовар – чурнай, сиз әйткәнщә тупса тупса была, өй өү была, балалар –*

*уланлар, курица – щебеш, цыплёнок – щебеш бала, торна торна была.*

*Бизде ҡолаҡай – ул ишитмий была.*
*Үзегезге рәхмәт, ыспай итеп сөйләщтек!*

*Барҙа округының Ҡайын ауылында Баҡунова Ғәмилә Ғәбдулбар ҡыҙынан (1943 йылғы) яҙып алынды.*

*– Мин Мүкминова Ҡәҙриә Әхмәситдиковна булам. Йәш кенә мин – сиксән дүрт йәштә генә. Бер мең туғыз йөз утыз туғызынщы йылның сигезенще январында тыуҙым. Ҡырҡ жыл мәктәптә эшләнем. География, история предметларны уҡыттым. Уланнарым бар – өщәү. Внукларым күп. Правнукларым да бар.*

*– Бәлки, ауыл менән бәйле берәй ҡыҙыҡлы хәл, фольклор тураһында һөйләп китерһегеҙ?*

*– Мин жырламаа белмәйем. Мин турслётта йөрөдөм. Ун жыл беренще урын алдыҡ беззең мәктәп укыущылары. Пермда булдыҡ турслётта. Миңке эш шу булды, уҡыущылар белән эшләп.*

*Мин йәш щаҡта бейедем, жырладым. Хазер онотоп бөттөм инде.*

*Географ булғас, мин мында истәлекле урыннар буйынща күп эшләдем инде. Бында Хөсәйен Шәһит тиләр, ауылны щыҡҡас, берәү зур ыршы утыра. Аның буйынща альбом төздөм. Мында иске зыярат буйынща альбом төздөм. Хазер мин эшләгән мәктәп жанды. Алтмыщынсы йылда бу мәктәпне эшләделәр һәм унда щыҡтылар. Мин килгәндә, миңә эш юҡ әле. Беренще малайны тапҡас, географ директор үзе миңке укытыущы ие, Александр Максимович. Ул география укыта, үзенә кеше әзерләй. Мине интернатҡа эшкә бирзе. Унда алтмыш кеше ие, жите ауылдан килеп укыйлар, шунда торалар. Тәрбиәще булып эшләдем. Анлар сун шул жылны уҡ математика уҡытмаға ҡуштылар. Кемдең ниндей укытыущы житмей, начальный класларҙа уҡыттым, анар соң география уҡыттым.*

*Мына ауылның был Хөсәйен Шәһит тип әйткән жир бында Саҡсар тау тибез. Шушы тауға яфраҡ сындырмаға барған. Аслыҡ жылында пикан жыйған. Шунан ҡайтып киләләр икән Пугачев ғәскәрләре, Бардадан бында жийәү киләләр икән. Пугачев беззең территорияга еткән ҡый инде. Бында килеп житкәс, Хөсәйен Шәһитне сүләштерә башлағаннар. Теге ҡаршы щыҡҡан. Шунда тегене атып үтергәннәр. Шунда уҡ жыйғаннар. Ҡәбере шунда.*

- *Ниңә Саҡсар тауы тип атағандар?*

- *Саҡлағаннар инде. Бында бай кеше йәшәгән. Элекке мәктәпнең хужасы. Шушы коммунислар партиясе щыга бащлагас, алтынын да шунда ҡазып йәшергән. Шуны саҡлағаннар тип сүләйләр. Шул кеше әйткәндер тейем, байлығын шунда саҡламаға алып менгәс. Мәсхүт Имашевның ҡартәтийе була ул. Шуға ул бында килә ул.*

*Барҙа округының Ҡайын ауылында Мүкминова*
*Ҡәзриә Әхмәситдик ҡыҙынан яҙып алынды*

**Әҙәбиәт**:


1. Шәкүр Р. Башҡорт диалектологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2012. 240 бит.
2. Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа, 2006. 296 с.
3. Асфандияров А.З., Асфандиярова К.М. История башкирских сел Пермской и Свердловской областей. Кн. 8 Уфа, 1999. 744 с.
4. Баишев Т.Г. Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Уфа: Гилем, 2006. 132 с.
5. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге / Рәсәй Фәндәр академияһы фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты). Өфө: Китап, 2002. 432 б.
6. Башкиры-гайнинцы Пермского края. История, этнография, антропология, этногеномика / Под общ. ред. Р.М. Юсупова. Уфа: Гилем, 2008. 58 с.
7. Башкиры-гайнинцы: история и современность. Уфа: Китап, 2012. 264 с.
8. Башҡорт теленен диалектологик атласы. Өфө, 2005. 232 б.

9. Ғәйнә башҡорттары фольклоры / Авт.-төҙ. Р.Ә. Солтангәрәева, төҙ.Ф.Ф. Ғайсина. Өфө: БР ФА, «Ғилем» нәшриәте, 2012. 172 б.

10. Дильмухаметов М.И. Говор среднеуральских башкир. Уфа: Гилем, 2006. 191 с.

11. Гәйнә башкортларының Барда сүзлеге. Барда, 2020. 130 б.

12. Зимасов Н. Барда сүзлеге. Барда, 2005. 133 б.

© Сәғитова А.Ғ., 2024

**УДК 811.512**

***Сәлахова Рүзилә Рәшит кызы,***

*доцент, гомуми тел белеме һәм тюркология кафедрасы*

*Казан (Идел буе) федераль университеты, ТР*

## Татар һәм башкорт телләрендә туганлык атамалары һәм аларның сүзьясалыш мөмкинлекләре

Тел күренешләрен чагыштырып өйрәнү – гомум тел гыйлеменең төп юнәлешләренең берсе булып тора. Мәгълүм булганча, аерым телләрне чагыштырганда аларның берьюлы барлык фактларын да чагыштыру мөмкин түгел, чөнки телнең һәр ягы үзенчәлекле якын килүне таләп итә. Телнең аваз ягы, лексикасы, грамматик төзелеше һ. б. төрле үзенчәлекләргә ия.

Лингвистикада инде күптәннән аерым лексик төркемнәрне өйрәнү традициясе яшәп килә. Туганлык терминнары лексик-семантик төркеме озак вакытлар галимнәрнең игътибар объекты булып тора. Тел белгечләре әлеге терминологияне лексикология [Денмухаметова, Юсупова, 2012; Карабаева, Абдуллина, 2016], синтаксис [Ягафарова, 2008; Ромазанова, 2015] фәне кысаларында тикшеренүләргә җәлеп итәләр. Әмма туганлык атамалары тел гыйлеменең сүзьясалышы тармагы өчен дә кызыксыну тудыра. Алар телдәге борынгы лексик катлам буларак сүзьясалыш системасы үсешенең төп тенденцияләрен күрсәтергә сәләтле. Барлык әлеге алшартлар теманың актуаль яңгырашына сәбәп булып тора да. Икедән ким булмаган компонетлы бердәм мәгънәне аңлаткан сүзләрнең

төзелеше буенча өч төре билгеле: парлы (куш), тезмә һәм саф кушма. Без соңгысына тукталырга булдык.

«Кушма сүзләрнең бу төре, синтаксик мөнәсәбәтләр юкка чыгып, үзара атрибутив, объект һәм предикатив бәйләнештәге сүзләрнең кушылуыннан барлыкка килә» [4: 34].

Татар һәм башкорт телендә кушма компонентлы туганлык атамалары байтак. Без әлеге тикшеренүебездә саф кушма туганлык атамалары белән чикләнербез. Тел материаллары күрсәткәнчә, мондый төр атамаларның ясагыч нигезләрендәге ике компонент та туганлык атамаларыннан гыйбарәт. Бу бик кызыклы күренеш. Саф кушма туганлык атамалары нигездә сүзләр кушылу, сүзтезмәнең кушма сүзгә күчү ысулы белән ясалалар.

Югарыда искәртелгәнчә, саф кушма исемнәрнең бер өлешен ике компоненты да туганлык атамасы булган сүзләр тәшкил итә һәм алар, табигый, шулай ук туганлык атамасына караган сүз ясыйлар. Мондыйлар рәтендә беренче компоненты *каен-* булган сүзләрне карап китү кызыклы булыр. *Каен* сүзенең этимологиясен Р. Әхмәтьянов катлаулы дип таный һәм аерым фаразларын теркәп китә: «Ихтимал, ул бор. төрки qaŋ «өлкән ата, патриарх» сүзеннәндер (монг. qadum < *qaŋdum < төрки qaŋıum?) һәм миш. кан′ турыдан-туры шуннандыр. Удм. телендә *кайн-* мәгънәсендә (һәм тат. кушма сүзләреннән калька рәвешендә) вар «хезмәтче» сүзе килә; бәлки қайн- сүзе тув. хаа < бор. төрки қа, *қай > монг. ха, хай «хезмәтче» сүзеннән (туй термины буларак) киләдер» [1: 337]. Татар телендә «каен+туганлык атамасы» моделе буенча түбәндәге сүзләр ясалганнар:

***каенага(й)*** – иргә (хатынга) карата хатынның (ирнең) абыйсы, никах кардәшлегендә ирнең (хатынның) өлкән ир туганы;

***каенана*** – хатынга иренең әнисе;

***каенапа*** – каенигәч (хатынга ирнең апасы);

***каената*** – хатынга ирнең әтисе;

***каене*** – иргә (хатынга) карата хатынның (ирнең) энесе, никах кардәшлегендә кече ир туган;

***каениш*** – 1. иргә хатынның энесе. 2. хатынга ирнең кыз һәм ир туганнары.

***каенсеңел*** – хатынга ирнең кече кыз туганы [5: 41].

Башкорт телендә дә мондый атамалар шактый күп очрый. Берничәсен карап узыйк:

***ҡайнаға*** – хатынның яки ирнең өлкән абыйсы;

***ҡайнана*** – ирнең анасы хатынга карата;

***ҡайната*** – ирнең атасы хатынга карата [3: 105–106];

***ҡайынһеңле*** – ирнең сеңлесе хатынга карата [3: 120];

***ҡайынйеҙнә*** – ирнең апасының ире;

***ҡайынйеңгә*** – хатынның абыйсының хатыны [3: 105–119].

Татар телендә *каен* компоненты белән бергә *бикә* компоненты килеп, яңа сүз ясамыйлар. Башкорт телендә исә мондый сүз бар:

***ҡайынбикә*** – ирнең апасы (хатынына карата) яки хатынның апасы иренә карата [3: 11].

*Абыз* сүзе һәр ике телдә дә кушма сүзләр ясалышы өчен нигез булып тора. *Абыз* сүзе аңлатмалы сүзлектә берничә мәгънәгә ия булган сүз буларак тәкъдим ителә. Ул укымышлы кеше мәгънәсенә ия булган лексик берәмлек тә, җитәкче ага мәгънәсендә дә йөри, гаиләдә балаларның әтисе яки әнисенең апасы һәм сеңелесе буларак та аңлашыла ала, өлкән хатын-кызга мөрәҗәгать буларак та йөри [5: 26].

Татар теленең аңлатмалы сүзлегендә *абыз* компоненты кергән түбәндәге кушма сүзләр теркәлгән: *абызтүти* (Кемнең дә булса әтисенең яки әнисенең апасына эндәшү сүзе) [5: 26]. *Абыз* компоненты кергән саф кушма сүзләр җирле сөйләшкә караган лексик берәмлекләр буларак бик еш очрый. Мәсәлән: *абызагай* (ләмбрә сөйләшендә килен кешенең каененесенә эндәше), *абызапа* (чистай сөйләшендә иренең апасына эндәшү сүзе); *абызастай* (чистай сөйләшендә каенсеңелләренә эндәшү сүзе), *абызәбекәй* (бөре сөйләшендә әтисенең җиңгәсенә балалары шулай эндәшә), *абызәби* (бөре сөйләшендә әтисенең апасына эндәшү сүзе), *абызәни* (пермь сөйләшендә кендек әби, ә темников сөйләшендә иренең апасына эндәшү сүзе); *абызбабай* (тау ягы сөйләшләрендә, минзәлә, бөре сөйләшләрендә әтисе яки әнисенең иң өлкән абыйсына эндәшү сүзе); *абызбикә, абызбикәм* (нократ сөйләшендә иренең апасына эндәшү), *абыздәдәй* (темников сөйләшендә

абызбабай, ягъни әтисе яки әнисенең иң өлкән абыйсына эндәшү сүзе, ә хвалын сөйләшендә хатынының бертуган абыйсына эндәшү сүзе), *абызҗиңги* (тау ягы, чистай, пермь сөйләшләрендә иң олы абыйсының хатынына эндәшү сүзе), *абыззынкай* (кузнецк сөйләшендә әтисе яки әнисенең иң олы абыйсының хатынына эндәшү сүзе), *абызморза* (темников сөйләшендә иренең абыйсына эндәшү сүзе), *абызтәтәй* (темников сөйләшендә өлкән хатын-кызга хөрмәтләп эндәшү) һ. б. Күренгәнчә, болар барсы да «абыз + затны атаучы исем» моделе буенча ясалганнар.

«Башкорт теленең академик сүзлеге» материалларына караганда, *абыз* компоненты бу телдә дә яңа сүзләр ясауда актив катнашып, аларның күбесен туганлык атамасы терминыннан ясалган яңа туганлык атамасы термины тәшкил итә [2: 120–121]. Сүзле мәгълүматларына караганда, арада саф кушма сүзләр бар. Алар түбәндәгеләрдән гыйбарәт:

***абыҙинәй***: диалекталь сүз, 2 мәгънәдә йөри: 1. әти яки әнинең олы апасы. 2. әтинең бертуган абыйсының хатыны;

***абыҙәней***: диалекталь сүз, 3 мәгънәдә йөри: 1. кендек әбисе. 2. әти яки әнинең олы апасы. 3. әтинең бертуган абыйсының хатыны;

***абыҙәнкәй*** – диалекталь лексика, ата-анадан өлкәнрәк булган хатын-кызга эндәшү сүзе;

***абыҙәтәй*** – диалекталь лексика, атаның яки ананың өлкән абыйсы. 2. укымышлы олы ир кешегә эндәшү сүзе;

***абызбабай*** – диалекталь лексика, атаның яки ананың өлкән абыйсына эндәшү сүзе;

***абызәбей*** – диалекталь лексика, берничә мәгънәгә ия: 1. өлкән хатын-кызга эндәшү сүзе; 2. атаның бертуган агасынвң хатыны. 3. укымышлы олы хатын-кызга эндәшү;

***абызәбекәй*** – диалекталь лексика, инәй сүзе белән бер мәгънәдә йөри;

***абызәбкәй*** – диалекталь лексика, өләсәй сүзе белән бер мәгънәдә йөри, ягъни әби дигәнне аңлата;

***абызәткәй*** – диалекталь лексика, олатай сүзе белән бер мәгънәдә йөри, ягъни бабай дигәнне аңлата.

Башкорт телендә *карт* сүзе + туганлык атамасы моделе шактый киң кулланышлы. Гомумән әйтеп куярга кирәк:

этимолог Р. Әхмәтьянов *карт* сүзенең деривацион потенциалын югары бәяли, шушы компонент белән килгән туганлык терминнары яңа туганлык атамасы ясау очракларына тукталып, мондый искәрмә-аңлатма бирә: «Төрле сөйләшләрдә (Кавказдан алып Себергә кадәр) карт тамырыннан ясалган исәпсез күп сүзләр очрый (к. ЗДС: 393–395, анда барысы да түгел), қарта «дәүәтисенең исеме кушылган бала», шуңа ук эндәшү сүзе; қартатай, қартәтәй, қартәти; қартбабай (әтисенең әтисенең әтисе һ. б.), *қартанай, қартәнәй, қартәни, қар ти нәй, қарт нә, қартнәй; қарткай, қартыкый; қарт нәнәй* һәм *қартөннә* (әтисенең әнисенең әнисе һ. б.). Кайбер очракларда қарт-нигезендә а > ә пәйда була (к. ЗДС: 405): *қәртәни, қәртинә, қәртнә* һ. б. « [1: 374].

Башкорт теленең лексикографик чыганакларыннан мисаллар китереп үтик:

***картинәй*** – атаның яки ананың әнисе;

***картнәй***– атаның яки ананың әнисе;

***картатай*** – атаның яки ананың әтисе;

***карттай*** – атаның яки ананың әтисе [3: 301].

Татар телендә охшаш сүзләр диалект лексикасы буларак йөри. Әмма алар нигездә саф кушма сүз буларак формалашалар. Кайбер мисалларны теркәп китик:

***картанай*** – тара, тевриз сөйләшләрендә әнинең әнисе;

***картата*** – тубыл-иртыш сөйләшендә бабасының яки әбисенең атасы;

***картатай*** – пермь, тубыл-ирыш, әстерхан, богарыслан сөйләшләрендә бабай, дәү әти, әтисенең яки әнисенең әтисе;

***картәби*** – казан арты-керәшен сөйләшләрендә әбинең әнисе. Шулай ук нагайбәк керәшеннәре сөйләшендә ыруда яки авылда иң олы карчык, аңа эндәшү сүзе;

***картинәй*** – минзәлә, бөре, пермь себер, тепекәй сөйләшләрендә әби, әтинең яки әнинең әнисе;

***картолатай*** – бабасының яки әбисенең әтисе [7: 394].

Саф кушма сүз буларак татар диалект лексикасына караган мондый сүзләр кызыклы:

***атабаш*** – хвалын, чистай, минзәлә сөйләшләрендә әти кеше, йортта хуҗа кеше буларак аңлана. Тау ягы

сөйләшендә ата хайван дигәнне белдерә, бигрәк тә кош-кортка карата әйтелә [7: 60].

Аңлашылганча, биредә беренче компонент туганлык атамасы булып килә, икенче компонент шул кешенең йорттагы дәрәҗәсен күрсәтә (биредә *баш* сүзе соматизм буларак түгел, ә нәкъ менә башлык булуына ишарә итә дип уйларга кирәк, дигән фикердә торабыз).

Икенче очракны карыйк:

***атайбикә*** – әстерхан сөйләшендә әтисенең апасы буларак аңлашыла [7: 60].

Кушма сүзләрдән түбәндәге очрак игътибарны җәлеп итә: *агайне.* Әлеге сүз ике туганлык атамасы кушылу хисабына ясалган: *агай* + *эне*. Әмма редукция нәтиҗәсендә дип уйларга була, сүз кушылып әйтелә һәм языла башлый. Нәтиҗәдә сүз саф кушма берәмлек буларак карала ала. Мәгънә ягына килгәндә, аның мөмкинлекләре *агай-эне* парлы җыйма исеменә караганда кимрәк. Әлеге парлы исемнең сүзлектә алты мәгънә төсмере теркәлсә, агайне сүзе шуларның берсен генә үзләштерә: «Исеме билгесез, таныш булмаган кешегә яки берәр нәрсәгә карата мөрәҗәгать итү сүзе» [5: 52].

Шулай итеп, туганлык атамаларыннан ясалган саф кушма сүзләр башкорт телендә (*картатай*) һәм татар телендә дә шактый актив, әмма нигездә диалект лексикасы яки хәзерге көндә кулланылмый торган искергән лексика булып торалар (*абыҙинәй*). Каен- компоненты белән ясалган саф кушма исемнәр бүген дә актив (каенана). Димәк, туганлык атамалары – чикле лексика, аларның деривацион потенциалы да шактый кызыклы. Бер яктан, бу потенциал да чиккә ия. Ясалган сүзләр шул туганлык атамасын белдергән мөнәсәбәттә булу, шул мөнәсәбәтләргә керү, шул мөнәсәбәттәгечә үзеңне тоту, аталган туганлык атамаларына караган затларың булуны белдерә. Икенче яктан, алар мифологик персонажлар, этнографик лексика ясау хисабына бик байыйлар, шулай ук диалект лексикасында да туганлык мөнәсәбәтләре нечкәлекләр белән белдерелүе, әдәби тел белән чагыштырганда бу яктан бай булуы ачыкланды.

Әдәбият:

1. Әхмәтьянов Р.К. Татар теленең этимологик сүзлеге: Ике томда. I том (А–Л). Казан: Мәгариф, 2015. 543 б.

2. Башҡорт теленең академик һүҙлеге / ред. Ф.Х. Хисаметдинова. Ун томда. I т.: А. Уфа: Китап, 2011. 432 б.

3. Башҡорт теленең академик һүҙлеге / ред. Ф.Х. Хисаметдинова. Ун томда. IV т.: Й–К. Өфө: Китап, 2012. 944 б.

4. Ганиев Ф.Ә. Хәзерге татар әдәби телендә сүзьясалышы. Казан: Мәгариф, 2006. 271 б.

5. Татар теленең аңлатмалы сүзлеге: I том: А–В. Казан: ТӘһСИ, 2015. 712 б.

6. Татар теленең аңлатмалы сүзлеге: III том: К. Казан: ТӘһСИ, 2017. 744 б.

7. Татар теленең зур диалектологик сүзлеге / төз. Ф.С. Баязитова, Д.Б. Рамазанова, З.Р. Садыйкова, Т.Х. Хәйретдинова. Казан: Татар. кит. нәшр., 2009. 839 б.

© Сәлахова Р.Р., 2024

**УДК 821.512.141**

***Тимерғәлиева Айгүзәл Рөстәм ҡыҙы***
*студент, Өфө университеты,*
***Янбаев Илшат Камил улы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## М. Кәримдең «Европа-Азия» шиғырҙар циклының проблематик даирәһе

Башҡорт халҡының данлы улы Мостай Кәрим – донъя әҙәбиәте хазинаһына бик ҙур өлөш индерҙе, башҡорт әҙәбиәтен донъя кимәленә күтәргән шәхес. Ул – бөйөк башҡорт шағиры ла, яҙыусыһы ла, драматургы ла, тәнҡитсе һәм публицисы ла, йәмәғәт эшмәкәре лә, яугир, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ветеран, күп хәрби һәм хеҙмәт ордендары һәм миҙалдары кавалеры, юғары исемдәр, дәүләт премиялары лауреаты. Үҙенең бөтә талантын һәм көсөн ул Башҡортостан образын һүрәтләүгә бағышлай. Ил өсөн ауыр мәлдәрҙә лә ул өндәшмәй ҡала

алмай. Аҡыллы һүҙе халыҡ араһында ҡайтауаз булып яңғырай. Халыҡ уны таланты һәм кешелек сифаттары, юғары әҙәби маһирлығы өсөн ярата. Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә халҡыбыҙҙың аҡылы, аңы, фәлсәфәһе, зиһене, теләк-ынтылыштары – бөтәһе лә бар.

Мостай Кәримдең «Европа-Азия» шиғырҙар циклының яҙыла башлауы 50-се йылдар башына ҡарай. Был цикл «Кереш» исемле шиғыр менән асыла. Унда ауырлы ҡатын һәм тыуасаҡ бала образы үҙәктә тора. Автор иң үткер әсә күҙе һәм зирәк әсә ҡолағы аша киң донъяға ҡараш ташлай, йәшәүҙең мәғәнәһен, именлектең ҡәҙерен әсәләй тойоуға илтә.

Артабанғы шиғырҙар шағир исеменән алып барыла, хәл-ваҡиғалар ағышы уның ҡарашы, мөнәсәбәте аша сағыла. «Бер йыр йырлаған» тигән шиғырында иһә сабыйҙың донъяға килеп, бишек йырҙары тыңлауы, әсәһенең тормошсан кәңәш-төңәштәре хаҡында һөйләнелә.

«Шулай башлана йәшәү» шиғыры, исеме үк әйтеп тороуынса, сабыйҙың тәү тапҡыр имгәкләп тупһа аша ҡураға сығыуы, тәү тапҡыр тәпәй баҫыуы, ҡуранан сыҡҡан һуҡмаҡҡа –ҙур юлға сығыуы тураһында һөйләй.

*Донъяла иң тәүге юлын*
*Тап шулай башлай кеше.*
*Тап шулай башлана уның*
*Йәшәүе –бөйөк эше.*

Тимәк, сабый ҙур юлға, «йәшәү – бөйөк эшкә» һуҡмаҡ һала.

«Таңдың килеүе» өлөшөндә ауыл тарихы сағылыш ала. Халыҡтың ауыр көнкүреше, михнәт сигеүҙәре, «ғәжәйеп бер таңды» көтөүҙәре – барыһы-барыһы ла баланың күҙ алдында. Ошо уҡ хәл-ваҡиғаларҙың дауамы «Мин шаһитмын» шиғырында сағылыш таба.

*Европаны гиҙҙем, Азияны,*
*Күп күрҙем мин матур, якшыны.*
*Беләм, ауылым илдәрҙә бер түгел,*
*Ләкин ерҙә ул иң яҡыны.*

Философик уйланыуҙар, Кеше, Космос, Тәбиғәт феноменын аңларға ынтылыу айырыуса шағирҙың «Европа – Азия» циклында күҙгә нығыраҡ ташлана:

*Ҡыйыу баҫкан тура эҙҙән*
*Ғәләм атлай,*
*Ҡыйыш баҫкан яңғыҙ эҙҙе*
*Үлән ҡаплай* («Бер йыр йырланған»).

*...Ә бит башың эйелмәһә,*
*Һауалар шундай бейек.*

*...Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,*
*Бер яҙмышым шуға торорлоҡ* («Россиянмын»).

*...Сөнки ул бит мәңгелектән*
*Мәңгелеккә Осоп бара...*
*Сөнки Ҡояш бөтә якты*
*Тигеҙ нурлай,*
*Үҙ юлында саҡ ҡына ла*
*Туҡтап тормай.*

Шағирҙың донъяны ҡабул итеүе, баһалауы йәшәйеш ниәтен, уның ҡапма-ҡаршылыҡтарын, берҙәмлеген һәм эҙмә-эҙлеклелеген таныуға таяна, уның фәлсәфәүи лирикаһының поэтикаһын фекер йәнәшәлеге, символизм билдәләй. Тормошсан йөкмәткеле, тәрән фәлсәфәгә ҡоролған иң тәүге, бер бөтөн, тәрән мәғәнәгә эйә, уҡыусыһын тәрән уйға һалыр уңышлы әҫәре тип баһалайбыҙ уны.

Лирик герой тәбиғәттең матурлығына, байлығына һоҡланып туя алмай, «шул тупраҡта тыуып үҫеү үҙе бер бәхет» тип һанай. Ләкин тормош аллы-гөллө генә бармай. Ир-егет булып үҫеп еткән сағында Ватанына дошман һөжүм иткәс, ошо хәтәр сәғәттәрҙә үҙ ауылының өс йөҙ егете менән өс йөҙ ат эйәрләп яуға китә («Өс йөҙ егет» шиғыры). «Һабан туйы» шиғырында беҙ дошманды ҡыйратып ҡайтҡан, төрлө сынығыуҙар үткән, физик һәм интеллектуаль йәһәттән формалашып еткән шәхесте күрәбеҙ, йәғни ул тамам өлгөргән әүҙем кеше, ысын гражданин булараҡ күҙ алдына баҫа. Унда тыуған ауыл

халҡының көнкүреше тыуған республикаһы менән бергә, ә бөтә башҡорт халҡының яҙмышы Бөйөк Рәсәй – Ватаны менән ҡушыла. Быға дәлил һәм «Европа-Азия» шиғырҙар циклының кульминацион өлөшө булып «Российянмын» шиғыры тора.

*Рус түгелмен, ләкин россиян мин,*
*Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!*
*Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,*
*Бер яҙмышым шуға торорлоҡ!* –

тигән ялҡынлы юлдар аша лирик герой Рәсәйгә дан йырлай, рус һәм башҡорт татыулығы алдында баш эйә.

Циклдың һуңғы бүлектәрендә шәхес яҙмышы тағы ла ҡатмарлаша һәм ҡатлауланып китә, хатта тотош донъя яҙмышы менән берегә. Һөҙөмтәлә, конкрет һәм дөйөм, лирик һәм эпик сифаттар берегеп, әҫәрҙең образлылыҡ һыҙаттарын көсәйтә.

Шулай итеп, Мостай Кәримдең «Европа-Азия» шиғырҙар циклы – ул тыуған ауыл, ил, донъя хаҡындағы әҫәр. Уның үҙәгендә торған тыуған ил һәм халыҡ образдары поэтик һүрәтләнештең үҙенсәлекле бер яңы эске законсылыҡтары ерлегендә асыла. Тыуған ил образын конкрет тыуған ер төшөнсәһенән киң мәғәнәһенә, символикағаса үҫтереү, халыҡ образын шәхескә бәйләп яҡтыртыу тенденцияһы көслө. Әсә ҡарынынан алып, атай йорто, тыуған ауыл, тыуған ил төшөнсәләре ялғана барып, Ватандың оло образына тоташа.

**Әҙәбиәт:**

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. V том: Башҡорт совет әҙәбиәте: 1956–1965 йылдар / Ғ. Хөсәйенов, Р. Байымов, Р. Бикбаев. Өфө: Китап, 1993. 596 бит.

2. Башкирская литература второй половины XX века: учебное пособие / Г.Н. Гареева, Р.Д. Мустафина. Уфа: РИЦ БашГУ, 2018. 206 с.

3. Феномен Мустая Карима и глобальный XX век: национально-духовная культура в мировом контексте (К 100-летию со дня рождения народного поэта Башкортостана М. Карима): сборник материалов Международной научно-практической конференции / отв. ред. Г.С. Кунафин. Уфа: РИЦ БашГУ, 2019. 288 с.

4. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим: Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. Өфө: Китап, 1994. 416 бит.
© Тимерғәлиева А.Р., Янбаев И.К., 2024

**УДК 37.035.6**

***Усманова Сәлимә Рафиҡ ҡыҙы,***
*музыка белгесе, баланы үҫтереү үҙәге-*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## Бала үҫешендә быуындар бәйләнешенең әһәмиәте

Кешеләр тормошонда бер быуынды икенсе быуынға ялғаусы – тыуған төбәк, тел, милли ризыҡ, йолалар, уйындар, әҙәбиәт, тарихи ваҡиғалар, әһәмиәтле һәм ҡиммәтле милли һыҙаттар. Ошолар булмаһа, бер быуын икенсеһенә һис тә бәйләнә алмай. Ағасҡа бәләкәй сағынан һыу ҡойоп, тәрбиәләп үҫтерһәң, көслө тамырлы, ныҡ булып үҫә. Шуның кеүек балаға ла бәләкәстән үҙ милли һыҙаттарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәтеп, аңлатыу, милли мөхиттә тәрбиәләү уны көслө рухлы, ергә ныҡ баҫып тороусы, үҙ-үҙенә ышанған шәхес итеп үҫтерәсәк. Быуындар бәйләнеше тип атала был күренеш.

Быуындар бәйләнешен булдырыусы төп урын – ғаилә һәм балалар баҡсаһы. Бергәләшеп бер маҡсатта ошо йүнәлештә эш алып барыу һис шикһеҙ үҙ һөҙөмтәһен күрһәтәсәк.

Үҙ шәжәрәңде белеү быуындар бәйләнешендә төп ролде уйнай. Шәжәрә ғәрәп телендә «ағас» тигән һүҙ. Беҙҙең олатайҙарыбыҙ ырыу-ҡәбиләне, нәҫелде, ата-бабаларҙың исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Ә ни өсөн ағас? Ағас борон беҙҙең халыҡта һауаны, ерҙе,ер аҫтын берләштереүсе билдә булған. Тамыры – үткәнебеҙ, олоно – бөгөнгөбөҙ, тармаҡтары – киләсәгебеҙ. Кешенең ата-бабаһы – ағастың кәүсәһе, яҡын туғандары – ботағы, туғандарҙың туғандары – һабаҡтары, япраҡтары формаһында тармаҡланып төҙөлгән була. Туғандары күп булған кешене нәҫел-нәсәпле кеше тиҙәр. Нәҫел-ырыуҙы үҫтермәүсе, тарҡатыусы, бөтөрөүсе кеше тураһында «нәҫел ҡороҡос» тип әйтәләр. Һәр кеше үҙ

нәҫел ағасындағы яҡшы сифаттарын һаҡлап, уны тағы ла яҡшыртырға тейеш. Кеше кәмендә ете быуынын белергә тейеш булған, сөнки ырыуҙа ҡан яңыртыуға ынтылыш аныҡ булған. Был ҡан ҡәрҙәштәр менән ғаилә ҡороу тыйыла тигән һүҙ. Ул бына ошолай күренә: Ата – Ул – Ейән – Бүләр – Тыуар – Тыуа ят – Ете ят. Етенсе быуын тыуған тип һаналмаған (кейәүгә сығыу, өйләнеү мөмкин). Балалар баҡсаһында шәжәрәне өйрәнеү маҡсатында ата-әсәләр менән берлектә төрлө саралар үткәреп тороу яҡшы һөҙөмтә бирәсәк. Мәҫәлән, «Минең шәжәрәм» бәйгеһе, «Минең ҡартатайым», «Минең өләсәйем» темаларына презентациялар, һүрәттәр конкурсы, «Мин тамырҙарым менән көслө», «Минең ғаиләм», «Минең туғаным» исемле ғаилә байрамдары, «Исемем матур», «Был мин» һ. б бәйгеләр. Һәр ғаиләлә төп документ булып шәжәрә булһа, өйрәнелеп, һаҡланһа ине.

Бәйләнештең икенсе төп күрһәткесе – ул ата-бабаларҙың шөғөлдәрен өйрәнеү, дауам итеү. Был юҫыҡта балалар баҡсаһында милли мини-музейҙар, мини-тирмәләр, төрлө шөғөлдәрҙе күрһәткән мөйөштәр булдырыу бик отошло. «Айыуҡай» балалар баҡсаһында һәр төркөмдә ошондай мөйөштәр эшләй, мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә милли тирмә булдырылған.

Тирмә – күсмә халыҡтарҙың ваҡытлыса йәшәү өсөн ҡулайлаштырылған торлағы. Ул быуаттарҙан-быуатҡа тәбиғәт ҡосағында йәшәү тәжрибәһен сағылдырған, бөтә талаптарға ла яуап бирә алған төрө. Һаҡлау, күсереү өсөн бөтә яҡтан да уңайлы итеп уйлап табылған был ҡоролма башҡорттарға хас булған. Мини-тирмәләрҙе ҡартатай-өләсәйҙәр, ата-әсәләр менән бергә йыһазландырыу, тулылыландырыу ҙа балаларҙа ҡыҙыҡһыныу, һаҡсыл ҡараш булдырасаҡ. Тирмәнең бер нисә төрөн булдырырға мөмкин: традицион кейеҙ тирмә, ағас тирмә, аш-һыу тирмәһе. Тирмә күргәҙмәләре менән танышыу, дәрестәрҙә ҡулланыу, шулай уҡ макеттар әүәләү ҙә (мәҫәлән, аш-һыу төрҙәрен, эш ҡоралдарын) балаларҙың танып-белеү һәләттәрен, телмәрҙәрен, ҡул суҡтары эшмәкәрлеген дә үҫтерәсәк.

Ата-бабаларҙың шөғөлдәрен белеү, өйрәнеү ҙә балаларҙың киләсәгенә йоғонто яһай. Һәр баланың генына һалынған кәсептәрҙе тергеҙеү, үҫтереү киләсәктә табыш һәм килем алырға ла ярҙам итәсәк.

Малсылыҡ буйынса мөйөш булдырып, дәрестәрҙә, байрамдарҙа ҡулланырға була. Башҡорттарҙың хужалығының нигеҙе булып ярым күсмә малсылыҡ тора. Мәҫәлән, йылҡысылыҡ. Йылҡы аҫырау ифрат файҙалы кәсеп булған. Уның итен ашағандар, ҡымыҙы һауыҡтырыу көсөнә эйә булһа, тиреһен эшкәртеп, төрлө һауыт-һаба яһағандар. Күсеп йөрөүсе халыҡ өсөн күп һауыттар ифрат уңайлы булған. Улар бәрелмәгән, ватылмаған, аҫып йөрөгәндә атҡа уңайһыҙлыҡ тыуҙырмаған. Йылҡы малы әрһеҙ булған, хужалыҡта транспорт сараһы булараҡ ҡулланылған. Шуға күрә һәр заманда ла башҡорт атын ҡәҙерләгән. Атҡа булған мөнәсәбәт халыҡ ижадында ифрат ҙур урын алған. Унда ир-егет менән ат һәр саҡ йәнәш ҡуйыла, айырылғыһыҙ ике йән итеп һүрәтләнә. «Башҡорт аты» мөйөшө булдырыу, айырым проект эше итеп алып та күп эштәр атҡарырға, материалдар туплап, балаларҙы ҡыҙыҡһындырырға була. Телмәр үҫеше, танып-белеү, физик үҫеш, художестволы-эстетик үҫеш, социаль-коммуникатив үҫеш өлкәләрен үҙ эсенә алған төрлө саралар, дәрестәр, ҡул эштәре, хәрәкәтле уйындар, эҙләнеү-тикшеренеү эштәре, халыҡ ижады төрҙәре, нәфис әҙәбиәт төрҙәре менән эшләргә була. Ҡыҙыҡлы эш төрҙәре, халыҡ шөғөлдәре бала күңелендә иҫтә ҡаласаҡ.

Шулай уҡ һарыҡсылыҡ, солоҡсолоҡ йүнәлеше буйынса ла проект эштәре алып, мөйөштәр булдырып, ошондай уҡ эш төрҙәрен алырға була.

Кендегең ҡырҡылған ерҙә ризығың сәселһен тиҙәр. Башҡорт халҡының аш-һыуҙары буйынса ла бик күп эш төрҙәре башҡарырға була. Милли аш-һыу башҡорттарҙа малсылыҡ хужалығы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Халыҡтың йәшәү рәүеше башҡорттарҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен, йолаларын һәм аш-һыуын формалаштырған. Күсмә тормош рәүеше оҙаҡ һаҡларға яраҡлы аҙыҡтарҙың киң рәтен булдырған. Башҡорт милли аштарының төп массаһын

бешерелгән, киптерелгән һәм ҡаҡланған йылҡы ите, ҡуй ите, һөт ризыҡтары, киптерелгән еләк, киптерелгән бөртөклөләр, башҡорт балы тәшкил иткән. Был ашамлыҡтарҙың миҫалы булып ҡаҙы-ҡарта, баҫтырма, шулай уҡ ҡаҡ, ҡымыҙ, буҙа, сейәле һары май, муйыл майы, ҡорот (киптерелгән ҡорот), эремсек һәм айран тора. Традицион башҡорт ашамлығы – бишбармаҡ – бешерелгән иттән һәм һәм һалманан әҙерләнә, мул итеп ҡорот һалына. Бына ошо аш-һыуҙарҙы һәр бала белеп, танып, тәмләп үҫһә, ул сәләмәт тә, көслө лә буласаҡ, үҙ ерендә тулы гармонияла буласаҡ. Балалар баҡсаһында был йүнәлеш буйынса ата-әсәләр менән берлектә видеороликтар бәйгеһе, әүәләп эшләү буйынса ҡул эштәре бәйгеләре, аш-һыу әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, күргәҙмәләр үткәреү балаға үҙ халҡының милләтенә, уның теленә һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә ысын мәғәнәһендә ихтирамлы булырға өйрәтәсәк.

Шулай итеп, баланың телмәре үҫешенә, әҙәпле, тәртипле, аҡыллы булып үҫеүенә, рухы ныҡ булыуына халҡыбыҙҙың тарихын, көнкүрешен, йәшәү рәүешен үҙләштереү, өйрәнеү ярҙам итәсәк. Баланың рухи донъяһы формалашыуына быуаттар аша һаҡланып килгән йолалар, уйындар, байрамдар, шөғөлдәр ҙур роль уйнай. Халҡыбыҙ хазинаһы менән баланы сәңгелдәктән тәрбиәләү мөһим. Бала социумдың хоҡуҡлы ағзаһы булараҡ халыҡтың мираҫын үҙләштереп, һаҡлап, үҫтереп, киләсәк быуынға тапшырырға тейеш. Быуындар бәйләнеше сылбыры өҙөлмәй тапшырылғанда ғына илебеҙгә бөтә яҡтан өлгөргән шәхес үҫәсәк.

**Әҙәбиәт**:

1. Бураҡаев И.Д., Бураҡаева М.С., Юлмөхәмәтов М.Б. Башҡорт мәҙәниәте (Тормош һабаҡтары): VIII синыф өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2004. 192 бит.

2. Бураҡаев И.Д., Бураҡаева М.С., Юлмөхәмәтов М.Б. Башҡорт мәҙәниәте (Тормош һабаҡтары): IX синыф өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2004. 176 бит.

3. Башҡортостан – Гөлбостан: Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһына хрестоматия / Аҙнабаева Ф.Ғ.,

Иманғолова Л.М., Мөхәмәтйәрова А.Т. Өфө: Китап, 2017. 272 бит.
4. Миһранова Э.В., Шитова С.Н. Башҡорт аш-һыуы / Башҡорт энциклопедияһы. Өфө: «Башҡорт энциклопедияһы» ғилми-нәшриәт комплексы, 2015-2019.
© Усманова С.Р., 2024

**УДК 372.881.1**

***Фәйзуллина Флорида Нурислам ҡыҙы,***
*башҡорт теле уҡытыусыһы, Стәрлетамаҡ политехник колледжы, Стәрлетамаҡ ҡ., БР*

## Рус телле аудиторияла башҡорт телен уҡытыу тәжрибәһенән

Ҡала уҡыу йорттарында башҡорт теле уҡытыуҙың үҙенсәлекле икәнен бер кемгә лә яңылыҡ түгел, сөнки бер үк класта телде аҙмы-күпме кимәлдә белеүсе башҡорт балалары менән бергә башҡа милләт вәкилдәре лә ултыра. Башҡорт балалары әсә телен аңлаһа ла уларҙың күбеһенең фекерләүе урыҫ телендә.

Башҡорт телен әсә теле булараҡ өйрәнгән балалар дәрестә үҙ фекерен тәрән йөкмәткеле итеп һөйләргә өйрәнһә, урыҫ класындағы балалар телде тик практик күҙлектән генә уны аңлау, ул телдә аралашыу, Башҡортостандың ғөрөф-ғәҙәттәрен ихтирам итеү планында ғына өйрәнәләр.

Тел уҡытыуҙа ҡатып ҡалған алымдар юҡ. Ижади эшләгән уҡытыусының төрлө ысулдарҙы, алымдарҙы ҡулланыу мөмкинселеге бар.

Урыҫ телле балалар менән эшләгән уҡытыусы ике телдә лә дөрөҫ, акцентһыҙ һөйләшергә, рус теле ҡағиҙәләрен, рус әҙәбиәтен, тарихты, мәҙәниәтте яҡшы белергә тейеш.

Тәүге дәрестә үк башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу маҡсатында башҡорт һүҙҙәренең венгр телендә осрауы, Көньяҡ Америкала йәшәгән бер ниндәйҙер ҡәбиләнең телендә башҡорт теле менән уртаҡ һүҙҙәрҙең

булыуын, сит ил университеттарында ла башҡорт теленең өйрәнелеүен, сит илдәрҙә тыуып үҫкән башҡорттарҙың таҙа итеп үҙ телендә һөйләшеүен, донъяла күп телдәрҙе белеүсе полиглоттар булыуын, Сергей Анатолий улы Старостин 400 тел, Рим Папаһында 46 тел, Англияла 76 тел белгән кеше йәшәүен, «Полиглот» программаһын алып барыусы харизмалы Дмитрий Юрий улы Петров һәм уның методикаһы, уның 8 телдә иркен һөйләшеүе, 30 тел белеүе, төрки һәм башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусы Николай Константин улы Дмитриев тураһында ла әйтеп уҙырға кәрәк. Ҡыҙыҡһыныу тыуҙырғандан һуң дөрөҫ иҫәнләшергә (Һаумыһығыҙ! Иҫәнмеһегеҙ!) өйрәтеү мөһим.

Артабанғы дәрестәрҙе башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре өҫтөндә эш башлана: өндәрҙе ҡат-ҡат әйтеү, шул өндәр булған һүҙҙәрҙе ҡабатлау, ҡыҫҡа шиғырҙар ятлау. Мәҫәлән:

*Ҡойҙо ҡайындар*
*Һап-һары алтын.*
*Осто миләштән*
*Ҡып-ҡыҙыл ялҡын* (***ҡ, һ, ҙ*** өндәре).

*Ел, ерәнем, егетеңде,*
*Еткер ел етмәҫ ергә* ***[йэ].***

*Бер, ике – был баш,*
*Өс, дүрт – был ҡаш,*
*Күҙҙәр, ҡулдар, аяҡтар,*
*Танау, ауыҙ, ҡолаҡтар.*

Хор менән уҡыу, рәт менән, вариантлап, парталап, сылбырлап уҡыу дәресте йәнләндереп ебәрә. Был осраҡта ҡыйыуһыҙыраҡ балалар ҙа актив ҡатнашалар.

Хикәйәләр уҡыу, диалогтар төҙөү, һөйләшеү уҡыусыларға бик оҡшай.

Рус кластарында төп бурыс – уҡыусыларҙың һүҙ байлығын үҫтереү, һүҙҙәрҙе телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен биреү. Ошоға ярашлы башланғыс кластарҙа һәр дәрестә 7-8 яңы һүҙ үҙләштерелә, ә юғарыраҡ кластарҙа был норма йыл һайын ике тапҡырға арта бара. Яңы

һүҙҙәрҙе артабанғы дәрестәрҙә диктант итеп яҙҙырыу алымын ҡулланыу ҙа файҙалы. Ҡатмарлы диктант яҙҙырыу бигерәк тә отошло: һүҙҙәр русса әйтелә, уҡыусылар башҡортса тәржемәһен яҙалар, йә, киреһенсә, башҡортса әйтелә, ә тәржемәһе русса яҙыла.

Русса әйтелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе текстан табыу – һүҙҙәрҙең яҙылышын иҫтә ҡалдырыу өсөн бик ҡулайлы алым.

Уҡыусыларҙың фекерләү кимәлен үҫтереүҙә тулы булмаған һөйләмдәргә һүҙҙәр, һүҙбәйләнештер өҫтәү, төрлө уйындар үткәреү, бирелгән хәрефтәрҙән һүҙҙәр йыйыу, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөтөү, уларҙы тәржемә итеү кеүек эш алымдары ла файҙалы. Интерактив күнегеүҙәр, видеодәрестәр, визуаль һүҙлектәр, онлайн-дәрестәр ҡулланыу бик отошло.

Телде уның нормалар системаһын белмәүҙән башҡа өйрәнеү мөмкин түгел. Шуға күрә тәүге дәрестәрҙең береһендә уҡыусыларҙа башҡорт теленең сингармонизм законына нигеҙләнеүен күрһәтергә кәрәк. Артабанғы дәрестәрҙә уҡыусыларҙа башҡорт телендә исемдәрҙең күплек ялғауҙарының варианттары менән дә таныша. Һан, рәт һандарын темаларын уҡыусылар сағыштырмаса еңел үҙләштерәләр.

Ижади эшләү, уҡыусыларҙың телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын арттырыусы эш алымдарын ҡулланыу уҡыусыларҙа башҡорт телен практик үҙләштереү теләген уята: һәр йыл уҡыу йорттарында уҙғарыла торған олимпиадаларҙа башҡорт булмаған уҡыусылар ҙур теләк менән ҡатнашыуы – бының асыҡ миҫалы.

Тимәк, уҡыусыға объект итеп түгел, субъект итеп ҡарағанда ғына уның үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләте, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереүҙә, байытыуҙа, камиллаштырыуҙа телдәрҙе өйрәнеү көслө ҡорал булып тора. Шул осраҡта ғына беҙ яңы Башҡортостан гражданын тәрбиәләү бурысын үтәрбеҙ.

© Фәйзуллина Ф.Н., 2024

**УДК 811.512.141**

***Хажиәхмәтов Динислам Илшат улы,***
*магистрант, Өфө университеты*
***Солтанбаева Хәҙисә Вәли ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, профессор,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

# Башҡорт прозаһында хәрби лексиканың ҡулланылыш үҙенсәлектәре

Хәрби өлкә – иң боронғо өлкәләрҙең береһе. Уның үҫеше менән бергә ҡайһы бер илдәрҙә хәрби эште һүрәтләгән әҙәбиәт тә барлыҡҡа килә. Социаль кимәлдең үҫеше арҡаһында төрлө илдәрҙә хәрби лексиканы өйрәнеү төрлөсә һәм төрлө ваҡытта башлана.

Тел һәм объектив хәрби ысынбарлыҡ, сығанаҡтар, халыҡ ижады, архив материалдар, шағир һәм прозаиктар ижады үҙенсәлектәренән сығып түбәнге классификация бирелә:

**1. Һуғыш ҡоралдарының һәм уларҙың төрҙәренең атамалары:** а) ҡорал атамалары: *Һәр ҡайһыһының **ҡалъяндарында ян**, һаҙаҡтары тулы **уҡ**, эйәр ҡашына **һөнгө** беркетелгән* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»); б) ут асыу ҡоралдары: ***Мылтыҡ*** *тауыштары туҡтаны* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»); в) һуғыу ҡоралдары: *Үҙеңде йә ҡылыс менән сабып яралағандар, йә башыңа **сукмар** тейгән, иҫәңгерәп йығылғанһың* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»); г) снарядтар атамалары: ***Туптарҙан*** *да бер-ике тапҡыр ғына ялҡын урғылып ҡалды.* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

**2. Ҡоралдарҙы йөрөтөү һәм һаҡлау йыһаздарының атамалары:** *Ауыр-ауыр хәбәрҙәр ишетелә; тирә-яҡта ят күҙҙәр, сит кешеләр күренгеләй; атҡа атланған, **яуыраҡтары** аҫҡан әҙәмдәр тегеләй ҙә, былай ҙа үткеләп тора* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

**3. Һаҡлау кәрәк-яраҡтарының атамалары.**

**4. Яҡлау төҙөлмәләренең атамалары:** ерҙә ҡаҙылған һаҡлаусы төҙөлмәләр: ***Окоп*** *эргәһендә бомбалар ярылалар. Ваҡыт-ваҡыт пулеметтар ҙа таҡылдап ала. Беҙҙең окоп*

*тапҡырынан немецтарҙың ауыр снарядтары геүләп, артҡа, беҙ килгән яҡҡа осалар. Беҙҙең яҡтан килгән снарядтар ҙа немец окобына табан уҙып ярыла.* ***Блиндаждың*** *эсе һыу* (Д. Юлтый «Ҡан»).

*Ә бына ошо «елғыуарҙар» ҡот осҡос, быға саҡлы Россия тарихында булмаған яуыз дошмандан һаҡлар өсөн, боеприпастары бөтһә, самолеттарын таранға алып баралар, билдәренә гранаталар бәйләп, танк аҫтына ташланалар, күкрәктәре менән* ***амбразураларҙы*** *ҡаплайҙар...* (И. Абдуллин, «Тол ҡатындар иламай»).

**5. Хәрби подразделениеларҙың атамалары:** а) яугирҙарҙың һаны буйынса атамалар: *Мин* ***дивизия*** *штабының околодогына киттем* (Д. Юлтый «Ҡан»); *Хатта* ***роталары, взводтары*** *ла күрһәтелгән. Минеке тиһәм, ҡаты яуапҡа тарттырырҙар, тип уйланым* (Д. Юлтый «Ҡан»); хәрби төркөмдәрҙең функцияларын билдәләгән атамалар: ***Карательный отрядтарҙың****, ил ҡыҙырып йөрөүҙәре, ниндәй-ниндәй ауылдарҙың яндырылыуы хаҡында иҫкә алдылар* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

**6. Яугирҙарҙың, һуғышсыларҙың атамалары.** *Уның һөйләүенә ҡарағанда, Кириллов Ергән яланын, Үҙәк төбәкте үткән икән.* ***Һалдаттары***, ***драгундары*** *күп, ти* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»); *Ә* ***драгундарҙың*** *ямғыр килеүендә лә, ҡараңғы тешәүендә лә ҡайғылары юҡ төҫлө* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә», 1977, 13).

**7. Ғәскәр башлыҡтарын белдергән атамалар:** *Тәфтиләү түрә,* ***сотский*** *Надир Үрәзмәт бар, ти.* ***Галауный йортауай*** *Ҡыҙрас та шунда, имеш...* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»). Ғ. Ибраһимов был миҫалда ғәскәр башлыҡтарының исемдәрен һүрәтләй. Был йөҙ отрядының башлығы – *сотский.*

*Ул аттарҙа ҙурыраҡ* ***командирҙар***, ***офицерҙар*** *йөрөйҙәр* (Д. Юлтый «Ҡан», 2008, 62).

**8. »Батыр» төшөнсәһе менән һүҙҙәр:** ҡорал тота алған, еткән ирҙе белдергән һүҙҙәр: *Шундағы ҡулҡының дүмһәйерәк урынына* ***Арыҫланбатыр*** *өй һала башлағас,*

*уның ҡанат аҫтына һыйынып йәшәргә күнеккән туған-тыумасалары килеп урынлашты* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

Был миҫалдағы *батыр* һүҙе беҙ күрһәткән төркөмсәнән ир-егеттең ҙурлығын һәм көслөлөгөн белдергән атамалар төркөмсәһенә лә ҡарарға мөмкин. Бында автор персонаждың баһадир, көслө ир-егет, ысын яугир булыуын әйтергә теләй.

**9. »Дошман» төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр:** ***Ҡараттар*** *тағы ла килерҙәр. Шунынса алып сыға һалайыҡ* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

**10. Һуғыштағы айырым бер эпизодтарҙың атамалары:** *Быны йәштәр үҙ аҡылдарынан сығып та, өлкәндәр һөйләүе буйынса ла, йылдар имен булмаҫ, тағы* ***яу*** *ҡубыр, тип яманға юранылар.* ***Яу*** *уларҙың да күңелдәрен борсой. Уңыш хаҡындағы һүҙ халыҡ теленән төшмәй, ҡасан ниндәй яуҙар булған, унда кемдәр ҡатнашҡан, йорт-илгә ни саҡлы бәлә-ҡаза килгән – һәр кемдең һөйләй торғаны бар.* ***Яу*** *сапҡанда яугир булһалар ҙа, һуңынан бик ныҡ миктәгәнлектән, екһенеп бөткәндәр, күрәһең* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

**11. Һуғыш барған урынды белдергән һүҙҙәр:** ***Һуйыш-ҡырылыштың*** *шундай яман төҫ алып,* ***ҡанҡойоштоң*** *ҙурға киткәнен үҙ күҙҙәре менән күреп торған ҡарт Ҡотло атаның тәндәре ҡалтыранды, йөрәге сәнсеп-сәнсеп алды* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

Был миҫалда Ғ. Ибраһимов яуҙы *һуйыш-ҡырылыш, ҡанҡойош* синонимдары ярҙамында сағылдыра һәм уҡыусыға көслөрәк йоғонто яһарға тырыша.

*Мин унда* ***һуғыш***, ***ҡырылыш***, *уның дәһшәте тураһында, аслыҡ тураһында яҙам* (Д. Юлтый «Ҡан»).

**12. Хәрби символдарҙы аңлатҡан атамалар:** *Йоҡларға ятҡан һалдаттарҙы уятып, аяҡҡа баҫтырыр өсөн* ***барабансы дөңгөр ҡаҡты***. *Ни бары бер-ике тапҡыр ғына һуҙып* ***һорнай уйнаны*** (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

Был миҫалдағы терминдар хәрби терминдарҙың әйтеп үтелгән лексик-семантик төркөмдөң өсөнсө микротөркөмөнә ҡарай. Яу яланында сигналдар тауыш ярҙамында ғына түгел. ә **махсус музыкаль инструмент**

менән дә бирелә. Был осраҡта автор *дөңгөр* һәм *һорнай* терминдарын ҡуллана: *Туҡтап тыңланылар. Уларҙан алда, саҡ ҡына һулдараҡ, кемдәрҙер йөрәк ярып **һөрән һала** ине* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

*Ауылға осоп-елдереп барып керҙеләр ҙә икәүһе бер юлы ҡый-ҡыулап **һөрән һалдылар*** (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

Был миҫалда автор яугирҙарҙың оран һалыуын күрһәтә һәм төрки телдәре өсөн төп һүҙ булған *һөрән* һүҙен ҡуллана.

**13. Хәрби командалар:** *Йәштәр үргә менә башлағайны, Зөфәр, башын һелкеп: «**Аҫҡа!**» – тип **команда** бирҙе. Йәштәр ҡаршы килмәне* (И. Абдуллин, «Тол ҡатындар иламай»).

Был миҫалда автор әмерҙе тура формала ла («аҫҡа»), ситләтелгән формала ла («команда») күрһәтә.

Күренеүенсә, хәрби лексик берәмектәр Ғ. Ибраһимовтың «Кинйә» романында, беренсе донъя һуғышы темаһына арналған Д. Юлтыйҙың «Ҡан» романында һәм Бөйөк Ватан һуғышы тураһында яҙылған И. Абдуллиндың «Тол ҡатындар иламай» әҫәрендә өйрәнелде.

Шулай ҙа бөтә әҫәрҙәрҙә лә хәрби лексиканың лексик-семантик төркөмдәр араһында түбәндәгеләре иң йыш осрай:

1) һуғыш ҡоралдарының һәм уларҙың төрҙәренең атамалары һәм уның төркөмсәләре: а) ҡорал атамалары; б) ут асыу ҡоралдары; в) снарядтар атамалары;

2) хәрби подразделениеларҙың атамалары төркөмө һәм уның төркөмсәләре: а) яугирҙарҙың һаны буйынса атамалары; б) хәрби төркөмдәрҙең функцияларын билдәләгән атамалары;

3) яугирҙарҙың, һуғышсыларҙың атамалары;

4) ғәскәр башлыҡтарын белдергән атамалар;

5) «Батыр» төшөнсәһе менән һүҙҙәр;

6) хәрби символдарҙы аңлатҡан атамалар төркөмө.

Шулай итеп, миҫалдарҙа төрлө тарихи осорҙар һүрәтләнеүе арҡаһында хәрби лексиканың пластары ла айырыла. «Кинйә» романында күпселек осраҡта иҫке төрки

һм башҡорт теленә хас булған ҡоралдар атамалары һ. б. ҡулланылһа, «Ҡан» һәм «Тол ҡатындар иламай» романдарында хәҙерге заманға ярашлы яңы ҡоралдар, хәрби чиндар атамалары ҡулланыла. Күпселек осраҡта был терминдар рус теленән йәки рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәр була.

**Әҙәбиәт**:


1. Абдуллин И. Тол ҡатындар иламай: Роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. 317 б.
2. Башкирско-русский словарь / К.З. Ахмеров, Т.Г. Баишев, Р.Г. Каримова, А.А. Юлдашев. М., 1958. 804 с.
3. Вопросы лексикологии и лексикографии башкирского языка / Сб. статей. Уфа: БФАН СССР, 1983. 128 с.
4. Ибраһимов Ғ.Ғ. Кинйә: тарихи роман. Өфө: Китап, 2016. 638 б.
5. Суфьянова Н.Ф. Проблема многозначности в башкирском языке и ее лексикографическая разработка. Уфа: Гилем, 1998. 101 с.
6. Юлтый Д. Ҡан: роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1970. 348 б.


© Хажиәхмәтов Д.И., Солтанбаева Х.В., 2024

**УДК 811.512.141**

***Хисамова Флүрә Фәрит ҡыҙы,***
*башҡорт теле уҡытыусыһы,*
*25-се һанлы коррекцион мәктәп,*
*Стәрлетамаҡ ҡ., БР*

## Р. Камалдың «Таня-Таңһылыу» романында әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙең ҡулланылыу үҙенсәлектәре

Синтаксис фәне грамматиканың бер бүлеге булараҡ айырым телдең телмәр төҙөлөшөн өйрәнә [1: 422]. Синтаксис белемендә ябай һөйләм синтаксисын һәм ҡушма һөйләм синтаксисын айыралар.

Һәр бер авторҙың әҫәрендә ҡулланылған синтаксик конструкцияларҙың ҡоролошо йәһәтенән үҙенсәлекле булыуын «Таня-Таңһылыу» романы миҫалында ла күҙәтергә мөмкин. Быны түбәндәгеләр менән иҫбатларға була.

Р. Камалдың «Таня-Таңһылыу» романында әйтелеү маҡсаты буйынса, хәбәр һөйләмдәрҙән башҡа, әлбиттә, һөйләмдәрҙең шундай төрҙәре ҡулланыла:

Тойғо һөйләмдәр, уларҙа «һөйләүсенең эске хис-тойғолары, шәхси кисерештәре сағыла, улар туранан-тура һөйләмдең модаллеген ғәмәлләштерәләр» [1: 481]: 1. *Таңһылыуҙар айырылышҡан!* 2. *Ниндәй бәхетле ине ул!* 3. *Ишемъяр ҙа, ундағы көндәрем дә, Таңһылыу әхирәтем дә онотторлоҡмо ни!* 4. *Уҡытыусы ҡыҙҙарбыҙ ҙа баһа!* 5. *Елдерәбеҙ генә. Артҡа ҡарау ҡайҙа?! Сабыш аттары!* 6. *Нәк уның үҙенә тап булыуыбыҙҙы әйт әле!* 7. *Эй көн тиклем көндөң теләгеңә раҫ килеүе! Һорап алғанһыңмы ни!* 8. *Эх, бихая, хәс тә ысын фотограф!*

Бойороҡ-өндәү һөйләмдәр, улар, «бер яҡтан, үҙҙәренә генә хас мелодиялар менән характерланһа, икенсе яҡтан, эмфатик (хис-тойғо) баҫымы менән береккән була һәм ошо нигеҙҙә тойғоһоҙ һөйләмдәргә ҡапма-ҡаршы ҡуйыла» [1: 481]: 1. *Минең Фәнисә ҡыҙым урыҫта ҡалмаясаҡ! Уға ары уҡырға кәрәк!* 2. *Һуҙма, Фәнисә, ризалығыңды бир завучлыҡҡа!* 3. *Давай! Бына шул тапҡырына ғына баҫ!* 4. *Әйҙә, бер ултырып, иркенләп күңел асып алайыҡ әле!*5. *Барығыҙ ҙа – табынға!* 5. *Хәҙер банк һалыу уйынына, иптәштәр!*6. *Һандуғастай һайраһын, күңелдәрҙе ойотһон! Яратҡан шиғырын ятлаһын!.. Әйҙә, уртаға сыҡһын, әтәс булып ҡысҡырһын!.. Тыпырҙатып бейеһен, баҫҡан ерен һелкетһен; өйөрөлөп-сөйөрөлөп йөрәктәрҙе елкетһен!.. Һөйгәне алдына баҫһын – ете ҡат башын эйһен!.. Эйелә-бөгөлә йөрөһөн, айыу булып тулаһын; бейеп-осоп күрһәтһен, аҡҡоштарға оҡшатһын!.. Шыуышып-шыуышып алдырһын, йылан ише ҡыланһын; ҡыйғыр ҡарсығалай ҡыйылһын, һауаларға атылһын!.. Хәтәр бер йомаҡ ҡойһон, үткер кәләмәс әйтһен; таҡмаҡ һалһын, бейеп-йырлап күрһәтһен! Йырлай белһә, йырлаһын; бейей*

*белһә, бейеһен; бейей, йырлай белмәһә, үгеҙ төҫлө үкерһен; мөгөҙҙәрен ослайтып, көтөү өйөрөп йөрөһөн!* 7. *Һин тик тор! Ҡыҫылма!*

Дөйөм һорау һөйләмдәр, улар ярҙамында «хәл-ваҡиғаның булыу-булмауын, барлыҡ-юҡлығын асыҡлау күҙ уңында тотола һәм маҡсат итеп ҡуйыла»,. «хәбәрлектәге агглютинатив **-мы/-ме** һорау аффиксы хәл иткес әһәмиәткә эйә булып, башҡа һорау һүҙҙәренең (алмаштарының) кәрәге ҡалмай» [1: 479]: 1. *Аптырайым: Таңһылыу үҙе шуны һиҙмәй микән?* 2. *Фәнисә, һин мине тыңлайһыңмы?* 3. *Эй Фәнисәкәйем, көйөгөм йөҙөмә сыҡҡанмы?*

Конкрет һорау һөйләмдәр иһә һорау алмаштары ярҙамында төҙөлә: 1. *Ниңә директор башына Николай Григорьевич утын ҡайтартмай?* 2. *Ә һин нисек ҡарайһың?*

Һорау һөйләмдәр араһында риторик һорауға нигеҙләнгәндәре бик күп осрай, улар, асылда, структур һәм семантик ҡапма-ҡаршылыҡлы һорау-хәбәр һөйләмдән ғибәрәт булып, хис-тойғо биҙәкле һәм яуап талап итмәгән үҙенсәлекле һорау мелодияһына эйә була [1: 480]: 1. *Ауылда беҙҙән башҡа ҡыҙҙар бөткәнме ни? Уҡытыусы ҡыҙҙарҙың ишемьярҙыҡыларҙан алдын ни ере бар?* 2. *Дуҫҡайымды нисек йыуатайым, уға нисек ярҙам итәйем? Ниндәй һүҙҙәр табайым? Хуплаһам, килешерме, йәне баҫылырмы?.. Үҙ-үҙемә ҡаршы барайыммы, үҙ инаныуҙарымды ашатлайыммы? Риза булмаған еремдән ригамын, һин хаҡлы, һин дөрөҫ ҡыланаһың, тиәйемме? Үҙ-үҙемде алдау, Таңһылыуымды әүрәтеү, ҡыланыу килешерме? Файҙа бармы унан? Ер, һыу, һауа, нисек итеп баҫыл- дырайым мин әхирәтемде? Ҡайһылай итеп, ҡайҙарҙан, ниндәй сараларын табайым?* 3. *Уйҙарымды белдереүҙән генә берәй фәтеүә сығырмы? Әхирәтемә кәрәкме улар? Улар уға еңеллек килтерерме?* 4. *Юҡ, аңламайым мин Таңһылыуҙы, зиһенем етмәй. Үҙенә кемде иш иткән! Ниндәй кеше ул, ҡайҙа, нисек тәрбиәләнгән? Ҡайһылай ул Таңһылыуҙан Таняға, Татьяна Владимировнаға әйләнгән? Кем тыуҙырған уны, кем үҫтергән,, тәрбиәләгән? Ҡайҙа тыуған ул? Ниндәй күктәр*

*аҫтында йәшәгән?..* 5. *Нисек кенә йыуатайым, афәт-хәтәрҙәрҙән аралайым һине, дуҫкайым? Ниндәй һүҙҙәр табайым, нисек ярҙам ҡулы һуҙайым яҡыныма? Ер, һыу, һауа, нисек итеп баҫайым мин уның әрнеүҙәрен... Ҡайһылай итеп, ҡайҙарҙан, ниндәй сараларын табайым? Ете ят ерҙәрҙә нисек йәшәрһең, нисек көндәрең уҙыр, аҡыллым? Бойоҡмаҫһыңмы, йәнең тыныс, күңелең бөтөн булырмы Ригала, алыҫ ярҙарҙа?* 6. *Ниңә былай килеп сыҡты һуң әле? Ниңә, нишләп түрәләр мине ситлектәге ҡош ише тоталар, ҡанаттарымды ҡайыралар, йәнемде ҡыялар?*

Шулай итеп, романда һөйләмдәрҙең әйтелеү маҡсаты яғынан бөтә төрҙәре лә киң ҡулланылған. Бойороҡ-өндәү, һорау һәм тойғо һөйләмдәрҙең романдың теленә айырым биҙәк, төҫ өҫтәүе күҙәтелә.

**Әҙәбиәт**:

Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г.Р. Абдуллина, Г.Д. Вәлиева, К.Ғ. Ишбаев һ. б. Өфө: Китап, 2012. 616 бит.

© Хисамова Ф.Ф., 2024

**УДК 811.512.142**

***Хуболов Сахадин Магаметович***
*канд. филол. наук, доцент, Кабардино-Балкарский государственный университет им. Х.М.Бербекова, Кабардино-Балкарская Республика, г. Нальчик, РФ*

## Фразеологизированные конструкции с родительным объекта в карачаево-балкарском языке

В карачаево-балкарском языкознании фразеологизмы традиционно рассматриваются в научных монографиях [6; 7], диссертационных исследованиях [4; 5; 8] и научно-теоретических статьях [3; 9; 10], ориентированных на исследование структурно-семантических составляющих языковых единиц. Они представлены и в трудах лингвокультурологической направленности [1; 2]. Между тем многие аспекты фразеологических единиц все еще не

разработаны в научном отношении. Исходя из этого, в данной статье остановимся на проблемах, связанных с лингвистической интерпретацией фразеологизированных предложений с родительным объекта.

В глагольных предложениях основным средством выражения объекта, как известно, являются формы косвенных падежей, за исключением родительного. Но в исследуемом языке имеется значительное количество фразеологизированных предложений, которые строятся по различным схемам, и в которых именной компонент фразеологической единицы в форме родительного падежа служит репрезентатором объекта. Здесь рассматривается структурная схема, состоящая из имени в основном падеже и фразеологической единицы, выраженной именем в родительном падеже, именем в винительном падеже с аффиксом принадлежности и глаголом.

На основе фразеологизмов *аны айыбын ач* ‘вывести на чистую воду’, *аны жезин ач* ‘раскрыть всю подноготную’, *аны багъырын ач* ‘раскрыть всю подноготную’ образуются предложения с рассматриваемой структурной схемой. Значения этих фразеологических единиц идентичны. Некоторые исследователи рассматривают их как фразеологические синонимы. Другие же считают такие единицы фразеологическими вариантами.

Мы относим вышеприведенные фразеологические единицы к фразеологическим вариантам. По смыслу они равнозначны, выполняют одну и ту же синтаксическую функцию сказуемого, количество компонентов в них одинаковое. Примеры: *Ол къоншусуну жезин ачды* ‘Он вывел соседа на чистую воду’. *Марат Саматны айыбын ачды* ‘Ахмат раскрыл нечестность Салиха’. *Тенглери аны багъырын ачдыла* ‘Друзья раскрыли всю его подноготную’. Семантическая структура этих предложений включает три компонента: субъект раскрытия недостатков, объект раскрытия недостатков и предикат раскрытия недостатков.

Их общая семантика: раскрытие личным субъектом недостатков, нечестности, жульнического поведения личного объекта.

В исследуемом языке имеется фразеологизм *аны тотун ач* ‘поднять настроение’, который по своему лексическому составу почти идентичен приведенным выше фразеологизмам. Его глагольный компонент выражен тем же глаголом *ач* ‘открыть, раскрыть’, а позицию винительного падежа, вместо слов *багъыр* ‘красная медь’ и *жез* ‘желтая медь, латунь’ заменяет слово *тот* ‘ржавчина’. Общее значение фразеологической единицы ‘*аны тотун ач*’ отличается от других. Соответственно, предложение, включающее в свою структуру данный фразеологизм, выражает иную семантическую структуру: *Тенглери Асланны тотун ачдыла* ‘Друзья подняли настроение Аслану’. Семантика этого предложения: выражение улучшения психического состояния личного субъекта под воздействием субъекта-каузатора.

На основе фразеологизмов типа *аны боюнун бур* ‘свернуть ему шею’, *аны терисин сой* ‘спустить ему шкуру’, *аны тишлерин санат* ‘дать по зубам’, *аны тюгюн бардыр* ‘дать ему взбучку’ также образуются предложения по рассматриваемой схеме. Эти фразеологические единицы являются синонимичными. Позиция подлежащего в предложениях с данными фразеологизмами замещается только словами, обозначающими людей. Примеры: *Ол Бекмурзаны тишлерин санатды* ‘Он дал Бекмурзе по зубам’. *Жашла уручуну тюгюн бардырдыла* ‘Парни избили вора’. *Муса аны боюнун бурду* ‘Муса свернул ему шею’. *Мен сени теринги соярма* ‘Я спущу с тебя шкуру’. Предикаты данных предложений мы относим к подтипу акциональных предикатов – физического воздействия. Общая семантика этих предложений: физическое воздействие личного субъекта на объект.

Фразеологизмы *аны къулакъларын бур, аны атасын таныт, аны керегин бер, аны къапчыгъын къакъ, аны букъусун чыгъар* объединяет близкое значение – ‘ругать, критиковать, бранить, пугать’. В вопросе о том, к какому классу предикатов относятся предикаты, выраженные глаголами или фразеологизмами с аналогичным значением, мнения исследователей несколько расходятся. Одни

исследователи такие предикаты называют предикатами субъектно-оценочных (эмоционально-оценочных) отношений или просто оценочными предикатами. Другие же относят их к предикатам психического, речевого воздействия, которые в свою очередь являются подтипом акциональных предикатов. Мы придерживаемся последней точки зрения, полагая, что элемент воздействия в перечисленных фразеологизмах превалирует над семами ‘отношение’ и ‘оценка’. Примеры: *Омар Салимни къулакъларын бурду* ‘Омар строго предупредил Салима’. *Тиширыу кимни эсе да атасын таныта эди* ‘Женщина кого-то сильно ругала’. *Зурум Нанықъны керегин берди* ‘*Ахмат аны керегин берди* «Ахмат дал ему трепку’. *Атасы жашны букъусун бардырды* ‘Отец поругал сына’.

Предикаты этих предложений требуют лексического наполнения позиции подлежащего только именами с семантикой лица. Глагольные компоненты некоторых из них употребляются в форме понудительного залога, а в других – в форме основного залога. Но это не приводит к расхождению в их семантической структуре. В смысловом отношении все эти конструкции являются трехчленными. Их общая семантика: психическое или речевое воздействие личного субъекта на объект.

Семантическая структура некоторых предложений, построенных по рассматриваемой схеме, может состоять из субъекта сокрытия, объекта сокрытия и предиката сокрытия. Например, *Тамук аманлыкъны башын жапды* ‘Тамук скрыл плохие последствия совершенного дела’. *Айшат эрини атын букъдурады* ‘Айшат не называет имя своего мужа’.

На основе фразеологизма *аны тюбюн тап* ‘узнать истину, докопаться до истины’ строится предложение *Ала аманлыкъчыны тюбюн тапдыла* ‘Они узнали всю правду о злоумышленнике’. Позицию основного падежа здесь занимает личный субъект, который в результате активных действий добивается намеченной цели, результата. Такой субъект мы называем субъектом результативного действия. Соответственно, в семантическую структуру данной

конструкции входят объект результативного действия и предикат результативного действия.

Среди рассматриваемых предложений довольно часто встречаются конструкции с предикатами отношения, которые подразделяются на подгруппы:

а) конструкции с предикатами уважительного отношения: *Устаз Ахматны бетин чыгъарды* ‘Учитель похвалил Ахмата’. *Жашла къартны сыйын кёредиле* ‘Молодежь с почтением относится к старику’. Семантическая структура этих предложений состоит из трех компонентов: субъект уважительного отношения – объект уважительного отношения – предикат уважительного отношения;

б) самостоятельная формально-семантическая модель образуется на основе фразеологизма *аны къайгъысын кёр* ‘заботиться о ком-либо или о чем-либо’. Например, *Мухтар тенгини къайгъысын кёреди* ‘Мухтар заботится о своём друге’ *Къойчула къойланы къайгъыларын кёрюп айланадыла* ‘Пастухи целиком в заботах об овцах’.

В первом предложении субъект и объект являются личными, а во втором позиция субъекта занята словом, являющимся наименованием животных. Общая семантика: выражение заботливого отношения личного субъекта к личному или неличному объекту;

в) фразеологизм *аны къанын ич* ‘пить, высасывать его кровь, сильно мучить’ включает в себя две семы – сему отношения и сему состояния. Предикат, выраженный данным фразеологизмом, можно рассматривать и в системе предикатов отношения, и в системе предикатов состояния. Это говорит о зыбкости границ между некоторыми семантическими классами предикатов, и в некоторых случаях безоговорочное отнесение предиката к тому или иному семантическому типу вызывает определенные трудности. Приведем пример: *Старшина халкъны къанын ичеди* ‘Старшина измывается над людьми’. Если оттолкнуться от семы отношения, то семантику этого предложения можно сформулировать так: злобное,

издевательское отношение личного субъекта к личному объекту;

г) на основе фразеологизма *аны тилин ал* ‘повиноваться, послушаться’ строится предложение, в котором содержится предикат послушного отношения: *Жашы гитчеликден окъуна атасыны тилин ала эди* ‘Еще с детства сын слушался отца’.

Общая семантика: послушное отношение личного субъекта к личному объекту;

д) рассматриваемой формальной схемой выражается и такая семантическая структура, которая включает в себя субъект угоднического отношения, объект угоднического отношения, предикат угоднического отношения: *Ахмат да таматасыны жырын жырлайды* ‘Ахмат угодничает, прислуживает своему начальнику’. *Ол аны табанларын жалайды* ‘Он прислуживает ему’;

е) семантическая структура предложения *Таматасы аны айыбын жууду* (К.ж.) ‘Начальник проявил к нему благосклонность’ состоит из субъекта благосклонного отношения и соответствующих объекта и предиката. Однако если в данной конструкции позицию родительного падежа заполнить возвратным местоимением *кеси* ‘сам’, то она становится двучленной семантической структурой *Жаш кесини айыбын жууду* ‘Парень искупил свою вину’. Его семантика: искупление личным субъектом своей вины;

ж) фразеологизм *аны ачыуун бас* ‘утешить, успокоить кого-либо’ является выразителем предиката участливого отношения. Пример: *Арбачы жол негерини ачыуун басды* ‘Возчик успокоил своего попутчика’.

Общая семантика этого предложения: участливое отношение личного субъекта к личному объекту;

з) рассматриваемой формальной схемой репрезентируется семантическая структура, включающая субъект неприязненного отношения, объект неприязненного отношения, предикат неприязненного отношения: *Алим Хадисни жерин тапдырды* ‘Алим наказал Хадиса, поставил его на место’.

Из сказанного видно, что форма родительного падежа данной структурной схемы служит для выражения следующих разновидностей объекта: объект раскрытия недостатков, объект состояния, объект физического воздействия, объект психического воздействия, объект результативного действия, объект отношения с его подтипами.

**Литература**:

1. Ахматова М.А. Вербализация сравнения в карачаево-балкарском нартском эпосе // Вестник Челябинского государственного университета. 2011. № 28 (243). С. 20–23.

2. Ахматова М.А., Салчак А.Я., Чертыкова М.Д. Средства выражения эмоции страха в тюркских языках (на примере тувинского, карачаево-балкарского и хакасского языков) // Новые исследования Тувы. 2022. № 2. С. 224–238.

3. Ахматова М.А., Текуев М.М., Додуева А.Т. Функционирование пространственных послеложных имен в карачаево-балкарском нартском эпосе // Актуальные проблемы филологии и педагогической лингвистики. 2017. № 4 (28). С. 142–150.

4. Кетенчиев М.Б. Формально-семантические модели именного предложения в современном карачаево-балкарском языке: дисс. … канд. филол. наук. Нальчик, 1992. 141 с.

5. Кетенчиев М.Б. Структура и семантика именных предложений в карачаево-балкарском языке: дисс. … д-ра филол. наук. Нальчик, 2001. 362 с.

6. Кетенчиев М.Б., Тохаева Ф.И. Парадигма отрицания в карачаево-балкарском языке. Карачаевск: КЧГУ, 2013. 157 с.

7. Мизиев А.М. Словообразовательный потенциал неличных и залоговых форм глагола в карачаево-балкарском языке. Нальчик, 2012. 152 с.

8. Хуболов С.М. Формально-семантические модели одноместных фразеологизированных предложений

в карачаево-балкарском языке: автореф. дисс. ... канд. филол. наук. Нальчик, 1997. 22 с.

9. Хуболов С.М. Синтаксические функции фразеологизмов карачаево-балкарского языка // Вопросы лексики, грамматики и семантики карачаево-балкарского языка. Нальчик: Эль-Фа, 2002. С. 39–47.

10. Хуболов С.М. Фразеологизированные конструкции с предикатами движения в карачаево-балкарском языке // Актуальные проблемы филологии и педагогической лингвистики. 2010. № 12. С. 320–322.

© Хуболов С.М., 2024

**УДК 372.881.1**

***Хәзиева Гөлнара Салауат ҡыҙы,***
*башланғыс кластар уҡытыусыһы,*
*Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө*
*ҡала башҡорт гимназияһы, Өфө ҡ., БР*

## Башланғыс кластарҙа башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлау

Тел – ул аралашыу сараһы ғына түгел, ул халыҡтың йәне, уның тере тарихы. Тел – донъяға ҡараш, ҡиммәт ориентирҙары һәм мәҙәни кодты быуындан-быуынға тапшырыу механизмы. Ул донъяны аңлауҙы ғына түгел, ә беҙҙең милли үҙаңды ла формалаштыра. Һүҙҙәрҙә, фразеологизмдарҙа һәм грамматик структураларҙа сағылыш таба. Был раҫлау матур метафора ғына түгел. Тел аша беҙ мәғлүмәт алып ҡына ҡалмайбыҙ, ә эмоциональ төҫ, рухи ҡиммәттәр, милли традициялар, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ тураһында күҙаллауҙар алабыҙ. Ул милли үҙенсәлектең фундаменталь элементы, ата-бабалар тәжрибәһен һаҡлаған һәм мәҙәниәт үҫеш йүнәлешен билдәләгән үҙенсәлекле генетик хәтер булып тора. Тел ярҙамында беҙ аралашыуҙан тыш, тупланған белем һәм тәжрибә комплексын, традицион аш-һыу рецептарынан алып, ҡатмарлы фәлсәфәүи концепцияларға һәм сәнғәт әҫәрҙәренә тиклем танышабыҙ. Һүҙ – музыка, рәсем йәки архитектура кеүек үк, көслө эмоциялар тыуҙырырға,

донъяны тойоуҙы формалаштырырға һәм бөйөк эштәргә илһамландырырға һәләтле. Образлы итеп әйткәндә, тел – ул милләттең мәҙәни генофондын һаҡлаусы һәм трансляциялаусы, нәҫелдән килгән ҡомартҡы. Ул боҙолмай ҙа, иҫкермәй ҙә.

Шуға күрә туған телде һаҡлау һәм үҫтереү тураһында хәстәрлек – ул мәҙәниәтте, традицияларҙы, милләтте һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү. Глобалләшеү шарттарында, инглиз теле кеүек бөтә донъя телдәренең йоғонтоһо көсәйгән һайын, төбәк һәм милли телдәрҙе хуплау һәм популярлаштырыу айырыуса әһәмиәткә эйә була. Үҫеп килгән быуында милли үҙаңдың формалашыуы туған телгә һөйөү менән айырылғыһыҙ бәйле. Туған телен иркен белгән бала билдәле бер мәҙәниәткә ҡарауын тоя, үҙен билдәле бер халыҡ менән тиңләштерә, һәм был хәүефһеҙлек, үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһо тыуҙыра. Быларҙың барыһын да башланғыс кластарҙа, Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында башҡорт теле һәм әҙәби уҡыу дәрестәрендә тормошҡа ашырырға тырышам.

Туған телде өйрәнеү процесын мин, грамматик ҡағиҙәләрҙе һәм һүҙлек запасын арттырыуҙан тыш, милли мәҙәниәткә, фольклор, әҙәбиәт, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр һәм халыҡ байрамдары менән танышыуҙы үҙ эсенә алырға тейеш, тип уйлайым. Һәр бер дәрескә әҙерләнгәндә, темаға тура килгән халыҡ ижадын ҡулланырға тырышам. Мәҫәлән, икенсе кластың әҙәби уҡыу дәресендә «Халҡым йыйған ынйылар» бүлегендә дәреслектә бирелгән текстарҙан тыш, балаларҙың үҙҙәренең өләсәй-олатайҙарынан һорашып, таныш булмаған фәстереү, бишек йыры, үсекләүҙәр, шаярыуҙар белеп килергә ҡушам. Бала үҙе эҙләнгән осраҡта ғына уҡытыу һөҙөмтәле буласаҡ, гармониялы, социаль яраҡлашҡан шәхес формалашыуына булышлыҡ итәсәк. Туған телде яҡшы үҙләштергән бала – ул ҡиммәтле мираҫ алған бала. Туған тел – быуындарҙы бәйләүсе һәм үҙендә халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен һәм рухиәтен һаҡлаусы тере еп. Уның байлығы, ысынлап та, бөтмәҫ-төкәнмәҫ, һәм уның шәхес формалашыуына йоғонтоһо иҫ киткес тәрән. Туған телен үҙләштергәндә,

бала өндәрҙе һәм грамматика ҡағиҙәләрен генә хәтерләмәй. Ул ата-бабаларының рухи донъяһын үҙләштерә, уларҙың уйҙарына, тойғоларына, традицияларына һәм ҡиммәттәренә ҡушыла. Туған һүҙ уның алдында тирә-яҡ донъяны – үҙ халҡының тәбиғәтен, көнкүрешен, тарихын, әхлаҡи һәм эстетик нормаларын – аса, уның донъяны аңлауын һәм үҙ-үҙен таныуын формалаштыра.

Туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәренең йәш быуынды тәрбиәләүҙәге роле баһалап бөткөһөҙ. Улар мәҙәни мираҫты тапшырыуҙа, ҡиммәттәр йүнәлешен формалаштырыуҙа, гражданлыҡ һәм патриотизм тәрбиәләүҙә төп звено булып тора. Был дәрестәрҙә уҡыусылар үҙ халҡының тарихын, уның ҡаҙаныштары, уникаль мәҙәниәте һәм традициялары менән таныша. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре башҡорт мәҙәниәтен һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә, башҡорттарҙың бай мираҫын киләсәк быуындарға тапшырыуҙа айырым роль уйнай. Бында телде система булараҡ уҡытыу ғына түгел, ә балаларҙы башҡорт мәҙәниәте донъяһына сумдырыусы, уларҙы башҡорт яҙыусылары, шағирҙары, рәссамдары һәм музыканттары, уларҙың ижады һәм донъяға ҡараштары менән таныштырыусы бөтөн белем биреү мөхитен булдырыу мөһим.

Туған телде уҡытыуға заманса ҡараш, тел уҡытыуҙы тарих, география, сәнғәт, музыка кеүек башҡа дисциплиналар менән берләштергән интегратив ҡарашты күҙ уңында тотам. Был халыҡтың мәҙәниәте һәм йолалары тураһында тулыраҡ һәм йәнлерәк картина булдырырға тырышам. Интерактив уҡытыу ысулдарын, уйындарҙы, проекттарҙы әүҙем ҡулланам, балалар мәғлүмәтте үҙләштереү генә түгел, ә бер-береһе һәм уҡытыусы менән әүҙем аралашыу өсөн дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы һәм иҫтә ҡалырлыҡ итергә тырышам. Уҡыусы интернет селтәрҙәрендә телде өйрәнеү сайттарын да ҡуллана белергә тейеш. Мин уларға «IQ БалаБаш» интерактивный сервисын, «ОСЗ. Инофон. Башкирский» ҡушымтаһын, https://basic.bashlang.ru/ һ.б сайттар тәҡдим итәм.

Тел – ул үҙ тарихын, тамырҙарын һәм донъялағы урынын аңлауҙың асҡысы, мәҙәни һәм милли үҙанды һаҡлауҙың ҡеүәтле факторы булып тора. З.И. Керашева аныҡ билдәләүенсә: «халыҡ теле – унның тарихының серҙәрен һаҡлаған ҙур китап». Был китап һүҙҙәр менән генә түгел, ә интонациялар, телмәр көйө, милли мәҙәниәттең үҙенсәлеген һаклап, быуындан-быуынға тапшырылған һүҙһеҙ аралашыу саралары менән дә яҙылған. Туған телде өйрәнеү – лексика һәм грамматиканы үҙләштереү генә түгел. Был милли мәҙәниәт донъяһына, уның фольклорына, әҙәбиәтенә, сәнғәтенә тәрән төшөү булып та тора. Мәҫәлән, башҡорт теле мәҡәлдәр һәм әйтемдәргә бай, улар башҡорт халҡының традицион ҡиммәттәрен сағылдыра: ҡунаҡсыллыҡ, хөрмәт, батырлыҡ, өлкәндәргә хөрмәт. Әкиәттәр, легендалар, эпик әҫәрҙәр – ул художестволы текстар ғына түгел, ә тарихи хәтерҙе йөрөтөүселәр, улар донъя, тәбиғәт, ижтимағи мөнәсәбәттәр тураһында белем бирә. Ошо халыҡ ижадын гимназияла ентекле итеп өйрәтәм. Хәҙерге белем биреү системаһы граждандлыҡ яуаплылығын һәм илһөйәрлекте тәрбиәләүгә айырыуса иғтибар бүлергә тейеш, ә был туған телен һәм мәҙәниәтен тәрән аңламайынса һәм хөрмәт итмәйенсә мөмкин түгел.

Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү контексында белемде тапшырыу ғына түгел, ә туған телгә һәм мәҙәниәткә һөйөү һәм хөрмәт тәрбиәләү ҙә мөһим. Бының өсөн проект эшмәкәрлеген, кластан тыш сараларҙы үҙ эсенә алған инновацион уҡытыу ысулдарын ҡулланам. Яҙыусылар, шағирҙар менән осрашыуҙар – уҡыусылар өсөн тере тел һәм мәҙәниәт вәкилдәре менән танышыу, уларҙың тарихтарын ишетеү, уларҙың илһамланыуын күреү өсөн иҫ киткес мөмкинселек биреүҙе аңлап, осрашыуҙар ойоштorам. Йырҙар, бейеүҙәр, мәҡәлдәр ҡулланыу дәрестәрҙе сағыуыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ итергә мөмкинлек бирә, уларҙы дәрестәрҙә йыш яңғыратам.

Ата-әсәләрҙе уҡытыу-тәрбиә процесына йәлеп итеү мөһим аспект булып тора. Кластан тыш үткән байрамдарҙы, сараларҙы бергәләп ойоштorабыҙ, этник фестивалдәрҙә ҡатнашабыҙ – был ҡыҙыҡлы ғына түгел, ә ғаилә бәйләнештәрен нығытыуға һәм йолаларҙы һаҡлауға

булышлыҡ итә. Шәжәрә төҙөйбөҙ, ғаилә тарихын өйрәнәбеҙ. Был үҙ халҡыңа ҡарауыңды аңлау, быуындар бәйләнешен тойоу өсөн мауыҡтырғыс ысул. Классик уҡытыу ысулдарын заманса технологиялар менән берләштерәм, мультимедиа ресурстарын, интерактив таҡталарҙы ҡулланам – былар барыһы ла туған телде өйрәнеүҙе танып белеү генә түгел, ә балаларҙа ҡыҙыҡһыныу уята һәм уларҙың шәхесен формалаштырыуға, илһөйәрлек һәм гражданлыҡ яуаплылығын тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Һөҙөмтәлә туған телде һаҡлау һәм үҫтереү халыҡтың милли үҙенсәлеген һәм мәҙәни байлығын һаҡлауҙың нигеҙе булып тора.

Хәҙерге заман уҡытыу идеалы – әлеге йәмғиәттә гармониялы үҫешкән һәм үҙ-үҙен тормошҡа ашырыуға һәләтле шәхес тәрбиәләү. Был шәхес үҙенең мәҙәни үҙенсәлеген аңлай, үҙ халҡының традицияларын ҡәҙерләй, әммә шул уҡ ваҡытта яңылыҡҡа асыҡ һәм башҡа мәҙәниәттәр менән диалогҡа әҙер. Башҡортостан Республикаһы төрлө милләт вәкилдәре татыу йәшәгән күп милләтле төбәктең уникаль миҫалы булып тора. Милләт-ара татыулыҡ һәм ижтимағи-сәйәси тотороҡлолоҡ – республиканың уңышлы үҫешенең төп факторҙары. Унда йәшәгән бөтә халыҡтарҙың туған телдәрен һаҡлау һәм яҡлау милләт-ара гармонияны һәм үҙ-ара аңлашыуҙы тәьмин итеүҙә мөһим роль уйнай. Тап бер-береһен өйрәнеү һәм аңлау аша ысын милләт-ара татыулыҡҡа өлгәшергә, һәр кем үҙен ышаныслы һәм яҡланған итеп тойған йәмғиәт төҙөргә мөмкин. Был йәһәттән тел тыныслыҡ төҙөү ҡоралы, гармониялы һәм толерантлы йәмғиәт булдырыуға булышлыҡ итеүсе инструментҡа әйләнә. Шуға күрә күп милләтле төбәктә белем биреү бурысы – балаларҙы уҡырға өйрәтеү генә түгел, ә уларҙа толерантлыҡ, башҡа мәҙәниәттәргә һәм милләттәргә хөрмәт, мәҙәни һәләтлелек тәрбиәләү. Ә был бөтә милли телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү шарттарында ғына мөмкин.

© Хәзиева Г.С., 2024

**УДК 811.512.141**

***Хәзиева Әлиә Альберт ҡыҙы,***
*студент,*
***Әлимбаева Гөлшаян Ғәбсәләм ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., өлкән уҡытыусы,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Парлы алмаштарҙың семантик төркөмсәләре

Башҡорт телендә парлы алмаштар үҙ-ара антонимик мөнәсәбәттә торған алмаш нигеҙҙәрҙең ишләшеүе һөҙөмтәһендә яһала. Был инде теге йәки был билдәне кәмһетеү йәки кәметеү мәғәнә төҫмәрҙәрен биреүсе алмаштар: ***ул-был, теге-был, ундай-бындай, тегеләй-былай, унан-бынан, һинеке-минеке:*** 1. *Шундай шәп килеп сыға,* ***улай-былай*** *ғына сыйылдатҡан тешле ҡурайсың ары торһон* (И. Ноғоманов). 2. ***Улай-былай*** *була ҡалһа, беренсенең үҙенә кер* (Й. Солтанов). 3. *Ә инде кәрәк кешеләргә* ***теге-был*** *әйбер биреүгә килгәндә, һин оноһына ҡыҫылма* (Н. Мусин). 4. *Улай ғына тиһең, өс ир Ғәбит ышығынан ысҡынырға тырышып бер яҡҡа ҡайырылһа, болан да бер нисә аҙым атлап уға ышыҡлана, быны күргән-аңлаған Ғәбит үҙе лә* ***тегеләй-былай*** *шыуып баҫа* (Ә. Әминев). 5. *Йәтеш кенә, йомро ғына ҡола бейә, бар хәленсә айбарланып, үҙенән байтаҡҡа дәү, күпкә ғәйрәтле айғырға ҡаршы тороп булаша, теше-тырнағы менән мөсһөҙ сабыйын ҡурсалап ҡалырға тырышып,* ***тегеләй-былай*** *борғолана, уны кәүҙәһе менән ышыҡлап маташа* (И. Ноғоманов). 6. ***Унан-бынан*** *эшләгән эштең һөҙөмтәһе, әлбиттә, шатландырмай* (Һөйләү телмәренән). 7. *Аҡсаны* ***тегеләй-былай*** *туҙҙырып өйрәнгән ҡыҙға был аҡса ваҡ-төйәк әйбергә лә етмәйәсәк* («Йәшлек» гәзитенән). 8. *Ихата тирәһендә* ***уны-быны*** *эшләп йөрөгән егет, мығырлап ҡына ҡуя, аңларлыҡ түгел* (Т. Байрамова). 9. *Ул саҡта ни мин,* ***уны-быны*** *аңламағас, уға ихлас итеп яуап бирергә тырышам* (Н. Мусин). 10. ***Һинеке-минеке*** *– күңел тарлығы, ары ят, бире ят – түшәк тарлығы* (Мәҡәл).

Шулай уҡ ғәрәп теленән үҙләштерелгән ***фәлән*** билдәһеҙлек алмашы менән телмәрҙә үҙ аллы ҡулланыла алмаған ***төгән, фәсмәтән*** нигеҙҙәре менән ишләшеүе һөҙөмтәһендә ***фәлән-төгән, фәлән-фәсмәтән*** алмаштары яһала, улар төрлө әйберҙәр, хәлдәр, эштәр һәм башҡаларҙы һанап китеү урынына ҡулланылып, мәғәнәгә дөйөмләштереү һәм билдәһеҙлек төҫмөрө өҫтәй*:* 1. *Һин гел шулай ҡыланаһың, мине һаңға һуҡмайһың,* ***фәлән-төгән*** (Һөйләү телмәренән). 2. »***Фәлән-төгән*** *ағайыңды,* ***фәлән-төгән*** *бабайыңды,* ***фәлән-төгән*** *еҙнәңде саҡыр»,* – *тип, ҡырҡмаһа-ҡырҡ кеше исемен әйтеп сыҡҡан* (Әкиәттән). 3. *Һин, Юлдыбай, миңә* ***фәлән-фәсмәтән*** *тигән булып, өҫтән һыйпауыңды ҡуй әле* (Һ. Дәүләтшина).

4. *...Үҙе мине маҡтап китте:*

***Фәлән-фәсмәтән-төгән*** (М. Кәрим).

Шулай итеп, башҡорт телендә парлы алмаштарҙың семантик мәғәнәләре шуға ҡайтып ҡала: йәки улар теге йәки был билдәне кәмһетеү йәки кәметеү мәғәнә төҫмөрҙәрен бирә, йәки төрлө әйберҙәр, хәлдәр, эштәр һәм башҡаларҙы һанап китеү урынына ҡулланылып, мәғәнәгә дөйөмләштереү һәм билдәһеҙлек төҫмөрө өҫтәй.

**Әҙәбиәт**:

Башҡорт теле грамматикаһы: 3 томда. Т. II: Морфология / Яуаплы мөхәррире Х.В. Солтанбаева. Өфө: Китап, 2018. 312 б.

© Хәзиева Ә.А., Әлимбаева Г.Ғ., 2024

**УДК 821.512.141**

***Хәйҙәрова Айһылыу Ринат ҡыҙы,***
*магистрант, Өфө университеты*
***Абдуллина Гөлфирә Риф ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, профессор,*
*Өфө университеты, Өфө к., БР*

# Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» романында сағыштырыуҙарҙың ҡулланылыу үҙенсәлектәре

«Әҙәби күренештәрҙең барыһының да тип әйтерлек нигеҙендә сағыштырыу ята. Сағыштырыуҙа күбеһенсә дөйөмөрәк характерҙағы ижтимағи һәм психологик күренештәргә кешеләрҙең көндәлек тормошона яҡын торған конкрет әйберҙәрҙең сифаттары күсерелә», – ти К.Ә. Әхмәтйәнов сағыштырыуҙы асыҡлағанда [3: 101].

Киң мәғәнәһендә сағыштырыу – образлылыҡтың төп алымы, сөнки әҙәби күренештәрҙең барыһының да нигеҙендә сағыштырыу ята. Тар мәғәнәлә алғанда, сағыштырыу тип берәй предметты, кешене йәки күренеште икенсе бер предмет, кеше, күренештең сифаты һәм үҙенсәлеге менән һынландырыуға әйтәләр.

Автор билдәле хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә үҙенең мөнәсәбәтен белдереүе менән айырылып тора. Мәҫәлән, «Бөйрәкәй» романында, Хашимдың ҡаҙнаға түләнелмәй ҡалған ҡалымы өсөн тип, Гөлбаныуҙың берҙән-бер һыйырын тартып алып сығып киткәндән һуң өй эсен бына нисек һүрәтләнә: «*Һыйыр киткәндән һуң мәйет сыҡҡандан да яманыраҡ, толҡаһыҙыраҡ ҡалған өй эсендә уҙышмаҡтан сиңерткә сырылдай*».

Яҙыусы геройҙарын һынландырғанда үҙенең телмәре аша түгел, ә күбеһенсә башҡа геройҙар телмәре аша бирә. Был да үҙенә күрә һүрәтләүҙең отошло ысулдарының береһе. Әйтәйек, Мәҙинәнең сибәрлеген районның төп хужаһы Әйүп Камалетдинов ошолай тасуирлай: «*...уның ебәктәй нәфис, йомшаҡ булған, хәҙер һыйыр һауыуҙан, ауыр эштән ҡыҙара төшкән бармаҡтарын йәлләне, йөҙөнә ҡуңырлыҡ өҫтәгән елдәрҙе әрләргә лә, маҡтарға ла*

*белмәне. Мәзинәнең ҡара сәстәренең ут яҡтыһында ҡыҙыл нур сәсеүенә, ә тәненең ҡараңғыла фосфор фигура кеүек баҙлап яҡтырып тороуына ғәжәпләнде.* « Йәки: «*Абау! Был тиклем матурлыҡ менән ҡәҙимге әҙәм араһында нисек йәшәмәк кәрәк?*» («Бөйрәкәй»).

Романдың төп героиняһы булған Мәзинә образын биргәндә ҡулланылған сағыштырыуҙарға ныҡлабыраҡ туҡталып үтәйек. Иң тәүҙә роман башында беҙҙең күҙ алдыбыҙға ябай, әммә сос һәм шаян ҡыҙ бала килеп баҫа:

*Иплә, ҡустыларыңды уятырһың! Ай, ата Ғәбиҙә...*

*Ата Ғәбиҙә тимәҫ тә түгел ине Мәзинәһе ошо минутта: торғаны малай. Бынау муйылдай күҙҙәрендәге ҡыҙҙарға ғына хас шаянлыҡ менән һикерешкән осҡондар һәм улар өҫтөндә яңы тыуған айҙай ҡыйылған ҡашы булмаһа, кем ышаныр икән уның ҡыҙ бала булғанына?*

*Гөлбаныу көлдөксә эргәһенә сүгәләгән еренән торғас та ҡыҙына һаман тамһынып ҡарауында булды: тал сыбығылай нескә үҙе, эсендә йәне нисек тора, ә тауышы... моңо...*

Әсә кешенең ҡыҙына ҡарап уйланған һүҙҙәренән генә лә ошо уҡыласаҡ романдың төп геройының холоҡ-фиғелен, буй-һынын төҫмөрләп була. Беренсенән, тиктормаҫ тәбиғәтле булғаны өсөн әсәһе уны «ата Ғәбиҙә» тиһә, муйылдай күҙҙәр, яңы тыуған айҙай ҡыйылған ҡаш һәм тал сыбығылай нескәлек кеүек һүрәтләүҙәр аша беҙҙең күҙ алдыбыҙға ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәте килеп баҫа.

Артабан роман барышында ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәтен тасуирлауҙар йышыраҡ осрай бара. «*Боронғо башҡорт ҡыҙҙары кейемендә килгән тал сыбыҡтай нескә, ләкин бик һомғол буйлы ҡыҙ урынынан ҡалҡты*» йәки «*Биле нескә генә үҙе, яурыны тар, елән кейгән ҡуйыны тулып-күпереп тора. Ошондай тал сыбығылай ҡыҙҙа быңдай түштәр ҡайҙан барлыҡҡа килгәндер ул*».

Был ике тасуирлауҙа ла Мәзинәнең һомғоллоғона айырыуса ҙур иғтибар бүленә – ул тал сыбығы менән сағыштырыла. Мәзинәгә боронғо башҡорт кейемен кейҙереүҙе лә автор тарафынан ауылдың башҡа ҡатын-ҡыҙҙарында булмаған буй-һынды тасуирлауҙа ҡулланылған

тағы ла бер ысулы тип ҡабул итергә мөмкиндер. Башҡорт халҡының кейемдәре ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡиәфәтенә ярашлы тегелә.

Сағыштырыу өсөн икенсе бер миҫалға иғтибар итәйек: «*Әберкәләр һалдырып, яңы күлдәк тектереп кейгән кейеүгә* ( һүҙ Сәбилә хаҡында бара), *әммә уның ҡоро тарамыштан торған тәненә һис кенә лә килешмәй шул: ҡараҫҡыға кейҙерелгән тоҡ кеүек аҫылынып тора*». Был миҫалдан беҙ «ҡоро тарамыштан торған» кәүҙәле Сәбиләне ҡараҫҡы менән, ә уның яңы тектереп кейгән күлдәген тоҡ менән сағыштырылыуын күрәбеҙ. Был тасуирлауҙа боронғо башҡорт кейемдәре телгә лә алынмай. Автор беҙгә яңы кейем кейеп кенә тышҡы ҡиәфәттең йәмһеҙлеген йәшереп булмай тигән фекер еткерә.

Бынан тыш, Мәҙинәнең әсәһе Гөлбаныуҙың да һылыулығын, уның тәбиғи, илаһи матурлығын автор сит күҙ, сит телмәр ярҙамында, күҙ алдына баҫтырырҙай картиналар аша үҙ уҡыусыһына еткерә. Мәҫәлән, иғтибар итегеҙ:

*– Шәһәрбаныуҙа бар икән бер ҡыҙ!*

*– Ҡыҙ түгел, һыу һөлөгө!*

*– Ут!*

Фәүзиәнең танауын ҡарсығаныҡына оҡшатыу: *ҡарсыға танаулы ҡарсыҡ*. Был уның танау төҙөлөшөнә, йәғни формаһына ғына бәйле булһа ла, төйләгән ҡараш менән йәнәш торғанда ул бөтөнләй икенсе мәғәнә ала. Ике һунар ҡошоноң мөһим сифаттары – осло кәкре томшоҡ һәм үткер күҙ. Былар икеһе лә ҡарсыҡ образының ябай кешеләр рәтенән түгел икәнлеге хаҡында һөйләй.

Фәүзиәгә ҡағылышлы тағы ла бер миҫалға иғтибар итәйек. «*Гөлбаныу килеп Фәүзиәнең тарамыштан да ҡатыраҡ ҡулдарына йәбеште*». Был осраҡта инде ҡаты ҡулдарҙың тарамыштан да ҡатыраҡ булыуы хаҡында бәйән ителә. Әлбиттә, рәхәт, еңел тормошта йәшәгән, тик үҙен генә тәрбиәләп торған кешенең ҡулдары шулай ҡаты булмай, ә был донъяла күпте күргән, күпте кисергән; бер ваҡытта ла эштән бушамаған әҙәм затының ҡулдары

тарамыш хәленә инә. Ә был осраҡта Фәүзиәнең ҡулдары шул тарамыштан да ҡатыраҡ.

Күренеүенсә, сағыштырыуҙар ҡатын-ҡыҙ образдарын һүрәтләүҙә мөһим роль уйнай. Был образдар аша беҙ роман персонаждарының ысын асылына төшөнәбеҙ.

Ир-атҡа ҡылыҡһырлама биргәндә ҡулланылған сағыштырыуҙарға туҡталайыҡ. Ихсанбайҙың бәләкәйҙән үк тиҫтерҙәренән таҙалығы менән айырылып тороуын киләһе миҫалда күрергә мөмкин: *Тәнәфескә сығыу менән, Ихсанбай Хашимдың май сәскәһеләй йылмайған йөҙөнә төйгөстәй йоҙроғо менән килтереп бәрҙе.* Йоҙроғоноң төйгөс кеүек ҙур һәм ҡаты булыуы уның кәүҙәһенең дә ярайһы уҡ ҙурлыҡта булыуы хаҡында һөйләй.

*– Силсәүитме ул? Өйөр айғыры, бына кем!–* Бында инде шул уҡ Ихсанбайҙың ауыл советы рәйесе итеп тәғәйенләнгәндән һуң, ҡотороноп, ҡылған баш-баштаҡлыҡтарына ҡарата ауылдаштарының әйткән ярһыу ҡатыш асыулы һүҙҙәре.

*Шуның арҡаһында Сәбилә менән йәшәгән ғүмере ерек утын, арыш икмәге кеүек: утын яна – йылыһы юҡ, ашап эсең тула – кәйеф күтәрелмәй.* Йәғни бер ниндәй ҙә һөйөү тойғоһо булмаған кеше менән үткәргән ғүмере күңелһеҙ, мәғәнәһеҙ булыуын Ихсанбай үҙе лә һиҙә. Әммә әсәһенең һүҙенән сыға белмәгән ир кеше ошо хәлде үҙе теләгәнсә үҙгәртергә баҙнат итмәй һәм шуның менән килешеп йәшәргә мәжбүр була. Ҡатыны Сәбилә менән бергә үткән ғүмер юлын *ерек утын* һәм *арыш икмәге* сағыштырыу ҙа уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә. Ысынлап та, күңел ятмаған кешең менән ҡорған ғаиләнең йылыһы һәм йәме булмай икән, тигән һығымтаға кленә. Тормошоноң бер төрлө генә ағыуынан, донъянан бер ниндәй ҙә йәм таба алмай аҙапланған Ихсанбайҙың күңел донъяһы ла тыныс түгел. Буталсыҡ яҙмышы менән көрәшергә тырыша. Тик яҙмыш уны бер яҡтан алып икенсе яҡҡа һуға: «*Ихсанбай күңеленең ғүмере буйына ярға сығарып ташланған балыҡтай тыпырсыныуына ошо Гөлбаныу ғына ғәйепле түгелме икән?*». Үҙенә урын таба алмай аҙапланған Ихсанбайҙы яҙыусы ярға сығарып ташланған балыҡ менән

сағыштыра. Күңел тыныслығын юғалтыуҙың сәбәптәрен ул башҡа кешеләрҙән эҙләмәксе («*Шуның* (әсәһенең) *арҡаһында, ошо Гөлбаныу ғына гәйепле түгелме икән*»), әммә ул үҙен дә был осраҡта ситтә ҡалдырмай.

*Улай тиһәң, гәйепте бер Гөлбаныуҙан ғына эҙләү ҙә дөрөҫ түгелдер: Ихсанбай бит гүмере буйы йылганың ике ярылай икегә бүленеп, үҙе йәшәгән тормошто яратмай, шикләнеп, икеләнеп йәшәне.* – Ихсанбайҙың был уйынан күренеүенсә, ғәйептең күп өлөшө үҙендә икәнен бик яҡшы аңлай. Үҙенең һүҙен һүҙ итергә батырсылығы етмәүе, уйлағандарын тормошҡа ашыра алмауы – былар барыһы ла бала саҡтан киләлер. Иғтибар итегеҙ: *Әммә бер нәмә үҙгәрмәне: кесәһендә йөрөгән галстуктай, уйы бер, эше икенсе булды.* Тәү ҡарамаҡҡа, бөтә уҡыусылар ҙа муйындарына тағып йөрөгән ябай пионер галстугы. Әммә әсәһенең «*шайтан элмәге был – галстук түгел*» тигән һүҙҙәре йәш балаға ныҡ тәьҫир итә. Уның күңелендә шул ваҡытта уҡ икеләнеү тойғоһо ярала. Бер яҡтан, башҡа уҡыусылар кеүек үк булғыһы килә, икенсе яҡтан, әсәһенең һүҙен йығыу, уға ҡаршы тороу – Ихсанбай өсөн оло гонаһҡа бәрәбәр.

Һуңғы ваҡыт бошоноп, бер нимәнән дә йыуаныс таба алмай йөрөгән Ихсанбайҙың йөҙөн ҡара буяуға буяй яҙыусы. Тик уның ябай ҡаралығын ғына биреп ҡалмай, ә борсолоуының йөҙөнә үтә лә ныҡ сыҡҡанын күрһәтеп, уның көйгән табикмәктән, ҡара төндән дә ҡарараҡ икәненә баҫым яһай.

*– Нимә көйҙөрәһең унда? – Боролоп ҡарамаһа ла, күрә Фәүзиә улының йөҙө был мәлдә көйгән табикмәктән дә ҡарараҡ икәнен.*

*Ихсанбай йыйылыштан ҡара төндән дә ҡарарак булып ҡайтты.* Шундай борсоулы саҡтары йышайған һайын, Фәүзиә быны сәбәбен асыҡларға тырыша. Тик күпте күргән ҡатын: «*Һиңә ни булды, улым?*» – тип тураһын һорамай. Ә: «*– Нимә һин, улым, терпе йотҡан айыу шикелле тиреңә һыйыша алмай йөрөйһөң?*» – тип, улының күңеленә яра һалмайынса ғына йомшағыраҡ өндәшә.

Хашим образын һүрәтләгәндә ҡулланылған сағыштырыуҙар аша беҙ персонаждың эволюцияһын күҙәтә алабыҙ. Был фекерҙе иҫбатлап, ябай ғына бер миҫал ҡарап үтәйек: «*Гөлбаныуға был алпамыша кәүҙәле, уйнаған кеүек кенә йәшәгән кешенең ҡапыл баҙап, йыуашайып китеүе сәйер тойолдо*»э Тормошоноң ни рәүешле ағыуына бик үк иғтибар итмәй йәшәп ятҡан Хашим да, хеҙмәт итә башлағас ҡына йомшара төшә, уйлана башлай. Ә инде һуғышта иҫән ҡалып, тыуған ауылына әйләнеп ҡайтҡан Хашим – икенсе Хашим.

Башынан үткәндәрен барыһын да барлап, үҙенсә һығымталар яһап, үҙ хатаһын танып, тормошҡа ҡарашын үҙгәртеп ҡайтҡан элекке Урыҫ Хашим өр-яңынан йәшәй башлай. Тик ҡәҙерен һуңлап аңлаған һөйөклө ҡатыны ғына яҡты донъя менән хушлашып өлгөрә. Әммә уны тилмерешеп ҡарап торған өс пар күҙ ҡаршы ала. Шуларҙа йәшәү мәғәнәһен таба ла инде Хашим. Үҙ йортона ҡайтып балаларының йылы ҡараштары менән осрашыу уның өсөн ҙур шатлыҡ була: *Хашим ҡапыл еңеләйгәндәй булды – өҫтөнә тауҙай өйөлгән ауырлыҡ, йөрәген ергә ҡаҙаҡлаған һағыш ҡайҙалыр осҡандай, уны ҡалдырғандай...* Тәү тапҡыр малайҙарҙы осратҡас, *Хашимдың күҙҙәрен йәш әсеттерҙе, тамағына ҡурғаштай төйөн төйөрөлдө, ...йоҡа ғына һәләмәләре аша ҡуян йөрәгеләй типкән тамырҙарын тойоу уның күңелен бер үк ваҡытта йәлләү һәм ятсыу менән тултырҙы.*

Ҡатыны Гөлбаныуҙан мираҫ булып ҡалған игеҙәктәр, үҫеп еткән ҡыҙы Мәҙинәһе – Хашимдың барлыҡ йыуанысы, ҡыуанысы.

Өлө үрҙә ҡарап үткән образдарҙан тыш, тағы ла бер персонаждың күңел торошоноң романдағы бирелешенә иғтибар бүленә. Ул – Сибәғәт-Диңгеҙхан образы. Уның иһә күңеле урынында түгел икәнен, ғүмер буйы ҡасып, башҡа исем аҫтында йәшәргә мәжбүр иткән яҙмыш ҡоло булыуын бер генә һөйләм эсендә лә бик яҡшы аңларға мөмкин. Ҡатыны Фәүзиә ҡыҙы Гөлбаныуҙы эҙләп тапҡас, бер нисә көн түшәктән тора алмай ятҡан ваҡытында Сибәғәттең башынан шундай уйҙар үтә: *Диңгеҙханды төндән ҡараңғы*

*уйҙары, уттан да эҫе йөрәге менән күҙмә-күҙ ҡалдырып китеп кенә бармаһын.* Шул буталсыҡ тормошоноң осона сыға алмайынса сейәлгән ҡара уйҙарға батҡан килеш, Сибәғәткә тыныслыҡ тапмаған йөрәге менән яңғыҙ ҡалыуы тағы ла ауырыраҡ була.

Йәйәүләп оҙон юл үткән Хашимдың да аяҡтары талыуын автор нисек бар шулай әйтеп һалмай, ә уларҙың ут шикелле яныуын бәйән итә: *Район үҙәгенән сыҡканы бирле йәйәү атлаған аяҡтарының балтырҙар тартышып ҡуйҙы шул саҡ, табандары ла ут кеүек яна.* Әммә икенсе осраҡта шул уҡ ут ошо күренештең ҡапма-ҡаршыһын, йәғни шәп атлау, йүгереүҙе аңлатыр өсөн ҡулланыла: *Баш һөйәгенән ҡото алынган Хашим, арыуын онотоп, уттан ҡасҡан кеше кеүек атланы ла атланы.*

Ошо миҫалдарға оҡшаш төрлө сағыштырыуҙар ҡулланылған башҡа һөйләмдәрҙе ҡарап ҡына үтәйек:

*Мирхәйҙәровтың уның килеүенә бала төҫлө һөйөнөүен күреүҙән Әптеләхәттең күҙенә йәш эркелде.*

*Ихсанбай менән булган алыштан һуң ниндәй ҡөҙрәт менән шул тылсым эйәһенең әйткәндәре усаҡ төбөндәге ҡуҙҙай емелдәй башланы.*

*– Йомошо...– Фәүзиә ҡарсыҡ, тамағына талкан торғандай, ҡапыл туҡтаны.*

*– Мейесте баҙлата яҡканһың... – Түрәнең маҡтауына барометр кеүек һиҙгер Рауза быны шунда уҡ эләктереп алды.*

Шулай итеп, художестволы әҫәрҙе барлыҡҡа килтереүҙә сағыштырыуҙарҙың роле бик ҙур. Яҙыусыға бик күп мөмкинселек бирә: геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәттәрен һәм эске кисерештәрен, сифаттарын, психологияһын аса, беҙҙе уратып алған төрлө күренештәрҙе, предметтарҙы образлылыраҡ итеп бирә.

**Әҙәбиәт:**

1. Ғарипова Т. Бөйрәкәй. Роман, повесть һәм хикәйәләр. Өфө, 1997. 652 бит.

2. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. 388 бит.

3. Әхмәтйәнов К.Ә. Поэтик образлылыҡ. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. 160 бит.

© Хәйҙәрова А.Р., Абдуллина Г.Р., 2024

**УДК 392.7**

***Чжан Чжимин,***
*бакалавр,*
***Ван Сюецзяо, Хань Шу,***
*преподаватели, Ляонинский университет, Китай*

# О стратегии китайской культурной коммуникации для корейской молодежи

Данное исследование является частью молодежного проекта Международного исследовательского проекта по изучению китайского языка: «Исследование интеграционного режима преподавания китайского языка в режиме онлайн-оффлайн в Корее» (21YH07D), общего проекта по философии и социальным наукам в городе Шэньян: «Исследование по подготовке «Одного пояса и одного пути». Исследование по подготовке китайской карманной книги для перспективного туризма Шэньяна в перспективе «Одного пояса и одного пути» (SY20230205Y), общий проект Ляонинского университета: «Международное образование и китайская культурная коммуникация на фоне «Интернет+» (2020skczb095).

**Аннотация**: Рассказывание хорошей китайской истории не только улучшает представление корейской молодежи о Китае, но и укрепляет дружбу между Китаем и Кореей и способствует культурному обмену между двумя странами. Исходя из текущей ситуации и проблем базовых знаний корейской молодежи о китайской культуре, в данной статье рассматривается, как рассказать хорошую китайскую историю в соответствии с особенностями корейской молодежной группы с помощью стратегий поэтического обучения, культурного опыта и развлекательной культуры, чтобы расширить их знания и интерес к прекрасной китайской культуре в свете потребностей китайской культурной коммуникации

в новую эпоху. Ключевые слова: корейская молодежь; китайская культура; межкультурная коммуникация

**Ключевые слова**: культурная коммуникация, стратегия, корейская молодежь, китайская культура, межкультурная коммуникация.

В августе 1992 года, более 30 лет назад, Китай и Республика Корея установили дипломатические отношения. За это время обе стороны осуществляли многоуровневое сотрудничество в различных областях, включая политику, экономику и культуру, и поддерживали тесные контакты по региональным и международным вопросам. Однако с постепенным углублением взаимозависимости между двумя странами и постепенным усилением трений многие факторы привели к новым изменениям и проблемам в восприятии корейского народа, особенно корейской молодежи, по отношению к Китаю. В последние годы был достигнут большой прогресс в »рассказывании китайских историй» с международной точки зрения, но перед лицом сложных и разнообразных проблем и трудностей, как преодолеть когнитивные барьеры, прорваться через «узкое место», лучше распространять китайскую культуру и позволить большему количеству замечательных китайских историй выйти за пределы страны, как преодолеть когнитивные барьеры, прорваться через «узкое место» и лучше распространить китайскую культуру, чтобы больше замечательных китайских историй вышло за пределы Китая и вышло на мировую арену, – вот главная проблема, которую нам необходимо решить.

1. Анализ текущей ситуации и проблем восприятия Китая корейской молодежью:

Во-первых, с точки зрения сравнения стран, корейская молодежь имеет относительно низкий уровень доверия к Китаю. Согласно отчету, сделанному на основе исследования взаимной осведомленности молодежи Кореи и АСЕАН за 2021 год [1], опубликованному Центром АСЕАН-Корея, уровень доверия корейской молодежи в возрасте от 19 до 34 лет к Китаю составляет всего 38,1 %, что находится на самом низком уровне по сравнению

с общими данными исследования. Эти данные наглядно отражают значительную разницу между отношением корейской молодежи к Китаю и к другим странам и регионам.




Рис. 1. Данные опроса о доверии корейской молодежи к соседним странам.

Во-вторых, с точки зрения возрастной структуры, молодежная группа корейцев имеет более глубокое негативное восприятие Китая, чем другие возрастные группы корейцев. Согласно опросу, проведенному журналом Current Affairs IN в 2021 году, только 15,9 % южнокорейских респондентов в возрастной группе 20–29 лет имеют благоприятное мнение о Китае, что значительно ниже, чем в других возрастных группах. Это говорит о том, что молодое поколение Южной Кореи имеет относительно негативные взгляды и отношение к Китаю.



Рис. 2. Сравнение благосклонности корейского народа к Китаю и США.

Кроме того, количество студентов, приезжающих в Китай, косвенно отражает тенденцию снижения популярности Китая среди молодых корейцев. С момента установления дипломатических отношений между Китаем и Южной Кореей количество студентов, приезжающих в Китай, демонстрировало устойчивый рост. Однако, начиная с 2018 года, число южнокорейских студентов, обучающихся в Китае, стало резко падать, сократившись примерно на 50 000 человек за пять лет. Хотя на это повлияли различные факторы, такие как эпидемия Син-Кван, это также является побочным отражением снижения благосклонности южнокорейской молодежи к Китаю.

2. Отслеживание текущих проблем в восприятии Китая корейской молодежью:

1) политическая динамика и влияние международной стратегической среды. Важными факторами влияния являются изменения в политической динамике и международной стратегической обстановке. По мере изменения внутриполитической атмосферы и корректировки международной стратегической обстановки политическая позиция корейской молодежи значительно изменилась, а усиление консервативных сил привело к тому, что некоторые молодые люди стали придерживаться все более консервативных политических взглядов. Кроме того, продвигаемая Соединенными Штатами «Индо-Тихоокеанская стратегия», попытка построить «чиповый союз» и другие инициативы, несомненно, усилили расхождение интересов между Китаем и Южной Кореей [2], что привело к появлению «китайской угрозы» у корейской молодежи. Это привело к росту восприятия «китайской угрозы» среди корейской молодежи, что, в свою очередь, отразилось на ее восприятии отношений между Китаем и Южной Кореей;

2) сложная среда общественного мнения и иррациональные трения в Интернете.

В сложной и изменчивой среде общественного мнения и в водовороте интернет-пространства путь восприятия

Китая корейской молодежью полон поворотов и изгибов. Некоторые сообщения корейских СМИ порой окутывают правду, как туман, а в некоторых случаях даже изображают Китай в искаженном и демонизированном виде. В интернет-пространстве трудно отличить правду от лжи, информация сильно фрагментирована, что затрудняет формирование у молодых корейцев полного и точного представления о Китае, что, в свою очередь, усугубляет их негативное восприятие Китая.

Когда мы пытаемся собрать воедино картину далекого места, мы обнаруживаем, что фрагменты в наших руках настолько разрозненны, что мы не в состоянии нарисовать полный контур. Именно с такой дилеммой сталкиваются молодые корейцы, пытаясь понять Китай. Они хотят узнать настоящий Китай, но часто путаются во фрагментах и не могут найти мостик к пониманию.

Например, такие исторические и культурные вопросы, как проблема Северо-Востока, атрибуция Когурё и торги за наследие Фестиваля лодок-драконов в начале XXI века, вызвали жаркие споры и эмоциональные столкновения в Интернете, которые были подобны маслу на огне и обострили отношения между двумя сторонами. Теперь появляются новые спорные моменты, такие как проблема кимчи и корейской одежды, что подливает масла в огонь и делает и без того напряженные отношения еще более шаткими;

3) запутанный процесс передачи и обмена культурными ценностями. Запутанная система культурного наследования и обмена также является важной причиной проблемы восприятия Китая корейской молодежью. Связь между Китаем и Южной Кореей в плане культурного наследования и обмена постепенно ослабевает, и корейская молодежь не имеет достаточных знаний о традиционной китайской культуре, а воспитание китайского характера отошло на второй план, что привело к феномену дефекта китайской иероглифической культуры. Кроме того, Южная Корея размывает понятия и источники некоторых традиционных культур и даже искажает и очерняет факты китайской истории в некоторых кино- и телефильмах, что

не только вводит в заблуждение корейскую молодежь, но и усугубляет ее ошибочное восприятие Китая. В то же время отсутствие объективного и полного рассказа о Китае в корейском историческом образовании также привело к формированию одностороннего и искаженного образа Китая в глазах корейской молодежи.

3. Стратегии культурной коммуникации для корейских молодежных групп.

Молодежные группы обладают многими атрибутами мультикультурной коммуникации. Они являются одновременно объектом, носителем и субъектом коммуникации. Поэтому важно улучшить восприятие корейской молодежной группы по отношению к Китаю, чтобы они стали свидетелями «китайской истории», прочувствовали ее и распространили, тем самым повысив позитивное восприятие группы в целом и корейского общества по отношению к Китаю.

1) преподавание поэзии, связанной с эмоциональным резонансом. История китайской литературы имеет долгую историю, и тексты разных жанров несут в себе тяжелую историю и культуру. Как яркая жемчужина в истории литературы, поэзия Тан и лирика Сун содержат богатую историческую культуру и эстетические интересы, и могут в полной мере продемонстрировать духовное мировоззрение и ценностное выражение китайской нации. Эмоции, как тесная связь между людьми, играют важную роль в культурном обмене.

Преподавая китайскую поэзию в рамках учебной программы, читая стихи, объясняя предысторию и эмоциональные концепции поэтов, интерпретируя образность слов, показывая музыкальную, живописную и риторическую красоту стихов Тан и Сун [3], корейская молодежь сможет глубже понять китайский образ мышления и ценности, а затем постичь подтекст и духовность китайской культуры, расширить свои знания и понимание китайской культуры;

2) культурный опыт: интерактивное участие. Практика – единственный критерий для проверки истины, а опыт общения с культурой играет важную роль в снижении

культурных барьеров и распространении культуры. Культурный опыт имеет большое значение для корейской молодежи, чтобы научиться понимать китайскую культуру и хорошо рассказывать китайские истории. Лично участвуя в китайской культуре, корейская молодежь может повысить свой интерес и энтузиазм к китайской культуре, глубже понять и почувствовать очарование китайской культуры. Поэтому мы должны активно интегрировать культурные ресурсы, внедрять культурную концепцию мультисимбиоза в межкультурную коммуникацию, поощрять мероприятия по распространению культурного опыта и привлекать больше корейской молодежи в Китай для путешествий и исследований, чтобы дать им возможность наблюдать и испытывать Китай более непосредственно. Предоставлять корейской молодежи больше возможностей для обучения и обмена, а также способствовать распространению и влиянию китайской культуры на международной арене.

Чтобы повысить интерактивность культурного опыта, корейскую молодежь можно направить к участию в китайском культурном опыте следующими тремя способами: во-первых, можно предложить серию курсов по различным регионам, чтобы систематически знакомить с природным ландшафтом, историей и культурой Китая и т.д., и в то же время сочетать их с экскурсиями и культурными путешествиями, чтобы позволить им интуитивно почувствовать очарование китайской культуры; во-вторых, можно использовать ресурсы культурного творчества и ненаследия, чтобы корейские молодые люди могли участвовать в разработке и производстве продуктов культурного творчества и узнавать о технике ненаследия. Во-вторых, мы можем использовать ресурсы культурного творчества и ненаследия, чтобы позволить корейской молодежи участвовать в разработке и производстве продуктов культурного творчества и изучать навыки ненаследия. Например, можно предложить курсы культурного опыта, такие как чайное искусство, каллиграфия, вырезание из бумаги и т.д., чтобы дать корейской молодежи возможность почувствовать глубокое

наследие китайской культуры в практическом производстве; кроме того, их можно привлечь к участию в китайских обычаях и фестивалях, таких как заворачивание пельменей на Весеннем фестивале, призрачные фонари на Фестивале фонарей, гонки на драконьих лодках на Фестивале драконьих лодок, изготовление лунных пирогов на Фестивале середины осени и т.д., и познакомить с историческим происхождением и культурным подтекстом, чтобы они могли глубже почувствовать очарование китайских праздников. Это позволит корейской молодежи глубже прочувствовать атмосферу и особенности китайских фестивалей и укрепить свой интерес и любовь к китайской культуре;

3) использование рекреационной культуры в качестве средства. Корейская молодежь с большим интересом относится к популярной культуре и принимает ее, поэтому мы можем разработать индивидуальные коммуникационные стратегии для разных кругов и точно создать культурные продукты и услуги, отвечающие предпочтениям корейской молодежи. Использовать медиаплатформы для расширения путей культурной коммуникации, такие как короткие видеоролики, музыка, фильмы, телевизионные драмы, эстрадные шоу и другие формы развлечений, чтобы представить им китайские истории в более яркой и интересной форме. В то же время, укрепляя работу официальных аккаунтов и предоставляя мультиязычные услуги, такие как онлайн Институт Конфуция [4], China TV и Tik Tok, мы можем сформировать коммуникационную синергию и усилить международное влияние китайской культуры.

Например, с помощью национальных официальных каналов можно организовать китайско-корейские мероприятия по обмену поп-культурой, такие как музыкальные фестивали и показы мод, чтобы использовать поп-культуру для привлечения внимания корейской молодежи; некоторые китайские фильмы и телепрограммы, пользующиеся большой популярностью в Корее, также могут быть выбраны для показа и продвижения,

сопровождаемого преподаванием китайского языка и культурной интерпретацией, чтобы корейская молодежь могла узнать об истории, культуре и социальном ландшафте Китая, наслаждаясь драматическими фильмами. Программа также может проводить интерактивные мероприятия в режиме онлайн, приглашая корейскую молодежь к участию в дискуссиях и обмене опытом.

4. Заключение

Подводя итог, можно сказать, что перед лицом корейской молодежи, группы с глобальным видением и восприимчивостью, мы должны использовать разнообразные стратегии, не только через обучение стихам и словам, используя эмоциональный резонанс как мост, чтобы позволить им понять глубокое наследие китайской культуры, но и через культурные мероприятия, предоставляя возможности для взаимодействия и участия, чтобы позволить им испытать очарование Китая из первых рук. Нельзя игнорировать и эффект развлекательной коммуникации, ведь использование популярных культурных носителей, таких как короткие видеоролики, музыкальные, кино- и телевизионные произведения, делает китайские истории более привлекательными. Эти инициативы не только помогут преодолеть когнитивные барьеры и укрепить добрую волю корейской молодежи к Китаю, но и помогут создать дружественную атмосферу для культурных обменов между Китаем и Южной Кореей, придав новую жизненную силу устойчивому развитию отношений между двумя странами. В будущем мы надеемся, что реализация этих стратегий будет способствовать широкому распространению китайских историй среди корейских молодежных групп и глубокому взаимопроникновению китайской и корейской культур.

**Литература:**

1. Yu W.-Ying. Обзор представлений корейских молодежных групп о Китае // Мир и развитие. 2022. № 4. С. 119–139.

2. Wang X. Южнокорейский «взгляд на Китай»: строительство, трансформация и мотивация // Мир и развитие. 2023. № 6. С. 134–159.

3. Тенгманн. Исследование преподавания поэзии Тан на китайском языке и культуре в Корее. Хунаньский нормальный университет, 2014.
4. Фан Жуйчин. Характеристики и тенденции развития китайской культурной коммуникации в Корее в эпоху новых медиа // Сравнительные исследования культурных инноваций. 2021. № 5(30). С. 161–166.
© Чжан Ч., Ван С., Хань Ш., 2024

**УДК 811.512.141'**

***Шаһивәлиева Сулпан Рәфит ҡыҙы,***
*студент,*
***Саньярова Рәмилә Рәмил ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө к., БР.*

## Рәми Ғарипов шиғриәтендә «дуҫлыҡ» концептына лингвомәҙәни анализ

Лингвокультурология – лингвистика фәненең яңы формалашып килгән тармағы. Ул бер яҡтан, милли тел менән мәҙәниәтте өйрәнеүсе фәндәрҙең синтезын тәшкил итә, йәғни, улар менән йәнәш тора. Икенсе яҡтан, телдең үҙенең функцияһын үтәү процесында мәҙәниәт менән бер бөтөн системаны барлыҡҡа килтереүендә, үҙ-ара бәйләнешкә инеүендә, шулай уҡ уларҙың бер-береһенә мөнәсәбәтле булыуын да лингвокультурология фәне өйрәнә.

Милли мәҙәниәтте тикшергәндә телсе ғалимдар «концептосфера» термины менән эш итәләр. «Концептосфера – айырым кешенең, шулай уҡ айырым бер телдең һүҙлек запасында һаҡланған саралар».

Һуңғы йылдарҙа тел ғилеменең иғтибары телдең мәҙәниәт менән үҙ-ара бәйләнеше, телдең сәйәси һәм рухи контекст менән бәйләнеше проблемаларына йүнәлтелә.

Тел картинаһы тип ғалимдар кешенең тирә-яҡ тураһындағы белемдәр системаһын тел саралары аша еткереүҙе атайҙар. Тел картинаһы кешенең фекерләү процесы менән бәйле. Шулай уҡ ул реаль ысынбарлыҡты

сағылдыра һәм халыҡ аңының милли-мәҙәни үҙенсәлеген белдерә. Индивидуаль тел картинаһы айырым шәхестең донъя хаҡындағы белемдәрен еткерә.

Телдең концептосфераһын өйрәнгәндә иң ҡатмарлы һәм үҙенсәлекле «асҡыстар» булып халыҡтың әхлаҡи-мәҙәни ҡиммәттәрен сағылдырыусы универсаль төшөнсәләр – категориялар тора. Улар араһында «дуçлыҡ» концептының әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ. Сөнки ул милли тел картинаһына хас әхлаҡи маяҡтарҙы ла, дуçлыҡ төшөнсәһенең мәҙәни йөкмәткеһен дә һүрәтләй. Әммә ләкин юғары мәғәнәгә эйә «һөйөү», «йән» кеүек универсаль мәҙәни һүҙ-асҡыстарға ҡарағанда, «дуç» һәм «дуçлыҡ» концепттары лингвистикала өйрәнелеп етмәгән, уның ижтимағи мәҙәниәттәге фәлсәфәүи йөкмәткеһе, милли үҙенсәлеге, индивидуаль тел шәхесе картинаһындағы асылы һорауҙары ҡараңғы ҡала килә. Концепттың бер төрө булараҡ «дуç» һәм «дуçлыҡ» концепттары хәҙерге тел ғилемендә үҙе генә айырым бер төшөнсә була алмай, ул мәҙәниәттең һәм телдең мәғәнә структураһының бер өлөшө, шулай ҙа уны тикшереү һәм өйрәнеү лингвистика өсөн актуаль проблема. «Дуç» һәм «дуçлыҡ» концепттары – социомәҙәни феномен, уның художестволы әҙәбиәт әçәрҙәрендә һәм халыҡ ижадында тел картинаһында асылышы тәбиғи күренеш. Милли тел картинаһында ул ижтимағи-мәҙәни йөкмәткегә эйә, үҙенсәлекле әхлаҡи төшөнсәләрҙе үҙендә йөрөткән бер «асҡыс»ҡа әйләнә.

«Дуçлыҡ» концепты – һәр халыҡтың донъя картинаһында үҙәк урындарҙың береһен алып тороусы, этик характерҙағы универсаль концепттарҙың береһе. Хәҙерге осор мәҙәниәтендә «дуçлыҡ» концептының йөкмәткеһендә донъя диндәренән килеүсе әхлаҡи-этик башланғыстарҙың да, Европа һәм көнсығыш философияһында үçтерелгән концепцияларҙың да асыҡ сағылыуын күрәбеҙ. Әгәр көнбайыш мәҙәниәтендә дуçлыҡтың индивидуаль мөнәсәбәттәрҙе характерлаусы нәмәләре (яҡын күреү, изгелек күрһәтеү, шәхси файҙа, аралашыуҙан ыңғай кисерештәр алыу) үҙәккә ҡуйылһа, көнсығыш мәҙәниәтендә коллектив башланғыстар,

кешеләрҙең бер идеология аркылы берләшеүе, рухи яҡынлыҡ төп нигеҙ итеп алына. Бөгөнгө дәүерҙә дуҫлыҡ төшөнсәһенә ҡарата ошондай төрлөсә ҡараштар концепттың семантика йөкмәткеһен тәрәнәйтә барып, һәр халыҡтың тел картинаһында этномәҙәни йәһәттән сағылыш таба.

Рәми Ғарипов шиғриәтендә «дуҫлыҡ» концепты әхлаҡи-этик планда асылып, универсаль концепт дәрәжәһенә күтәрелә. Ғәҙеллек, мәрхәмәтлелек, кешелеклек, мөхәббәт кеүек төшөнсәләр менән байытылып, уның әҫәрҙәрендә концепт гуманистик һәм фәлсәфәүи планда тәрән итеп асыла.

*КӘМӘЛӘ*
*Класташ дуҫтарыма*
*Хуш бул, мәктәп!*
*Иртәгә – вуз!*
*Бөгөн*
*Беҙҙең аҫта Иҙел тирбәлә.*
*Балҡый кәмәләге дуҫтар йөҙө,*
*Ебәк тулҡын йүгерә тирәләп,*
*Һөйә ҡояш шаян тулҡындарҙы,*
*Көҙгө кеүек, Иҙел емелдәй.*
*Ҡояш һымаҡ уйҙар яҡты беҙҙең,*
*Тойғолар ҙа ташыу Иҙелдәй.*
*Дуҫтар ишә берҙәм, көстәр – ташҡын,*
*Ярып бара кәмә тулҡынды.*
*Уның кеүек еңер ҡаршылыҡты*
*Берҙәмлеге беҙҙең дуҫлыҡтың.*
*Кәмә эҙһеҙ.*
*Ләкин тормош эҙен*
*Йылдар ғына күмә аламы?*
*Беҙ бит, дуҫтар, ерҙә киләсәкте*
*Яҡынайтҡан юлдар һалабыҙ!*
*Дуҫтар менән ғүмер – яҡты баҡса,*
*Һүнмәҫлек дәрт бирә йәшәүең.*
*Ҡайҙа ғына булһаҡ та беҙ*
*Юғалтмайыҡ дуҫлыҡ йәшәүен!*
*Дуҫтар ишә берҙәм, көстәр – ташҡын:*

*Ярып бара кәмә тулкынды.*
*Без йырлайбыз, беззең йырыбызга*
*Агизел дә түзмәй кушылды.*
*Тик һин гүзәл бар донъяла,*
*Иркен, киң Тыуган илем.*
*Мең йыл йәшәп булганда ла*
*Мин йәшәп туймаç инем!*

Рәми Ғарипов поэзияһында «дуçлыҡ» концептының репрезентацияһы әҙәби телдең образлылыҡ саралары, башҡорт теленең төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған лексемалар, грамматик тел саралары ярҙамында башҡарыла. Шағир әçәрҙәренең образдары сағыулығы һәм стилистикаһы концепттың репрезентацияһын эмоциональ-экспрессив планда башҡарырға, унын яңы семантик биҙәктәрен асырға булышлыҡ итә.

*ДУÇЛЫҠ*
*Бармай торор тауга тик тау гына, –*
*Барышмайса тормай кешеләр.*
*Ҡытай стенаһын емереп тә*
*Күрештеләр бөйөк күршеләр.*
*Айырмайса ике зур ҡитганы,*
*Ҡауыштырып ике араны,*
*Сал Уралым Тибет ҡорзашына*
*Бер туганы итеп ҡараны.*
*Бер кем танымаган сакта таный*
*Бер-береһен дуçтың зурзары,*
*Ауырлыкта дуçтар һыналалар,*
*Уртаҡлашып икмәк-тоззарын.*
*Ишеткәндә Ҡытай йырзарын без*
*Килеп күрешкәндәй үзегез:*
*Һеззең еңеү – беззең еңеүебез,*
*Беззең һүз – ул һеззең һүзегез.*
*Һеззе безгә бер тыу беректерзе*
*Ирек өсөн изге көрәштә.*
*Бөйөк максат өсөн генә тыуа*
*Бөйөк дуçлык шулай һәр эштә.*
*Юк арала Ҡытай стенаһы,*
*Бар арала Уралтау гына.*

*Тик унда ла ирек һөйгән халкым*
*Ғорур баҫкан дуҫлыҡ һағына.*

«Дуҫлыҡ» төшөнсәһенең халыҡта нығынған әхлаҡи, фәлсәфәүи нигеҙен сағылдырып, һәр әҫәр уны үҙенсә аса һәм шуның менән был төшөнсәнең мәғәнә йәкмәткеһен ифрат киңәйтә, милли тел картинаһын яңы биҙәктәргә байыта. Тимәк, концепт тағы ла тәрәнерәк өйрәнелергә тейеш. Рәми Ғарипов шиғырҙарына концептуаль анализ «дуҫлыҡ» концептының ижтимағи йөкмәткеһенә төшөнөргә ярҙам итә.

Шулай итеп, башҡорт телендә «дуҫлыҡ» концепты башҡорт халҡының донъя тел картинаһында ғәйәт тәрән мәғәнәләргә эйә. Ул борондан формалашҡан милли фекер менән бәйле һәм халыҡ ижадында осраған фекерҙәр әҙәби әҫәрҙәрҙә, телмәр лексикаһында нығынған. Былар барыһы ла концепттың байлығын өйрәнеүҙең ҡатмарлы булыуын, төрлө өлкәлә лә айырым төшөнсәләр белдереүен күрһәтә һәм асыҡлай.

**Әҙәбиәт:**


1. Ғарипов Р. Әҫәрҙәр. Өс томда, I том. Шиғырҙар, поэмалар / Төҙ. Н.В. Ғарипова. Өфө, 1996. 448 бит.
2. Ғарипов Р. Сыңрау торна. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, Китап, 2021. 356 бит.
3. Зайнуллин М.В. Общие проблемы лингвокультурологии. Уфа: Китап, 2008. 342 с.
4. Маслова В.А. Лингвокультурология. М., 2007. 357 с.


© Шаһиүәлиева С.Р., Саньярова Р.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Шәмсетдинов Рәзил Рөстәм улы,***
*студент,*
***Әлимбаева Гөлшаян Ғәбсәләм ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., өлкән уҡытыусы,*
*Өфө университеты, Өфө к., БР*

## Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары ярҙамында башҡа мәғәнәләрҙең бирелеше (З. Биишеваның «Емеш» романы миҫалында)

Бойороҡ һөйкәлешенең II зат формаһы һәм шулай уҡ был формаға эйәреп килгән модаль киҫәксәләр берәй эш-хәлдең һөҙөмтәһе менән ҡәнәғәт булмауҙы, аптырауҙы белдерә ала: 1. *Ысынлап та, бынауы залда ултыр ҙа Өфөлә йәки Мәскәүҙә һөйләгәнде, йырлағанды* ***ишет тә ҡуй әле****! Мөғжизә бит!* 2. *Йә инде, бынан һуң уға һүҙ* ***өндәш инде****!* 3. *Йә, шуны ла әйтәм әле, ата-әсәңдең берҙән-бер ҡәҙерле балаһы була тороп, ташҡүлсәйем, ас-ялангас тигәндәй, бынауындай тауыҡ кетәгендәй өйҙә* ***йәшәп ятсы инде****, ә?* 4. *Тик бында хатта ишек йүкә менән бәйләнмәгән. Теләйһең икән* ***ин дә сыҡ. Ал да сыҡ****.* 5. *Ә хәҙер килеп бына* ***онот та ҡуй****, имеш!*

Бойороҡ һөйкәлешенең III зат формаһы һәм шулай уҡ ошо формаға ***-сы / -се*** аффикстары, ***әле*** киҫәксәһе ҡушылып яһалған ҡылымдар ғәжәпләнеү, үкенеү, асыуланыу, йәлләү һәм ғорурланыу кеүек модаль һәм эмоциональ мәғәнәләрҙе белдерә. Мәҫәлән: 1. *Өлкә журналында хикәйәң* ***сыҡһын әле****! Кем ҡыуанмаҫ?* 2. *Юкһа, бынауы ейәнем йәлке. Йә, ошо йәшенән туйғансы һөт-ҡатыҡ эсмәй* ***үҫһен әле****!..* 3. *Йә, ошоғаса йорт-ерең, бала-сағаң* ***булмаһынсы әле****?*

Йыш ҡына бойороҡ һөйкәлеше формалары ҡушма һөйләмдәрҙә шарт, кире, маҡсат эйәрсән һөйләмдәрҙең хәбәре функцияһында ҡулланыла. Тикшерелгән романда шарт һөйләмдәрҙең хәбәре вазифаһында бойороҡ ҡылымдарҙың ҡулланылыуына шундай миҫалдар осрай: 1. *Йәй* ***етһен****, урман* ***ҡуйырһын әле****, үҙебеҙ белербеҙ...* 2. *Ҡасан* ***килмә*** *– кеше. Ҡайҙа* ***ҡарама*** *– кеше!*

Кире һөйләмдәрҙең хәбәре вазифаһында бойороҡ ҡылымдарының ҡулланылышына миҫалдар: 1. *Эй-й, Яшинский **нисек кенә таҡмаҡламаһын**, Дәүериә апайҙың ҡулынан серле скрипкаһын тартып ала алмай ҙа баһа!* 2. *Ләкин дошман **нисек кенә мәкерләнмәһен**, беҙ барыбер йомғаҡты һүтеп, эсендә нимә йәшеренгәнен белербеҙ.* 3. ***Нисек кенә кеймә**, барыбер тәндә килбәтһеҙ һалпаңлап тора.* 4. *Ә уның был тойоуы, **нисек кенә ғәжәп булмаһын**, һәр саҡ тип әйтерлек үҙен аҡлап та килә.* 5. *Һин [Ҡояш] **ни хәтле сағыу янма**, Мөхәббәт менән Тереклектән мәхрүм булғанға, йәмең юҡ.* 6. ***Нисек кенә ғәжәп булмаһын**, Емеш уны бөтәһенән дә нығыраҡ яратты ла ҡуйҙы.*

Маҡсат һөйләмдәрҙең хәбәре вазифаһында бойороҡ ҡылымдарының ҡулланылышына шундай миҫалдар килтерергә була: 1. *Ә ул [халыҡ] һине **яратһын**, һиңә **ышанһын өсөн**, һин үҙең иң элек уны яратырға, уның өсөн янып көрәшергә тейешһең.* 2. *Нимә эшләргә? Һорнайған, килбәтһеҙ малай ҡабат **яҙырға баҙнат итмәһен өсөн**, ни әмәл итергә...* 3. *Берҙәм хужалыҡтар бына һинең балаларың ҡалаларҙа уҡып йөрөрлөк тормошта **йәшәһен өсөн** төҙөлә.* 4. *Берәй яйын табып, кейәүҙең башын **ашамаһын**, тип ҡурҡам.*

Бойороҡ һөйкәлешенең III зат формаһы менән һөйләмдә ***нисек, ниндәй, кем*** кеүек һорау алмаштары ла ҡулланғанда, ваҡиғаларҙың мөмкин була алыуына һөйләүсенең ышанысһыҙлығы, йәки әйтеп үтелгән эш-хәлдең инҡар ителеүе белдерелә. Был күренешкә романда миҫалдар бихисап: 1. *Юҡһа Хаммат ағайҙың **ниндәй дошманы булһын**?* 2. *Ғүмеренә бер сәскә атмаған, емеш бирмәгән ҡыу ағас **кемде ҡыҙыҡтырһын**?!* 3. *Быларға шулай иркенлек булғанда, яңылыҡтың аҙымы **нисек еңел булһын**?!* 4. *Бында **ниндәй ғәжәпләнер урын булһын**?* 5. *Комсомолецтар **ниңә** кеше **тукмаһындар**.* 6. *Һинең бынауындай талымһыҙлығыңды күреп торғанда, әсәйеңдең башына **калай итеп бүтән һүҙ килһен**?* 7. *Ғашиҡ кешенән **ниндәй ҡарауылсы сыҡһын?!*** 8. *Юҡ. **Нимәгә эсем бошһон**? Кәйефем харап шәп.*

Ваҡиғаларҙың үтәлеше мөмкин була алмауын шулай уҡ һөйләмдә бойороҡ ҡылымдары менән килгән *бар* ҡылымы белдерә: 1. ***Бар*** *һин уның менән* ***һөйләш****!* 2. ***Бар, бел*** *һин уның күңел төбөндә нимә ятҡанын!..*

Хәл ҡылымдан һәм бойороҡ һөйкәлешенең III зат ***ҡараһын, ҡараһындар*** формаларынан яһалған конструкция һәм *әйҙә* ымлығы һөйләүсенең икенсе бер заттан теге йәки был эш-хәлде башҡара алмауына ишара яһай: 1. ***Әйҙә****, аҙаҡ хәленән килһә,* ***аҡланып ҡараһын****.* 2. ***Әйҙә****, купестәр ярышып* ***ҡараһындар әле*** *беҙҙең менән!* 3. ***Әйҙә****, шунан колхоз тип* ***йөрөп ҡараһындар****.*

Бойороҡ һөйкәлеше формалары теге йәки был эште нисек башҡарырға кәрәклекте, әммә аҙағын уйлап эшләү кәрәклекте иҫкәртеү кеүек модаль мәғәнәләрҙе лә аңлата алалар. Иҫкәртеү мәғәнәһе ***ҡара*** ҡылымы ярҙамында белдерелә: 1. ***Һатып ҡына ҡара****. Унан күрерһең!* 2. *Емештең сәсенә* ***ороноп ҡара****!* 3. ***Ҡара****, беҙҙе* ***һемәйтмә****!*

Шулай уҡ иҫкәртеү мәғәнәһе ***тағы*** һүҙе ярҙамында ла бирелә: 1. *Кире әйләнеп* ***сығып ҡасмаһын тағы****!...* 2. *Ҡыуаныстан* ***илап ебәрмә тағы****!*

Иҫкәртеү мәғәнәһе хәл ҡылымдарға ***ҡуйыу, китеү*** ярҙамлыҡ ҡылымдары эйәреп яһалған аналитик конструкциялар менән дә белдерелә: 1. *Инәй, аяҡ аҫты ҡараңғы. Иплән кенә бар.* ***Йығылып, имгәнеп ҡуйма****.* 2. *Һин, Иштуған улым, был хаҡта алдан уйламай, кәңәшләшмәй, үҙ белдегең менән берәй бәләгә* ***тарып ҡуйма!***

Бойороҡ һөйкәлеше формалары шулай уҡ теге йәки был кешенең йәки төркөмдөң ниндәйҙер бер үҙенсәлеген, шөғөлөн дә белдереү өсөн ҡулланыла: 1. *Уға бит* ***еңел йәшәргә*** *лә кешеләр өҫтөнән үҙенсә* ***хөкөм йөрөтөргә*** *генә* ***булһын****.* 2. *Беҙҙең халыҡҡа ни, уға аллаң ни ҙә, муллаң ни, уға һин кәмит кенә күрһәт...* ***ҡыҙыҡ булһын*** *да, ул* ***эсен тырнап көлһөн****.* 3. *Уларға ни* ***мәҙәк кенә булһын****.*

Шулай итеп, башҡорт телендә бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының ҡулланылышы бойороу мәғәнәһе биреү менән генә сикләнмәй. Бойороҡ һөйкәлешенең төрлө модаль мәғәнәләр бирә алыуына, ҡушма һөйләмдәрҙә шарт,

кире, маҡсат эйәрсән һөйләмдәрҙең хәбәре функцияһында ҡулланылыуына миҫалдар байтаҡ осрай.

**Әҙәбиәт**:

1. Башҡорт теле грамматикаһы: 3 томда. Т. II: Морфология / Яуаплы мөхәррире Х. В. Солтанбаева. Өфө: Китап, 2018. 312 б.

2. Биишева З. Емеш. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. 560 б.

© Шәмсетдинов Р.Р., Әлимбаева Г.Ғ., 2024

**УДК 81-2**

***Шәрәфетдинова Миләүшә Наил ҡыҙы,***
*аспирант, башҡорт филологияһы, шәрҡиәт*
*һәм журналистика факультеты,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Төрки тел ғилемендә инглиз теленән үҙләштермәләрҙең өйрәнелеше

Тел системаһының лексикаһы үҙгәреүгә дусар. Сит телдәрҙән алынған һүҙҙәр, атап әйткәндә, инглиз һүҙҙәре, бөгөнгө көндә донъяның бөтә телдәрендә лә ҡулланыла. Башҡорт теленең лексик составында инглиз теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең булыуын мәҙәни-ара бәйләнештәрҙең төп күрһәткесе тип ҡарарға кәрәк.

Башҡорт телсеһе Ж.Ғ. Кейекбаев билдәләүенсә, башҡорт телендә үҙләштереү рус теле аша бара, сөнки ул башҡа Европа телдәре менән тығыҙ бәйләнештә тора, шунлыҡтан рус теле аша һүҙҙәр, үҙ сиратында, башҡорт теленә лә үҙләштерелә [8: 126].

Әйтергә кәрәк, төркиәттә инглиз теленән үҙләштермәләрҙең ҡулланышын өйрәнеү мәсьәләһенә тейешле иғтибар бүленмәгән, шуға күрә был өлкәгә бәйле мәсьәләләр перспективалы һанала.

Мәҡәләнең маҡсаты – төрөк, ҡырғыҙ, татар һәм башҡорт телдәрендә инглиз теленән үҙләштермәләрҙең өйрәнелешен билдәләү.

Е.Г. Володинаның диссертация эшендә төрөк йәмғиәтенең яңы технологияларҙы әүҙем үҙләштереүе, бизнес һәм хеҙмәтләндереү өлкәһен үҫтереү, көнбайыш илдәре менән сәйәси һәм иҡтисади бәйләнештәрҙе киңәйтеү һәм нығытыу менән бәйле инглиз теле үҙләштермәләренең төрөк теленә үтеп инеү үҙенсәлектәре күрһәтелә. Автор билдәләүенсә, туған телде сит тел лексикаһынан азат итеү һәм туған тел саралары ярҙамында һүҙҙәргә эквиваленттар булдырыу буйынса эшмәкәрлек телдә артыҡ синонимия булдыра. Тикшеренеүсе үҙ хеҙмәтендә бер нисә лексик-тематик төркөм миҫалында телдең төрлө функциональ стилдәрендә инглиз теленән үҙләштермәләрҙең ҡулланыу өлкәләрен күрһәтә. Е.Г. Володина билдәләүенсә, компьютер технологияларының глобаль таралыуы автоматик рәүештә тейешле лексиканың таралыуына килтерә, лексик берәмектәрҙең күбеһе интернационализм булып тора [3].

Ҡырғыҙ телендә, төрөк телендәге кеүек үк, сит телдәрҙән үҙләштерелгән, бигерәк тә инглиз теленән алынған һүҙҙәр күп. Үҙләштереүҙәр йоғонтоһонда күп кенә ҡырғыҙ һүҙҙәре ҡулланылыштан сыға йәки мәғәнәһен үҙгәртә. Мәҫәлән, Н.А. Сооронкулова яҙыуынса: «Ҡырғыҙ һүҙҙәре урынына инаугурация, бойфренд, секонд-хенд, силлабус, курикулум кеүек һүҙҙәр барлыҡҡа килә» [9: 103]. Шулай итеп, үҙләштереү һөҙөмтәһендә ҡырғыҙ теле интернациональ һүҙҙәр менән әүҙем тулылана.

Инглиз теле татар тел мәҙәниәтенә, нигеҙҙә, рус теле аша үтеп инә. Тимәк, рус-татар ике теллелегенең европеизмдарҙы, шул иҫәптән инглиз телдәрен татар теленә үҙләштереүҙәге роле бәхәсһеҙ. Татар теле терминологияһында инглиз теленән үҙләштереү проблемалары М.Б. Хәйруллин, З.Ф. Мирғәлимова, Д.Х. Бакеева, Е.М. Абдуллин, Л.В. Әхмәтшина, Г.М. Туҡтарова һ. б. тарафынан тикшерелә [1].

Е.М. Абдуллин үҙенең диссертацияһында билдәләүенсә, татар теленең лексикаһын европа телдәренән алынған лексик берәмектәр менән яңыртыу күп томлы «Татар энциклопедияһында» ла күҙәтелә (2008-2018).

Тикшеренеүсе тотош һайлап алыу ысулы менән 200-ҙән ашыу инглиз теленән үҙләштермәне асыҡлай һәм уларҙы түбәндәге тематик төркөмдәргә бүлә: 1) ижтимағи-сәйәси лексика (*рейтинг, саммит, тандем, спикер, митинг, парламент, хобби, лидер* һ. б.); 2) финанс-иҡтисади лексика (*директор, дефолт, тендер, бюджет, лизинг, спонсор, чартер, маркет, маркетинг, маркер, фермер, ваучер, экспорт, импорт, капитал, холдинг, инвестор, банкноталар, доллар* һ. б.); 3) административ-хоҡуҡи лексика (*төбәк, мониторинг, вето, квота* һ. б.); 4) техник лексика (*компьютер, кластер, монитор, яхта, плейер, экспресс, трейлер, файл, лайнер, слайд, скотч, спин, спидометр* һ. б.); 5) әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге лексика (*бестселлер, юмор, тест, тотем, мюзикл, поп-музыка, рок-музыка, скетч, продюсер, фольклор, шоу, шоумен* һ. б.); 6) спорт лексикаһы (*волейбол, баскетбол, футбол, бокс, хоккей, теннис, ралли, регби, трек, спринт, спринтер, тренажер, тренер, финиш* һ. б.); 7) медицина лексикаһы (*хоспис, лазер* һ. б.); 8) киң мәғлүмәт саралары (*репортер* һ. б.) [1].

Башҡорт тел ғилемендә инглиз теле үҙләштермәләрен өйрәнеү күҙәтеү характерындағы бер нисә айырым мәҡәләнән [2: 4: 5] һәм Көнбайыш Европа үҙләштермәләрен өйрәнеүгә ҡайһы бер ынтылыштар яһаған бер нисә хеҙмәттән ғибәрәт [6: 7: 10]. Мәҫәлән, Э.С. Ғафарова үҙенең мәҡәләһендә хәҙерге башҡорт телендәге инглиз үҙләштермәләрен киң мәғлүмәт саралары материалы нигеҙендә ҡарай. Инглиз телендәге үҙләштермәләр татар теленә ингән кеүек, башҡорт теленә лә тәбиғи рәүештә рус теле аша инә. Башҡорт гәзиттәрен һәм журналдарын тикшергәндән һуң, автор, яңы әйберҙең йәки төшөнсәнең атамаһы булған һүҙҙәр инглиз теле үҙләштермәләренең күп өлөшөн тәшкил итә, тигән һығымтаға килә. Шул уҡ ваҡытта Э.С. Ғафарова түбәндәге лексик-семантик төркөмдәрҙе айырып күрһәтә: спорт лексикаһы, ижтимағи терминдар, профессионализмдар, сәнәғәт өлкәһендәге лексика, иҡтисад өлкәһендәге лексика, хәрби лексика, көнкүреш өлкәһе лексикаһы, сауҙа

өлкәһендәге лексика. Тикшеренеү һөҙөмтәһендә мәҡәлә авторы башҡорт телендәге англицизмдарҙың фәнни һәм публицистик стилдәрҙә, шулай уҡ рекламала йыш осрауын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Күп кенә инглиз үҙләштермәләре интернациональ лексика булып тора, был глобалләшеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән үҙләштереү күренешенең тәбиғилеген күрһәтә [4].

Г.М. Жданова һәм Л.А. Ярославованың мәҡәләһендә башҡорт телендә XX быуаттың 90-сы йылдары башынан алып хәҙерге осорға тиклемге инглиз теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҡарала. Авторҙар, үҙләштереүҙең сәбәптәрен һәм юлдарын тикшергәндән һуң, инглиз һүҙҙәренең башҡорт теленә ике юл менән үтеп инеүен билдәләй: рус теле аша һәм туранан-тура инглиз теленән башҡорт теленә. Һуңғы юл популярлаша бара, мәҫәлән, википедияның интернет-энциклопедияһының башҡорт варианты күпселек терминдарҙы, һүҙбәйләнештәрҙе туранан-тура тәржемә итеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Хәҙерге ваҡытта телдә инглиз үҙләштермәләренең арта барыуына ҡарамаҫтан, уларҙы дөйөм ҡулланылышта тип иҫәпләргә ярамай, улар эшлекле, иҡтисади, спорт, ижтимағи-сәйәси, йәштәр һәм көндәлек мөхиттә әүҙем ҡулланыла. Художестволы әҙәбиәттә инглиз телендәге үҙләштермәләрҙең ҡулланылыуы әҫәрҙәргә стилистик һәм эмоциональ-экспрессив һыҙат бирә [5: 24].

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, башҡорт телендә, күп кенә төрки телдәрҙәге кеүек үк, инглиз үҙләштермәләрен өйрәнеү лексик-тематик йүнәлештә бара, унда тикшеренеүселәр тәү сиратта инглиз теленән үҙләштереүҙәрҙең лексик-семантик аспекттарын иҫәпкә ала. Әммә фәнни хеҙмәттәр араһында инглиз телендәге үҙләштермәләрҙе башҡорт теленең ҡушма һүҙҙәр системаһы нигеҙендә өйрәнергә ынтылыштар бар. Г.Ә. Әмирханова билдәләүенсә, инглиз теле үҙләштермәләре араһында ҡушма, бигерәк тә парлы һүҙҙәр күп, уларҙың бер компоненты инглизсәнән үҙләштерелгән, ә икенсеһе бөтөнләй башҡа сит тел сығышлы (латин, грек, итальян, рус һ. б.). *Видео, медиа, супер, смарт, шоу, бизнес*

кеүек лексемаларға нигеҙләнгән парлы инглиз үҙләштермәләре йышыраҡ осрай. Инглиз телендәге үҙләштермәләр шулай уҡ ярымкалькалар барлыҡҡа килтереү өсөн дә бик әүҙем ҡулланыла, улар ҡушма һүҙҙәрҙең бер компоненты булараҡ та сығыш яһай [2 : 481].

Шулай итеп, ҡарап үтелгән хеҙмәттәрҙә төп иғтибар инглиз телендәге үҙләштермәләрҙе тематик классификациялауға һәм уларҙың барлыҡҡа килеү ысулдарын өйрәнеүгә бирелә. Төрки тел ғилемендә инглиз үҙләштермәләре тулыһынса өйрәнелмәгән һәм махсус тикшеренеүҙәр талап ителә.

**Литература**:


1. Абдуллин Е.М. Английский подпласт заимствованной лексики современнного татарского литературного языка: автореф. дисс. … канд. филол. наук. Казань, 2007. 24 с.
2. Амирханова Г.А., Саляхова З.И. Английские заимствования в системе сложных слов башкирского языка // Мир науки, культуры, образования. 2021. № 2 (87). С. 479–481.
3. Володина Е.Г. Лексические заимствования из английского языка в современном турецком языке: на материале периодики: автореф. дисс. … канд. филол. наук. М., 2007. 28 с.
4. Гафарова Э.С. Употребление англицизмов в башкирском языке (на примере материала из СМИ) // Гуманитарные научные исследования. 2013. № 9. URL: https://cyberleninka.ru/article/n/upotreblenie-anglitsizmov-v-bashkirskom-yazyke-na-primere-materiala-iz-smi/viewer (дата обращения: 09.09.2024).
5. Жданова Г.М., Ярославова Л.А. Англицизмы в системе башкирского языка // Современные парадигмы лингвистических исследований: методы и подходы: сборник материалов Международной научно-практической конференции. Уфа, 2018. С. 21–25.
6. Ишбердин Э.Ф. Историческое развитие лексики башкирского языка. М.: Наука, 1986.

7. Кагарманов Г.Г. Лексика и терминология башкирского языка. Стерлитамак, 2002.

8. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы (уҡыу ҡулланмаһы). Өфө, 2002. 275 б.

9. Сооронкулова Н.А. Влияние англицизмов на лексику кыргызского языка // Вестник КРСУ. 2018. Т. 18. № 1. С. 102-103.

10. Фатхуллина Ф.Р. Новые слова в современном башкирском языке: конец XX–начало XXI вв.: автореф. дисс. … канд. филол. наук. Уфа, 2009.

© Шәрәфетдинова М.Н., 2024

**УДК 811.512.141**

***Әхмәтйәнова Регина Фазылйән ҡыҙы,***
*магистрант,*
***Хөснөтдинова Рәмилә Янсаф ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Телмәр ишараларының дөйөм характеристикаһы

Телмәр ишаралары – һүҙһеҙ аралашыуҙың мөһим өлөшө, улар мәғәнә һәм эмоцияларҙы еткерергә ярҙам итә. Башҡорт теле, донъялағы башҡа күп телдәр кеүек үк, уникаль телмәр ишараларының бай арсеналына эйә. Улар аралашыу һәм мәғлүмәт тапшырыу процесында мөһим роль уйнай, шулай уҡ халыҡтың мәҙәни традицияларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен сағылдырған үҙенсәлектәре бар.

«Башҡорт теленең һүҙлеге»ндә «ишара» һүҙе «*һүҙһеҙ аңлатыу өсөн яһалған төрлө ҡул, баш хәрәкәте*» тип билдәләнә. Шулай уҡ «*ишара итеү (йәки ҡылыу) ниҙелер аңлатыр өсөн ҡул, баш менән бер төрлө хәрәкәт яһау*» тип аңлатыла [1: 416].

«Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге»ндә быңдай аңлатма бирелә:

ишара и. Һүҙһеҙ аңлатыу өсөн яһалған төрлө ҡул, баш һ. б. хәрәкәте; ым. Ишара яһау. Ишара итеү. ... саҡырыу

(саҡыр-) ҡ. 1. Тауыш йәки ым менән үҙ янына килергә өндәү. Ҡысҡырып саҡырыу. Саҡырып алыу.

ишара и. һүҙһеҙ аңлатыу өсөн яһалған төрлө ҡул, баш һ. б. хәрәкәте; ым. Ишара яһау. Ишара итеү. Ишаралау (ишарала-) к. 1. Ишара яһау, ымлау. Ишаралап саҡырыу. 2. күсм. Ситләтеп аңлатыу, нимәгәлер фекерҙе йүнәлтеү [7: 95-96].

Н.И. Смирнованың классификацияһына ярашлы, ым-ишараларҙы өс төп категорияға бүлергә мөмкин. Ошо классификацияға нигеҙләнеп, башҡорт телендәге телмәр ишаралары миҫалдарын ҡарап китәбеҙ. Был ишаралар телмәрҙе тулыландырыуҙан тыш, һүҙҙәрҙе алмаштыра, шулай уҡ эмоцияларҙы белдерергә ярҙам итә [6].

1. Коммуникатив ишаралар – телмәрҙә һүҙ урынына ҡулланылған һәм төрлө эмоцияларҙы һәм ниәттәрҙе белдерергә ярҙам иткән ишаралар: сәләмләү һәм хушлашыу, ҡурҡытыу, иғтибар йәлеп итеү, саҡырыу, мыҫҡыллау, раҫлау, кире ҡағыу, һорау биреү, шулай уҡ рәхмәт белдереү ишаралары [6].

Мәҫәлән, башҡорттарҙың төп сәләмләү ишараһы – бер йәки ике ҡул менән ҡул биреп күрешеү, оҙаҡ ваҡыт айырылышҡандан һуң туғандарын ҡосаҡлап алыу. Хушлашыу ишаралары: киткән кешенең артынан ҡулды (йышыраҡ уң ҡул менән) болғау, китеп барыусы ла, оҙатып барыусы ла ҡул болғап ала.

Өҫкә күтәрелгән һуҡ бармаҡ ҡайһы бер мәҙәниәттәрҙә һәм ситуацияларҙа иҫкәртеү билдәһе булып тора. Был ишара иғтибарҙы йәлеп итеү өсөн йәки ризаһыҙлыҡ йәки агрессия белдереү өсөн ҡулланыла ала. Бындай осраҡтарҙа өҫкә күтәрелгән һуҡ бармаҡ нимәнелер йәки кемделер күрһәтеп, хәүеф йәки иҫкәртеү тыуҙыра. Шулай уҡ өҫкә күтәрелгән һуҡ бармаҡ мосолмандарҙа дини әһәмиәткә эйә: ул ерҙә лә, күктә лә Аллаһтан башҡа бер ниндәй ҙә Раббы юҡлығын символлаштыра.

Арҡанан иркәләү йәки ҡағыу, йылмайыу, баш эйеү башҡорттарҙа рәхмәт белдереү, хуплау йәки маҡтауҙы белдерә.

Баш эйеү, күҙҙәрҙе йомоп асыу ишаралары әңгәмәсе менән ризалығын белдереү йәки алынған мәғлүмәтте раҫлау өсөн хеҙмәт итә. Башты бер яҡтан икенсе яҡҡа һелкетеү һәм ҡулдарҙы тәре формаһында йыйыу, киреһенсә, ризаһыҙлыҡ йәки кире ҡағыуҙы күрһәтә.

Әңгәмәсе, икенсе кешенең иғтибарын йәлеп итеү өсөн, йәки саҡырыр өсөн уның күҙҙәренә ҡарап ҡыҫҡа итеп баш ҡаға, шулай уҡ ҡулды алға (ғәҙәттә уң ҡулды) күтәреп, бармаҡ остарын алға-артҡа асыҡ ҡулы менән һелкеү йыш осрай. Әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар:

Ағай менән ҡусты, тағы бер ҡат *ҡул ҡыҫышып*, оҙаҡ ҡына *күҙгә-күҙ ҡарашып* торғас, бер-береһенән ҡәнәғәт булып айырылыштылар («Кәмһетелгәндәр»). Айһылыу өлкән сестраға *рәхмәтле йылмайып, ҡапыл ҡыҫып ҡосаҡланы ла* бер һүҙ ҙә әйтмәй кире йүгерҙе (З. Биишева, «Емеш»).

Көтмәгәндә башына килгән был татлы хыялдан *көлөмһөрәп,* Хаммат *баш сайҡап ҡуйҙы*. «Һай, ирең, тапты уйға бирелер саҡты!.. Аҡтар килеп баҫһа, бирерҙәр әле аҡыл көсөндө... Йәһәтерәк йыйынырға ла ысҡынырға кәрәк!..» (З. Биишева, «Оло Эйек буйында»).

– Йәгеҙ, аштан рәхим итегеҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар, пожалуйста,– тине Закир, ғәҙәттән тыш *илгәҙәк һәм мөләйем йылмайып.* – Ашты һыуытмайыҡ... (З. Биишева, «Емеш»).

– Эй-й, мәрәкә булды, вәт... – тине ул, *ҡулдарын сәбәкәйләп.* – Йүгерә-йүгерә аяҡ ҡалманы. Уйнамаған уйын, һөйләмәгән һүҙ, йырламаған йыр ҡалманы, вәт. Эй-й, Емеш, әгәр һин үҙең күрһәң ине!.. (З. Биишева, «Кәмһетелгәндәр»).

Шәүрә һоҡланыуҙан телһеҙ ҡалып *баш сайҡап* ҡына ултырҙы. – Былай булғас, әхирәт, иртәгә һин дә йыуаға сыҡ, йәме, – тине Шәүрә, шатланып. – Күлдәгебеҙ алама булһа ла, ҡумыҙыбыҙ булғас, бейегеһе килгән бөтә ҡыҙҙар беҙҙең янда буласаҡ, эйе бит, әхирәт!.. Емеш тә, ысын ҡыуаныс менән балҡыған күҙҙәрен дуҫына төбәп, *баш ҡаҡты.* – Эйе шул. Атайым ҡайтһа, апайым ебәрһә, сығырбыҙ ҙа шул... (З. Биишева, «Кәмһетелгәндәр»).

2. Һүрәтләү ишаралары – был ишаралар телмәр менән бергә бара, әммә контекстан тыш мәғәнәһен юғалта (предметтың ҙурлығын, формаһын, объекттың арауыҡтағы урынлашыуын һәм башҡалар) [6].

3. Модаль ишаралар – предметтарҙы, күренештәрҙе һәм кешеләрҙе баһалау өсөн ҡулланылған ишаралар. Улар хуплау, ҡәнәғәтһеҙлек, ышанмау, аптырау, шатлыҡ, һоҡланыу һәм ғәжәпләнеүҙе белдерә ала [6].

Мәҫәлән, башты алға эйеп, ҡаштарҙы өҫкә күтәреү; ҡаштарҙы өҫкә күтәреп, күҙҙәрҙе ҙур итеп асыу; ауыҙҙы асыу; ҡулды башҡа ҡуйыу – мәғлүмәткә йәки хәл-ваҡиғаға ҡарата аптырау, ғәжәпләнеү ишаралары булып тора.

Ҡулдарҙы бәреһенең аҫтына икенсеһен ҡуйыу; ҡулдарҙы билгә ҡуйыу (ҡайһы бер Башҡортостандың төбәктәрендә «бөйөрөнә таянып тора» тигән һүҙбәйләнеш бар) – ҡәнәғәтһеҙлек, асыуланыуҙы белдергән ишаралар. Миҫалдар:

– Ярай, тип бүлдерҙе уны Шәмиғолов, *теше һыҙлағандай йөҙөн боҙоп*. – Маҡтама миңә шул Исрафиловыңды (Р. Хажиев).

Ҡатыны *керпектәрен түбән елпене, йөҙө моңһоу төҫ алды*: – Һине телефонға саҡыралар (Д. Бүләков).

– Ул саҡта эшкә яҡыныраҡ киләйек. Ваҡыт тар… – Әбдрәшитова йылмайыу *битлеген ҡулдары менән тигәндәй һыпырып ташланы ла рәсми төҫ алды* (Р. Хажиев).

– Шунан һуң ул һине ҡулына алырға теләне. Ә атаң әллә сире йоғор тип шөрләне, *күҙе менән генә миңә «бирмә» – тип ишаралаған буласы* (Р. Байымов).

– Оһо-һо, ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белгәс, далеко пойдете. – Секретарҙың *йәшкелт түңәрәк күҙҙәре аҡайҙы. Һоро ҡуйы ҡаштары емерелд*е (Р. Хажиев).

– Бәй, һеҙҙә ул ҡатын кешеме ни әле? – Алпауыттың *күҙҙәре түңәрәкләнде* (Д. Бүләков).

Шуны иҫтә тотоу мөһим: телмәр ишараларының мәғәнәләре контекстан һәм интонациянан сығып үҙгәрергә мөмкин. Мәҫәлән, ҡул һелтәү – контекстан сығып төрлө мәғәнәгә эйә булған күп мәғәнәле ишара. Был ишараның бер нисә мәғәнәһе бар. Мәҫәлән, Булат Рафиҡовтың «Сал

ҡылған» романынан миҫал килтереп үтәйек: Килене *ҡулын һелтәп ҡуйҙы.* Был хәрәкәтен Харрас ҡарт үҙенсә аңланы.

– Ул свинйә малай өсөн үҙем дә ҡыл да ҡыбырлатмаҫ инем.

(Был өҙөктә килене «Ярар инде, ҡарт өсөн генә», – тип уйлап ҡулын һелтәй, ә ҡарт «Юҡ инде ярҙам итеү ул малайға», – тип уйлай).

Тик улым йәне көйгәнен белдереп *ҡулын һелтәп ҡуйҙы* (Г. Ситдиҡова).

Ғәлиәхмәттең низер әйтергә теләүен күреп ул *«сабыр ит» тигәндәй ҡулын һелтәне* (Р. Байымов).

Киң таралған, киң билдәле ҡайһы бер телмәр ишараларының дөйөм ҡабул ителгән, нығынған мәғәнәләре бар: *ҡулдарҙы йәйеп ебәреү* – аптырау, *яурын һикертеү* – бер ни ҙә белмәйем, *башты уңға-һулға болғау* – юҡ, *башты аҫҡа, өҫкә һелкеү* – эйе, *күҙ акайтыу* – иҫ китеү, аптырау, *баш бармаҡты өҫкә ҡаратып күрһәтеү* – бөтәһе лә яҡшы, *һуҡ бармаҡты иренгә тейҙереү* – шым булыу, бер кемгә лә әйтмәү, *йоҙроҡ һелкеү* – ҡурҡытыу, янау һ. б. Шулай ҙа ҡайһы бер ишаралар Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә генә түгел, төрлө илдәрҙә төрлө мәғәнәгә эйә була ала. Мәҫәлән, һаулыҡ һорашҡанда Мексикала һеҙҙең баш бармағығыҙҙы тотоп алыуҙары мөмкин, мосолман илдәрендә ир-егеттәр бер-береһенең билен тотоп һаулыҡ һорашалар. Францияла бөтөнләй таныш булмаған кеше һине сикәңдән үбә, Лапландияла күрешкән ваҡытта танауҙарын танауҙарына тейҙереп алалар. Башҡорттарҙа һаулыҡ һорашҡанда уң ҡулды биреп йәки ике ҡулды ҡыҫып иҫәнләшеү, күрешеү оло ихтирамлыҡ күрһәтеү билдәһе һанала. Был хаҡта Ризаитдин бин Фәхретдиндең «Балалар өсөн нәсихәт»ендә лә яҙыла: Күрешер өсөн кешегә *уң ҡулығыҙҙы һуҙығыҙ…* Һәр ваҡыт *асыҡ йөҙлө булығыҙ…* Ҡарындаш һәм яҡын дуҫтарығыҙ килгәндә *асыҡ йөҙ менән ҡаршы алып, күрешегеҙ…* Ҡабул иткән кешегә *асыҡ йөҙ менән лайыҡ рәүештә сәләм бирегеҙ…*

Америкала, Англияла, Австралияла, Рәсәйҙә ҙур бармаҡты өҫкә ҡуйып күрһәтеү «бөтәһе лә яҡшы», «проблема юҡ» тигәнде аңлатһа, Грецияла ул

ризаһыҙлыҡты, асыуланыуҙы белдерә. Башҡорттарҙа ҙур бармаҡты өҫкә ҡуйып күрһәтеү шулай уҡ «шәп», «бик яҡшы», «маҡтауға лайыҡ», «проблема юҡ» тигәнде аңлата. Һуҡ бармаҡ менән бәйле ым-ишараларға ла күҙ һалып китәйек. Беҙ һуҡ бармаҡты ирендәргә ҡуйып, кешеләрҙе тынысландырыр өсөн эшләйбеҙ. Шулай уҡ был бармаҡ менән кешеләрҙе саҡырабыҙ, тик башҡа илдәрҙә, былдай ым-ишара мыҫҡыл итеү кеүек һаналыуы ихтимал. Мәҫәлән, Филиппинда ошондай ым-ишара өсөн кешене ҡулға алыуҙары ла мөмкин.

«Эйе» йәки «Юҡ» тигән ризалыҡ һәм килешмәгәнлекте белдергән ым-ишаралар ҙа айырыла. Эйәк ҡағыу рустарҙа, шулай уҡ башҡорттарҙа ла «эйе» тигәнде йә ризалыҡты аңлатһа, баш сайҡау «юҡ» тигәнде йә ризаһыҙлыҡты белдерә. Ә болгарҙарҙа башты уңға-һулға сайҡау ишараһы ризалыҡты, «эйе» тигәнде аңлата [3: 120].

Башҡорт мәҙәниәте контексында ишараларҙы өйрәнеү һүҙһеҙ аралашыуҙың нескәлектәрен һәм уның шәхестәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе формалаштырыуҙағы ролен тәрәнерәк аңларға мөмкинлек бирә. Ишаралар телмәрҙе тулыландырыу ғына түгел, ә хис-тойғоларҙы, мөнәсәбәттәрҙе һәм мәҙәни ҡиммәттәрҙе сағылдырған үҙ аллы тел булып тора. Коммуникатив ишаралар сәләмләү һәм хушлашыуҙың традицион формаларын сағылдыра, һүрәтләү ишаралары хикәйәләрҙе визуаллаштереүгә ярҙам итә, ә модаль ишаралар башҡорт халҡының бай эмоцияларын һәм менталитетын сағылдыра.

**Әҙәбиәт:**

1. Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда / Россия Фәндәр Академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге, тар., тел һәм әҙ. институты. М.: Рус. яз., 1993. 814 б.

